РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫ МӘҒАРИФ ҺӘМ ФӘН МИНИСТРЛЫҒЫ
ЮҒАРЫ ПРОФЕССИОНАЛЬ БЕЛЕМ БИРЕҮ
ДӘҮЛӘТ МӘҒАРИФ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
«М. АҠМУЛЛА ИСЕМЕНДӘГЕ
БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ПЕДАГОГИЯ УНИВЕРСИТЕТЫ»
БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ҺӘМ МӘҘӘНИӘТЕ КАФЕДРАҺЫ
ФОЛЬКЛОР ҮҘӘГЕ

ӘХМӘТ СӨЛӘЙМӘНОВ

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ҠАРҺҮҘЕ

Филология факультеты студенттары һәм әҙәбиәт, мәҙәниәт укытыусыларына тәғәйен укыу ҡулланмаһы

Беренсе киҫәк

Өфө - 2011

УДК 80
ББК 82.3 (Рос=Баш)
С 75

*М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының уҡытыу-методик советы ҡарары менән баҫыла*

**Сөләймәнов Ә.М.** Башҡорт халҡының ҡарһүҙе [Текст]: филология факультеты студенттары һәм әҙәбиәт, мәҙәниәт уҡытыусыларына тәғәйен уҡыу ҡулланмаһы. Беренсе киҫәк. – Өфө: БДПУ нәшриәте «Вагант», 2011. – 196 б.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады курсы буйынса, халыҡ традицияһы һәм халыҡ-ара тәжрибәне иҫәпкә алып, тәүге тапҡыр милли фольклорҙың төр, төр күренеше (вид) һәм жанрҙарына яңыса классификация бирелде, мифологияға, инанмыш һәм хәтирәләргә айырым бүлектәр бүленде.

Рецензенттар: ***Ғ.С. Ҡунафин,*** *филол. фәнд. д-ры, проф. (БДУ);*
***Ф.Ғәлиева-Әхәтова,*** *филол. фәнд. д-ры, әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәр (РФА ӨФҮ Этнологик тикшеренеүҙәр институты)*

ISBN 978-5-87978-668-2
ISBN 978-5-87978-608-8

© БДПУ нәшриәте «Вагант», 2011
© Сөләймәнов Ә.М., 2011

МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯИ НАУКИ
РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
ГОСУДАРСТВЕННОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ВЫСШЕГО ПРОФЕССИОНАЛЬНОГО ОБРАЗОВАНИЯ
«БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ
УНИВЕРСИТЕТ им. М.АКМУЛЛЫ»
КАФЕДРА БАШКИРСКОЙ ЛИТЕРАТУРЫ И КУЛЬТУРЫ
ЦЕНТР ФОЛЬКЛОРА

АХМЕТ СУЛЕЙМАНОВ

# ПОВЕСТВОВАТЕЛЬНЫЙ ФОЛЬКЛОР БАШКИРСКОГО НАРОДА

Учебное пособие
для студентов-филологов, преподавателей литературы и культуры

Часть первая

Уфа 2011

УДК 80
ББК 82.3 (Рос=Баш)
С 75

*Печатается по решению учебно-методического совета
Башкирского государственного педагогического университета
им.М.Акмуллы*

**Сулейманов А.М.** Повествовательный фольклор башкирского народа [Текст]: учеб. пособие для студентов-филологов, преподавателей литературы и культуры. Часть I. – Уфа: Изд-во БГПУ «Вагант», 2011. – 196 с.

В пособии по курсу башкирское устно-поэтическое творчество впервые дана новая классификация родов, видов и жанров национального фольклора с учетом народной традиции и международного опыта, отведены отдельные главы мифологии, быличкам и сказам (устным рассказам-воспоминаниям).

Рецензенты: ***Г.С. Кунафин****, д-р филол. н., проф. (БГУ);*
***Ф.Галеева-Ахатова****, д-р филол.н., ведущий научный сотрудник (Институт этнологии УНЦ РАН)*

ISBN 978-5-87978-668-2
ISBN 978-5-87978-608-8

© Издательство БГПУ «Вагант», 2011
© Сулейманов А.М., 2011

# ИНЕШ

Һәр халыҡтың материаль булмаған мәҙәниәтендә быуындан-быуынға, урындан-урынға, заман иләге аша иләнә-иләнә, күсә барған рухи хазиналары бар. Уларҙың берәүҙәре сәсмә телмәр рәүешен, икенселәре теҙмә юлдарҙы үҙ итә, өсөнсөләре үҙендә шуларҙың икеһен дә берләштерә.

XX быуат баштарында донъя күргән баҫма сығанаҡтарҙа улар "халыҡ әҙәбиәте" тигән термин менән атап йөрөтөлгән. Уның беҙгә килеп юлығыуына Бөйөк Ғабдулла Туҡайҙың тап шундай күренештәр тураһындағы лекцияларынан төҙөлгән "Халыҡ әҙәбиәте" китабы (19а, 163–186) йоғонто яһамай ҡалмаған, әлбиттә. Туҡай иһә үҙ нәүбәтендә был терминды көнсығыш славян, дөрөҫөрәге, рус филологияһынан үтескә алған булыуы ихтимал. Ни өсөн тигәндә, унда XIX быуаттан башлап һүҙ сәнғәтенең был күркәм күренеше “*совокупность народного знания"* (В. Лесевич), *"живая старина", "народная (устная) словестность" (*Ф.И. Буслаев), *"народная поэзия"* (А.Н. Веселовский, И.Я. Франко, Е.Ф. Карский һ.б., 7а, 336–377) *"народная литература"* тип йөрөтөлөр булған. Шул халыҡтарҙың фәнендә "*устно-поэтическое творчество"* тигән термин ныҡына башлағас, башҡорт ғалимдары (Ә. Харисов, Ә. Усманов, Кирәй Мәргән һ.б.) үҙҙәренең хеҙмәттәрендә *"ауыҙ-тел ижады"* калькаһына өҫтөнлөк бирә. Уларға тиклем Ғ.Амантай "фольклор" термины менән генә хушһынған. Әкренләп беҙҙә ул да ерегеү тапты.

"Фольклор" терминын тарихта иһә беренсе мәртәбә 1846 йылда Уильям Джон Томсон тигән инглиз археологы ҡулланған. "Фольклор", йәғни "folklore", беҙҙең телгә әйләндерһәң, "халыҡ белеме (ғилеме)", "халыҡ аҡылы" тигәнгә тура килә.

Беҙҙе, филолог-фольклорсыларҙы иң әүәл ауыҙ-тел ижады ҡыҙыҡһындыра. Бынан сығып, фольклорҙың башҡа формалары улар өсөн әһәмиәтһеҙ тигәнде аңлатмай. Сөнки беҙ ауыҙ-тел ижады - фольклор тигән күп яҡлы системаны хасил итешеүсе мөһим бер тармаҡ (компонент) ҡына тип беләбеҙ. Әлбиттә, ул системаны хасил итешеүсе тармаҡ-компоненттарҙың һәр береһенең үҙ төрө (род), үҙ төр күренеше (вид), үҙ жанры, жанр төрө (жанровая разновидность) бар. Улары иһә үҙҙәренә генә хас үлсәм берлеге (единство критериев) принцибы нигеҙендә ойоша һәм классификациялана.

Инде лә һүҙҙе ауыҙ-тел ижады юҫығына күсерһәк, эш былай тора. Фольклор ғилемендә жанр, жанр составы, жанр системаһы ише проблемалар әле лә актуаллеген юғалтканы юҡ. Система хасил итеүсе булараҡ, жанр тип нимәгә әйтәләр? Бына ошо һорау тирәһендә һүҙ ныҡ ҡуйыртыла. Бөгөн булһын бәхәс тынмай.

Жанрға билдәләмә биргәндә, белгестәр иң әүәл әҫәрҙең формаһына ғына иғтибар итеүсән. Форма тигәндә, Н.П.Колпакова “тарихи формалашҡан художестволы форма тибы”н, В.Я.Пропп – поэтиканы, К.В.Чистов “геройҙар образы, сюжеттар, тотороҡло алымдар һәм һүҙбәйләнештәр” кеүек категорияларҙы, В.П.Аникин “эске композицион-структура яғынан ойошторолоу тибы”н күҙ уңында тота (11, 5; 17, 39; 22, 24; 2, 29).

Айырып әйткәндә, В.Я.Пропп, жанр “поэтик системалар берҙәмлеге (совокупность. *–Ә.С.*) менән билдәләнә”, ти. Бынан тыш ул, әҫәрҙең “көнкүрештә ҡулланылышы”, “файҙаланыу рәүеше”, “музыкаға мөнәсәбәте” лә иҫәпкә алынырға тейеш, тип белә. Шул уҡ ваҡытта былдай билдәләрҙең һәр береһе ҡайһыныһы үҙ аллы ғына жанрҙың йөҙөн аса алмауын, бары, комплекс тәшкил итеп кенә, былдай әһәмиәткә эйә була алыуын һыҙыҡ өҫтөнә алған. Шуның менән бергә жанрҙы билдәләгәндә, һүҙ барған билдәләрҙең бөтәһенең дә иҫәпкә алыныуы шарт түгел икәнен дә иҫкәртә (17, 34–45). Сөнки әкиәткә, мәҡәлгә, мәҫәлән, “музыкаға мөнәсәбәт” үлсәменең кәрәге юҡ.

В.Я.Пропп әйткәнде берҙән-бер билдәләмә, үлсәм (критерий) тип таный ҡалһаҡ, беҙ жанрҙың йөкмәткелелеге, тема кеүек мөһим компоненттарҙы, типология мәсьәләһен ситкә ҡуйып, тик формаға ғына өҫтөнлөк биргән булыр инек. *Быныһы – бер. Икенсенән,* һәр жанрҙың үҙенә генә хас үҙенсәлеге барын иҫәпкә алһаҡ, уның “үлсәмдәре” йәһәтенән һәр береһенә ташлама яһарға тура килер ине. Әйткәнебеҙсә, әкиәт менән мәҡәлгә ҡарата “музыкаға мөнәсәбәт” үлсәме тура килмәй. Эпостың жанрын “көнкүрештә ҡулланылыш” үлсәменән сығып ҡына билдәләү мөмкин түгел. Бер үк әҫәрҙең “башҡарылыу рәүеше” төрлө булырға мөмкин. Мәҫәлән, башҡорт фольклорындағы “Зөлхәбирә”, “Ете ҡыҙ”, “Буранбай”, “Илсе Ғайса” кеүек поэтик әҫәрҙәр “музыкаға мөнәсәбәт”ле булған сүрәттә лә, бер осраҡта йыр, икенсе осраҡта бәйет итеп башҡарылырға мөмкин. Ә “көнкүрештә ҡулланылышы” тигән һорауға өҙөп кенә яуап биреүе лә ҡыйын.

Жанрға В.Я. Пропп биргән билдәләмәнән бары “поэтик системалар берҙәмлеге” тигән үлсәм генә тотороҡло булып ҡала, асылда. Шул уҡ хеҙмәтендә, “фольклор һүҙ сәнғәте әҫәрҙәренән торғанға күрә, иң әүәл уның поэтикаһын өйрәнеү фарыз”, тип әйтеүе һис тә тиктәҫкә түгел.

Ғөмүмән, В.Я.Пропп жанрға ауыҙ-тел фольклорын тотошлай иңләрлек берҙәм принципҡа таянған билдәлёмә биреү мөмкин түгел, уның һәр төрөндә (род) жанрҙарға бүлгеләүҙең үҙ принциптары бар, тип иҫәпләгән.

В.П.Аникин иһә жанр йөкмәткеле, тарихи үҫеүсән категория, ул формаль ғына күренеш түгел тигән принциптан сығып эш иткән. “Типологик төшөнсә” буларак, жанр хаҡында һүҙ барғанда, йөкмәтке

менән дә, форма менән дә иҫәпләшеү зарур," – тип белгән һәм уларҙың айырым нисбәте күҙ уңында тотолорға тейешлеген иҫкәртә. Ни өсөн тигәндә, бында "типологик йөкмәтке менән типологик форма" хаҡында һүҙ бара, ти(3, 102), әҫәрҙең маҡсати тәғәйенләнеше (целевая установка), темаларҙың оҡшашлығы һәм яҡынлығы, сағылдырылған реаль күренештең ниндәй күҙлектән (ҡараштан) сығып баһаланыуы, идея йәһәтенән яҡынлығы иҫәпкә алынырға тейеш, ти. Сөнки тап шундай уртаҡлыҡтары булған әҫәрҙәр генә формаль саралар һәм алымдар уртаҡлығына эйә була (3, 103–105).

Формаль яҡҡа нығыраҡ иғтибар итеп, йөкмәтке мәсьәләһен ситтәрәк ҡалдырһалар ҙа, әле телгә алынған белгестәрҙең барыһы ла тиерлек әҫәрҙең социаль-көнкүреш тәғәйенләнешен дә, тимәк, тәрбиәүи әһәмиәтен дә (В.П.Аникинса әйткәндә, "маҡсат ҡуйылышын"да), башҡарыу ысулын да (К.В.Чистов, В.Я.Пропп), музыкаға мөнәсәбәтен дә (В.Я.Пропп) жанрҙы жанр итеүсе билдә тип белә.

Жанрға В.Е.Гусев биргән билдәләмә В.Я.Пропп әйткәнде хәтерләтә. Айырма нигеҙҙә шунда ғына: фольклорҙы ул синтетик сәнғәт тип иҫәпләй һәм уға киңерәк мәғәнә һала, шуға ла "төр" ("род", "вид") менән "жанр"ға ҡатмарлыраҡ билдәләмә бирә (9, 68–163).

Әҫәрҙең жанр йөҙөн асыҡлауҙа форманың йөкмәтке менән билдәләнеше – тәүшарт, тип таныусылар ҙа бар. Б.Н.Путилов, мәҫәлән: "Фольклор жанры борон-борондан уҡ үҫешкән билдәле йөкмәтке менән тик уның үҙенә генә хас (специфик) формаһының берлегенән ғибәрәт,… ысынбарлыҡтың билдәле аспекттарын һүрәтләүсе иң мөһим принциптар берлеген аңлата", – тип яҙғайны (18, 6).

Б.Н.Путиловтың фекерен дауам иткәндәй, Г.Н.Поспелов, художестволы әҫәрҙең йөкмәткеһе ни тиклем генә ҡатмарлы булмаһын, жанрҙың һәм жанр төрҙәренең дә асылын асырлыҡ "тарихи ҡабатланыусан аспект"ын табып алырға кәрәк, тигәйне (16, 233).

Н.И.Кравцовса, жанр ул "тарихи яҡтан формалашҡан, сағыштырмаса тотороҡло йөкмәткегә эйә булған художестволы форма" (13, 68–81). В.Я.Пропп, В.Е.Гусев, К.В.Чистов, В.П.Аникиндар һымаҡ уҡ, ул да әҫәрҙең функциональ (танып белеү, идея-тәрбиәүи, эстетик) тәғәйенләнешен дә жанр хасил итеүсе билдәләр рәтенә индерә (13, 82). Әммә уның полифункциональ күренеш булыуын иҫәпкә алмай. Мәҫәлән, әкиәт жанры тураһында һүҙ барғанда, уның эстетик функцияһын ғына таный (13, 85)., ә танып-белеү, идея-тәрбиәүи әһәмиәтен телгә лә алмай, сакраль тәғәйенләнешен иһә тулыһынса инҡар итә, Автор, күрәһең, әкиәттәрҙең һуңғараҡ дәүерҙәрҙәге йәшәү хәленән, башҡарылыу үҙенсәлегенән һәм хәҙерге вазифаһынан сығып ҡына, фекер йөрөтә.

Бөгөнгө әҙәбиәт ғилемендә раҫланыуынса, жанрҙы хасил итеүсе “сағыштырмаса тоторoҡло, тарихи ҡабатланыусан” йөкмәткеле һәм формаль билдәләрҙең иң мөһимдәре иҫәбенә шулар инә:

а) әҫәр ниндәй әҙәби төргә (“род”ҡа) ҡарай (эпик жанрмы ул, әллә драматик йә лирик, йә лиро-эпикмы);

б) теҙмә телмәрҙе файҙаланамы әллә сәсмә телмәрҙеме;

в) күләме (ҙурмы, бәләкәйме); г) ниндәй пафослы (героикмы, сатирикмы, юмористикмы, трагикмы, нәсихәтиме һ.б.). Бынан тыш әҫәрҙе жанр яғынан ҡылыҡһырлағанда, “йөкмәткенең жанрға хас үҙенсәлектәрен” – проблематикаһын иҫәпкә алыу мөһим икәнлеге әйтелә (6, 380).

“Жанр йөкмәткеһе” (“жанр проблемаһы”) тигәндә:

1) милли-тарихи, героик проблемалы;

2) нәсихәти (фәһем биреүҙе, ғибрәт алыуҙы маҡсат итеүсе) проблематикалы;

3) романик проблемалы әҫәрҙәр күҙ уңында тотола.

Сатирик әкиәттәр (тормош-көнкүреш әкиәттәре) нәсихәти-проблемалы (Г.Н.Поспеловса, “сатирик жанр йөкмәткеле”, 16, 238) эпик жанрҙарға, тылсымлы әкиәттәр – романик жанрҙарға индерелә (16, 381–386).

Нигеҙҙә, әҙәби әҫәрҙәрҙең жанрына ҡағылышлы был билдәләрҙе, фольклор жанрҙарын ҡылыҡһырлағанда ла ҡулланырға була. Тик уға халыҡ ижадының үҙенсәлегенән килгән билдәләрҙе өҫтәргә генә ҡала. Улар рәтенә әҫәр нисек (һүҙ – тауыш-ишара синкретизмы рәүешендәме, әллә уларға пантомима, бейеү, ҡош-ҡортто, кешеләрҙе эләкләү кеүек сәнғәт өлгөләре лә ҡушыламы), кем тарафынан (индивидуаль әүештәме, хор менәнме һ.б.) башҡарыла, һ.б. инә, 12).

Жанрға биргән билдәләмәләрендә, фекер айырмалыҡтары булған сүрәттә лә, күптәр (В.Я.Пропп та, В.П.Аникин да, башҡалар ҙа) уны эстетик категория тип таный. Фольклорсылар араһында уны тарихи категориялар иҫәбенә индереүселәр ҙә бар. Мәҫәлән, рус фольклоры белгесе Н.П.Колпакова һәм үҙебеҙҙән С.Ә.Галин шул ҡараштa тора.

# I БҮЛЕК
# БАШҠОРТ АУЫҘ-ТЕЛ ФОЛЬКЛОРЫНЫҢ ЖАНРҘАР СИСТЕМАҺЫ

## 1. Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел фольклоры төрҙәре һәм жанрҙары

Башҡорт фольклористикаһында жанр проблемаһына, махсус рәүештә сумып тикшереү күҙгә ташланмай. Беҙҙең фольклорсылар, ғәҙәттә, урыҫ фольклор ғилемендә жанрға бирелгән билдәләмәләрҙе уртаға һуғыңҡырап, шул “бирелгәндән” сығып эш итеүсән. Шуға күрә лә жанрҙар тураһында һүҙ барамы, фольклорҙың жанр составы, жанр системаһы тикшереләме, шул үлсәм, билдәләмәләр менән хушһынабыҙ ҙа, жанрҙарға бүленеш мәсьәләһенә генә төшөп китеүсәнбеҙ. Быға XX быуаттың тәүге сирегендә милли фольклорыбыҙҙы өйрәнеүгә дәррәү тотонған тикшеренеүселәребеҙҙең фекерҙәрен онотоуыбыҙ ҙа булышлыҡ итте, әлбиттә. Онтоуыбыҙға иһә үҙ сиратында золом йылдары, шул дәүерҙә уларҙың эҙәрләнеүгә дусар ителеүе сәбәп булды. Шуның өсөн дә: “Ҡайһы бер жанрҙар инде онотолоуға йөҙ тотҡан хәҙерге осорҙа 20–30 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрҙең ҡиммәте тағын да арта төшә,” – тип әйтеүе һәм быны сәбәбен уларҙың авторҙарының шул дәүерҙәге “йәнле һөйләштәге атамаларҙы, фольклорҙың ваҡыраҡ жанр төркөмсәләрен дә иҫкә алып, ҡағыҙға” теркәүҙәрендә күреүе менән Ф.А.Нәҙершина бик тә хаҡлы (15а, 18). Әммә ул ошо тәңгәлдә Хәбибулла Ғәбитов, Ғәбделәхәт Вилданов һәм Ғабдулла Амантайҙың эшмәкәрлегенә генә туҡталған. Был ғалимәбеҙ ҡағылған мәсьәләгә Нуриағзам Таһировтың “Ҡулданма”һы ла мөнәсәбәтле.

### *а) Башҡорт ауыҙ-тел фольклорының Нуриағзам Таһировса бүленеше*

Башҡорт фольклорының төр һәм жанрҙары хаҡындағы тәүге тулыраҡ мәғлүмәт Нуриағзам Таһировтың 1922 йылда Стәрлетамаҡта баҫылған[1] “Башҡорт халҡының байҙығын белеү, тарихы, йәгрәфиәләренә кәрәкте уҙыҡтарын йыйнау, ҡомарткыларын сүптәп табыу һәм туптау өсөн ҡулданма”һында бирелгән. Бына улар:

*им-том* (һәр төрлө ауырыуҙарҙы – күҙ тейеү, эс ауыртыу, ҡот осоу, мейе төшөү, ҡоторған эт талауы, татран кеүек ауырыуҙарҙы имләү, өшкөрөү), сихыр, арбау;

*ырым* (һамактар, осоҡлау, көл һибеү; ҡыу баш, дегет силәге элеү, маңдайға ҡором һөртөү; балаһыҙға балалы булыу сараһы; бала “һатып алыу”; балаға ғүмерле исем ҡушыу);

*алкыш* – ҡотто булһын әйтеү (килен килгәндә, йортка күскәндә, мал алыусыға);

[1] Орфография автор вариантындағыса бирелә.

*шом* (ҡоро биҙрә тап булыуы, бесәй битен йыуыуы, юл ҡыйыу һ.б.);

*күңел әйтеү* (йыуатыу);

*ҡуптау* (“Һай, мырҙам!”, “Бәрәкалла!”, “Егет булғас, шулай кәрәк!”);

*көйөнөү, кәмһетеү;*

*тиргәү* ( Эй, албаҫты! Эй, иҫәүән!);

*һүгеү* (Күрмәгәненде күрһәтермен! Эт!);

*ҡарғыш* (Ҡара ер баҫҡыр! Дөмөккөр!);

*йола, ғөрөф-ғәҙәт* (килен әйттереү, туй яһау, бутҡа яһау, урнаҡ булышыу; уҡыл атай булышыу);

*уйын* (Билгетибер, Һибер һалғыс, Күсәкә һуғыу, Туҡылдаҡ, Шаҡшаҡалай буҙйәс...);

*ғәйепкә ышаныу һәм ышандырыу* – шайтан, иблис, албаҫты, шүрәле, убыр, күртмәс (?), эйәләр, бәрей, юха;

*Ай, Ҡояш, Ер, Күк, болоттар хаҡында* (асылда, космогоник һәм демонологик мифтар күҙ уңында тотола);

*һынау – тәжрибә* (көн, ай, йыл торошон алдан һынау, кешенең ҡылығын таныу, маңлайы һ.б. буйынса белеү һ.б.);

*мәҙәк* (шиҡандау, ҡипаңдау, ҡыҙыҡ ҡороу хаҡында);

*йыр* (оҙон, ҡыҫҡа, иҫке; *үлекте иҫкә төшөрөү йырҙары*; *“боронғоларҙан ҡалған ҡоба”* үә башҡа исемдәге йырҙар; *ҡыҙ күскәндә йырлана торған йыр,* һамаҡ, таҡмаҡ, сеңләүҙәр, түрәләр, батырҙар, мал-тыуар тураһындағы; ҡушымталы йыр;

*бишек йыры;*

*дини рухтағы мөнәжәттәр;*

*халсы (һалсы (?) бәйеттәре;*

*ҡиссалар;*

*юрау, күрәҙәлек йырҙары .*

Күренеүенсә, Н. Таһиров күберәк йола күренештәрен күрһәткән. Фольклорға хас жанр, төрҙәрҙән (виды) тыш *ул күрәҙә, баксы, һынсы, әүлиә, ишан кәрәмәте хаҡындағы,* көйлө жанрҙарҙы башҡарғанда, ҡурай, скрипка, думбра уйнау-уйнамау хаҡындағы мәғлүмәттәр менән дә ҡыҙыҡһынған.

***б) Ҡарһүҙ, әйтем һәм ауҙа***

Н.Таһиров *“Ҡара һүҙ – иртәгене(әкиәттәрҙе) нисек яҙып алырға”* ла кәңәш биргән (19, 13). Ошо бер фразаға диҡҡәт итәйек. Тимәк, *“ҡара һүҙ”*, *“иртәге”* терминдарына – йәйә эсендәге *“әкиәттәр”* тигән һүҙ аңлатма.

Дөйөм алғанда, Таһировтың исемлеге теүәл булмаһа ла, әле беҙ иғтибар итеп еткермәгән жанр һәм төрҙәр телгә алыныуы менән уның был хеҙмәте иҫәпкә алынырға хаҡлы.

1925 йылда Хәбибулла Ғәбитовтың “Халыҡ поэзияһы тураһында” тигән мәҡәләһе донъя күрә. Был автор ҙа “ҡара һүҙ” терминын ҡуллана. Әммә, Н.Таһировтан айырмалы рәүештә: “Башҡорттар “хикәйә” һәм “иртәге” һүҙен “ҡара һүҙ” тип атайҙар. “Ҡара һүҙ” ... “ҡарһүҙ”ҙән үҙгәргән бер һүҙ булып, “ҡары” һүҙе иҫке һәм хәҙерге төрөк (хәҙергесә, төрки. – *Ә.С.*) телдәрендә “иҫке”, “боронғо”, “тарихи” мәғәнәһендә йөрөй”, – тигән (10, 31). Тимәк, “ҡара” (“ҡары”) һүҙенең “тарихи” мәғәнәһендәге иҫкене, боронғоно аңлатыуына баҫым яһап, Н.Таһировтан айырмалы, Х. Ғәбитов был терминды эпосҡа ҡарата ла ҡуллана.

Сәғит Мирасов иһә, киреһенсә, “Күсәрхан менән Күсмәҫхан” (“Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”. – Ә.С.), Шүрәле[1], Алпамыша, Барсынһылыу (һуңғы икеһе “Алпамыша менән Барсынһылыу” эпосының төп геройҙары. – Ә.С.) әкиәттәре башҡа төрки ҡәүемдәре араһында ла бар” (14, 99), – тип әйтеүе эпос менән легенда араһындағы сикте танымауын аңғартҡан.

“Әйтем” терминының ҡулланылышына килгәндә, Х.Ғәбитов был осраҡта аныҡ фекер йөрөткән. Һәр хәлдә, ул да Н.Таһиров кеүек үк йыр, ҡобайыр, әйтемсәк, оҙон йыр, ҡыҫҡа йыр, таҡмаҡ, һамаҡ, таҡмаза кеүектәрҙең *әйтем* төркөмөнә инеүен әйтә. Шуның менән бергә *ауҙа* тигән ижад төрө барлығын да билдәләй. Тик уға биргән аңлатмаһы ғына аныҡ түгел. Берсә: “Башҡорт халҡы *моңһар, музыка, аһәң кеүек шиғри нәҙек тауыштарҙы (?)* ***“ауҙа”*** *тиҙәр”*, ти. Берсә, “һандуғас, кәкүк, буҙ турғай һымаҡ ҡоштарҙың, музыка ҡоралдарының, йырлағандағы әҙәм тауышын – бөтәһен дә шулай уҡ ауҙа тип атай (14, 99). Ғ.Б.Хөсәйеновтың: “Ауҙа”ның тамыры боронғо ауаҙ – ауыҙ һүҙенән килә”, – тип фараз итеүендә (21, 168) дөрөҫлөккә яҡынлыҡ булғанға оҡшай. Шуның менән бергә был термин ҡош-ҡорт, кеше тауыштарын имитациялау сәнғәтен аңлатыуы ла ихтимал.

Ғәбделәхәт Вилданов башҡорт фольклорын түбәндәгесә төркөмләгән: йырҙар, әкиәттәр, мәҡәлдәр, тапҡыр һүҙҙәр, йомаҡ, имтомдар (өшкөрөү һүҙҙәре, баталар), көләмәс (ҡушымталар: мәҫәл, ҡисса, латиф) – йәмғеһе 9 жанр.

“Тышҡы ҡалыбы һәм айышы (йәғни, формаһы һәм йөкмәткеһе. - Ә.С.) яғынан” йырҙар, унынса, түбәндәге“төрҙәргә бүленә”:

1. Оҙон-өҙөк йырҙар (оло йырҙар).
2. Таҡмаҡ (һикәлтмәле йыр, ҡыҫҡа йыр).

---

[1] 1907 йылда Ғабдулла Тукай “Шүрәле” поэмаһын баҫтыра. Уға үҙе биргән иҫкәрмәнән аңшылыуынса, шағир унда “ауыл ерендәге хыялый хъикәйәләрҙең” сюжетын файҙаланған (Ғабдулла Тукй. Әсәрләр. Дүрт томда / Томны төз., текст һә искәрм. хәзер. Р. Гайнанов. - Казан, 1975. - 1-че т. (1904 – 1908). – 98 – 102). Ысынлап та, әле булһын бшҡорттар менән татарҙар араһында инанмыш менән көләмәскә тартым “Былтыр менән шүрәле” легендаһын ишетергә була

3. Таҡмаза.
4. Уйынлы йырҙар.
5. Бәйет.
6. Мөнәжәт.
7. Ҡоба йырҙар.
8. Тарихи йырҙар.
9. Әйтемсәк.
10. Сеңләү.
11. Һармаҡ (7, 4).

Артабан әкиәттәрҙе ул әкиәттәрҙең: 1) мифлы, ялған ышаныулы әкиәттәрҙән, 2) әхлаҡи һәм тормош әкиәттәрҙән, 3) хайуандар тәңгәлендәге әкиәттәрҙән, 4) хыяли, рухани әкиәттәрҙән тороуын әйткән (7, 16). Әгәр йыҙарҙы төркөмләгәндә, форма менән йөкмәткене иҫәпкә алһа, йәғни классификациялау прицибын аныҡ ҡына әйтһә, әкиәттәргә ҡарата төркөмләү принцибын асыҡламаған. Шулай ҙа төр күренеше (вид) булараҡ, әкиәт эсендәге жанрҙарҙы дөрөҫ үк тоҫмаллауына һоҡланырға ҡала.

Сәғит Мираҫовса, "башҡорт халыҡ әҙәбиәте (йәғни ауыҙ-тел фольклоры. – Ә.С.), көйлө һәм көйһөҙгә бүленеп, дөйөм алғанда, түбәндәге бүлемдәрҙән ғибәрәт. *Көйләһә*: йыр, бәйет, мөнәжәт; *көйһөҙә*: әкиәт, мәҡәл, йомаҡ, бата-теләк, им-том, өшкөрөү, кәләмәс (көлдөргөс) һүҙҙәр, мыҫҡыл-латифа һүҙҙәр. Был бүлектәрҙең үҙҙәренең һәр береһе бер нисәгә бүленә. Йыр үҙе һигеҙ төрлөгә бүленә: а) оҙон йыр, б) ҡыҫҡа йыр, в) ҡобайыр, г) таҡмаҡ, д) таҡмаза, е) һамаҡ, ҙ) әйтемсә, з) сеңләү. Шулай итеп, С.Мирасов фольклорға ҡарата "музыкаға мөнәсәбәт" мәсьәләһен, асылда, В.Я. Проппҡа тиклем үк күтәргән. Әммә уға икеһе ике мәғәнә һалған. С. Мирасовса, "башҡорт халыҡ әҙәбиәте" (йәғни ауыҙ-тел фольклоры) әҫәренең "музыкаға мөнәсәбәте" ул әҫәрҙең ҡайһы төргә (род) ҡарауын аңлата. В.Я. Пропп иһә, ул ("музыкаға мөнәсәбәт") бары жанр хасил итеүсе билдәләрҙең берһе, тип аңлатҡан.

С. Мирасов шулай афыористик жанрҙарға иғтибар иткән. Тик: "Мәҡәл һәм йомаҡтарға тәбиғәт, уның үҙгәрештәренә әйтелгәне, кеше һәм уның ағзаларына ҡарата әйтелгәне, йәмғиәткә, эш һәм хужалығына ҡарата әйтелгәне бар", - тигән дә (15, 94) уларҙың һәр береһе ваҡ төркөмдәр хасил итеүен иҫкәрткән дә, уларҙың өлгөләрен килтереп тормаҫтан, бары Ғ.Вилданов һәм Х.Ғәбитовтарҙың мәҡәләләренә һылтаныу менән генә сикләнгән.

Ғабдулла Амантай ҙа шулай иткән. Дөрөҫ, ул, күрәһең, сәйәси сәбәптән, Таһировҡа туранан-тура һылтанмай. Әммә фольклорҙы классификациялағанда, уның эҙенә баҫа-баҫа барғаны ярайһы ғына һиҙелә. Бында уның "Нимә ул фольклор? Ни өсөн беҙ уны өйрәнәбеҙ?" тигән мәҡәләһен күҙ уңында тотола.

### *в) Фольклор һәм уның төрҙәре, жанрҙары хакында*
### *Ғабдулла Амантайҙың әйткәне*

Юғарыла телгә алынған хеҙмәтендә, үҙе йәшәгән осорҙоң рәсми идеологияһына ярашлы социалогизация ярылып уҡ ятһа ла һәм “башҡорт хеҙмәтсәндәр массаһы үҙҙәренең әсә телендә яҙма әҙәбиәткә бары Октябрь революцияһынан һуң ғына эйә булдылар. Уның бары 14–15 йыллыҡ тарихы бар” (1, 102), – тип раҫланһа ла, Ғ.Амантай фольклорҙың йәшәү хәлен, уны йыйыу ысулдары хаҡында һәм айырыуса башҡорт халыҡ ижадының жанрҙары тураһында әле лә әһәмиәтен юғалтмаған күҙәтеүҙәрен ҡалдырған. Мәҫәлән, ул шулай ти: “Башҡорт художество әҙәбиәтендә хәҙергә бары 16 төрлө жанр *(әҙәби төр)* булһа, фольклорҙа уның һаны егерме өскә етә. Бының өҫтөнә был *23 жанрҙың һәр кайһынының тиерлек үҙ эсендә ваҡ төрҙәргә бүленә.* Мәҫәлән, йыр жанры, рифма яраштырылыуы яғынан ҡарап, 13 төргә бүленә”(1, 104).

Фольклорҙың төрөн, жанрҙарын билдәләгәндә, Ғ.Амантай урындағы *халыктағы аталышты* алған. Шунан сығып, башҡорт фольклорын ул төп ике төргә бүлә. Хәҙер беҙ ул бүленеште: *эпик һәм лирик төрҙәр* тип әйтер инек. Ә Ғ.Амантай былай ти: “Башҡорт фольклор әҫәрҙәре, боронораҡ, әҙәби төр яғынан, төбөндә, икегә айырылып йөрөтөлгән, тиҙәр. Имеш, көйгә һалынмайынса, һөйләү ҡалыбында булғаны “ҡара һүҙ” тип йөрөтөлгән. Был “ҡара һүҙ” төркөмөнә: әкиәттәр, көләмәстәр, мәҡәлдәр, һынауҙар һәм шуға оҡшаш башҡалар ингән, тиҙәр” (1, 107). Тарихи Башҡортостандың көньяғында йәшәгән башҡорттар, Хәйбулла, Ейәнсура, Һарыҡташ үҫәргәндәре һәм уларҙың күрше-күләне был атаманы әле лә ғәмәлдән сығарғаны юҡ. Башҡорт фольклор ғилемендә *“эпос”, “иртәк”, “хикәйәт”, “эпик ҡобайыр”, “әкиәт”, “легенда”, “риүәйәт”* терминдары урынына ла **“ҡара һүҙ”, “ҡарһүҙ”** атамаларын ғына ҡуллаңалар.

Ғ.Амантай: “Көйгә һалынып, ритм, рифма тотороҡлоғо һаҡланып һөйләгәндәре “әйтем” тип атала, тиҙәр. Уға: ҡобайыр, сеңләү, һамаҡ, таҡмаҡ, бәйет һамаҡтар ингән”, ти (1, 107).

Ғ. Амантайҙың, ҡар һүҙсә, йәғни әкиәтсә, “имеш”тән, “тиҙәр”ҙән һалдырыуы һис кенә лә уның стиль төрләндерергә тырышыуын түгел, үҙенә күрә эҙ йәшерергә маташыуын аңлата. Быға тиклем танышып үткәнебеҙсә, “ҡар һүҙ”, “әйтем” терминдарын кемдәр ҡулланғанын беҙ инде яҡшы беләбеҙ. Эйе, ул һүҙҙәр артында Н. Таһиров, Ғ. Вилданов, С. Мираҫ, Х. Ғәбитовтар тора. Ни өсөн автор уларҙы исемләп телгә алмай? Сөнки Ғ. Амантай был мәҡәләһен яҙғанда, уларға милләтселек тамғаһы тағылған була инде. Әммә былай эҙ йәшереүе, үкенескә ҡаршы, уны ҡотҡара алмай. СССР-ҙағы “бөтә аҙ һанлы халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, Октябрь революцияһына тиклем милли әҙәбиәте булмаған, уны тик ана шул революция ғына биргән тигән... ҡалыплашҡан тезисты инҡар итеп,

башҡорт халҡының... борон уҡ әҙәбиәте булыуын иҫбатларға тырышыуы, аяҙ көндө йәшен йәшнәгәндәй, тәьҫир итә был стереотипты үҙһенгән әҙәбиәт һәм фән белгестәренә. Тап ошо ҡыйыу сығышы ғалим ғүмеренең һуңғы минуттарын һанай башлай” (20, 33).

Шуныһын да әйтергә кәрәк. Үҙенә тиклемге тикшеренеүселәрҙең исемдәрен әйтмәй генә, улар ҡулланған “ҡар һүҙ”, “әйтем” терминдарына альтернатива булыу ихтималын да онотмаған Ғ. Амантай һәм фольклор йыйыусыларҙан урындарҙағы атамаларҙы асыҡлауҙы ла һораған.

***г) Әҙиптәребеҙҙең иҫке терминға иҫкерергә бирмәгәне***

Амантайҙың вариҫтары араһынан *әйтем* менән *ҡарһүҙ* терминдарына иҫкерергә бирмәүселәр табыла торҙо. Ошо йәһәттән әҙиптәребеҙҙән фольклорға иң яҡын торғандарының икәүһен, халҡыбыҙ шағиры Мостай Кәрим менән күренекле хикәйәтсе һәм әҙәбиәт белгесе Әнүр Вахитовты, атап китеү ҙә етер ине. Бына М. Кәримдең көндәлегенән бер өҙөк: “18.VI. 94… Хәҙер, ҙур әҫәрҙәр яҙып, уҡыусыларымды ҡыуандара алмайым. Исмаһам, телдән әйткән һүҙҙәремә ҡолаҡ һалалар. Ул да бер эш. *Көйһөҙ һүҙ (ҡара һүҙ)* һөйләүсе, йәғни *телмәр һөйләүсе сәсәнгә* (минең курсив. – Ә. С.) әйләнеп киттем шикелле. Бөтөнләй өнһөҙ ятҡансы, был да бер эш” (23, 14). Тимәк, Н. Таһиров, С. Мираҫ, Ғ. Вилданов, Ғ. Амантайҙар һымаҡ уҡ, М. Кәрим дә көйһөҙ һүҙ һөйләүҙе (сәсәндәр көйһөҙ башҡарған әҫәрҙе) ҡар һүҙ, ҡара һүҙ тип белгән. Бынан иһә көйләп башҡарыла торған әҫәрҙе уның әйтем тип белеүе яҡшы аңлашыла.

“Танышыу” тигән хикәйәте геройы исеменән Әнүр Вахитов: “Яңы йыр, *ҡары һүҙ* ишетеүемде ҡыуанып көтәм,”(5, 10) – ти. “Ҡары һүҙ” тигәнендә, был яҙыусы фольклорҙың сәсмә жанрҙарын иҫтә тотоуына төшөнөүе ҡыйын түгел.

“Аҡһаҡал аманаты”, “Урал толпары” тигән хикәйәттәрендә Ә. Вахитов был терминды тарыраҡ мәғәнәлә ҡулланған: тәүгеһендә мәғәнәүи яҡтан ул “риүәйәт” тигәнгә тура килә. Сөнки тәүҙә Ағиҙел уртаһында борон батыр йөрәкле кешеләр йәшәүе бәйән ителә лә, аҙаҡ ошо ергә хужа булыуға төп халыҡ ҡына дәғүә итә ала икәнен иҫбатлау өсөн, *ҡары һүҙҙе* иҫкә төшөрөп ҡарауҙары хаҡында әйтелә (5, 19).

Ә инде “Урал толпары” тигән хикәйәтендә автор *“ҡар һүҙ”* терминын *“хикәйәт”* тигәндең синонимы рәүешендә лә ҡулланған. Хикәйәтенең геройы булған йәш фольклорсы исеменән яҙыусы: “Урал толпары хаҡындағы был *ҡары һүҙҙе* ул (Әхмәҙулла бабай. – Ә.С.) боронғо аҡһаҡалдарҙан ишеткән, – тип тора ла бары бер һөйләм аша, – ...был *хикәйәттә* мин ниндәйҙер үкенесте лә, һағышты ла ишеттем,” – ти (5, 25). Тимәк, Ә. Вахитов “ҡары һүҙ”гә киң мәғәнә һалған.

***ғ) Башҡорт ауыҙ-тел фольклорының Ғ. Амантайса төркөмләнеше***

Ғ. Амантай иһә, әйтеп үтелеүенсә, әйтем төрөнә инмәгән бөтә жанрҙарҙы ла ҡар һүҙҙәр төркөмөнә (дөрөҫөрәге, төрөнә) теркәү яҡлы булған. Әйтем төрө иһә, уның уйынса, түбәндәге 14 жанрҙы берләштерә:

1. Һарнау йыр (һар-һарнау).
2. Ҡобайыр.
3. Эрәт йыр (оҙон йыр).
4. Ҡыҫҡа йыр.
5. Сеңләү.
6. Әйтемсәк.
7. Һамаҡ.
8. Һармаҡ.
9. Уйынлы йыр.
10. Таҡмаҡ.
11. Таҡмаза.
12. Бәйет.
13. Мөнәжәт.
14. Саҙа.

Бөгөнгө көндә *һарнау йыр, һармаҡ, эрәт йыр, таҡмаза, саҙа* беҙҙең фольклорсыларҙың хеҙмәттәрендә, ара-тирә булһа ла, телгә алынһа ла, өлгөләре әле һаман да йыйылмаған. Ғ.Амантай өйрәткәнсә, уларҙы халыҡтан һорашып, асыҡлау, өлгөләрен йыйыу – әлегә фольклорсыларҙың үтәлмәгән бурысы булып ҡала. Н.А.Таһиров телгә алған, әммә әле беҙҙең иғтибарҙан ситтә ҡалған: *шом, алғыш, күңел әйтеү, куптау, ҡарғыш һ.б.* тураһында ла шуны уҡ әйтергә булыр ине.

Ҡара һүҙ менән әйтемдән тыш Ғ.Амантай бата (нәсихәт әйтеү), ырым, арбау, сихыр кеүек күренештәр барын билдәләп, рус фольклорынан уларҙың аҙаштарын иҫкә төшөрә һәм тәүгләрен шулар менән сағыштыра: ырым – заговоры, арбау – заклинания, сихыр – ворожьба, юрау, шомланыу – поверия була, ти. Әммә, уларҙың “ҡара һүҙ”гә ҡараймы, “әйтем”гәме, әллә үҙ аллы күренешме – өҙөп кенә әйтмәгән.

***д) Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадының ҡабаттан төркөмләнеше***

Ғ.Амантай һәр жанрҙы, уның үҙенә генә хас үҙенсәлектәрен, башҡарылышын иҫәпкә алып, информанттарҙы бүлдермәй генә, яҙып алырға, яҙғаныңды уҡып ишеттереп, төҙәтмәләр индерергә, әммә үҙеңдән өҫтәмәҫкә тәкдим итә. Әйтелгәндәрҙән Ғ.Амантайҙың әле ҡәләм, ҡағыҙҙан башҡа бер ниндәй техник саралар юҡ саҡта ла һәр жанр өлгөһөнөң үҙ йөҙө менән теркәлергә тейешлеге хаҡында ҡайғыртыуы яҡшы аңлашыла.

Ғ.Амантайҙың күрһәтмәләре, башҡорт ауыҙ-тел ижадының жанрҙар составын билдәләүҙе бөгөн булһын фольклор йыйыусылар өсөн файҙалы ғилми һәм ғәмәли методик ҡулланма дәрәжәһен юғалтҡаны юҡ.

Ғ. Амантайҙың идеяларын Әхнәф Харисов, Кирәй Мәргән, Салауат Галиндар артабан үҫтерҙе. 18 томлыҡ “Башҡорт халыҡ ижады” йыйынтығын донъяға сығарыу, юғары уҡыу йорттары студенттары һәм уҡытыусыларға тәғәйен уҡыу ҡулланмалары (С.Галин. Башҡорт фольклоры, Тел асҡысы – халыҡта), дәреслек (Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады) Кирәй Мәргән, Ә.Харисов, С.Галин, М.Сәғитов, С.Галин, М.Минһажетдинов, Ғ.Хөсәйеновтың, Ф.Нәҙершина, Р.Солтангәрәева, Б.Байымов, Ә.Сөләймәнов, Б.Әхмәтшин, Г.Хөсәйенова, Г.Юлдыбаева, З.Әминев, В.Котовтарҙың эпик ҡобайыр, йыр, легенда, рихүәйәттәр, афористик жанрҙар, таҡмаҡтар, әкиәттәр тураһындағы монографиялары, Мәскәүҙә, Төркиәлә эпик ҡомартҡыларыбыҙ баҫылып сығыуы, башҡорт фольклорсылары әҙерләгән “Башҡорт фольклоры” (ТТӘИ, Әҙәбиәт, фольклор, әҙәби мираҫ” (БДУ) йыйынтыҡтары, шул уҡ исемдәге коллектив монография халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады жанрҙарын өр-яңынан барларға, онотола яҙғандарын тергеҙергә мөмкинлек бирҙе. Әле төҙөлөп ятҡан күптомлыҡ “Башҡорт халыҡ ижады”нда был ҡаҙаныштар тағы ла сағыуыраҡ сағылыш аласаҡ.

Әммә, бөгөнгө ғәмәли эштәребеҙҙән сығып ҡарағанда, шуны билдәләргә була. *Беренсенән,* Н.А.Таһиров, Ғ.Амантай һанап киткән жанрҙарҙың байтағы хаҡында хәҙерге хеҙмәттәрҙә мәғлүмәт табыуы ситен. Мәҫәлән, Кирәй Мәргән үҙенең дәреслегендә һәм уҡыу программаларында башҡорт фольклорында шундай жанрҙар барын билдәләй:

1. Йола поэзияһы:

а) им-том: – арбау, – ырым;

б) ваҡыт-миҙгел йолалары;

в) тормош-көнкүреш йолалары (туй, сеңләү, бит асыу);

2. Әкиәт эпосы:

– тылсымлы әкиәттәр,

– батырҙар тураһындағы (героик) әкиәттәр,

– тормош-көнкүреш әкиәттәре;

3. Легендалар, риүәйәттәр:

а) боронғо ышаныуҙар ерлегендә тыуған

– космогоник,

–тотемистик,

– анимистик легендалар

б) этногенетик һәм этнонимик легендалар,

в) тарихи риүәйәттәр,

г) топонимик легендалар һәм риүәйәттәр,

ғ) тормош-көнкүреш легенда һәм риүәйәттәре.

4. Көләмәстәр.

5. Героик эпос. Жанр билдәләре яғынан уларҙы был ғалим:

а) иртәктәргә,

б) ҡобайырҙарға;

тематик йәһәттән:

– героик йөкмәткеле иртәктәр,

– тормош-көнкүреш (новеллистик) иртәктәр,

– сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәш хаҡындағы иртәктәргә бүлә.

“Тел асҡысы – халыҡта” тигән аңлатмалы һүҙлегендә С.Галин башҡорт фольклорында түбәндәге жанрҙар барлығын билдәләй. Бәйет, ваҡыт-миҙгел йола поэзияһы, иртәк, йола йырҙары, йомаҡ, йыр, көләмәс, ҡобайыр, ҡисса, ҡыҫҡа йыр, легенда, мөнәжәт, мәҡәл, оҙон йыр, өләң (эпос), риүәйәт, таҡмаҡ, тапҡыр һүҙ, эпос, әйтем (мәҡәл + ... мәҡәл), әкиәт (8а).

“Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады” тигән китабында иһә башҡорт фольклорында эпик төргә – иртәк, ҡобайыр, әкиәт эпосы (әкиәт, легенда, көләмәс), лирик төргә – йыр, таҡмаҡ, мәҡәл, әйтем, йомаҡ, тормош-көнкүреш бәйеттәре, мөнәжәт кеүек жанрҙар ҡарауын, драма төрөнөң үҫешмәүен билдәләй. Бынан тыш йола фольклоры һәм балалар фольклоры тигән төркөмдәр булыуын да әйтә. Быны ул “Халыҡ ижады жанрҙарын ... ижтимағи-эстетик вазифаларына ҡарап” төркөмләү һөҙөмтәһе, тип иҫәпләй (8, 115–116).

Ғайса Хөсәйенов, башҡорт фольклорының жанрҙар системаһын тулы килеш барлап тормайынса ғына, уның боронғо дәүергә ҡараған ҡара һүҙ, ҡарһүҙ, әйтеш, ауаҙа хаҡында һүҙ алып барғайны һәм алҡыш (беҙҙеңсә, алғыш), ҡарғыш, теләк, ҡобайыр, һамаҡ кеүек үҙ аллы жанрҙар булыуын билдәләгәйне. Уныңса, ҡара һүҙ ауыҙ-тел сәсмәүере төшөнсәһен береүсе ҡарһүҙҙәрҙе лә, халыҡ-ара ҡулланылыштағы миф төшөнсәһен биреүсе ҡарыһүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә ала (21, 167–190).

### *е) Фольклорҙы бүтән принциптарҙан сығып төркөмләү мөмкинлектәре*

XX быуаттың 70-се йылдарынан башлап Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор һәм сәнғәт бүлеге “Башҡорт халыҡ ижады” тупламаһының башҡорт телендәге 18 томлығын, 13 томда уны рус телендә сығарыу һәм тағы ла тулыраҡ тупламаһын әҙерләү дәүере халҡыбыҙ ижадын яңынан барларға, уның жанрҙар системаһы хаҡындағы төшөнсәне асыкларға, байыта төшөргә мөмкинлек бирҙе. Хәҙерге башҡорт фольклоры ғилемендә милли ауыҙ-тел ижадыбыҙҙың төрҙәре һәм жанрҙары шулай билдәләнә:

I. *Эпик төр.* Уға эпостар (М.Өмөтбаевса, өләң дәр): эпик ҡобайырҙар, иртәктәр, дастандар, әкиәттәр, легенда, риүәйәттәр, хәтирәләр, инанмыштар (былички), көләмәстәр инә.

II. *Лирик төр* йыр, лирик ҡобайыр, нәсихәти (дидактик) ҡобайыр, һыҡтау, бәйет, мөнәжәт, таҡмаҡ, таҡмаза, тулғау, сеңләү кеүек жанрҙарҙы үҙ эсенә ала.

III. *Афористик ижад төрө.* Уға мәҡәлдәр, ярым мәҡәлдәр (уларҙы лингвистикала идиоматик берәмектәр, фразеологизмдар тип, ә фольклор ғилемендә тапҡыр һүҙҙәр тип йөрөтәләр), лаҡап һүҙҙәр (шартлы рәүештә: сөнки уларҙың аңлатмаһы көләмәстәр рәтен тултыра), йомаҡтар ҡарай.

IV. *Йола фольклоры.*

V. *Бала-саға фольклоры.*

Ауыҙ-тел ижадының ошо биш төрөнә ингән жанрҙар хаҡында төшөнсә артабанғы биттәрҙә бирелә.

Әгәр Нуриәғзәм Таһиров, Хәбибулла Ғәбитов, Ғабдулла Амантайҙар иҫәпкә алған “халыҡ фольклористикаһы” күҙлегенән ҡараһаҡ, был бүленештәге эпик төргә һәм афористик ижад төрөнә ҡараған бөтә жанрҙар ҙа, асылда, *ҡара һүҙ (ҡарһүҙ)* тигән оло төргә (род) ҡарай, тип әйтә алыр инек. Лирик төр жанрҙары тигәнебеҙ *әйтем* тигән оло төрҙө хасил итә булыр.

Дүртенсе төркөмгә килеп төртөлһәк, фольклорҙы, ғөмүмән, әле тәҡдим ителгәнсә, төркөмләү үтә лә шартлы булыуына төшөнөрбөҙ. Ысынлап та, унда йола менән туранан-тура бәйле ижад күренештәре менән бер рәттән йолаға мөнәсәбәте сағыштырмаса булғандары ла инә. Ә инде “Бала-саға фольклоры” тигәнебеҙ ике уртала (бер аяғы менән йола фольклорында, икенсеһе менән йола булмаған фольклорҙа) торған кеүек булыр.

Халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадының бер өлөшөн “балалар фольклоры” тип атап йөрөтөүебеҙ иһә, өндәшмәһәк тә, фольклорҙың ҡалған өлөшөн ололар фольклоры тип таныуыбыҙҙан килә. Тимәк, был осраҡта беҙ, фольклорҙы, ғүмер миҙгеле принцибынан, йәғни ололарға йә кеселәргә тәғәйенләнеше (ололарҙы йә бала-сағаны хеҙмәтләндереүе) яғынан ике өлөшкә бүлә булабыҙ.

Дөйөмләштереп әйткәндә, йола фольклоры менән балалар фольклоры тигәнебеҙ ҡарһүҙ башланғысын да, әйтем башланғысын да үҙ иткән синкретик ижад төрҙәренә ҡарай.

Шулай итеп, фольклорыбыҙҙың тәүбашта түбәндәгесә бүленеүен дә таныурға тура килә:

I. Ололар фольклоры:

1. Йола фольклоры.

2. Йола булмаған фольклор:

а) ҡарһүҙҙәр,

б) әйтемдәр.

II. Бала-саға фольклоры:

1. Балаларға тәғәйенләп, ололар ижад иткән фольклор.

2. Балаларҙың үҙ ижады.

Ә инде *ниндәй социаль төркөмдә тыуыуына* йә *кемдәргә тәғәйенләп ижад ителеүенә* ҡарап, халыҡ ижадын ололар фольклоры, бала-саға фольклоры, һалдат фольклоры, студенттар фольклоры, эшселәр фольклоры, кеүек төркөмдәргә; *пафос йәһәтенән* ҡаһарманлыҡ, трагик, юмористик (сатирик), дидактик (нәсихәти, ғибрәтле), мәдхийәүи вә мәрҫийәүи фольклорға; интим хислелек йәһәтенән *эротик һәм эротик булмаған* һ.б. фольклор төркөмдәренә бүлергә лә мөмкин.

## 2. Фольклорҙың тотош система хасил иткәне

Төрҙәргә, жанрҙарға бүленешенән аңлашылыуынса, фольклор тар планда ла, йәғни ауыҙ-тел ижады кимәлендә лә, тотош бер система хасил итә. Бынан тыш төр һәм жанрҙарҙың үҙ-ара бәйләнеше шул система эсендә тағы бер система барлыҡҡа килтерә. Ә инде яңыраҡ *“фольклор”* терминына киңерәк төшөнсә һалыныуын иҫәпкә алһаҡ, был системаның тағы ла киң һәм ҡатмарлы булыуына төшөнөрбөҙ.

### *а) Бер жанр өлгөләренң икенселәре составында килгәне*

Ҡайһы яҡлап һәм ниндәй генә принциптан сығып төркөмләһәк тә, фольклор төрҙәре лә, улар үҙ эстәренә алған жанрҙар ҙа бер-береһенән аша төшмәҫлек ҡойма менән айырылмай, үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Ҡарһүҙҙәрҙә әйтем дә, йола фольклоры өлгөләре лә ҡулланылырға, әйтемдәрҙә иһә йола фольклорына хас һәм ҡарһүҙҙәрҙә лә күҙәтелеүсән билдәләрҙе табырға мөмкин. Эпостарҙа (эпик ҡобайыр һәм иртәктәрҙә) сюжетһыҙ ҡобайырҙар менән уртаҡ теҙемдәрҙе, мифологик, топонимик һәм этногенетик легенда, риүәйәттәр хәлендә үҙ аллы йәшәй алырҙай тематик мотивтарҙы, сюжеттарҙы, шәжәрә һ.б. жанрҙарҙың башланғыстарын осратырға була. Әкиәттәрҙә йомаҡ, мәҡәл, көйләп әйтелмәле монологтар, диалогтар, әйтеш ҡулланылған осраҡтар бар.

Бер жанр өлгөләренең икенселәре составында килеүе – ҡәҙимге контаминация принцибы менән генә аңлатылмай. Улар төп сюжеттың идея-тематик ихтыяжына ярашлы ҡулланылған алым хеҙмәтен атҡара. Етегән йондоҙлоғона һәм ундағы Тимер ҡаҙыҡҡа бәйле миф сюжеты “Урал батыр” эпосында тематик-мотив кимәлендәге микросюжет рәүешендә килеүе менән ул эпик сюжетты тулыландыра, уның этиологик башланғысына иш янына ҡуш була. Шуның менән бергә Аҡбуҙаттың мифик затлы Күк аты икәнен, үҙе бер мөғжизә икәнен аңлата. “Өс ауыҙ һүҙ”новеллистик әкиәте ҡаһарманы һатып алған өс мәҡәл уға иң сетерекле ситуациянанан да имен-аман сығырға, уңышҡа өлгәшергә

ярҙам итә. Икенсе төрлө әйткәндә, һәр мәҡәл уның өсөн яҙмыштың үҙен хәл итмәле әһәмиәткә эйә. Шул арҡала, асылда, сюжет хасил итеү инструменты хеҙмәтен үтәй.

***б) Бер жанр өлгөһөнән айырылған өлөштәренең икенсе жанр рәтен тулыландырғаны***

Ауыҙ-тел фольклорының бер жанры өлгөһө икенсе төр һәм жанр кәштәһендә урын алыуы ла ихтимал. “Ҡара юрға”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡуңыр буға”, “Заятүләк менән Һыуһылыу” ише иртәктәрҙең йыр йә ҡыҫҡа ҡобайыр рәүешендә генә башҡарыла торған версиялары осрай. Ике йорт тотоп, әле береһендә, әле икенсеһендә йәшәргә яратҡан кешене хәтерләтеп, бер үк әҫәрҙең, берсә – бер жанрҙар рәтенә, берсә икенсеһенә һырыныуының сәбәптәре төрлөсә булырға мөмкин. Әле телгә алынған иртәктәрҙең йыр сифатында ғына башҡарылған варианттары осрауы, эпик дәүер үткәс, бындай күләмле әҫәрҙәргә ихтыяж кәмеүе менән аңатылыуы ихтимал.

Туй йолаһын атҡарғанда (Ялан-Ҡатай ырыуы башҡорттарында әле лә ҡыҙыҡ өсөн генә башҡарылыуын иҫәпкә алмағанда), ҡыҙ сеңләтеү рәүеше хәҙер күҙәтелмәй. Уның ҡарауы, сеңләү тексы ололарҙың хәтерендә генә һаҡлана йә, берсә “Толпар тайса”, берсә “Күк толпар” тип исемләнеүсе йыр рәүешендә осраштыра. Сеңләү жанрының туй йолаһынан төшөп ҡалыуына Октябрь ихтилалынан һуң уны, ҡатын-ҡыҙ хоҡуҡһыҙ саҡтың күренеше, иҫкелек ҡалдығы, тип, тик бер яҡлы ғына баһалау, яңы рәсми идеологияға яраҡлашырға тырышып, “комсомол туйы”, “ҡыҙыл туй” үткәрә башлау, рус һәм башҡа халыҡтарҙың туй йолаһы йоғонтоһо сәбәпсе булған, әлбиттә.

Мифологик фекерләүҙән азат түгел саҡта, тәбиғәт күренештәрен йәнләндереп (анимистик ҡараш), йәнлеһен кешеләштереп (антропоморф ҡараш) йә ҡош-ҡортҡа оҡшатып (зооморф ҡараш) күҙ алдына килтереүсе боронғо бабаларыбыҙ репертуарындағы ямғыр йә ҡояшлы көн, йә балыҡ ҡабыуын һорап, ялбарып-ялбарып, шул заттарҙың үҙҙәренә мөрәжәғәт итеп, теләктәр әйткән. Шул боронғо ҡараштарҙан арыныу һөҙөмтәһендә, хәҙер улар балалар фольклорында урын алған.

***в) Жанрҙарҙың бер-береһен тулыландырышҡаны***

Төрлө жанр формалары бергә ойошоу йә тарҡалыу һөҙөмтәһендә бөтөнләй икенсе жанрға ҡарамалы яңы әҫәр хасил булырға ла мөмкин. Мәҫәлән, Алдар, Ерәнсә сәсән, иҫәр таҙ тураһындағы тематик мотивтар айырым-айырым башҡарылғанда, уларҙың һәр береһе көләмәс кеүек ҡабул ителә. Төп геройы тирәһенә ойошһа, йә юмористик, йә новеллистик әкиәт хасил була.

Ауыҙ-тел ижады жанрҙары бер-береһен тулыландырышҡан осраҡтар ҙа бар. Үҙ көйө, үҙ тарихы булған йырҙың айырым куплеттары исемһеҙ йәғни төрлө осраҡта төрлө көйгә башҡарылыусан, шуға ла фольклор ғилемендә “төрлө йырҙар” тип кенә нарыҡлана торған йыр

репертуарына күсеүсән. Киреһенсә лә була: үҙ көйө, үҙ тарихы булған исемле йырҙы уға тематик яҡтан яҡын булған “төрлө йыр” куплеттары тулыландыра ала.

Үҙ көйө булған исемле йыр – үҙенә бер башҡа, тарихы айырым да йәшәй ала. Ул саҡта йыр тарихын үҙ аллы риүәйәт рәүешендә һөйләйҙәр. Ә инде шундай риүәйәт тексы менән йыр тексы аралашып килһә, эпос төрөнөң “иртәк” тигән жанрын хәтерләтеүсе яңы форма килеп сыға. “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡара юрға”, “Ҡуңыр буға” кеүек әҫәрҙәр, башта шулай башҡарылып йөрөп, бара-тора иртәккә әүрелһә, ни ғәжәп.

***г) Башҡарылышына ҡарап, бер үк әҫәрҙең төрлө жанр үрнәгенә әүрелгәне; заман талабы төрлө осорҙа теге йә был жанрҙың әүҙемләшеүенә сәбәп ҡылғаны***

Ауыҙ-тел фольклоры жанрҙарының ҡайһы бер өлгөләре, нисек башҡарылышына ҡарап, төрлө жанрҙар рәтендә урын алырға мөмкин. “Зөлхәбирә”, “Ете ҡыҙ”, “Порт-Артур” йырҙары, мәҫәлән, бәйет көйөнә һамаҡланһа, уларҙы бәйет тиҙәр. Тарихтарын һөйләп тороп, уларҙың үҙҙәренә генә тәғәйен көйгә башҡарылһа – улар йыр иҫәпләнә.

Жанрҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте төрлө осорҙа төрлөсә була. XIX быуатта йыр репертуарында эпик башланғыс бушап, лирик ағым көсәйә төшә. Шул уҡ дәүерҙә лирик кисерештәр сағылышы булып, оператив жанр – бәйет әүҙемләшә һәм әкренләп йыр ижад итеү һүлпәнәйә. Әле генә телгә алған “Зөлхәбирә”, “Ете ҡыҙ”, “Порт-Артур” йырҙарҙың бәйетләшеүенең бер сәбәбе, бәлки, шуның менән аңлатыла торғандыр ҙа әле. Икенсе сәбәбе – татар фольклоры йоғонтоһолор. Телебеҙ яҡын булһа ла, ул ҡәүемдең репертуарында башҡорттоҡо кеүек оҙон көй юҡ. Шул сәбәптән башҡорт сығышлы оҙон көйлө йырҙың тексын отоп алһалар, татарҙар уларҙы бәйет итеп башҡарыр булғандар. Әлеге өс йыр – шуға миҫал. Бынан тыш Салауат Юлаев, Буранбай тураһындағы йырҙарыбыҙҙы отоп алған татарҙар уларҙы бәйетсә башҡара. Йырҙарыбыҙҙың күрше халыҡ репертуарында шулай трансфомациялашыуы үҙ нәүбәтендә башҡорт фольклорына йоғонтоһоҙ ҡалмаған.

Быңдай үҙгәрештәргә төрлө тарихи дәүерҙә – бер жанрҙың, икенсе осраҡта бүтәненең әүҙемләшеп китеүсәнлеге (законсалығы) сәбәп итеүе лә ихтимал. Һуғыш дәүерендә әлегә махсус өйрәнеүсеһен көткән шиғри хаттар, һалдат һәм һалдаткалар бәйете әүҙемләшеүсән. Быға - Бөйөк Ватан һуғышы осоро фольклоры дәлил.

Һуғыш осоронда ҡобайыр жанры ла йәнләнә төштө. Был жанр Мөхәмәтша Буранғолов, Фәррәх Дәүләтшин, Йәрми Сәити, Жәлил Кейекбаев ише сәсәндәр, Мостай Кәрим, Рәшит Ниғмәти, Сәйфи Ҡудаш кеүек шағирҙарыбыҙ ижадында “яңынан тыуҙы, яңынан йәшәрҙе”. Ҡобайыр жанрының әүҙемләшеүе Граждандар һуғышы осоронда ла (мәҫәлән, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабичтар ижадында)

күҙәтелгән. XX быуат аҙағында Башҡортостан Республикаһының мөстәҡиллеге өсөн көрәш ҡыҙған дәүерҙә был жанр тағы ла поэтик трибун урынын алды. Абдулхаҡ Игебаев, Рауил Бикбаев, Мәхмүт Һибәт, Тамара Ғәниева, Розалиә Солтангәрәева, Таңһылыу Ҡарамыш кеүек шағирҙар, сәсәндәрҙең генә түгел, массовой төҫ алған үҙэшмәкәр авторҙар (уҡыусылар, уҡытыусылар) ижады – шуға миҫал.

Мәғлүм булыуынса, башҡорт халыҡ йырҙарының төп йөкмәткеһе, ҡағиҙә буларaҡ, һәр строфаһының өсөнсө һәм дүртенсе юлдарында асыла. Беренсе һәм икенсе юлдарында, ғәҙәттә, мәғәнәүи яҡтан уларҙан йыраҡ торған (бында йәнәшәлек, символика мәсьәләһен ситкә ҡуйып торабыҙ) тәбиғәт күренештәре хаҡында һүҙ бара. Йырҙарыбыҙҙың был үҙенсәлегенә XIX урталарында В.И. Даль дә иғтибар иткән. С.Г. Рыбаков әйтмешләй, тәбиғәт балалары булған башҡорт халҡы өсөн йыр куплетының тәүге яртыһында бушҡа ғына тәбиғәт күренештәре телгә алынмаған. Бындай алым борон сакраль функция – йыр бисмиллаһы ролен атҡарған. Тап шуның өсөн яңы дәүерҙә ул архаизм тип иҫәпләнә торғандыр. Шул арҡаламы, әллә әҙәби шиғыр, шағирҙар яҙған йыр текстары йоғонтоһондамы, совет осоронда ижад ителгән халыҡ йырҙарында куплеттың һәр юллығы төп йөкмәткене асыуға яраҡлаштырыла башлай. Ҡайһылай булғанда ла, яңы осор халыҡ йырҙары боронғо традициянан ситләшә башлаған. Ошо әйтелгәндәр бәйет жанрына ла ҡағыла.

Бына шундай күренештәр ауыҙ-тел ижады жанрҙары системаһына яңынан-яңы үҙгәрештәр индерә тора. Тимәк, ул тере организм кеүек үк статик хәлдә ҡала белмәй.

***ғ) Киң мәғәнәләге фольклорҙың башҡа төр һәм жанрҙарының ауыҙ-тел ижады менән бәйләнеше***

Хәҙерге халыҡ-ара практикала фольклор терминына, әйтеп үтелгәненсә, киңерәк мәғәнә һалына. Ошо йөмләнән ҡарағанда, рухи мәҙәниәттең профессиональ булмаған ижадсылар тарафынан, традицияларға таянып, тыуҙырылған бөтә төрҙәре лә фольклор төшөнсәһенә эйә. Бейеү фольклоры (халыҡ хореографияһы), уйын фольклоры, музыкаль фольклор, халыҡ архитектураһы (народное зодчество), халыҡтың биҙәү-биҙәнеү сәнғәте лә, ауыҙ-тел әҙәбиәте лә, миф та, хатта тел дә ана шундайҙар иҫәбенә инә.

Беҙҙең бурыс иһә урында фольклор өлгөләрен йыйғанда, төп диҡҡәтте ауыҙ-тел фольклорына туплауға йүнәлткән сүрәттә лә, халыҡ ижадының бындай төрҙәрен дә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмауҙан ғибәрәт. Сөнки тәүгеһе, һуңғы әйтелгәндәре менән бергәләшеп, тағы ла киңерәк ҡоласлы система, халыҡтың матди булмаған (биматди) традицион милли мәҙәниәте системаһын хасил итә.

Йыр, таҡмаҡ, ҡобайыр, бәйет, мөнәжәттәр генә түгел, ауыҙ-тел фольклорына ингән жанрҙарҙың теҙмә телмәр рәүешен үҙ иткәндәренең

барыһын да борон тик көйләп йә һамаҡлап ҡына башҡарыр булғандар. Сөнки, боронғоларҙың ҡарашынса, теҙмә телмәр – ғәҙәти булмаған телмәр, мөғжизәүи көскә эйә телмәр иҫәпләнгән. Һүҙҙең тылсымлы көсөнә (һүҙ магияһына) ышаныу сәбәпсе булған был ҡарашҡа. Көйҙө, музыканы ла магик көскә эйә булған мөғжизә тип белгәндәр. Шулай булғас, теҙмә телмәр менән көйҙөң бергә ҡушылыуы – икеләтә, өсләтә магик йоғонто яһай тигән ҡарашҡа килеүгә нигеҙ булған. Шуға күрә лә биматди традицион мәҙәниәттең иң боронғо формаһы иҫәпләнгән йола, уйын фольклоры күренештәрендә йыр, ҡобайыр, афористик жанрҙар, менән бер рәттән мәжүсилек дәүерендә тыуған им-том һамаҡтары (ҡара доғалар), алғыштар һәм, Алланың берлегеен танып, ислам диненә күскәндән алып уҡыла башлаған "Ҡөрьән-Кәрим" аяттары халыҡтың музыкаль, биҙәү, бейеү сәнғәте башланғыстары магик, символик хәрәкәт, ым-ишараларға бай театраль-драматик күренештәре менән ярашып, яраҡлашып килә.

Айырым алғанда, халыҡтың өнһөҙ сәнғәте һүҙ сәнғәтенән айырылғыһыҙ. Бейеү сәнғәтенә генә иғтибар итәйек. Халыҡ йыш ҡына таҡмаҡҡа бейегән. Таҡмаҡ, бейеү ритмын көйләү сараһы булыуҙан тыш, уны төрләндереүгә лә булыша. Таҡмаҡсы, мәҫәлән:

Ары баҫҡан аяғыңды
Бире баҫһаң ни була.
Ҡулъяулығым юғалды, тип,
Хәйлә тапһаң ни була, –

ти икән, бейергә төшөүсене өйрәткәндәй итә: бейеүҙең рәтен белмәгәс, хәйләләп булһа ла, бейемәй ҡалыу – хәйерле, ә инде бейергә төшкән икәнһең, аяғыңды йүнле йөрөтә бел. Әгәр инде таҡмаҡсының

Аяғыңдағы итегең
Әмрикәнский ғына.
Һикреп төшөп бейеүҙәрең
Һайыҫҡанский ғына, –

тип әйтеүе бейергә төшөүсенең бейеүен хушһынмауҙы, уны сәмләндерергә тырышыуҙы аңлата.

Бейеүсене дәртләндереүгә тәғәйен таҡмаҡтар ҙа әҙ түгел. Миҫалдар:

Ҡара, ҡара, ҡарағыҙ:
Ни ҡылана балағыҙ?
Бер баҫыуҙа бишәр баҫа,
Баҫыуҙарын ҡарағыҙ.

Ҡыҙҙар кейә ала күлдәк,
Биҙәктәре түңәрәк.
Иҙәндәрҙә бейеп йөрөй
Алма кеүек тәгәрәп.

Бейеүҙең һүҙ сәнғәте менән бәйләнеше йәнә шунда күренә: йыр һымаҡ уҡ, бейеүҙәр ҙә аңлатыуҙы, аннотация менән оҙатыуҙы талап итә. Шунһыҙ “Кәкүк”, “Ете ҡыҙ”, “Перовский”, “Байыҡ”, “Тау бөркөтө”ише сюжетлы милли бейеүҙәребеҙҙең йөкмәткеһе аңлашылып бөтмәй.

***д) Жанрҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте – уларҙың арауыҡ һәм дәүер эсендә хәрәкәтсән булыуына бәйле булғаны***

Фольклор жанрҙарының үҙ-ара мөнәсәбәте – уларҙың арауыҡ һәм дәүер эсендә хәрәкәтсән булыуына бәйле. Фольклор әҫәре телдән-телгә, урындан урынға күсә. Шулай арауыҡ эсендәге күсәкилеше арҡаһында, бер урында тыуған фольклор әҫәре яңы ерлектә урындағы фольклор әҫәрҙәренең йоғонтоһон кисерә: йөҙөн, хатта йөкмәткеһен дә үҙгәртә.

Фольклор әҫәрҙәре ваҡыт һуҙымында ла хәрәкәт итә: улар быуындан быуынға күсеү һәләтенә эйә. Бындай саҡта фольклор әҫәре һәр заман талап иткән тенденцияларға яраҡлаша. Мәҫәлән, бары кантон башлығы булған өсөн генә, совет осоронда Ҡолой Көсөкөв халҡын иҙеүсе бай образын кәүҙәләндереүсе түрә рәүешендә баһаланды. Шул уҡ сәбәп арҡаһында “Сибай” йырын йырлағанда

*Үҙ илемә ҡайтып, кантон булһам,*
Ирешер инем, Фатимам, моратҡа, –

тип әйтер урынға, йырсыларыбыҙ, “замансалатып”:

*Һау-сәләмәт ҡайтһам тыуған илгә,*
Ирешер инем, Фатимам, моратҡа, –

тип, үҙгәртеп йырлай башланы. Ә урындағы халыҡ бөгөн булһын уларҙың икеһен дә һағынып иҫкә ала. Арғаяш яҡтары үҙҙәренең яҡташы Ҡолой Көсөкөвты, мәҫәлән, Беренсе Ватан һуғышында ҡаһарманлыҡ өлгөһө күрһәткән милли герой тип белә. Тарихтан уның, милләт яҙмышын ҡайғыртып, меценатлыҡ эшмәкәрлеге менән шөғөлләнеүе лә мәғлүм.

Ғөмүмән, фольклор жанрҙарының һәр береһе үҙ аллы эстетик күренеш булараҡ та, үҙ-ара бәйләнештә тороуҙары менән дә һәм һәр этностың килеп сығышы йәшәү рәүешенә хас үҙенсәлектәрҙе һаҡлауы йәһәтенән дә тотош бер система хасил итә. Шуға күрә лә урындағы фольклор өлгөләрен үҙ аллы йыйырға тотонғанда, түбәндәге кәңәштәргә иғтибар итеү ҡамасау итмәҫ.

Арауыҡта (пространство) һәм ваҡыт һуҙымында хәрәкәт итеүе һәм шул сәбәптән үҙгәреүсәнлеге фольклор йыйыуҙы ашыҡтырыу бурысын ҡуя: ҡасандыр, кемдәрҙер фольклор йыйған ауылдарҙы яңынан гиҙеү, элек һөйләшкән информанттар менән яңынан осрашыу ҙа файҙалы. Бындай ҡабатлауҙар фольклор әҫәренең йәшәүсәнлек кимәлен, төрлө шарттарҙа, төрлө ваҡытта нисек вариантлашыуын, вариантлашҡанда, ниндәй өлөшө, һыҙаты, билдәһе тотороҡло, ниндәйе нисек үҙгәреүсән икәнен билдәләргә мөмкинлек тыуа.

Ундай саҡта шулай уҡ ҡайһы жанр өлгөләре йәшәүсән, ҡайһыларының ғүмере ҡыҫҡарыусан, шул билдәләрҙең сәбәптәрен асыҡларға була. Ошо мөмкинлектәр һәм бурыс, маҡсаттар фольклористик күҙлектән өйрәнелеүгә тейеш тип билдәләнгән урындағы (ауылдағы, ауыл, район биләмәләрендәге) фольклорҙың ниндәй төрө бар, шуларҙың барыһын да яҙып алыу ихтыяжын тыуҙыра.

Фольклор йыйыу буйынса методик ҡулланмаларҙа етәксе тарафынан, экспедиция планына ярашлы бүлеп бирелгән биләмәлә йәшәгән ҡәүемдәрҙең көнкүреше, йолалары, ғәҙәт, ҡылыҡтары, көн итмеше, донъя көтмөшө, ғаилә хәлдәре һ.б. тураһында мәғлүмәт йыйырға тәҡдим ителеүсән. Быйндай күҙәтеүҙәр яһау мотлаҡ кәрәк. Сөнки улар фольклорҙың теге йә был жанрының айырым әҫәрҙәрҙең, уларҙың версияларының, шул версияларының төрлө варианттарының ниндәй шарттарҙа йәшәүен анығыраҡ билдәләүгә булышлыҡ итә. Ә быйндай аныҡлыҡ халыҡ ижадындағы үҙгәрештәр тенденцияһын күҙаллауға өҙөк-йолпоҡ хәлендә табылған теге йә был әҫәрҙең онотолған өлөшөн реставрацияларға ярҙамлаша.

*е) Этногенез хакындағы мәғлүмәттәр һәм милли фольклор*

Фольклор әҫәрҙәренең милли булмышын, ундағы типологик оҡшашлыҡтарҙы, башҡа этностарҙың ауыҙ-тел ижады менән уртаҡ һыҙаттарын объектив билдәләү өсөн, ул әҫәрҙәрҙе үҙ репертуарында һаҡлаған ҡәүемдәрҙең этногенезын (килеп сығышын) юллау талап ителә. Күҙәтеүҙәр шуны күрһәтә. Төрлө тарафтарҙан йыйылған ҡәүемдәрҙән ойошҡан халыҡ йәшәгән мөхиттә этник сығыш (ҡәбилә, ырыу, ара, аймаҡ, тармыт, түбә) төшөнсәһе булмай. Шуға ла уларҙа ырыу атрибуттары (тамғаһы, ораны, ҡошо, ағасы, һауыты), шәжәрәһе буйынса мәғлүмәттәр һәм шулай уҡ этногенетик, этнонимик легенда, риүәйәттәр, милли эпостар ишетеүе ҡыйын.

Элек-электән, быуын-быуынға еткерелә килгән яҙылмаған ҡанундар "кодексы" талабы буйынса, һәр кем үҙ нәҫелен кәмендә ете быуынға тиклем белергә тейеш булған. Башҡорттарҙа был йола ҡәтғи күҙәтелгән. Быныһы – бер. Икенсенән, Тарихи Башҡортостан ерендә башҡорттар элита-ҡәүем – абориген булған. Шул ике сәбәп арҡаһында уларҙа этник сығыш төшөнсәһе, шуға бәйле рәүештә ырыу, ара (түбә, аймаҡ, тармыт һ.б.), уларҙың атрибуттары, шәжәрә хаҡында мәғлүмәттәр, заттың боронғолоғон "дәлилләүсе" этногенетик, этнонимик легенда, риүәйәттәр, шундай мотивтар менән һуғарылған эпостар ныҡ таралған, ҡәрҙәшлек терминдары ла ныҡ үҫешкән. Этник сығышыңды, ырыуыңды, араңды (аймағыңды, тармыт, түбәңде), уларҙы башҡаларҙан айырыусы атрибуттарҙы, легенда, риүәйәттәрҙе, шәжәрәңде белеү – паспорт йөрөткәндән мөһимерәк иҫәпләнгән: кеше шулар ярҙамында ырыуҙашын ят бауырҙарҙан айырған. Бынан тыш һәр

атрибуттың үҙ бурысы булған. Тамғаға ҡарап, әйберҙең (яу ҡоралының, эш ҡорамалының, мал-мөлкәттең, мәҫәлән, йылҡының, солоҡтоң, тирмәнең, тыуҙың) ҡайһы ырыуҙыҡы (хатта шул ырыуға ингән ҡайһы араныҡы, ғаиләнеке, шәхестеке) икәнен белгәндәр.

Ырыуҙың тарихын (этногенезын), атрибуттарын белеү, уның генетик йә тарихи яҡтан ҡайһы халыҡҡа ҡәрҙәш икәнен аныҡларға булыша. Шул аныҡландымы, шул ырыуҙан яҙып алынған фольклор әҫәрҙәренең ҡайһы берәүҙәренең килеп сығышын, тарихын ситтән эҙләү мөмкинлеге тыуа.

Ауыҙ-тел фольклоры өлгөләрен йыйғанда, уларҙы ижад иткән, һаҡлаусы ҡәүемдең биҙәү (орнаменты, сигеү, сүптәү, нағышлау), төҙөү, бейеү, музыкаль сәнғәте, кейем-һалым фасоны, традицион һауыт-һабаһы кеүек этнографик мәғлүмәттәр ҙә иҫәпкә алынһа, ҡағыҙға теркәлгән әҫәрҙәрҙең тамырҙарын юллау мөмкинлеге асылыр булыр. Шуға күрә лә билдәле бер төбәктең фольклорын йыйғанда, шунда йәшәгән этник төркөмдәр, уларҙың килеп сығышы, атрибуттары, шәжәрәләре хаҡында һәм этнографик мәғлүмәттәр йыйыуға ныҡ иғтибар итеү кәрәк.

Айырым жанр, әҫәр яҙмышы менән ҡыҙыҡһынған сүрәттә лә, ғөмүмән, урындағы фольклорҙың торошон билдәләүҙе маҡсат иткәндә лә, ҡайһы төбәк өйрәнелә, шунда халыҡ ижадының бөтә төр, жанр (жанр күренештәре) буйынса ла өлгөләр табырға тырышыу зарур. Әгәр берәй әҫәр табыла икән, уның версия һәм варианттарын да һорашалар. Әгәр һеҙ яҙып алған вариантынан башҡаһын һеҙгә яҙҙырған информант белмәһә, улары хаҡында бүтәндәрҙән һорашыу мотлаҡ. Ул варианттарҙың тулы йә тулы булмауын билдәләү – үҙмаҡсат түгел. Уларҙы яҙып алыу фольклор әҫәренең таралыу географияһын, популярлыҡ кимәлен тикшергәндә, баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә.

Сюжетлы әҫәрҙәр (эпос, әкиәт, легенда, риүәйәт, көләмәс, инанмыш, хәтирәләрҙе) махсус рәүештә башҡарыуҙарын баштан-аяҡ һорап, шуны тыңлау дәүерендә үк яҙа барырға мөмкин булһа, мәҡәл, йомаҡ кеүек кесе жанрҙарҙың өлгөләрен информант менән көнкүреш темаһына һөйләшкәндә, башҡа әҫәрҙәрҙе башҡарғанда, нисек ҡулланыуын теркәү юлы менән йыйырға була.Бынан тыш:

Көн күрмәгән көн күрһә,
Көндөҙ сыра яҡтырыр;
Тун күрмәгән тун күрһә
Ҡағып-һуғып туҙҙырыр, –

кеүек мәҡәл теҙемдәрен әйтеп: "Ошоноң кеүек өлгөләрҙе белмәйһегеҙме?" – тип һорашырға кәрәк. Унан ҡалһа, төрлө ситуацияларҙа ниндәй әйтемсәк, мәҡәлдәр ҡулланылыуын һорашыу ҙа, информаторҙың хәтеренә ыңғай йоғонто яһауы ихтимал. Мәҫәлән:

“Күңелһеҙ йөрөгән кеше хаҡында нимә тиҙәр?”тигән һорауға: “Балтаһы һыуға төшкән,” – тип яуап бирерҙәр. “Ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө эш атҡарыусы, эше тығыҙ кеше хаҡында ни тиҙәр?” – тиһәң: “Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай булып йөрөй,” – тип әйтерҙәр.

Әйтелгәненсә һәм ҡайһы бер миҫалдар ярҙамында “күрһәтеп үк бирелеүенсә”, фольклорҙың бер генә төрө лә, бер генә жанры ла, бер генә әҫәре лә башҡаларынан бейек ҡойма менән айырылмай. Улар һәр саҡ үҙ-ара төрлө бәйләнеш-мөнәсәбәттә йәшәп, бөтөнөһө бергә *матди булмаған традицион милли мәҙәниәт тигән системаны* хасил итә. Был иһә урындағы фольклорҙы бөтә тулылығында теркәүҙең әһәмиәте ни тиклем ҙур икәне тураһында һөйләй.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Амантай Ғ. Һайланма әҫәрҙәр/ төҙ. Һәм махсус мөхәрр. Рауил Бикбаев. – Өфө: Китап,2007. – 280 б.
2. Аникин В.П. Возникновение жанров в фольклоре: к определению понятия жанра и его признаков // Специфика фольклорных жанров. – М.; Л.: Наука, 1977. – Русский фольклор. Т.X. – С. 28 – 42.
3. Аникин В.П. Теория фольклора: курс лекций. – М.: Изд-во МГУ, 1996.
4. Башҡорт халыҡ ижады / төҙ., инеш мәҡ. авт. Ә.М.Сөләймәнов; аңлатмалар авт. Л.Г.Бараг менән Ә.М.Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. Н.Т.Зарипов. – Өфө, 1983. Әкиәттәр. 5-се кит. – 392 б.
5. Вахитов Әнүр. Яҡты күңел. – Өфө, 1981.– 368 б.
6. Введение в литературоведение / под ред. Н.Г.Поспелова. – М., 1976. – 423 с.
7. Вилданов Ғ. Төрөк милләттәре әҙәбиттәрен тикшереү һәм уларҙың йәкүне // Башҡорт аймағы. – 1926. – № 2. – 3–26-сы б.

7а. Восточнославянский фольклор: Словарь научной и народной терминологии. – Мн.: Навука и тэхніка, 1993. – 478 с.

8. Галин С.Ә. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. – Өфө: Китап, 2004. –392 б.

8а. Тел асҡысы – халыкта. – Өфө: Китап, 1993. – 224 б.

9. Гусев В.Е. Эстетика фольклора. – Л.: Наука, 1967. – 504 с.
10. Ғәбитов Х. Халыҡ поэзияһы тураһында // Башҡорт аймағы. – 1925. – № 1. – 30 – 48.
11. Колпакова Н.П. Русская народная бытовая песня. – М.; Л.: Наука, 1962. – 284 с.
12. Кофман А.Ф. Жанрообразующие признаки в фольклоре // Рукопись деп. в ИНИОН АН СССР, 3628. – М.: Изд-во МГУ, 1979. – 26 с.
13. Кравцов Н.И. Сказка как фольклорный жанр // Специфика фольклорных жанров. – М., 1973. – С. 68–84.
14. Мирасов С. Ил өйрәнеүҙә халыҡ әйтеменең әһәмиәте // Башҡорт аймағы. – 1927. – № 3. – 98–101-се б.

15. Мирасов С. 10 йыл эсендә башҡорт халыҡ әҙәбиәтен өйрәнеү, тикшереү юлында ниҙәр эшләнде? // Белем. – 1929. – № 3. – 89–96-сы б.
15а. Башҡорт фольклорының жанрҙарын өйрәнеү тарихынан // Башҡорт фольклоры: Тикшеренеүҙәр һәм материалдар. – Өфө, 1995. – 18 – 27-се б.
16. Поспелов Г.Н. Теория литературы. – М.: ВШ, 1978. –351 с.
17. Пропп В.Я. Фольклор и действительность: избр. ст. / сост., ред., предисл. и примеч. В.Н.Путилова. – М.: Наука, 1976. – 326 с.
18. Путилов Б. Н. Нардные исторические песни. – М. – Л., 1962.
19. Таһиров Н. Башҡорт халҡының байҙығын белеү, тарих, йәғрәфияләренә кәрәкте уҙыктарын йыйнау, ҡомартҡыларын сүптәп табыу һәм туптау өсөн ҡулданма.– Стәрлетамаҡ, 1922. – 40 б.
19а. Тукай Ғ. Әсәрләр: 4 томда / Томды төз. һәм искәр. хәзерләүче Р.Гайнанов. – Казан: Татарстан кит. нәшр., 1975. – 1-че т. – Шигырьләр, поэмалар (1904 – 1908). – 432 б.
20. Хөббитдинова Н. Оло мираҫлы ғүмер: Ғабдулла Амантайҙың тыуыуына 100 йыл // Ватандаш. – 2007. – № 11.
21. Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт халҡының рухи донъяһы. – Өфө: Китап, 2003. – 480 б.
22. Чистов В.К. Введение // Русское народное творчество: учеб. пособие. – М.: ВШ, 1966. – С.5–39.
23. Шағир көндәлегенән // Башҡортостан ҡыҙы. – 2008. – № 1.

***Һорауҙар һәм эш***

1. Бөгөнгө фәндә “Фольклор” терминына ниндәй төшөнсә һалына?

2. Фольклор ғилемендә төр (род), төр күренеше (вид), жанр нисек билдәләнә? “Ҡарһүҙ”, “әйтем” һәм ”ауҙа”ға аңлатма бирегеҙ.

3. Жанрҙар системаһын аңлатығыҙ.

## II БҮЛЕК
## МИФ ҺӘМ МИФОЛОГИЯ ХАҠЫНДА ТӨШӨНСӘ

Кешелек аңының тарихи яҡтан тәүге кәүҙәләнеше (формаһы) хаҡында һүҙ алып барғанда, фәндә иң әүәл *мифты* күҙ уңында тотола (3а, 15). Икенсе төрлө әйткәндә, миф – тәүтормш ырыу ҡоролошо дәүерендә йәшәүсе бабаларыбыҙ аңы: уларҙың донъяны танып белергә тырышыуының, донъяға ҡарашының һәм уға өнәсәбәтенең сағылышы ул.

***а) Мифтың фольклор жанрҙарын фантастика менән тәьмин итеүсе сығанаҡ булғаны***

Бик боронғо бабаларыбыҙ донъяла, ғаләм киңлегендә, кеше ихтыярынан тыш хасил булған һәм барған һәр төрлө күренештәрҙе, даими ҡабатланып торған үҙгәрештәрҙе күҙәтә-күҙәтә, уларҙың сәбәбе, булмышы хаҡында уйланған. Уларҙы фантастик уйҙырма кимәлендәге фараз итеү ярҙамында аңларға, аңлатырға тырышҡандар. Ни өсөн “фантастика кимәлендәге фараз”? Сөнки ул бабаларыбыҙҙың аңы, тәжрибәһе ул күренеш, үҙгәрештәрҙең ысын сәбәбен аңларлыҡ кимәлдә булмаған. Шунлыҡтан улар үҙҙәре өсөн серле тойолған йәнһеҙ күренештәрҙе тирә-йүн тураһындағы барлы-юҡлы төшөнсәләренә, булған ғына тормош тәжрибәләренә таянып, барыһын да үҙҙәренә, тотонған мал-тыуарына, һунар кейектәренә, таныш ҡош-ҡорттоң башҡаларына оҡшатып, йәнләндереп күҙ алдына килтергәндәр.

Мәшһүр “Урал” йырында түбәндәге һүҙҙәргә иғтибар итәйек:

“Арал диңгеҙенән Алтайғаса
Йәйрәп ята башҡорттоң далаһы”.

Шул тиклем ергә ерегеп, ярым күсмә халыҡтарҙың береһе булараҡ, башҡа төрки ҡәрҙәштәребеҙ кеүек үк, башҡорттар ҙа Ай-йондоҙҙар хаҡында мәғлүмәтһеҙ йәшәй алмаған. Ғаләм киңлегендәге был яҡтырткыстарҙы улар, күс юлын ҡыуғанда, үҙҙәре өсөн Тәңре элгән юл күрһәткесе (ориентирҙар) тип белгәндәр, ваҡыт ағышын билдәләү сараһы итеп күргәндәр.

Күк есемдәрен күҙәтә торғас, беҙҙең бабаларыбыҙ иҫәпһеҙ йондоҙҙар араһында сүмескә оҡшап торған ике йондоҙлоҡтоң бәләкәйендәге ярайһы ғына яҡты бер йондоҙҙоң даими рәүештә тик кенә тороуына, бүтәндәренең, күсәргә кейҙерелгән тәгәрмәс кеүек, шуның тирәһендә әйләнеүенә иғтибар иткән. Яҡшы көтөүлек эҙләй-эҙләй күсенгәндә, алыҫ араға сәфәр сыҡҡанда, төнгә ҡалған саҡтарҙа шуны маяҡ (ориентир) итеп, үҙҙәренә кәрәк тарафты табыр булғандар. Шул йондоҙҙо күҙәтә торғас, шуға иғтибар иткәндәр: бәй, ҡаҙыҡҡа бәйләп арҡанланған ат һымаҡ, береһе һарғыл, береһе аҡһыл ике йондоҙ әлеге тик торғаны тирәләй хәрәкәт итә икән дәбаһаң. Ә сүместе хасил

итеүсе алты йондоҙ, ҡаҙыҡҡа арҡанланған ике атты баҫтырыусы бүреләрме ни – арттарынан ҡалышмай. Бына шуларҙы хәбәр итеүсе һөйләмгә *“һымаҡ”, “шикелле”, “моғайын”* кеүек ярҙамсы һүҙҙәрҙе һәм хәбәр һөйкәлешенә *-дыр, -дер* ише ялғауҙар ҡушып, ғаләм күренешен үҙҙәренең көндәлек тормошондағы күренеш менән сағыштырыу юлы менән, уларҙы бер-береһенә оҡшатып, фаразды эшкә еккәндәр. Беҙ хәҙер “Кесе Етегән” тип белгән йондоҙлоҡто улар үҙҙәренең күсмә тормошо, ат тәрбиләү тәжрибәһенән сығып, сағыштырыу алымы менән аңлатҡандар. Юлда йөрөгәндә, ҡырҙа эштә ятҡанда, ят ерҙә, аттар аҙып-туҙып китмәһен өсөн, асыҡ урынға ҡаҙыҡ ҡағып, улдарҙы шунда арҡанлар булғандар. Әгәр эт-ҡош баҫтыра башлаһа, бәйле булғанға, аттар ҡаҙыҡ тирәләй сапҡан. Шуны күҙ уңында тотоп, әлеге йондоҙлоҡтоң тик торғанын – ҡаҙыҡ, дөрөҫөрәге, тимер ҡаҙыҡ (сөнки, ул бик борондан тора, ағас булһа, күптән үк серер ине, йәнәһе), уның тирәһендә әйләнеүсе һарыраҡ йондоҙ – һары ат, ағырағы – буҙ (аҡ) ат *һымаҡ*, арттарынан әйләнеүсе алты йондоҙ уларҙы баҫтырыусы бүре *һымаҡ*, тип уйлағандар.

Телдән-телгә, урындан-урынға, быуындан-быуынға күсә килә, шул аңлатмалағы *һымаҡ* (*шикелле, кеүек*) ярҙамсы һүҙ төшөп ҡала бара. Һөҙөмтәлә, раҫлау башланғысы нығый һәм сағыштырыуға нигеҙләнгән мәғлүмәт ысынбарлыҡтың үҙе кеүек аңлашыла башлаған: әлеге һарыраҡ йондоҙ менән аҡһылырағы – ысындан да, Һары ат менән Буҙат (Аҡбуҙат), улар “арҡанланған ҡаҙыҡ” – Тимерғаҙыҡ, ҡалған алты йондоҙ иһә шул ике толпарҙы баҫтырыусы алты бүренең үҙе тип ҡабул ителгән. Сағыштырыу һәм фарази башланғыс юҡҡа сығыуы була – әлеге мәғлүмәт тарҡау метафора төҫөн ала. Кесе Етегән тураһында бына шулай миф тыуа.

Үҙҙәре изгеләштергән ҡош-ҡорт хаҡына сәбәпте – һөҙөмтә, һөҙөмтәне – сәбәп, тип таныу ҙа боронғо бабаларыбыҙ өсөн бер ни тормаған. Яҙ килеп етеп килгән өсөн ҡара ҡарға көньяҡтан килә. Ә бабаларыбыҙ, ҡарға килгәнгә яҙ етә, тип белгән һәм ошо “метеорологик күҙәтеү тәжрибәһе”н: “Ҡарға килмәй, ҡар китмәй,” – тип, быуындан-быуынға еткергән. Шуға ла инаныста ҡарғаның абруйы ҙур. Изге ҡоштар иҫәпләнһәләр ҙә, аҡҡошҡа, ҡарлуғас менән кәкүк хөрмәтенә байрам тәтемәһә, ҡарға өсөн генә яҙ һайын бар ҡатын-ҡыҙ, төптән ҡуптарылып, “Ҡарға буткаһы” байрамы үткәрер булған.

Әле кешеләр абстракт фекер йөрөтөргә өйрәнмәҫ элек, тәбиғәттәге, йәмғиәттәге төрлө күренештәргә, үҙгәрештәргә нимә сәбәпсе икәненә төшөнә алмаған. Шулай ҙа, фараз итеү юлы менән булһа ла, уларҙы танып белергә, аңларға, аңлатырға тырышҡандар. Хатта, хыялда булһа ла, үҙҙәренең ихтыяждарына яраҡлаштырып, уларға йоғонто яһарға маташҡандар. Шул нигеҙҙә фантастик уйҙырмалар хасил булған. Әле лә йыш ҡына шулай була. Кемдер берәй хәлде күрә йә ишетә лә, уның

сәбәбе, маҡсаты, һөҙөмтәһе хаҡында “ихтимал”, “моғайын”, “шикелле”нән һалдырып, фекер йөрөтә башлай. Унын шул һүҙе телдән-телгә, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа күсә килә ярҙамсы инеш һүҙҙәр төшөп ҡала бара һәм фараз раҫлауға әүерелә. Мәҫәлән, бер уҡыусы, ҡайҙандыр ишетеп: “БДИ” (“ЕГЭ”) тигән нәмәне Америкала уйлап тапкандар ҙа, үҙҙәре унан баш тарткан, ти. Беҙҙә лә ул оҙаҡҡа бармаҫ, моғайын”, – ти. Шул имеш-мимеш телдән-телгә күсә килә, уның “ти”, “моғайын” тигән өлөшө төшөп ҡала һәм ул раҫлау мәғәнәһендә: “Үҙе уйлап тапҡан “ЕГЭ”-нан Америка үҙе үк баш тарткан. Тиҙҙән ул беҙҙә лә бөтәсәк” тигән раҫлау рәүешендә сәйәхәт итә башлаясаҡ. Бына шуның һымаҡ боронғо бабаларыбыҙ ҙа үҙҙәре фараз иткәнде, хыялдағын, теләгән теләктәрен, алдарына килгәндәй, ысынға алып, үҙҙәре үк шуға мөкиббән ышаныр булғандар.

Ғөмүмән, үҙе уйлап сығарған уйҙырманы башҡалар хәҡиҡәт итеп ҡабул итә башлаһа, шул уйҙырма авторы, хәс тә Хужа Насретдин һымаҡ, үҙе лә шуға ышана башлаған хәлдәр тормошта йыш осрай. Хәтерегеҙгә генә төшөрәм. Урамда йыйылышып, гәп һатып ултырған ағай-энене күреп, Хужа ағай: “Нимәгеҙҙе ҡарап ултыраһығыҙ ул?! Ана тегендә бушлай алма тараталар. Бараһалығыҙ!” – тип әйтеүе була – бөтә халыҡ кәрзин, тоҡ тотоп, Хужа күрһәткән яҡҡа йүгерә башлай. Бөтә кеше лә шул яҡҡа киткәс, Хужа: “Әллә ысынлап та бушлай алма тараталармы икән,” – тип, ҙур ғына кәрзин эләктереп, үҙе лә халыҡ артынан төшә. Бына шуның кеүек, хыялды эшкә егеп, фараз итеп, күҙ алдына килтергәнде тора-бара хәҡиҡәт итеп таныуға нигеҙләнгән, уйҙырмаларҙың берәүҙәре фольклорҙың эпик төрҙәренә ҡараған әҫәрҙең сюжетына сәбәпсе булған, икенселәре уларҙа биҙәк хәлендә (орнаменталь рәүештә) генә файҙаланыла башлаған, өсөнсөләре инаныс һәм легенда, инанмыштарға (һуңғылары рус фольклорында “быличка” тип атала), дүртенселәре им-томдарҙа, ғөмүмән, йола фольклорының бөтә төр һәм жанрҙарында, уйын һәм бейеү, биҙәү фольклорында, бишенселәре телмәребеҙҙә[1] киң сағылыш тапҡан.

Мифтар, ваҡиғанан бик, даими рәүештә тотороҡло ҡабатланыусы күренештәрҙе аңлатыу формаһы булараҡ бына шулай формалашҡан. ЮНЕСКО янындағы хөкүмәт эксперттарының ҡарары менән миф хәҙер фольклор рәтенә индерелһә лә, шуныһы хаҡ: ул – үҙаллы жанр түгел Фантастик уйҙырма ярҙамында тамамланған бер бөтөн ваҡиға тасуирландымы, йәғни сюжет хасил булдымы, ундай әҫәр йә мифологик легенда, йә мифологик эпос, йә тылсымлы әкиәт, йә инанмыш булып сығыр булыр.

---

Рустар ҡулланған дарынан: Ахиллесова пята – наиболее уязвимое место у кого-либо, Авгиевы конюшни –сильно засеренное место. Башҡорттар хәйләкәр һәм мут кешегә - юха, ти.; эште тиҙ башҡарыусыны – ен-шайтан кеүек эшләй, ти; бушты бушҡа ауҙарыусыны – елгә еләнләп, ярға быҙаулаусы, ти; ажарланып килеүсе хаҡында, аждаһа шикелле, ти.

***б) Мифтың этиологик мотивлы булғаны һәм инаыстар менән бәйләнештә торғаны***

Бар нәмәне лә йәнләндереп күҙ алдына килтереү, йәнләндереп аңлатыу фәндә *анимистик ҡараш* тип атала. Шул ҡараш буйынса, һәр нәмәне кешегә, уның ҡыланышына, холоҡ-фиғеленә оҡшатыуға нигеҙләнгәндәре – *антоcommon* *анторопоморф ҡараштар* тыуыуға, *антропогоник мифтар* барлыҡҡа килеүгә сәбәп булған. Бөтәһен дә ҡош-ҡортҡа оҡшатыу – *зооморф ҡараштар* һәм *ҡош-ҡорт мифы (зооморф миф)* хасил булыуға килтергән. Ғаләм киңлегендәге хәлдәрҙе аңлатҡандарынан (ә унда тәүге ике ҡараш та үҙенекен иткән) *космогоник ҡараштар* һәм *космогоник (соляр, лунар, астраль) мифтар* тыуған. Тимәк, ***аңлатмалылыҡ,*** *йәғни* ***этиологик мотив*** *мифтарҙың төп билдәһе.*

Шулай итеп, миф – иң әүәл боронғоларҙың донъяға ҡарашын, донъя хаҡындағы фәнни булмағантөшөнсәләре системаһын аңлата (3, 150 – 152; 1, 150 – 152). Шуға күрә лә ул лексик, фразеологик берәмектәр рәүешендә көндәлек тормошобоҙҙа ҡәҙимге телмәребеҙҙә лә еңел ҡулланыла (дауыл менән, ел менән атҡарҙым; Айҙай балҡып, Көндәй көлөп; йылан мөгөҙө ингән; тау итәге, тау түше, тау бите, тау һырты (арҡа), тау башы, тау түбәһе; урман ҡулы, ялан ҡолағы, ҡар күҙе), фольклорҙың бөтә төр һәм жанрҙарына ла, шул иҫәптән, йола фольклорына ла (им-том, эйәләргә ышаныу, ун ике йылдан торған мөсәл һ.б.), уйын фольклорына ла (“Ҡыйғый уйыны”, “Мәскәй әбей уйыны”, “Сихырсы уйыны”, әйтешмәктәр), бейеү фольклорына ла (“Сыңғрау торна”, “Ҡара юрға”), халыҡтың биҙәү-биҙәнеү сәнғәтенә лә (Ялан-Ҡатай ҡатын-ҡыҙы кейгән күлдәккә стилләштерелгән һыу тулҡыны, балыҡ тирмәләр, ҡоштар, Ҡояш, тыуып һәм бөтөп барыусы Ай һүрәттәре аша донъя моделен, кеше яҙмышын аңлатыу; ҡусҡар биҙәк, кәкерсәктәр, үҫемлек орнаменты һ.б.), хатта ки йорт-ҡура төҙөү сәнғәтенә лә (халыҡ архитектураһына ла) айырым образдар, һүрәтләү саралары (стилләштерелгән күгәрсен, аҡҡош һындары, Ай, Ҡояш, йондоҙ), мотив, сюжет, хатта биҙәк (йәйғорҙо, тәкә башын хәтерләтеүсе биҙәктәр, тормош ағасын кәүҙәләндереүсе терәүҙәр), йолалар рәүешендә булһа ла (нигеҙ ҡороу өсөн тыныс урын табыу, нигеҙ аҫтына тәңкә һалыу, өрлөктө аҡ таҫтамал менән күтәреү, өрлөк башы аҫтына көмөш тәңкә һалыу һ.б.) үтеп инә.

***в) Мифтың тәғәйенләнеше һәм мәғәнәһе хаҡында***

Тәғәйенләнеше буйынса, мифтарҙы: *1) йола атҡарыуға бәйле мифтарға, 2) килеп сығышты аңлатыусы мифтарға, 3) культ мифтарына* (мәҫәлән, Яхве менән Израилдың илаһи бәйләнешен раҫлаусы мифтар шундайҙарға инә), эсхотологик (йәғни заман ахыры хаҡындағы) һ.б. мифтарға бүлеп йөрөтәләр (4, 7 – 13). Шулай итеп, аңлатмалылыҡ – миф өсөн тәғәйенләнеш рәүешендәге берҙән-бер билдә булмауы аңлашыла.

Әммә был әйтелгән, дөйөм алғанда, миф өсөн иң мөһим билдә булыуын инҡар итеүҙе аңлатмай. *Бынығы – беренсенән.*

*Икенсенән,* донъя фәнендә ҡабул ителгән уртаҡ терминды йыш ҡына “башҡорт халҡы” тигән һүҙбәйләнешкә һалынған төшөнсәнең синонимы рәүешендә ҡулланылған “Ете ырыу”ға ингән ҡайһы бер ҡәүемдәрҙең йәнле телендә, йәғни тар мөхиттә булһа ла, әммә киң мәғәнәлә ҡулланылған һәм башҡорт фольклорсыларының тәүге быуыны ихлас ҡабул иткән терминдың мәғәнәһен тарайтып, бөтә кешелек ҡулланған “миф” терминын “миллиләштереү” ғилми яҡтан да, мораль йәһәттән дә үҙен аҡламай. Бындай “яңылыҡ”ҡа ихтыяж да юҡ. Уның бары буталыштар тыуҙырыуға ғына булышыуы ихтимал. Дөрөҫ, халыҡ–ара фәндә ҡабул ителгән “миф” терминын милли лексик берәмек менән алмаштырыу хәлдәре башҡа тарафтарҙа ла күҙәтелгеләй. Мәҫәлән, саха (яҡут) ғалимдары уны *“өс-һомох”* тигән милли термин менән билдәләгән (7). Ләкин, беҙгә мәғлүм булғанынса, уларҙа был терминдың ниндәйҙер икенсе төшөнсәне аңлатҡан исемде, тартып алып, миф төшөнсәһен биреүсегә яһалма рәүештә йәбештереү менән һис кенә лә уртаҡлығы юҡ: ул башкөллө үҙаллы. Төрөк ғилемендә иһә “миф”ты, ошо телдең эске ҡанунына яраҡлаштырып, “mit” (мит) тип, ә мифҡа нигеҙләнгән легенданы “efsane” (әфсанә) тип атағандар (5, 381, 396).Бындайыраҡ хәл, бәлки, башҡа тарафтарҙа ла күҙәтелә торғандыр. Ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, татар, төркмән, уйғыр, шулай уҡ славян, көнбайыш фольклористикаһында һәм, ғөмүмән, гуманитар фәндең бүтән тармаҡтарында ла (фәлсәфә, әҙәбиәт, сәнғәт, тел ғилемендә һ.б.), бығаса башҡорт фольклор ғилемендә лә миф, халыҡ-ара ҡабул ителгәнеШуға күрә лә, Н.Таһиров, Ғ.Вилданов, С.Мираҫтарҙан айырмалы рәүештә, “ҡарһүҙ” (“ҡара һүҙ”) термины аңлатҡан төшөнсәне тарайтып, уға “миф” мәғәнәһен генә һалыуға (7, 176–184) ихтыяж юҡ. Әгәр инде халыҡ-ара ҡабул ителгән *“миф”* терминына, һаһа (яҡут) һәм төрөктәрҙәге кеүек, йөкмәткеһе буйынса эквивалент булырҙай саф башҡортса термин табылһа, ул саҡта, бындай ынтылышты хупларға булыр ине.

Һәр төрлө һүҙлектәр “миф” – “иртәк” (русса – “сказание”), “риүәйәт” (русса – “предание”), дөрөҫөрәге “легенда” мәғәнәһендәге “mythos” тигән грек һүҙенән алынған термин, тип аңлатма бирә[1].

---

[1] Но уже в XX в. возродилась тенденция полисемантизации термина «миф». В современной культуре термин «миф» функционирует весьма и весьма многозначно, имеет множество смысловых ттенков, воистину он «герой с тысячью лиц». Под мифом понимают не только древнее представлене о мире, результат первобытного духовного производства. Миф — это:

♦любое неистинное, ложное знание, субъективно-ценностное представление, несущее себе момент условности, невысказанности, относительности;

♦преднамеренный обман, ложное или искаженное пред-ставление о действительности;

♦заблуждение, в котором тесно переплетаются истинное и ложное, реальное и воображаемое;

♦то в сознании, что противоречит личному опыту, не полу-чило (или не может, не хочет

Бындай фекерҙең нығыныуына бабаларыбыҙҙың хыялға нигеҙләнгән фаразы һәм уның миф, легенда, риүәйәт тыуыуына сәбәпсе булыуы хаҡында К.Маркс әйткәнде бер яҡлы аңлау һәм аңлатыу ҙа булышты. Пролетариат өсөн донъя авторитеты булған был аҡыл эйәһе нимә тигән һуң? Ул былай тигән (фекерен бутамаҫ өсөн, инглиз теленән рус теленә әйләндерелгән варианты буйынса килтерәлә):"Воображение – это великий дар, так много содействовавший развитию человечества, начало теперь создавать неписанную литературу мифов, легенд и преданий" (2, 270–271). Был һүҙҙәр быҒаса бер яҡлы аңлатылды. Быға, *беренсенән,* үҙ сиратында синтаксисты "үтә яҡшы белеү" ныҡ булышлыҡ иткән, булһа кәрәк. Маркстан алынған цитатала *"легенда"* һәм *"предание (риүәйәт)"* терминдарарынан өтөр менән генә айырылғас, *"миф"* һүҙе грамматик яҡтан уларҙың тиңдәше, йәғни улар кеүек үк бер үк һөйләмдең тиң киҫәге функцияһын үтәй тигән фекер тыуғандыр, моғайын. Ә унан, "легенда" һәм "предание" ("риүәйәт") терминдары сәсмә фольклорҙың үҙаллы жанрҙарын белдергәс, "миф" һүҙе лә үҙаллы жанрҙы аңлатырға тейеш, тип һығымта яһауы, әлбиттә, ҡыйын булмағандыр. Шулай ҙа мифтың ни икәнен яҡшы белгән ғалимдар уны фольклор, әҙәбиәт, сәнғәт, фәлсәфә ғилемендә ижад төрө, жанр мәғәнәһендә ҡулланмай. *Икенсенән,* Маркстың миф хаҡында әйткәне, миф һәм миф ижад итеү дәүере күптән үткән заманға ғына хас мәҙәни күренеш, тип ҡабул ителгән. Бындай ҡараш менән килешмәүселәр "мәҙәни-тарихи барышта (процеста) миф ижад итеү цикл-цикл рәүешендә ҡабат-ҡабат ҡабатлана" (Дж. Вико, Ф. Ницше), иртәме, һуңме кешелек мифҡа кире әйләнеп ҡайтасаҡ, "беҙ мифтан килеп сыҡҡанбыҙ, мифҡа кире ҡайтасаҡбыҙ", тип иҫәпләй. Әлегә иһә кеше аңы эшмәкәрлегенең универсаль моменты булараҡ "мәңге миф ижад итеү" тәғлимәте перспективалы иҫәпләнә (13а, 14 - 15).

Шулай итеп, "миф" һүҙенә "һүҙ" мәғәнәһендә гректың "logos" һүҙе килеп ялғанған. Тимәк, башҡалары бергә булды ни ҙә айырым

---

получить) научно-доказатель-ного обоснования;

♦ то, с чем апеллируют не к разуму, мышлению, рассудку, здравому смыслу, а к чувствам, эмоциям (такими являют-ся, например, многие пропагандистско-идеологические утверждения, лозунги, призывы, стереотипы массового сознания);

♦ утверждения, выражающие не знания или ценности, а ве-ру во что-либо, свод убеждений, сюжетно оформленную догматическую основу религии, некую религиозную сис-тему;

♦ легенды, предания, сказки, фольклор и др.;

♦ используемые в искусстве фантастические, воображаемые образы, продукты нереалистического художественно-образного преломления действительности, часто являющиеся продуктами функциональной и идейной переработки древних мифов;

♦ догматизированное или сакрализованное знание, результаты деятельности воображения, порождаемые определен-ной ситуацией и предназначенные для какой-то цели;

♦ определенный тип философских воззрений и т.д. (3а, 13 - 14).

булды ни – мифтың бәйән ителмәле әҫәр генә булыуы шарт түгел, ул айырым һүҙҙән һәм һүҙбәйләнештәрҙән генә лә торорға мөмкин.

*г) Мифтың поэтика сараһына әүрелгәне*

Мифҡа аңлатма биргәндә, энциклопедик һүҙлектәр ҙә, фәлсәфә һүҙлектәре лә, башҡаһы ла, иң әүәл уның боронғо бабаларыбыҙҙың илаһи заттар, ҡаһармандар, демондар, рухтар хаҡында фантастик күҙаллауҙарын сағылдырыуына иғтибар итәләр.

Хәҙерге ҡулланылышта “миф” һүҙе күсмә мәғәнәгә лә эйә. Ындай осраҡта улар кеше ышанмаҫ һәр төрлө уйҙырмаларға ҡарата ироник мәғәнәлә ҡулланыла.

Боронғо бабаларыбыҙҙың донъяны танып белергә ынтылыуы, донъяға ҡарашының фантазияға таянып фекерләүгә ҡоролоуы һөҙөмтәһендә, мифты “нигеҙ ташы һәм арсеналы”( Маркс) итеп файҙаланған легендалар, тылсымлы әкиәттәр, “Урал батыр”, “Аҡбуҙат”, “Минәй батыр менән Шүлгән батша” ише мифологик эпостар хасил булған. Тимәк, миф менән сағыштырғанда, уны файҙаланған, уға нигеҙләнеп тыуған легенда, эпос, әкиәттәр, инанмыштар – икенсел күренеш. Фольклорҙың бейеү, уйын, биҙәү сәнғәте кеүек төрҙәре хаҡында ла шуны уҡ әйтергә мөмкин.

Донъя алға барған һайын, кеше аңы мифологик фекерләүҙән ҡотола барған. Унда ысынбарлыҡ күренештәрен эстетик яҡтан үҙләштереү тәжрибәһе туплана тора. Шул арҡала, ҡасандыр, аҡыл, тәжрибә һәм күнекмә етмәгән дәүерҙәрҙә, теге йәки был күренештәрҙе, бары фантастик фаразға нигеҙләнеп кенә, аңлатыу сараһы рәүешендә тыуған, йәғни башта саф утилитар тәғәйенләнешле булған миф та тора-бара саф эстетик күренеш кеүек ҡабул ителә башлай. Легенда, эпос, әкиәттәрҙәге миф башланғысы хәҙер инде художестволылыҡ сараһына, поэтика күренешенә әүрелә. Ошо әйтелгәндәр ҙә – “ҡарһүҙ”гә һалынған йөкмәтке “миф” терминына һалынған төшөнсәнән күпкә киңерәк икәненә дәлил.

Иң ахырҙа шуны хәтергә төшөрөп ҡуяйыҡ: мифтар системаһы ла, мифтарҙың күмәгеһен бергә һәм уларҙы система булараҡ өйрәнеүсе фәнде *“мифология”* тип атайҙар.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Восточно-славянский фольклор: Словарь научной и народной терминологии. – Минск: Навука і тэхніка, 1993. – 438 с.
2. Маркс К., Энгельс Ф. Об искусстве. – М.: Искусство, 1957. – Т. 1. – С. 270–271.
3. Мифы народов мира. – М.: Советская энциклопедия, 1987. – Т. 1. – 671 с.

3а. Найдыш В.М. Мифология: Учебное пособие по общим курсам и специальным курсам по философии для студ. вузов / В.М. Найдыш. - М.: КНОРУС, 2010. – 432 с.
4. Самуэль Хук. Мифология Ближнего Востока. – М.: Центрполиграф, 2005.– С.7–13.
5. Turk Dunyasi Edebiyati: Turk Dunyasi Edebiyat KavramlarI ve Terminleri Ansiklopedik Sozlogu. – Ankara: FKDTYK Ataturk Ruktur MerkezI, 2004. –Cilt. 4. –381-се, 396-сы б.
6. Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт халҡының рухи донъяһы / Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө: Китап, 2003. – 480 б.
7. Якутские мифы – Саха өс–һомохторо / Изд.подготовил Н.А. Алексе ев; отв. ред. В.В.Илларионов, Р.И.Бравина. – Новосибирск: Наука, 2004.

***Һорауҙар һәм эш***

1. Миф һәм мифология төшөнсәләренә ҡыҫҡаса аңлатма биреге҈.
2. Донъя мифологияһынан үҙегеҙ белгән миҫалдарҙы хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ ҙә уларҙы башҡорт мифтары менән сағыштырып ҡарағыҙ; уртаҡлыҡтар, оҡшашлыҡтар булыу-булмауын аңлатығыҙ.
3. Көндәлек тормошта, ҡәҙимге телмәрҙә мифтың урыны һәм үтәгән функцияһы хаҡында әңгәмә ҡороғоҙ.

# III БҮЛЕК
# ИНАНМЫШТАР

Легенда, риүәйәт, хәтирә һәм көләмәстәр кеүек үк әкиәттәр рәтенә инмәгән ҡарһүҙҙәр араһында *демонологик заттар*[1] менән осрашыуҙар хаҡында *меморат йә фабулат*[2] рәүешендә бәйән итеүсе сәсмә әҫәрҙәр ҙә бар. Уларҙың тәүгеләре рус фольклор ғилемендә *“былича”*, икенселәрен *“бывальщина”* тип атау ғәҙәткә ингән. Сәғит Мирасовтың ундай әҫәрҙәрҙе 1929 йылда *“хөрафи әкиәттәр”* тип атағаны мәғлүм. Һәр хәлдә, рус фольклор ғилемендә “былички” тип аталырҙай әҫәрҙәрҙе Арсланбәк Әлимғоловтың “Башкирские мифологические рассказы” тип атағанын ул “Башҡорт хөрафи әкиәттәре” тип тәржемә иткән (2, 10–12; 24, 90). Ф.А. Нәҙершинаның тырышлығы менән XX быуаттың 80 йылдары башынан улар урынына башта *“хөрәфәтле хикәйә”*, тора-бара “хөрәфәти хикәйә” термины урын алды (25). *“Хөрәфәт”* һүҙе ғәрәптең *“хөрәфәтүн” “юк-барға инаныу”, “дини инаныу”* тигәнде аңлата. Уның шулай уҡ *“әкиәт”, “мәҫәл”, “легенда”, “туҙға яҙылмаған”,* йәғни *“көлдөрөк” (“небылица”)* тигән мәғәнәләре лә бар. Ғәрәптең *“хура’афитүн”* тигәнен беҙ *“юк-барға ышаныусы”, “әкиәти”, “мәҫәлсә” (”баснословный”), “легендар”* (3, 271) тип аңлайбыҙ. Шулай итеп, ғилми әйләнешкә индерелгән башҡортса аталышында һүҙ барған жанрҙың төп асылы сағылған. Әммә бөгөнгө реалиялар кимәленән ҡарағанда, дингә һәр төрлө хөрәфәткә ҡараш үҙгәреүен иҫәпкә алғанда, заманында шартлы рәүештә ҡулланылған “хөрәфәти хикәйә” термины хәҙерге шарттарҙа беҙҙе ҡәнәғәтләндерә алмай. Ул терминда һәр төрлө хөрәфәткә, дингә инаныуға коммунистик идеолгия талап иткән “һуғышсан атеистик” мөнәсәбәт тә сағылыш алды. Хәйер, эш унда ғына ла түгел. Ҡағиҙә буларак, ижад төрөн, жанрҙы билдәләүсе термин бер генә һүҙҙән тора, ике-өс һәм унан да күберәк һүҙҙәр уларҙы, йә форма, йә тема, йә образдар системаһы, йә башҡа билдәләре буйынса төркөмләгәндә, ҡулланыла (Мәҫәлән, “топонимик риүәйәттәр”, “тылсымлы әкиәттәр”, “хайуандар тураһындағы әкиәттәр”, “героик эпостар”). Һүҙ барған жанр хөрәфәти инаныстар тыуҙырған ҡарһүҙҙәрҙән тора. Шуны иҫәпкә алып, *демонологик заттар* барлығына инаныуҙарға нигеҙләнгән һәм улар

[1] Демонология – 1) Комплекс мифологических представлений и верований о нечистой силе (злых духах, чертях и т.п.), принадлежащий к “отрицательному”, “нездешному”, потустороннему миру и взаимодействущей с человеком. 2) Совокупность произведений, точно отражающих эти представления. Источниками для изучения демонологии служат былички, бывалъщины (13, 56–57).

[2] Меморат (*лат.*memoria)– устный рассказ, передающий собственные воспоминания о фактах из его жизни, т.е. о событиях, участником или очевидцем которых был сам рассказчик. Фабулат ( *лат.* Fabula – повествование) – краткий (обычно одноэпизодный) устный рассказ, основанный на реальных событиях и жизненных наблюдениях, но не являющийся непосредственным их отображением… Фабулат – основной вид повествования в области несказочной прозы. К наиболее распространенным относятся фабулаты, непосредственно связанные с народными верованиями (13, 138, 272).

менән осрашыуҙар хаҡында *меморат йә фабулат* рәүешендә бәйән ителеүсе сәсмә әҫәрҙәрҙең жанрына ҡарата быҒаса ҡулланылҒан идеологик мөнәсәбәт аңҡып торҒан тасуири термин урынына "*инанмыш*" терминын ҡулланыу ҡулайлыраҡ.

### 1. Ҡарһүҙҙәр системаһында инанмыштарҙың урыны һәм уларҙың ҡайһы бер жанр үҙенсәлектәре

Меморат рәүешендәге инанмыштар – серле сихри заттар менән осрашҡан йә кемдәрҙеңдер шул демонолгик заттар менән бәрелешенә шаһит кешенең хәтирәһенән ғибәрәт. Бындай инанмыштар беренсе заттан бәйән ителә.

Фабулат хәлендәге инанмыштар шаһитлығы онотолған демонологик хикәйә рәүешендә өсөнсө заттан һөйләнә.

Әле әйтелгәндән аңлашылыуынса, демонологик заттар менән ниндәй генә мөнәсәбәткә инмәһен, улар арҡаһында ниндәй генә ҡыйын хәлгә тарымаһын, уларҙан ниндәй генә зыян күрмәһен, ҡаһарман ролен дә, бәйән итеүсе ролен дә бер үк кеше атҡарһа, ундай меморат-инанмыштарҙың финалы фажиғә менән тамамланмай. Ә фабулат хәлендәге инанмыш ҡаһарманының сихри заттар менән бәрелеше, ғәҙәттә, уның фажиғәһе менән тамамлана. Сихри заттар менән башҡаларҙың осрашыуына шаһит булған кеше һөйләгән меморат-инанмыштарҙың иһә берәүҙәренең финалы – ҡаһарманы ролен үҙе атҡарған кеше һөйләгән меморат-инанмыштарҙыҡынса, икенселәренеке фабулат-инанмыштарҙыҡынса булырға мөмкин. Һәр осраҡта ла, миф, легенда, риүәйәттәр һәм хәтирәләр кеүек үк, инанмыштар тыңлаусыны ышандырыуға иҫәп тота. Әммә уларҙан айырмалы рәүештә, танып белеү башланғысына ҡарағанда, уларҙың идея тәғәйенләнеше (установкаһы) тыңлаусыларҙы шөбһәләндереп, хәүефкә һалып һәм ҡурҡыта биреп, иҫкәртеүҙе (сихри көстәр менән осрашыу тәжрибәһе менән уртаҡлашыуҙы) маҡсат итә. Был яҡтан бигерәк тә бала-саға аудиторияһында һөйләнгәндәре ныҡ айырылып тороусан. Уларға тәғәйен инанмыштарҙың үҙәгендәге ваҡиғаның үҙен бәйән итмәйенсә, уларға хас бапаҡ, биш мыйыҡ, ен, шайтан, эйәләр кеүек персонаждарҙы телгә алыу ҙа шундай уҡ маҡсатҡа ярап ҡала.

Миф, легенда, риүәйәт һәм хәтирәләрҙә оптимистик рухҡа урын була. Ә инанмыштар, пессимистик тойғо тыуҙырыусан.

Бер инанмыш, ғәҙәттә, сихри заттар менән бер осрашыуҙы ғына бә-ән итә. Шуға күрә уларҙың сюжеты киң итеп йәйелеп китмәүсән. Бына ҡәҙимге бер фабулат-инанмыш: "Бер кеше йылға аша сығып барһа, баҫмаҡта ултырған һәләк матур ҡыҙҙы тап итә. Ул сәсен тарап ултырған була. Кешене күреү менән, ултырған еренән йүгереп төшөп китә. Ә теге уның тарағын алып ҡайта. Кис булғас, һыу ҡыҙы, был кешенең өйөнә килеп, тәҙрә аша: "Тарағымды би-ир", – тип

һорай икән. Ә үҙенең өҫтөнән шыбырҙап һыу ағып тора, ти. Шунан кеше бер аҙ ҡурҡа төшә лә, тәҙрәнән тараҡты ташлай. Теге һыу ҡыҙы шунда уҡ йылғаға кире ҡайта (25, № 26). Күренеүенсә, бында ҡыҫҡа ваҡытлы бер ситуация һәм шуның һөҙөмтәһе генә бирелә. Тотош ваҡиға пауза менән (һыу ҡыҙының тарағын алған мәлдән кискә тиклем ваҡиға туҡталып тора) ярты көн эсендә бара.

Бер үк кешегә төрлө ваҡытта, төрлө шарттарҙа бер үк демонологик зат менән осрашырға тура килһә, ундай саҡта тотош инанмыштар шәлкеме (циклы, сылбыры) хасил була. Баймаҡ районындағы Һаҡмар Нуғайы ауылында таралған “Зәкәү биреһе” инанмышы ана шундайҙан. Уның сюжеты “Зәкәүҙең (Зекриәнең) мосолман биреһен эйәләштергәне”, “Бире менән Зәкәүҙең араһы боҙолғаны”, “Зәкәүҙең йортонан биреһен ҡыуам тигәнсе, бер мулланың үҙе ҡыуылғаны”, “Зәкәүҙең нигеҙ алыштырғаны”, “Зәкәү ҡалдырып киткән йорттоң тынғыһыҙ булғаны” тип аталмалы инанмыштар сылбырынан тора.

Бер генә тематик мотивҡа ҡоролоп, ҡыҫҡа ваҡытта булып уҙған ваҡиғаны ғына эсенә алһа ла, инанмыштар сюжет бөтөнлөгөнә ирешеүсән. “Һыу ҡыҙының тарағын урлау” мотивына нигеҙләнгән “Һыуһылыу” инанмышының сюжеты ярты көн эсендә барған ваҡиғаны ғына иңләгән. Әммә унан беҙ һыу ҡыҙының булмышы хаҡында ярайһы ғына мәғлүмәт алып өлгөрәбеҙ. Уның үтенесе үтәлмәгән хәлдә ни булыуы ихтимал икәнен дә төҫмөрләйбеҙ. Инанмыш, һыу ҡыҙы антропоморф – зат, тип таныштыра. Уның күрер күҙгә бик тә матур булыуын да беләбеҙ. Шулай булһа ла, был заттың, ҡәҙимге кешегә оҡшамауына ла төшөнәбеҙ. Ни өсөн тигәндә, өҫтөнән шыбырҙап һыу ҡойолоп тора, кешене яҡын ебәрмәй, уны күреү менән һыуға сума. Миф, легенда, риүәйәттәр өсөн этиологик мотив жанр хасил итешеүсе композицион сара булһа, инамыштар ундай мотивтан азат булыуҙары менән айырылып торалар. Уның ҡарауы, уларҙы мәжүсилеккә хас хөрәфәти ҡараш, ислам менән бәйле инаныстарһыҙ күҙ алдына килтереү мөмкин дә түгел.

Жанр булараҡ, инанмыштар тотороҡло түгел. Ваҡыт факторы уларҙың яҙмышында ҙур роль уйнай. Заманалар үтә килә, меморат характерындағы инанмыштар, телдән-телгә, урындан-урынға күсә килә, фабула-инанмыштар рәтен тулыландыра барырға, ҡасандыр фабула-инанмыш булғандары легендалар рәтенә күсә барырға мөмкин. Сюжеты төп ҡаһармандың мәскәй, убыр, ен-бәрей, юха ҡатнашлығында үҫтерелгән инанмыштар хатта тылсымлы әкиәттәр рәтен тулыландырыуы ихтимал. “Убыр әбей” (АТ 313: тылсымлы әйберҙәр ташлай-ташлай, убырҙан ҡотолоу), “Убырлы ҡәйнә менән бахыр килен” (АТ –), “Юха” (АТ –) әкиәттәре шулай хасил булған (6, №№ 62, 67, 90).

Инанмыштар айырым тематик мотив рәүешендә легенда һәм эпос сюжеты составында ҡулланылыуы ихтимал. В.И. Даль бәйән иткән донъя боларткыс сихри зат хаҡындағы легенданың сюжеты “Һунарсы егеттең әүермәнде еңгәне” мотивына ҡоролған (17, 175). Ошо уҡ тематик мотив “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” иртәгенең Т.С. Беляев тарафынан әҙәбиләштерелгән версияһында ла урын тапҡан. Айырма шунда ғына: В.И. Даль версияһы буйынса, әүермәндең уҡ алыр урынын һунарсы үҙе таба, Т.С. Беляевта уны изге Хызыр-Ильясты хәтерләткән әүлиә әйтә. Әүермәнде, был версия буйынса, яңғыҙ һунарсы түгел, ике һунарсы – Ҡарабай менән уның улы Ҡуҙыйкүрпәс эҙәрләй. Әүлиәнең монологы теҙмә телмәр рәүешендә бирелгән (18, 259):

Уғығыҙҙы юҡҡа ғына атаһығыҙ,
Барыбер ҙә уны еңә алмаҫһығыҙ;
Уның тәненә уҡ үтмәй, аңлаһағыҙ.
……………………………………………
Ә шулай ҙа уны еңеү мөмкин һеҙгә:
Уң аяғы табанында йәне булыр,
Шул еренә сабығыҙ һеҙ уның өҙә! (5, 69)

“Күл эйәһе” тигән инанмыш, ғәҙәттә, “Арҡан менән күлде аҫып ҡуйыу менән янау” (АТ 1045), “Йүгереүҙә ярышҡан кеше булып, дейеү бәрейен ҡуян ҡыуырға мәжбүр иткән” (АТ 1072), “Олатайым менән көрәштерәм, тип, айыу менән бил һынаштырған” (АТ 1070) һәм “Атты бот араһына ҡыҫтырып йөрөтәм, тип, уны менеп сапҡан” (АТ 1082) тигән тематик мотивтарҙан ҡоршалған сюжетҡа нигеҙләнгән “Әбйәлил” (7, №61) ише юмористик әкиәттәрҙе хәтерләтә. Әммә үҙе ҡәҙимге меморат-инанмыш кеүек беренсе заттан һөйләнгән. Ҡәҙимге инанмыштарҙағыса, тәүҙә уларға сихри зат менән осрашыу урыны, ваҡыты асыҡлана. Урыны конрет ерлекле. Ул – хикәйәсенең ауылдарына яҡын күл буйы. Ваҡыты – уның ҡармаҡ һалып ултырған сағы. Сихри зат булған күл эйәһенең пәйҙә булыуы ла, ҡәҙимге инанмыштарса, көтмәгәндә була. Уның көтмәгәндә пәйҙә булыуы хаҡындағы төшөнсәне хикәйәсе “ҡапыл”, “шул саҡ”, “кинәт”, “көтмәгәндә” кеүек һүҙҙәрҙең береһен дә ҡыҫтырмайынса, интонация менән һәм “бит” һүҙе ярҙамыда биргән дә ҡуйған: “… ҡармаҡ һалып ултырам – күлдең эйәһе килеп сыҡты бит миңә”.

Ваҡиғаның артабанғы үҫеше диалогтар аша бирелгән:

– Һин нишләп минең күлемдә ҡармаҡ һалып ултыраһың? – ти [күл эйәһе].

– Балыҡ тотоп ултырам.

– Һиңә кем рөхсәт итте?

– Берәү ҙә ҡушманы.

– Давай! Алыш бармы, көрәш бармы? – ти. Мин әйтәм:

– Алыш та бар, көрәш тә бар!

Ваҡиғаның артабан ниндәй йүнәлештә үҫешен диалог ярҙамында билдәләү, ремарканың даими булмауы ваҡиғаның йылдам үҫеүе эффектын бирә. Ә инде хикәйәсенең һыу эйәһенә ҡырҡа-ҡырҡа ғына яуап биреүе сихри зат алдында унын ҡаушап ҡалмауы, үҙ дәрәжәһен белеп эш итеүсе кеше булыуы хаҡында фекер уята. Артабанғы эпизод был фекерҙе нығыта ғына. Күл эйәһенең шарты буйынса, унын алтмыш ҡолас бәйәһен күтәреп күлде бер урап сығырға кәрәк була. Бейәнең хужаһы уны ысынлап та елкәһенә һалып йөрөп килһә, беҙҙең герой уны менә лә саба: йәнәһе, "бото араһына ҡыҫтырып ҡына йөрөтә".

Әкиәттә геройға тематик мотивтарҙа билдәләнгән бүтән "һынауҙарҙы"ла уңышлы үтергә насип булһа, инанмыш сюжеты шул "ат күтәреш" мотивы менән тамамлана.

Әкиәт геройы шартты үтәһә, ҡағиҙә буларак, бермә-бер бүләкләнә. "Әбйәлил" тибындағы әкиәттә лә был ҡанун күҙәтелә: ҡаһарман иң ахырҙа күл эйәһенән бер тоҡ алтын алыуға ирешә. Шул әкиәт сюжетын хасил итеүсе тематик мотивтарҙың бер өлөшө менән генә оҡшаш булһа ла, формаль яҡтан ҡарағанда, инанмышта ла "бүләк алыу" мотивы күҙәтелә. Ни өсөн "формаль яҡтан ҡарағанда", сөнки һүҙ барған инамышта күл эйәһе үҙ ҡулы менән бүләк бирмәй. Унын был ғәмәлде атҡарыр хәле лә юҡ. Ни өсөн тигәндә, кешенең алтмыш ҡолас ала бейәне "бот араһына ҡыҫтырып ҡына күтәргән"ен күргәс, ҡото осоп, "күлгә һикереп төшөп" ҡаса. Аҫтындағы аты хикәйәсегә тора ла ҡала. Һәм ул үҙенең инанмыш рәүешендәге "хәтирә"һен: "Атыбыҙ юҡ ине, шунан атлы булып киттек инде", – тип тамамлай.

Инанмышсы юрый таныш әкиәт сюжетын файҙаланғанмылыр-юҡмылыр, уныһын хәҙер асыҡлау ауыр. Әммә шуныһы хаҡ: меморат тибындағы был инанмышта художестволы уйҙырма үҙенекен итә. Инанмыштың юмористик әкиәт менән сюжетташлығы, сихри заттың кеше аҡылы алдында көсһөҙ булып ҡалыуы, унан еңелеүе үк уға юмор төҫө бирә. Ни тиклем генә был инанмыш әкиәтте хәтерләтмәһен, әгәр ул тормошта ысынлап та булғанды меморат рәүешендә хәтерләү һөҙөмтәһе булһа, ул саҡта, ғөмүмән, ҡайһы бер инанмыштың әкиәт сюжеты менән уртаҡлығы хаҡында фекер йөрөтөргә булыр ине.

## 2. Тәңреләр, раббылар һәм эйәләр

Башҡа төрки халыҡтары һымаҡ уҡ боронғо башҡорттар ҙа күк илаһына – Тәңрегә табынғандар. "Тәңре"не берәүҙәр "Dingir" ("илаһ(ым)", "божество", "күк") тигән сүмәр (шумер) һүҙенән, икенселәр "Tien"("күк, "илаһ(ым)") тигән ҡытай һүҙенән алынған тип беләә. Күк төрөктәренең ҡурсалаусыһы Күк тәңре булған. Зәңгәр монголдар, империябыҙ "Мәңгелек зәңгәр күктән" көс ала, тип

иҫәпләгәндәр. Ер тәңреһен (Этуген Эхены) таныған монголдарҙағы кеүек үк, башҡорттарҙа ла Ер-һыу культы көслө була.

Монголдарҙа, бүрәттәрҙә бөтә тәңреләргә, шул иҫәптән Мунхэ-Тәңренән дә өҫтөн торған тағы бер тәңре Атаа (Атага)-Тәңре бар тип инаныу ҙа булған. Шаманлыҡ традицияларын һаҡлаған бүрәт, монголдарҙың ҡарашынса, яуыз тәңре лә уға буйһонған. Урхон-Инәсай (Орхон-Енисей) руник яҙмалары (VI–VIII б.), ҡумыҡ, ҡарасәй, балҡар (малҡар) сығанаҡтары Тәңрене Ер, Күк кеүек иң бөйөк башланғыстарҙы, бөтә тереклекте бар ҡылған иҫ киткес ҡөҙрәтле һәм ҡеүәтле баһадир сифатлы илаһ рәүешендә тасуирлай (1, 551).

Урхон яҙмаларында (уның беренсеһе 552–630 йылдарҙа, икенсеһе 681–744 йылдарҙа ташҡа ырылған) бына шундай һүҙҙәр бар:

Үзе түрк т(е)ңри,
Түрк ыдук йипи-субы анча тимис
Түрк будун йок бомазун тийин
Будун болчун тийин
(Үрҙә төрки тәңреһе,
Изге төрки Ер-һыуы шулай тине,
Төрки халҡы юҡ булмаһын, тине,
Халыҡ булһын, тине) (12, 37).

Был мәғлүмәттәр Әхмәт Ибн-Фаҙландың юлъяҙмаһында теркәлгән мәғлүмәттәр менән ауаздаш. Ибн-Фаҙлан ҡулланған “раббы”ны (“божество”ны) “тәңре” йә “эйә” тип аңларға була. Башҡорттарҙың күктәге раббыны иң бөйөк раббы тип таныуы хаҡында әйткәндә ул, асылда, бабаларыбыҙҙың Күк Тәңреһенә (йәки Күктең үҙен Тәңре тип), “Ел раббыһы”, “Ер раббыһы” һ.б. тигәндә – “Ел Тәңреһе” менән “Ер Тәңреһе”нә (йәки “Ер-Һыу”ға) инаныуҙарын күҙ уңында тотоуы ихтимал. Ибн-Фаҙландың юлъяҙмаһында шундай һүҙҙәр ҙә бар. “Беҙ уларҙың (башҡорттарҙың. – Ә.С.) бер төркөмө – йыланға, икенсеһенең – балыҡҡа, йәнә берәүһенең торналарға табынғанын күрҙек” (22, 131).

Г.Р. Галданова әйтеүенсә, боронғо ҡытай яҙмаларында башҡа халыҡтар (мәҫәлән, ҡырғыҙ, уйғыр, онхот һ.б.) менән бер рәттән, *башкорт* (мәҡә*ләлә улар басигид, башгид, башкир* тип телгә алына) ҡәбиләләренең дә тәңреләре күп (мәҫәлән, тау, йылға, күл тәңреләре) булғанлығы билдәләнгән (15, 251 - 252). Бында һүҙ эйәләр хаҡында барыуына төшөнөүе ҡыйын түгел.

Шулай итеп, X быуатта башҡорттарҙа *тәңрелек рәүешендәге монтеистик дингә инаныу* башланған ғына булған, ләкин ул әле формалашып бөтмәгән, тип раҫлай алабыҙ. Ул төрлө сихри заттарға, шул иҫәптән, ҡош-ҡорт, бабалар культына инаныу, шаманлыҡ (бағымсылыҡ, күрәҙәселек) кимәлендә туктап ҡала. X быуатта ислам

ҡабул ителгәс, ул инаныу ҙа бер ни тиклем Алланың берлеген алға һөргән шул яңы дингә яраҡлаша, бер өлөшө, динселәрҙең эҙәрләүҙәренә ҡарамаҫтан, төрлө трансформацияларға дусар була бара, була бара, йәшәүен дауам итә. Һәм халыҡ, асылда, ғүмер баҡый "ике динле" – ярым мәжүси, ярым мосолман булып ҡала.

### 3. Башҡорт мифологияһына, инанмыштарына хас серле сихри заттарҙың булмышы һәм төркөмләнеше

Беҙҙең мәжүси бабаларыбыҙ ҡәҙимге йән эйәләренән тыш, кешегә гел яфа ҡыла торған һәм, үҙең зарар итмәһәң, зыян килтермәй торған серле заттар ҙа бар, тип белгән. Шуны иҫәпкә алып, Кирәй Мәргән уларҙы өс төркөмгә бүлгән: 1) *яуыз көстәр* (дейеү, ғифрит, ялмауыҙ, аждаһа һ.б.), 2) *зарарһыҙ көстәр* (тау эйәһе, мал эйәһе, йорт эйәһе, урман эйәһе һ.б.), 3) *файҙалы көстәр* (аҡбуҙат, толпар, сәмреғош, торна, балыҡ һ.б.) (21, 40). Был китапта башҡорт мифологияһына хас бөтә серле көстәрҙе лә барлау маҡсаты ҡуйылмай. Әммә унда телгә алынғандары ла Кирәй Мәргәндең исемлеген тулыландырырға мөмкинлек бирә.

*Беренсе төркөмгә*, мәҫәлән – юха, бәрей (бире), ен, шайтан, убыр (мәскәй), бисура, албаҫты, шүрәле (ярымтыҡ); *икенсеһенә* – Күк тәңреһен, Һомайҙы, Ер-һыу рухын, һыу эйәһен, мунса эйәһен; *өсөнсөһөнә* – аҙбар эйәһен, хазина эйәһен, аҡкош, күгәрсен, бөркөт (шоңҡар), ябалаҡ һ.б. өҫтәргә була. Шул уҡ ваҡытта был төркөмләүҙең шартлы икәнен дә иҫтән сығармаҫҡа кәрәк. Сөнки ҡайһы бер заттар, кешенең мөнәсәбәтенә, мөғәләмәһенә ҡарап, фиғылын үҙгәртергә лә мөмкин. Сихырлап йәшерелгән хазина эйәһенә хәйер бирмәһәң, ҡорбан килтермәһәң, ул яман уҫал эт йә йыртҡыс януар булып, кешегә ташланырға мөмкин. Мунса ишеген асмаҫ элек, тауыш бирергә, йыуынып сыҡҡанда, тағы кеше килеүен-килмәүен әйтеү (№ 17 А: Йәйә эсендәге номерлы һан текстың "Йола фольклоры" томынан (7А) алыныуын белдерер булыр), мунса эйәһенә мөрәжәғәт итеп: "Суҡ – һиңә бүләк", – тип, суҡ бәйләү ҙә (№ 17 Б) – ул затты иҫкәртеү, унын күңелен табыу, тимәк, зыян килтереүенән һаҡланыу сараһы. Йорт һалғанда, унын дүрт мөйөшөнә шул йорт эйәһе өсөн йомортҡа киҫеп һалыуҙың да (№16 Г), кискеһен һыу алырға барғанда, һыу эйәһенә: "Аҡбуҙ атлы, аҡ һаҡаллы (тимәк, изге. – *Ә.С.*) ҡунаҡ килгән. Тәһрәткә (тимәк, изге эшкә. – *Ә.С.*) һыу бирегеҙ!", – тип мөрәжәғәт итеүҙең дә мәғәнәһен шулай аңлатырға була.

Бәрей (бире) заты иһә – булмышы менән кешенең дошманы. Башҡорт уны өс төргә айыра. Береһе – мосолман бәрейе, икенсеһе – ен-бәрейе. Әкиәттәрҙә сығыш яһағаны – дейеү бәрейе. Ул көслө һәм бик дәү антропоморф зат рәүешендә күҙаллана. Заманында башҡорттарҙан ишетмеш, В.И. Даль уны шулай тасуирлаған: "… есть

дух, дью-пари (див и пери), принимающие образ человека, кошки, собаки и особенно барса и тигра, иногда у него грива бывает золотая; знаменитейшие батыры башкирские прославились битвами с этим чудовищем, которое, нападая и защищаясь и особенно похищая девок, перекидывается и принимает разные образы; если же дью-пари является в образе человека, батыра, то может быть ранен, как Ахилл, только в пятку” (17, 173).

Әкиәттәрҙә (мәҫәлән, юмористик тормош-көнкүреш әкиәттәрендә) бәрей шул тиклем ҡеүәтле антропоморф зат итеп таныштырыла: туғыҙ айыу тиреһенән тегелгән турһыкты тултырып һыу килтереү, усына алған ташты осҡондарын сәсрәткәнсе ҡыҫып ватыу уның өсөн бер ни ҙә түгел. Әммә, ни тиклем дәү һәм ҡеүәтле булмаһын, ни тиклем мәкерләнеп, кешене үлтерергә тырышмаһын, барыбер уның аҡылы, хәйләкәрлеге алдында бәрей көсһөҙ булып ҡала (8, №№ 94–140). Легендаларҙа ул һунарсының өлөшөнә инмәксе була. Уны хаиндарса үлтерергә ниәтләнә. Әммә уның был мәкерле маташыуҙары үҙе башына етә (4, № 15).

Мифик демонологик заттар, ғәҙәттә (мәҫәлән, һыу эйәһе лә, шүрәле лә, албаҫты ла, бисура ла, бәрей ҙә) антропоморф йән эйәләре итеп һүрәтләнә. Улар, кеше һымаҡ уҡ, туй үткәрергә (бәрей, № 2), бейергә (ен бәрейе, № 9), ирле-ҡатынлы, бала-сағалы булырға (һыу эйәһе, № 20 Ғ, бәрей, № 2; урман эйәһе, №14), башҡорттар һымаҡ уҡ, донъя көтөргә, йәйләүгә, ыҙмаға күсенергә (бәрей, № 2) мөмкин. “Һыу эйәһе” инанмышындағы һымаҡ уҡ, башҡа инанмыштарҙан да һыу эйәһенең ҡыҙ ҡиәфәтендә икәнен (4, № 16.26), кешене яҡын ебәрмәүен, уны күреү менән, һыуға сумыуын “геүаһлай”(4, №№ 15, 22, 25) Уларҙан шулай уҡ ҡыҙ затынан булған һыу эйәһенең сәсе оҙон (4, №№ 21, 22), һап-һары, үҙенең шәрә булыуын (4, № 15), үкереүен (4, № 17, 18), үкереүенән, ҡағылыуынан кешенең үлеүе (4, №№ 17, 18, 23), мал-тыуарға бай икәнен, төнөн уларҙы көтөүен, аттың ялын үреп китеүен, ат кеүек кешнәүен, һыуға төшһәң, тартыуын беләбеҙ (4, № 20).

Антропоморф зат ҡиәфәтендә булһалар ҙа, сихри заттарҙы кеше менән бутау мөмкин түгел. Ҡайһы бер серле заттар бер генә енестән була. Албаҫты, убыр – ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендә һүрәтләнә. Шүрәле лә ғәҙәттә тик ҡатын-ҡыҙ рәүешендә генә күрһәтелә. Бисура, бәрей, ен, шайтан ишеләре, шартына ҡарап, берсә – ир затлы, берсә ҡатын-ҡыҙ затлы була, тип аңлатыла.

Антропоморф зыянлы сихри заттарҙың кешегә ят бүтән сифаттары ла бар, тип белгәндәр. Албаҫты ялбыр сәсле, шүрәле – ҡатын-ҡыҙ затынан итеп күрһәтелә, ул, тоҡ шикелле, яурын аша артҡа ташлап, йөкләп йөрөмәле, ғәләмәт ҙур имсәкле йөнтәҫ зат рәүешендә һүрәтләнә. Кешенән айырмалы рәүештә, ҡултығының аҫты тишек, (№ 15) бармаҡтары ла, тырнаҡтары ла кеше ҡытыҡлауға ҡулайлашып, бик

оҙон була (31, 232). Бисура менән шүрәлене һыңар күҙле зат тип тә күрһәтеүсәндәр (№ 10 Б, № 14). Ен һыңар аяҡ, һыңар ҡул, һыңар күҙле (№ 9). Убыр иһә ярты кәүҙәле була ("алды ғына була, арҡаһы булмай", №8). Шүрәле менән (№ 14) бәрейҙе лә (4, № 15; (9, № 48) һыңар ботло зат тип беләләр. Бәрей йә кәзә, йә һыйыр тояҡлы булырға ла мөмкин. Башы ҡысыһа, ул, үҙенең түбә ҡапҡасын сәүәтә кеүек итеп алып, уны тубығына кейҙереп, бетен ҡарай ала.

Бисура, юха, ен, эйәләр ҡиәфәт үҙгәртеү, йәғни әүермәнлек һәләтенә эйә. Бисура, мәҫәлән, йә ир, йә ҡатын сүрәтенә инә алһа, юханың мөмкинлеге уныҡынан киңерәк. Урман эйәһе кеше ҡиәфәтендә лә, төрлө йәнлек рәүешендә лә күренә. Мәҫәлән, меморат тибындағы бер инанмыш буйынса йәш килен урман эйәһен арҡаһына тоҡ аҫҡан, яңы сәкмән кейеп, билен быуған урта йәшәр һаҡаллы ир ҡиәфәтендә күрә, икенсе берәүҙәр күргәнен йылҡы малынан айырырлыҡ булмай, тик уның "бөтә ере ялтырап торған" (25, № 8).

Урман эйәһе, кеше кеүек үк, һунар итә, ҡатынлы, бала-сағалы була. Тик, кешенән айырмалы рәүештә, уны, ҡәҙимге шүрәле кеүек үк, һыңар күҙле, һыңар аяҡлы зат итеп күҙ алдына килтерәләр. Уның әүермәнлеген дә таныйҙар: ул бүрәнә булып та күренергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта уның "ҡыҙҙары менән бисәһе иҫ киткес матур", ҡысҡырып һөйләшкәндә, кешене эләкләй, тип тә инаналар (26, 318). Һуңғыһы шаңды йәнләндереү һөҙөмтәһе, әлбиттә. Инаныс буйынса иһә, шүрәле кешене аҙаштырыу маҡсатында, уның тауышын эләкләй була. Ул, ҡысҡыра-ҡысҡыра, урман төпкөлөнәсә кешене эйәртеп алып китеп, уны аҙаштырып, ахырҙа һәләк итә. Иптәшле кешегә осрауҙан ҡурҡа. Ул йылдың ике миҙгелендә, тәүлектең ике мәлендә, йәғни яҙ, көҙ Ҡояш батҡанда, Ҡояш ҡалҡҡанда, яңғыҙ кешегә тап була (31, 232) ла:

Ҡытыҡ-ҡытыҡ уйнайыҡ Ҡыхма бысаҡ ҡыхайыҡ;
Ҡытыҡ-ҡытыҡ уйнайыҡ Ҡыхма бысаҡ ҡыхайыҡ! –

тип әйтә була (32).

Һыу эйәһе тураһындағы инанмыштар юханың, һыу эйәһе кеше ҡиәфәтенә инеп, әҙәм балаларына төрлө этлектәр ҡылыуы ихтималын да иҫкәртә. Бер егет һылыу ҡыҙ икән, тип, шундай затты кәләш итә. Егет ябыға. Бынан кәләше уның ҡанын һурғанына төшөнәбеҙ. Был инанмыш, сихри зат кем булып ҡыланмаһын барыбер кешегә дошманлыҡ ҡылыуҙан туктамай, тигән хәҡиҡәтте раҫлана.

Әкиәттә герой ауыр хәлгә ҡалғанда, уға аҡыллы кәңәш биреүсе табылыусан. Был инанмыштың да сюжет конфликтының ыңғай хәл ителеше мулланың аҡыллы кәңәшенең һөҙөмтәһе булып сыға. Уның кәңәше буйынса, егет кәләшенең ашына тоҙҙо мул итеп һала. Ҡатыны төнөн, йыланға әүерелеп, тәҙрә аша сығып, Димдән һыу эскәндән, мулла әйткәнсә, уның юха икәнен асыҡлай. Шул иһә, уға, һис

икеләнмәй, икенсе кәңәште тотоуға ла булыша: уны тимер келәттә яндыра һём Юха кәләшенән егет бына шулай имен-аман ҡотола: (25, № 14).

”Һыуһылыу” инанмышына тағы бер иғтибар итәйек. Урланған тарағы артынан урлаусы кеше йәшәгән ергә ул кис булғас ҡына килә. Уның килеү ваҡыты юҡҡа ғына шулай айырата әйтелмәгән. Сөнки демонологик заттар күпселектә ҡыҙыл эңер төшкәс һәм төнөн генә йөрөй.

Бәрейҙәр, хәс тә кешеләр йәйләүгә күсенгән кеүек, мал-тыуарын ҡыуа-ҡыуа, бала-сағаһын тыя-тыя, ҡолондарын сырҡылдатып, кәзә-һарығын баҡыртып, аттарын кешнәтеп, һыйырҙарын мөңрәтеп, күсенә. Тик был эште төнөн атҡара. Улар үткән ерҙе яҡтырғас барып ҡараһаң, бер ниндәй ҙә эҙ күренмәй.

Ен-шайтан да төнөн йөрөй. Уларҙың “эш ваҡыты” ҡыҙыл эңерҙән алып тәүге әтәс ҡысҡырған мәлгәсә һуҙыла. Шул мәлдә уларҙан ныҡ һаҡланырға ҡушалар. Ҡыҙыл эңерҙә теләһә ҡайҙа ҡолаһаң, ен ҡағыла. Ен ҡағылһа – ауырыйһың, тиҙәр. Кеше ҡағылыуы иһә ен-шайтан өсөн үлемесле хәүеф, тип тә инанғандар.

Ен-шайтандар хаҡындағы мәғлүмәттәрҙең байлығы йәһәтенән 1915 йылда Арсланбәк Әлимғолов ташҡа баҫтырған инанмыш ныҡ айырылып тора (2). Автор иҫкәртеүенсә, уны бер ҡарт һөйләгән. Тимәк, башҡарылышы йәһәтенән ул меморат-инанмыштан ғибәрәт. Унда бәйән ителеүенсә, бер шәкерт, төндә тәһрәткә сыҡҡанында, сүплектән һөйәк йыйып йөрөүсе аҡ һаҡаллы ҡарттың арбаһы артына йәбешеп барып, ендәр донъяһына юлыға. Ошо урында автор беҙҙең өсөн мөһим генә бер нисә белешмә лә бирә. Баҡтиһәң, ендәр донъяһында кеше бөтәһен дә күрә, үҙе иһә уларға күренмәй. Быныһы – бер булһа, икенсенән, ендәр кем етте шуға һуғылып бармай имеш: баҡтиһәң, шәриғәт талаптарын еренә еткереп үтәүсе диндар кешегә улар яҡын да юламай, имеш. Өсөнсөнән, ен ҡағылған тигән диагнозды шулай беләләр: ундай кешенең йөрәге, башы ауырта, аяҡ-ҡулы йөрөмәҫ була. Дүртенсенән, төнгөлөккә ашты бисмиллаһыҙ ҡуйһаң, уны ен ашай. Әгәр ундай ашты бисмиллаһыҙ ауыҙ итһәң, шулай уҡ ауырыу һуғыла, имеш.

Йәнә килеп шул: беҙгә бүтән сығанаҡтар буйынса таныш бер мәғлүмәт тә Әлимғолов яҙмаһында дөрөҫләнә. Бында енең Ҡояш батҡандан алып тәүге әтәскә тиклем генә кешеләр араһында йөрөүе күҙ уңында тотола. Ошо белешмәләрҙе иҫәпкә алһаң, был инанмыштың, теге шәкерт, йәғни, йәш булһа ла, уҡымышлы зат, ендәр донъяһында иркен йөрөгән, тип әйтергә теләүенә төшөнөү ҡыйын түгел. Ысынлап та, ул бөтәһен дә күрә, ендәр иһә уны бар тип тә белмәй. Уға күп нәмә ғәжәп тойола, әлбиттә. Шул ғәжәп хәлдәрҙең береһе шул була: ен ҡыҙы әлеге һөйәктәрҙән аш бешерә. Ошо урында, уҡымышлылығынан тыш, шәкерттең образына бер мөһим генә һыҙат өҫтәлә. Шүрәле бире

(бәрей), бисура ише башҡа сихри заттарҙың ҡыҙҙары кеүек үк, ен ҡыҙы ла һылыу була. Шәкерт унының бөйөрөнә төртә. Тимәк, ул һылыуҙар затына битараф ҡала алмай торған дәүеренә еткән шәкерт булған. Ә ундай йәштә, йола буларак, ҡыҙ йә еңгә (сөнки ярты еңгә – ҡәйнештеке!) һәм ҡоҙаса (сөнки ҡоҙа ҡоҙаса менән шаярһа, мал уңа) бөйөрөнә төртөүҙе яманға юрамайҙар. Киреһенсә, бөйөргә төртөү – ул гүзәл заттарға иғтибар итеүҙең, уларҙың иһә егет иғтибар итерлек икәнен аңғартыу сараһы ла, шаяртыу алымы ла. Башҡорт йәмғиәтенә хас бына шул йоланы йола иткәнендә шәкерт, күрәһең, ҡайһы донъяла икәнен онота. Хәйер, һылыу ҡыҙҙы күргәндә, ҡайҙа булыуына ҡарамаҫтан, кем онотолмаһын инде! Әллә ниндәй аңлатмаларһыҙ ҙа, ҡулының ошо бер хәрәктенән дә шәкертебеҙҙең, ысынлап та, танауына еҫ керерлек дәүергә еткәне хаҡында мәғлүмәт ала алабыҙ. Шәкерттең ҡулын шулай бер ҡыймылдатыуы етә – һәр кем уны күңелендә кәүҙәләнгән ҡыҙ матурлығы идеалы кимәленән күҙ алдына баҫтырыу форсатына ирешә.

Ошо урында А. Әлимғолов яҙмаһынан ендәргә ҡағылышлы тағы бер мәғлүмәт алабыҙ. Баҡтиһәң, ен ҡағылыуҙан бисмиллаһыҙ кеше нисек ауырый, уҡымышлы кеше ҡағылыуҙан ендәр ҙә шулай ауырый имеш: шәкерт бер ҡағылыуы була – ен ҡыҙы сәсрәп ауырый ҙа китә.

Сихри заттың бәләгә тарыуы нормаль кешелә ҡыуаныс тойғоһо ғына уята. Бында ла шулай булырға тейеш кеүек. Әгәр егетебеҙ ен ҡыҙына битараф булһа, әлбиттә. Классик сюжет күҙлегенән ҡарағанда, конфликт тип аталыр көсөргәнешле мәл был инанмышта бына шулай тыуҙырыла. Артабан шәкерт ни ҡылыр икән?

Нәҡ ошонда А. Әлимғолов яҙмаһының башындараҡ теркәлгән йәнә бер мәғлүмәтте иҫкә төшөрөү урынлы булыр. Унан беҙ шуны беләбеҙ: ендәрҙең дә муллаһы була имеш. Бишектә сағында үҙҙәренең балаһын кеше балаһына алмаштыра.Урланған балаға үҙҙәренең динен күндерәләр ҙә шуны мулла итәләр имеш. Айырата әйтелмәһә лә, күрәһең, әҙәми зат булған ен муллаһы, ысын ендәрҙән айырмалы рәүештә, кешене күрер булған. Әлеге һорауға яуапты шәкерттең ен муллаһына мөрәжәғәтенән табабыҙ: ен ҡыҙы менән булған хәлде шәкерт уға һөйләп бирә. Һөҙөмтәлә уны кире үҙенең донъяһына илтеп ташлауҙары була – ҡыҙ һауыға. Бынан иһә шәкерттең ен муллаһына ен ҡыҙы менән булған хәлде һөйләү менән генә сикләнмәүе, уны нисек һауыҡтырыу сараһын ҡайғыртыуы ла, тимәк, унының ен ҡыҙы образында кәүҙәләнгән сибәрлеккә битараф булмауы тағы бер тапҡыр раҫлана.

Ен-шайтан көндөҙ ҡойоп ямғыр яуғанда, томанда осрауы ла ихтимал, тип белгәндәр.

Инанмыштарҙан күренеүенсә, ҡайһы бер сихри заттар үҙҙәренең “кәсептәре” менән тәүлек әйләнәһенә шөғөлләнә. Мәҫәлән, шүрәле (Ғәйнә ырыуы башҡорттарынса, ярымтыҡ) көндөҙ ҙә, төндә лә осрарға мөмкин. Төндәрен шүрәлеләр, утлауға ебәрелгән

аттарҙы менеп, сабып йөрөргә ярата. Көндөҙ яңғыҙ-ярым кешене осратһа, уны ҡытыҡлап үлтерә.

Беҙ ҡараған "Һыуһылыу" инанмышында тарағын урлаған кешегә һыу ҡыҙы яманлыҡ ҡылыу менән янамай. Әммә тегенең унан ҡурҡыуы, һыу ҡыҙы бер генә һорау менән үк, тарағын уның ҡулына тоттороп та тормай, тәҙрә аша һелтәүе уйланырға мәжбүр итә. Әгәр талабын үтәмәһә, сихри зат, моғайын, уны тиген ҡалдырмаҫ ине. Төндә шишмәнән, ҡоҙоҡтан һыу алырға тура килһә: "Аҡбуҙатлы аҡ һаҡаллы ҡунаҡ килгән. Тәһрәткә һыу бир!" – тип, һыу эйәһенән рөхсәт һорау, һүренте рәүешендә булһа ла, һыу эйәһенә саҙаҡа биреп (ул һыуға ҡорбан килтереү йолаһын алмаштыра), йәғни уның киреләнеүенән шикләнеп, алдан уҡ ул заттың күңелен табыу ҙа әле әйтелгәнде ҡеүәтләй.

Ташландыҡ соҡор, мал зыяраты, яр аҫты, мәмерйә, таш еге, урман төпкөлө, күл төбө, ҡыйыҡ эсе, аҙбар, мөйөш, төндөк, сүплек һ.б. инанмыштарҙа демонологик заттарҙы осратыу урыны һәм, ғөмүмән, улар йәшәгән тирә иҫәпләнә.

"Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" иртәгенең Т.С. Беляев тарафынан әҙәби яҡтан эшкәртелгән версияһында әүермән зат-юханың торған урыны бына нисек тасуирлана:

Торған урыны – ер ситендә,
Ете диңгеҙ аръяғында;
Ете үркәс күккә ашҡан
Ҡомло тауҙар артында,
Шыр урман араһында,
Ете ҡат ер аҫтында (5, 69–70; 19, 261).

Демонологик сихри заттарҙың йәшәгән урыны хаҡында В.И. Далгә башҡорттар шундай мәғлүмәт биргән: "Леса, дебри, горы, воды и пещеры населены лешими, водяными, русалками, известными вообще под именем джин, дух (эйә. – Ә.С.); каждою горою, каждым озером обладает такой джин, добрый или злой". Уның әйтеүенсә, Тирмәнтау көнөн-төнөн ғәләмәт ҙур күректәрен өрҙөрөп, йөҙәр ботлоҡ сүкештәре менән сүкей ҙә сүкей, Йылантауҙағы ер аҫты йылғаһы шайтандар ҡулына юлығып, уларҙың тирмәнен әйләндерә. В.И. Далдең яҙмаһына Шешәнәк йылғаһының ҡаяһындағы өңдә йәшәгән ике ен тураһында ҡыҫҡа ғына фабула тибындағы бер инанмыш та теркәлгән. Ике сихри зат бер кешене үҙҙәренең тар ғына өңөнә алып инмәксе була. Һыйҙыра алмағас, уны упҡынға һелтәйҙәр. Шешәнәк йылғаһына төшөү генә уны үлемдән ҡотҡара (17, 173, 175).

А. Әлимғолов яҙмаһында ендәр йәшәй торған урын Ҡаф тауы тип аталған. Ә Ҡаф тауы, ҡайһы бер авторҙар яҙғанса, Кавказ түгел, ә «Ҡөрьән-Кәрим»дә әйтелгәнсә, мифик илдең мифик тауы.

Башҡорт телен белеп еткермәүҙәнме, әллә информанттарының ғәйебе арҡаһындамы, бында бөтә сихри заттар “ен” һәм “рух”, йәғни эйә тип дөйөмләштерелгән. Хәйер, параллель донъяла йәшәп, ваҡыт-ваҡыт кеше күҙенә күренеүсе сихри заттарҙы халыҡ әле лә “ен-шайтан” йә “ен-бәрей” тип кенә дөйөмләштерә. Бәлки, Даль дә шулай итергә тырышҡандыр. Уның әле килтерелгән мәғлүмәтенең дауамы ла иғтибарға лайыҡ. Бына ни тигән ул унда: “… все это рассказывает вам башкир стихами или напевает, вторя чебызге или кураю, в прошлом времени; ныне бесплотных жильцов и жилищ этих осталось немного, золотой век, как всюду, так и здесь, прошел, промчался, остались одни воспоминания” (17, 13–174). Автор был осраҡта инанмышты эсенә алған берәй эпик әҫәрҙе күҙ уңында тотҡанға оҡшай. Һәр хәлдә ҡурайға ҡушылып яуыз һәм изге сихри заттар хаҡында һамаҡлап шиғыр һөйләүе ҡобайыр башҡарыуҙы хәтерләтә. Әгәр ошо фаразда хаҡлыҡ булһа, беҙ уны эпик әҫәрҙең башҡарылышы хаҡында мәғлүмәткә өҫтәлмә тип баһалай алыр инек.

Сихри заттарҙың ейгәне ҡыйшаҡыр (№ 8). А. Әлимғолов яҙмаһынан мәғлүм инанмышта ен төнөн сүплектәге һөйәкте йыя. Ен ҡыҙы шунан аш бешерә. Шуның менән бергә уларҙың бәғзеләре билдәле “деликатес”ка әүәҫ: юха ҡыҙҙарҙы ашарға үс (17, 173), аждаһаға кеше лә, мал-тыуар ҙа, башҡаһы ла – ризыҡ (№ 1), А. Әлимғолов теркәгән инамыштан иһә бисмилла әйтмәй һаҡлауға ҡалдырылған ризыҡты ендәрҙең ашарға әүәҫ зат икәнен дә беләбеҙ.

Демонологик заттар кеше алдында көтмәгәндә пәйҙә булып, ҡапыл күҙҙән юғала. “Бер бабай йәшенле ямғыр мәлендә урман юлы буйлап китеп барһа, ниндәйҙер ҡыҙ бала илап ултыра, ти. Йәлләп, ҡарт уны арбаһына ултыртып ала. Йөгө өҫтөнә ултыртҡан икән, аты туҡтаған да ҡуйған. Эйәһе дилбегәһен ҡағып та ҡарай, сыбыртҡылап та ҡарай – арбаны урынынан ҡуҙғата алмай ҙа ҡуя икән. Шул ваҡыт баш осонда, даһыр-доһор итеп, күк күкрәй башлаған икән, теге ҡыҙ бала ҡурҡышынан ҡартҡа һырынып, ҡуйынына инеп килә, ти. “Ах, мәлғүн!” – тип тороп, бабай уҡына башлаған икән – теге бала юҡ булған. Ул арала сатырҙап йәшен атып та ебәрә, әле генә арбаһына көсө етмәй торған ат юртырға тотона” (Бөрйән районы Нәби ауылы Күсәрбаева Шәфиға ауыҙынан).

Бисура ир кешегә – ҡатын, ҡатындарға ир ҡиәфәтендә эйәләшә лә, яҡынлыҡ ҡылып, ахырҙа уларҙы аҙҙыра. Нурмөхәмәт тигән кешегә ул тиргә батҡан ат менеп килер булған (1989 йылда Бөрйән районы Яңы Собханғол ауылы Мырҙабаева Бибиһан Мөхәмәтсадиҡ ҡыҙынан яҙып алынды, 32). Бисура эйәләү арҡаһында Ҡотлогилде тигән кеше әле генә алған кәләшенән биҙә, ныҡ ябыға, һарғая башлай (1982 йылда Йылайыр районы Ҡашҡар ауылы Селәүсинова Таибанан И. Ҡоломбәтов яҙып алған, 10, №17). Бисураны ҡыҙыл күлдәкле бәләкәй генә һары кеше

рәүешендә күҙ алдына килтерәләр. Йәшәгән урыны урман төпкөлөндәге аҡлан. Аҙҙырған кешеһен ул шунда алып китә (26, 319). Бына ни өсөн Нурмөхәмәттең бисураһы атын тирләтеп килә икән.

Миҫалдан аңлашылыуынса, ен юлсы ҡартҡа ҡыҙ бала ҡиәфәтендә осраған. Сихри заттарға, ғөмүмән, әүермәнлек сифаты хас. Хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ, В.И. Даль бәйән иткән бер легендала юха затлы әүермән, башта ҡара төлкө булып күренә лә, һунарсы егет атып үлтергәнсе, ун ике ҡиәфәткә, шул иҫәптән берсә – эт, берсә – бесәй, берсә – ҡондоҙ, берсә – юлбарыҫ ҡиәфәтенә инеп өлгөрә (26, 175). Хазина эйәһе, быҒаса әйтелгәненсә, өйрәк, бесәй, кәзә, уҫал эт, үгеҙ һ.б. йән эйәләре ҡиәфәтендә күренә. Ен йәнһеҙ әйбергә лә әүерелә ала. Ҡайһы бер сихри заттар булмышы менән үк йәнһеҙ. Әммә уларҙың да үҙҙәренә күрә рухы була, һәм кешегә шул зыян килтерә. Эйәле ағастың ботағын алһаң, йә үҙен утын итһәң, зәхмәте ҡағыла. Хәйбулла районы Аҡъюл ауылының Яхъя атлы уҙаманы утынға барып ҡайтҡан арала сәсрәп ауырый. Ауырыуының сәбәбен: “Эйәле ағасҡа тейҙем, ахыры,” – тип аңлата. Ҡойон да, йылы ел дә кешегә зыян ҡыла ала.

Мифик демонологик заттар кеше ҡулынан килмәгән эште башҡара белә. Бәрейҙәр (бирелёр) үтә көслө зат итеп күҙ алдына баҫтырыла. Һунарсы Дүрмәндең бире затынан алған ҡатынына, тотош бер күбәне, һәнәгенә бер сәнсем итеп кенә күтәреп, кәбән башына ырғытыу – бер ни ҙә түгел (“Бире заты” легендаһынан). Уларҙың бер төрө, мосолман бәрейе тигәне, хатта иләк менән һыу ташый, ҡомдан, унан ҡалһа, ҡояш нурынан арҡан ишә ала (№6).

Серле сихри заттарҙың арауыҡта (пространствола) хәрәкәт итмеше лә серле. Мосолман бәрейе, ен йөрөй башлаһа, ел-дауыл ҡуба. Шүрәле менән бәрей (бире) оса-төшә йөрөй. Шүрәленән ҡасҡанда, ағын йылға аша сығырға кәрәк. Әгәр ул теге ярҙан: “Ҡайһы ерҙән сыҡтың?” – тип һораһа, түбән яҡты күрһәтергә. Юҡһа, ул оса-төшә йылғаның башынан урап килеп тә етә.

Халыҡ борон ҡаракитапсыларға, сихырсыларға, күрәҙәсе-яурынһынсыларға, фалсыларға, бағымсыларға ныҡ инанған. Ҡаракитапсылар, тамуҡта яҙылған ҡара китаптарына ҡарап, үткәнде, хәҙергене, киләсәкте юрай, шайтандар менән дуҫ, уларҙы ҡомдан, ҡояш нурынан арҡан ишергә мәжбүр итә белә, Ай менән Ҡояш тотолоуына сәбәп ҡыла ала, Ергә йондоҙ яуҙыра, буран сығара, уны туҡтата һ.б. мөғжизәләр булдыра ала, тип инанғандар.

Сихырсылар шайтан менән эш итмәй, әммә тылсымы менән кешеләргә зыян килтерергә һәләтле, тип белгәндәр.

Күрәҙәсе-яурынһынсылар һарыҡтың ҡалаҡ һөйәге ярҙамында юрай. Ул һөйәкте, тешен тигеҙмәй иттән таҙарта ла һуты ағып бөтөп, сатнай башлағансы ҡыҙыу ҡуҙға һалып торалар. Шунан бағымсы ҡалаҡ

һөйәген ала ла, сатнауҙан унда хасил булған һыҙыҡтарға ҡарап, күрәҙәлек итә башлай.

Күҙ бәйләүселәр, фалсылар утҡа май һалып, шуның ялҡынынының төҫө буйынса киләсәкте юрарға тотона.

Бағымсылар һауытҡа таҙа һыу ҡойоп, ағын һыуға юнысҡы ташлап, уларҙың нисек ағыуына, өйрөлөүенә ҡарап; йомғаҡлы еп менән, утҡа туҙ ташлап, көл алып доға уҡып, кем бур икәнен фаш итергә тырышалар (23, 358–359, 361).

С.Г. Рыбаков үҙенең "Музыка и песни Уральских мусулман…" тигән китабында албаҫты ҡыуыу картинаһын һүрәтләгән. Ул һүрәтләмә, асылда, ваҡиғаға шаһит кешенең хәтирәһе – меморат-инанмыштан ғибәрәт. Бағымсы өйҙө аҫтын өҫкә килтереп, албаҫты ҡыуа. Уны күргән кешеләй, төрлө хәрәкәттәр яһай. Ахырҙа уны баҫтырып алып китә. Йәнәһе, еңә. (Албаҫты ҡыуыу картинаһы Яңыбай Хамматовтың "Бөртөкләп йыйыла алтын" романында ла йәнле һүрәтләнеш тапҡан).

Күрәҙәсе, юраусылар, ҡаракитапсыларҙың бағымсылығы шамандарҙың бағымсылыҡ итеүен хәтерләтеп ҡуя. Ә шаманлыҡ буйынса "махсуслашҡан" бағымсылар хаҡында хәҙер материал табыуы ситен. Шуға күрә Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр"ендә бирелгән бер материалға һылтаныу менән сикләнергә тура килә. Бағымсы үҙе башҡорт булмаһа ла, ваҡиға Башҡортостандан ситтә барһа ла, башҡорт кешеһенең хәтирәһе булғанлыҡтан, уны ла башҡорт инанмышына миҫал итеп иҫәпләргә була.

Ә.-З.Вәлиди, мулла улы, муллалар ейәне, мулла кейәүе булһа ла, дингә мөкиббән киткән заттарҙан булмаған. Хөрәфәт, инаныуҙар ҙа уға ят булған. Әммә Төркөстанға килгәс, тапма менән ауырып китеүе арҡаһында, им-томдан, анығын әйткәндә, шаман им-томонан баш тартмаҫҡа мәжбүр була. Дауалауҙың бындай ысулы беҙҙә күптән онотолғанын иҫәпкә алып, шамандың дауалау ысулы хаҡында меморат рәүешендә Ә.-З. Вәлиди теркәгән тасуирлама түбәндә тулыһынса килтерелә: "Сирем Бохарала уҡ башланғайны. Хөкүмәт ағзаһы Ғәбделхәмит Арифов хинин килтереп бирҙе, тик ул ҡолаҡтарыма насар тәъҫир итә башланы. Бер көн: "Яҡында, Аҡъяр исемле ауылда бик тәжрибәле бағымсы (йәғни, шаман) бар, шунан дауалатайыҡ", – тинеләр. Ирекһеҙҙән риза булдым. Бағымсыға хәбәр иттеләр. Ул ҡарлуҡтарҙан (ҡарлуҡ ҡәүеменән. – Ә.С.) булып сыҡты. Бер көн әҙерләнергә тейеш, шуға икенсе көн кис киттек. Үзбәк сатыры эсендә ҙур ут яғылған. Ҡап-ҡара һаҡаллы 40 йәштәрҙәге ҙур кәүҙәле бағымсы, ҡәҙимге кеше кеүек, сәй эсеп һөйләшеп ултырғандан һуң, иптәштәре менән түңәрәккә урынлаштылар. Ҡулындағы дөңгөр тип аталған барабанына һуға-һуға, бағымсы минең яныма килде.

– Һин беҙгә ышанмайһың, рухтар килмәй. Уҡыуымды дауам итмәйем, – тине. Мин уға:

– Дауам ит, мин ышанырмын, – тинем.

Яңынан әйләнергә, барабан һуғырға, йырларға тотондолар. Ниһәйәт, берәүһендә экстаз башланды. Ауыҙынан аҡ күбек сыҡты һәм ул иҫен юғалтты. Уны бүтән яҡҡа сығарып һалдылар. Шул рәүешле башҡа бер нисәһендә лә экстаз башланғандан һуң, бағымсының үҙенә лә сират етте. Бер тимер көрәкте утҡа һалып ҡуйғайнылар. Көрәктең ағас һабы яна ла башланы. Бағымсы ауыҙына һыу алып көрәккә бөрктө. Утта ҡыҙған көрәктән һыу тамсылары сәсрәп, битемде яндырҙы.

– Ҡурҡма, ҡурҡма – яҡшы, яҡшы, – тинеләр.

Ниһәйәт, бағымсы утта ҡыҙған был тимер көрәкте ауыҙына ҡабып тешләне. Шул килеш минең тирәмдә бер нисә тапҡыр әйләнеп сыҡты ла, көрәкте кире утҡа ырғытты. Ул арала бағымсыға төрлө яҡтан төрлө һорауҙар бирҙеләр. Ул минең төҙәләсәгемде әйтте. Әмирҙең уңышҡа өлгәшеү-өлгәшмәүен дә һоранылар. Ыңғай яуап бирмәне. Йәнә бер нисә сәйәси һорау бирҙеләр. Ниһәйәт, ул иҫенә килде. Миңә:

– Төҙәлерһең, дарыу-фәлән эсмә, – тине. Ауыҙына утлы көрәк алһа ла, ҡара мыйыҡтары һис тә көймәгәйне. Уттың ысын булыуын йөҙөмә сәсрәгән һыу тамсыларының ҡайнарлығынан үҙем татыным.

Ғүмеремдә беренсе тапҡыр ысын шамандың им-том итеүен күрҙем.

Бала сағымда, бер ауырығанда, үҙебеҙҙә лә бағымсынан дауалатҡайнылар. Ләкин ул бындай әкәмәттәр күрһәтеп мәшәҡәтләнмәне.

Шунан һуң хинин ҡапманым, тапма ла эҙһеҙ юғалды. Был зат алдаҡсы түгел, нәғеҙ шаман булып сыҡты, һис бер ниндәй түләү йәки бүләк ҡабул итмәне (14. 425–426).

Әлегәсә телгә алынған сихри персонаждарҙан тыш, шартлы рәүештә билдәләнгән төркөмдәрҙең береһенә лә ҡарамаған серле заттар, күренештәр ҙә бар. Ҡар кешеһе, күл төбөндә йәшәгән ғәжәп заттар, НЛО һәм уның пассажирҙары шундайҙар рәтенә ҡарай. Ҡар кешеһе хаҡында төрлө уйҙырмалар беҙҙең көндәрҙә айырыуса нык таралды. Уны йөнтәҫ тәнле ғәйәт ҙур кәүҙәле, күҙе бызлап торған антропоморф зат ҡиәфәтендә тасуирлайҙар. Ул, кеше күҙенән ҡасып, төпкөлдә аулаҡта йәшәй, тип беләләр. НЛО-ның үҙен кеше башы етмәҫлек мөғжизәүи техника рәүешендә күҙаллайҙар: ул осоп йөрөй, күберәген уның формаһын табаҡ кеүек итеп күҙ алдына килтерәләр, шул уҡ ваҡытта осоп барышлай ҡиәфәтен үҙгәртә ала, яҡтылыҡ һибә, ергә төшкән урынында түңәрәк эҙе ятып ҡала, тиҙәр. Уға ултырып йөрөүселәр, антропоморф зат булһа ла, кешегә оҡшамай һ.б.

Шотландиялағы Несси күлендә ғәжәп ҙур ер-һыу йән эйәһе йәшәй тигән хәбәр кешелекте бер нисә быуат шаңҡыта. Үҙебеҙҙең Йылҡысыҡҡанкүлдә лә Несси мөғжизәһен хәтерләтмәле йән эйәһен күреүселәр бар. Бөрйән районы Ғәҙелгәрәй (Шүлгән) ауылы Ғәрифә

Сафина һөйләгән инанмыш буйынса, шул мәғлүм: XX быуаттың 30-сы йылдары ахырында Йылҡысыҡҡанкүл янындағы туғайҙа бесән эшләп ятҡанда, кәбән һалыусыларға айран һыулайым тип, шул күлгә килһә, башын сосайтҡан бер йән эйәһе, яр ситенең ҡыҙыл балсығын болғандырып, төпкә йөҙөп барып, һыу аҫтына сума. Уның башы, бер ҡараһаң – һарыҡ башын, бер ҡараһаң – йылҡы башын хәтерләтҡән. Борон Мауыҙҙы күленән ( Әбйәлилдәге Яҡтыкүлде борон шулай тип атап йөрөткәндәр) бүгәй үгеҙ ҡиәфәтендәге бер заттың сыҡҡанын күргәндәр.

### 4. Ел культы

Борон елде йәнләндереп күҙ алдына килтергәндәр. Теңкәгә тейә башлаһа, эскимостар буранды оҙон сыбыртҡы менән сыбыртҡылаған. Төнъяҡ еле арҡаһында боҙ оҙаҡ ҡуҙғалмаһа, ел рухын йылындырырға ут янына саҡыралар. Рух яҡынлау менән, утҡа һыу ҡоялар ҙа, уҡ (аҙаҡ мылтыҡ) аталар. Ошо маҡсатта файҙаланыу өсөн, хатта Европанан килеүселәрҙән туп (пушка) һорай торған булғандар. Австралия туземецтары ҡойон рухын, бумеранг һелтәп, үлтерергә тырышҡан (30, 97–98). Инглиз филологы Грэвз әйтеүенсә, пеласгтарҙың донъя яралыуы хаҡындағы мифы шул турала һөйләй. Йәнәһе лә, ғаләм илаһиәһе Эвреномия төнъяҡ елен тотоп ала ла, йөн иләгәндәй, иләй башлай. Шунан офион тигән ғәләмәт ҙур йылан тыуа һәм илаһиәнең боттарына урала ла уның менән ҡауыша. Бореас тип аталған төнъяҡ еле түлләндереү ҡеүәһенә эйә. Шуға ла бейә малы уға осаһын ҡаршы ҡуя һәм айғырһыҙ-ниһеҙ ҙә быуаҙый һәм ҡолонлай ала (16, 98–99).

Башҡорт ырыуҙарына туранан-тура мөнәсәбәтле “Сыңғыҙнамә” исеме менән йөрөтөлгән боронғо яҙма ҡомартҡыла (18, 551, 549, 547) Ҡояш (Көн) нурынан түлләнеү ихтималына ышаныуға нигеҙләнгән ике инанмыш бар. Алтын хан менән Күрләүеч ханшаның ҡыҙы Ғөләмлек Күрекле, көн күрмәй, донъя барлығын белмәй, бикле ултырған еренән кинәт Ҡояшты күреүе була – шунда уҡ уның нурынан ғоманлы була. Ата-әсәһе, оялыштарынан, гүзәл ҡыҙҙы алтын кәмәлә ағыҙып ебәргән. Ҡыят Тумауыл хан уны кәләш итә. Шул икәүҙән тыуған Дуйын Баян, ун туғыҙ йыл хан булып торғандан һуң, баҡый донъяға күсә. Бүдәнжәр, Ҡәғинжәр, Салжут тигән өс улы етем ҡала. уларҙың әсәләре Аланғу Ҡояш нурынан түлләнә һәм донъяны яулар Чемуджин-Сыңғыҙ атлы йыһангирҙы тыуҙыра (27, 255 – 262). “Ҡояш нурынан түлләнеү” мотивына нигеҙләнгән был инанмыш В.И. Далде лә ҡыҙыҡһындырған. Һәм ул, “Сыңғыҙнамә”гә һылтанып, рус телле уҡыусыларын шул инанмыш менән таныштырып үткән (17, 173).

Ҡасандыр халыҡ тарафынан “Ҡөрьән” кеүек яратып уҡылған “Сыңғыҙнамә”лә сағылған йолалар, хөрәфәттәр, инаныстар заманында башҡорттар араһында киң билдәле булған тип әйтергә

ерлек бирә. Йылы елдең түлләндереү ҡөҙрәтенә инаныс беҙҙә әлегәсә һаҡланып ҡалыуы ла – шуға ҡеүәт. Ҡыҙ, ҡатындарға йылы ел бәрелеүҙән, ел һуғылыуҙан һаҡ булырға ҡушыр булғандар. Юҡһа, елдән ғоманлы булыуың ихтимал, тигәндәр. "Елгә еленләп, ярға быҙаулап" тигән идеоматик әйтем дә елдән түлләнеүгә инаныуҙан ҡалған. Заманалар үтә килә, фән һәм мәғрифәттең алға китеүе арҡаһында, элек серле тойолған күренештәрҙең сере асыла килә, ундай инаныстар юҡҡа сыҡҡан һәм уларға таянған инанмыштың да "хеҙмәтләндереү" мөхите тарайған. Шул сәбәптән "Елгә еленләп, ярға быҙаулап" тигән идеоматик әйтем дә хәҙер телмәрҙә "бушты бушҡа бушатыу" тигән күсмә мәғәнәлә генә ҡулланыла.

Халыҡ елдең төрлө төрөн айыра белгән. Әле лә еңелтә елде "ел", көслөрәген "буран", унан да көслөһөн "дауыл", орсоҡтай өйрөлгәнен "ҡойон" тиҙәр. Елде йәнләндергәндә лә, уны төрлөсә төркөмләү иғтибарға ташлана. Саҡырып алынғаны еләҫлек тыуҙырыусы еңел ел, түлләндереүсеһе – йылы, йомшаҡ ел, аждаһа алғаны – ғәрәсәтле дауыл. Ә ҡәҙимге ҡойондоң мифологик яҡтан ике этимологияһы бар: уны мәскәй (убыр) тип тә, ен бейеүе тип тә йөрөтәләр. Башҡорттарҙың инаныуы буйынса, мәскәй ел ҡуптара, дөрөҫөрәге, ҡойон булып осоп, әҙәми затҡа ҙур зыян килтерә. Күҫәк, таяҡ ташлаһаң, ул ҡурҡа, тигәндәр. Бысаҡ, балта, һәнәк ырғытһаң, уны яралап була имеш, тип белгәндәр. Ундай саҡта, тамып ҡалған ҡаны буйынса юллап, убырҙы табып та була. Ат ҡиәфәтенә ингән убырҙы бер һалдат дағалап ебәрә. Иртәгеһенә уны ла, тама-тама барған ҡаны буйынса табып, язаға тарттыралар.

## 5. Серле мифик заттар менән мөнәсәбәткә ингәндә, уларҙан һаҡланыу саралары

Серле мифик заттар образын боронғо бабаларыбыҙҙың анимистик, тотемистик ҡараштары тыуҙырған. Уларҙың кеше кеүек үк ысынбарлыҡ заттары булыуына ныҡ ышанған боронғолар. Хуш. Әммә беҙ уларға йола фольклоры хаҡындағы һүҙ барғанда, ни өсөн уларға туҡталдыҡ һуң әле? Эш ниҙә? Быны шундайыраҡ һорауҙар тыуырға мөмкин. Эш шунда, серле заттар тураһындағы аңлатмаларҙа халыҡ уларҙың булмышын тасуирлау менән генә сикләнмәй. Улар менән осрашҡанда, нисек ни ҡылырға икәнен дә төшөндөрә. Зыянһыҙ заттар менән эш иткәндә, уларҙы борсомаҫҡа, күңелдәрен табырға ҡушалар. Изге ҡоштарҙы (аҡҡош, кәкүк һ.б.) үлтерергә, ашарға ярамай. Сөнки улар ҡасандыр кеше затлы булған, тип ышана халыҡ. Айыу итен ашауҙы тыйыуҙы ла шулай аңлаталар.

Зыянлы көстәрҙе ни тиклем ҡурҡыныс итеп күҙ алдына килтерһәләр ҙә, боронғолар уларҙан ҡотолоу, һаҡланыу саралары, йөҙмә-йөҙ осрашҡанда, еңеп сығыу мөмкинлеге барын да иҫкәрткәндәр.

Күҙгә тылсымлы дарыу һөртһәң, әҙәми зат ҡиәфәтенә инеп, кеше араһында йөрөгән бәрейҙе танып була (№ 2), магик һүҙ-доға уҡып, иҙеүҙе ысҡындырһаң, ағас һәнәктең сатаһын (асаһын) һындырһаң, мәскәй (убыр) зыян килтереү һәләтен юғалта (№ 8 Б).

Йыландың ат тиренән ҡурҡыуын ауыл кешеһе күптән белә. Шуға ла ҡырҙа ҡунырға тура килгәндә, серге түшәп, баш аҫтына эйәр һалып йә ятыр урынды түңәрәтеп дилбәгә һалып сығыу ғәҙәте бар.

Башҡорттарҙың инаныуы буйынса, зыянлы сихри заттар ҡоралдан ҡурҡа. Бәрей, ен, бисураны дүрт тарафҡа дүрт тапҡыр мылтыҡтан атып ҡына өркөтөп була (№№ 4, 7 А, 10 Б). Ҡырҡы тулғансы, сабыйҙы ен, шайтан, бәрей алмаштырыу хәүефе бар. Ул заттар мәйет эсенә лә инергә мөмкин. Шуға ла сабыйҙы ла, мәйетте лә ҡараусыһыҙ ҡалдырырға ярамай. Улар янына бысаҡ йә бүтән үткер, осло нәмә һалыу шарт, тиҙәр.

В.И. Даль телгә алған инанмышта (рус кешеһе был урында “быличка”ла, тиер ине) кешеләрҙе яфалаусы ҡара төлкө сүрәтендәге юханы ҡыйыу аусы көн элгәре, махсус әҙерләнеп (ун ике уғының берәүҙәрен арҡыры тешләп, башҡаларын йәйә тотҡан ҡулының бармаҡтары араһына ҡыҫтырып), аңдып тороп, ата башлай. Албаҫтыны ҡыуған бағымсы ла (шаман да) уны тәүҙә төнө буйы “аңдып тора”, шунан, “яйы сыҡҡас ҡына”, ҡамсыһын эшкә ҡуша (№ 12). Ни өсөн ҡамсыһын тигәндә, уның үҙ сере бар. Ҡамсы һәр саҡ ат менгән кешенең ҡулы осонда була. Һыбайлы уның менән атын ҡыуа, кәрәк икән, Аҡһаҡ ҡола әйтмешләй (“Аҡһаҡ ҡола” иртәге), уның “ҡабырғаһын һанай”. Тимәк, ҡамсыға ат тире һеңә тора. Шуға күрә ул үҙе үк сихри заттарҙы өркөтөү ҡөҙрәтенә эйә булған тылсымлы тирҙе алыштыра ала.

Даль теркәгән миҫалдан күренеүенсә, боронғо башҡорттар зыянлы мифик заттарҙы өркөтә торған ғына түгел, еңеү саралары булыуына ла ышанғандар. Шүрәленең тишек ҡултығының аҫтына ҡул тығып, йөрәген тартып алһаң, ул үлә. Убыр булып үлгән сихырсының ҡәберен асып, күкрәгенә имән ҡаҙыҡ ҡаҡһаң, ҡабат ул төндәрен ут-мәскәй булып осоп, кешегә зыян килтерә алмай (№№ 15, 8Г).

Серле ҡара көс менән алышҡанда, ҡара доға рәүешендәге поэтик һүҙҙең магик көсөнә таянырға тырышҡандар. Ен бейеүен, йәғни ҡойондо күргәндә, былай тип “ҡара доға” уҡырға:

Ҡара йыланды ҡамсы ит,
Ҡарындашыңды бисә ит!
Таҙҙың туйына кит!
Тфү, мәлғүн! –

Тип, өс тапҡыр төкөрөргә, ти халыҡ инанысы.

Башҡа төрки халыҡтарында ла, монголдарҙа ла бындайыраҡ йола бар икән. Ҡаҙаҡтар, мәҫәлән, ҡойон күрһәләр, көлә-көлә төкөрөнөп, былай тиҙәр: “Таҙҙың тирмәһенә кит, дуҫыңдың тирмәһенә кит!” (20)

Албаҫты ҡыуғанда, бағымсы, ҡамсыһын һелтәй-һелтәй:

Ҡайҙан килдең, шунда кит,
Йыуан имсәктәргә кит,
Йомшаҡ түшәктәргә кит,
Ҡояш байышына кит,
Бында һиңә урын юҡ,
Ҡайҙан килдең, шунда кит, –

тип һамаҡлай (№ 12).

Исламды ҡабул иткәс, сихри ҡара көстәрҙән һаҡланыу өсөн, мәжүсилек дәүеренә хас ҡара доғалар менән бер рәттән, "Ҡөрьән-Кәримдән" ятлап алынған доғалар – аят, сүрәләр уҡый башлағандар.

Сихри заттарға ҡаршы төрлө саралар ҡулланалар. Шулай ҙа ислам күҙлегенән иң көслө сара "Ҡөрьән-Кәрим" доғалары иҫәпләнә. Бисураһын биҙҙереү өсөн, ун ике төн буйы Ҡотлогилде тигән кешене ҡамсы менән һуҡтыралар. Илай-илай, төшөн һөйләгәс кенә, ул һауыға. Был яңылыкты белгәс, бисураһы сеңләп-сеңләп илай. Ә Нурмөхәмәтте, бисураһын эйәртеп, ауылдан алыҫ ергә – Мәсем ташына алып баралар. Шунда уны өшкөргәс, бисураһы шашып ҡала. Бисура шунда тороп ҡалыр ине йә аҙашыр ине лә, тик сюжет талап иткән бер шарт үтәлмәй: егетте икенсе юлдан алып ҡайтырға тейеш булһалар ҙа, килгән юлдан алып ҡайталар. Бисураһы сәпәкәйләп ҡыуана был хатаға.

Ә инде шүрәленән һаҡланыу, уны язаға тарттырыу төрлөсә атҡарыла, тип аңлата инанмыштар. Атҡа ял итергә лә, утларға ла ҡамасаулап, төнө буйы уның өҫтөнән төшмәгәне өсөн, ат һыртына һыланған ыҫмалаға арт һаны менән ҡуша йәбешкән шүрәлене йә яндырып үлтерәләр, йә берәй егеткә кейәүгә бирәләр. Тәүге осраҡта уның ҡарғышы төшөп, ауыл киңгәй барып, киңгәй барып, йә бөтә, йә ҙураймай, тимәк кешеләрененең түле шиңә (31, 247). Икенсе осраҡта, "Шүрәлеләр араһы" тигән этнонимик легендаға нигеҙ булған инанмыш буйынса, киреһенсә, халыҡ арта: шүрәле ҡатындан тыуған алты ир баланың нәҫеле тотош бер урам хасил итә (4, № 14). Бер бик популяр инанмыш буйынса иһә, шүрәлегә яза нәҡ Ғабдулла Туҡайҙың "Шүрәле" тигән әкиәт-поэмаһындағыса атҡарыла. "Урманға барған бер уҫал егеткә шүрәле тап була. "Егет, кети-кети уйнайыҡ!" – тигәс, егет: "Тәүҙә ҡыҫма-ҡыҫма уйнайыҡ!" – ти һәм уның ҡулын бүрәнә ярығына ҡыҫтыра. – Исемем Былтыр," – ти. Теге: "Былтыр ҡыҫты!" – тип ҡысҡыра башлай" (31, 232). Эштең ахыры Ғабдулла Туҡайҙың ошо инанмыш сюжетына яҙылған әкиәт-поэмаһының финалы менән бер:

Иртәгеһен шүрәлеләр был фәҡирҙе тиргәйҙәр:
"Һин йүләрһең, һин ҡоторған, һин тилергәнһең!" – тиҙәр.
Әйтәләр: "Ҡысҡырма һин, тиҙ яҡшылыҡ менән тыйыл!
Эй йүләр! Ҡыҫҡанға былтыр, ҡысҡыралармы быйыл?!" (28, 102).

Шүрәленекенән һис кәм булмаған имсәге менән кешенең тын юлын ҡаплаусы, йөклө ҡатындарҙың аңын алыусы ялбырбаш (Себер татарҙарынса, Цары цәц – һары сәс) албаҫтыны иһә бесәй йә япалаҡ менән өркөтөргә була икән. Уның, йылан кеүек үк, ҡамсынан ҡурҡыуына ла ышанғандар (29, 75).

Инаныстар шуны ла талап итә. Сихри көстәрҙе өркөтөү өсөн, билдәле сараны файҙаланыу менән сикләнеп ҡалмай, кәрәкле шарттарҙы үтәү ҙә мотлаҡ. Ен-ҡойон ҡоторғанда, ошондай осраҡҡа ғына тәғәйен ҡара доғаны уҡып төкөрөнөү кәрәк (№ 9), мәскәй осҡанда, киреһенсә, төкөрөнөргә ярамай, ә бығаса телгә алған сараны күреү (иҙеү ысҡындырыу, һәнәк сатаһын һындырыу) етә. Төкөрә ҡалһаң: "Әл дә төкөрҙөң, тамағым ебене", – тип ҡыуана була (№ 8 Б). Даль миҫалындағы юханың, күл ҡороған һайын, ҙур яфалар һалып тороуы уға ҡаршы һунарсыларҙың бер ни эш тә ҡыла алмауын аңлата. Ә бер аусының еңеүгә өлгәшеүенең сәбәбе уның – ҡыйыу булыуында ғына түгел, билдәле шартты үтәүенә бәйләнгән. Ул шарт – юхаға, һә тигәнсә, бер-бер артлы уҡ яуҙырыу һәм үксәһен яралау.

Шулай итеп, инанмыштар бабаларыбыҙҙың параллель донъя менән контактҡа инеү мөмкинлегенә инаныуына нигеҙләнгән. Инанмыштар борон-борондан кешенең тәбиғәт стихияһына ҡулайлашыу, улай ғына ла түгел, форсаты сыҡҡанда, уны үҙенә яраҡлаштырыу хаҡындағы хыялын сағылдыра.

* * *

Нисәнсе заттан һөйләнеүе инанмыштарҙы меморат һәм фабулат тибындағы ике жанр күренешенә бүлеп ҡарарға форсат бирә. Шул бүленеш менән сикләнмәй, уларҙың төп персонаждарын иҫәпкә алған тематик принциптан сығып, төркөмләп тикшерергә лә була. Ундай саҡта һәр сихри заттың образы тағы ла тулыраҡ асыла, ундай зат менән осрашҡан кеше лә ситтә ҡалмай. Тик был хаҡта ентекле күҙәтеү яһар өсөн, сихри заттарға инаныуға ҡағылышлы материалды, айырыуса инанмыш хәлендә һөйләнелгәндәрен төрлө төбәккә, төрлө йәштәге ир-ат затынан да, ҡатын-ҡыҙ халҡынан да әүҙемерәк һәм күберәк туплайһы, уларҙы системаға килтерәһе бар.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Алиева К.М. Культ Тэнгри в системе мировоззренческих представлений тюркоязычных народов Северного Кавказа / Проблемы мировоспитания и миропонимания в древности и средневековье // Тюркология – 88: Тезисы докл. и сообщ. 5 Всесоюзной тюркологич. конфер. (7–8 сент. 1988). – Фрунзе: Илим, 1988. С. 549–551.

2. Алимгулов Арысланбак. Башкирские мифологические рассказы // Вестник Оренбургсого учебного округа. – 1915. – № 5. – С.10–212;
3. Арабско-русский словарь – Альҡамус Альғəраб Альруси. – М., 1962. – С. 274.
4. Башҡорт легендалары / Материалды һайлаусы Əхмəт Сөлəймəнов; төҙ, иҫкəрмəлəр, мөхəрр. Марат Минһажетдинов менəн Кирəй Мəргəн; инеш мəҡ. һəм аңлатмалар авт. Марат Минһажетдинов менəн Əхмəт Сөлəймəновтыҡы. –Өфө: БДУ нəшр., 1969. – 186 с.
5. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар бир. Мөхтəр Сəғитов; Яуаплы мөхəрр. Əхнəф Харисов. – Өфө: БКН, 1973. – Эпос: 2-се кит. – 370 б.
6. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мəҡ., аңлатмалар авт. Марат Минһажетдинов, Əхнəф Харисов; Яуаплы мөхəрр. Нур Зарипов. – Өфө: БКН, 1976. – Əкиəттəр. 1-се кит. –372 б.
7. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ. Əхнəф Харисов, Марат Минһажетдинов; Инеш мəҡ. Марат Минһажетдиновтыҡы; Аңлатмалар Лев Бараг менəн Марат Минһажетдиновтыҡы; Яуаплы мөхəрр. Нур Зарипов. – Өфө: БКН, 1976. – Əкиəттəр: 2-се кит. – 372 б.
7а. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мəҡ., аңлатмалар һəм һүҙлек авт.
Ə.М. Сөлəймəнов менəн Р. Ə. Солтангəрəева; Яуаплы мөхəрр. Ғ.Б. Хөсəйенов. – Өфө: Китап, 1995. –1-се том: Йола Фольклоры. – 560 б.
8. Башҡорт халыҡ ижады / материалды һайлаусы, төҙөүсе, инеш мəҡ. авт. Əхмəт Сөлəймəнов; Аңлатмалар Лев Бараг менəн Əхмəт Сөлəймəновтыҡы; Яуаплы мөхəрр. С.Ə. Галин. – Өфө: БКН,1981. – Əкиəттəр: 4-се кит. – 398 б.
8а. Башҡорт халыҡ ижады / материалды һайлаусы, төҙөүсе, инеш мəҡ. авт.
Əхмəт Сөлəймəнов; Аңлатмалар Лев Бараг менəн Əхмəт
Сөлəймəновтыҡы: Н.Т.Зарипов. – Өфө: БКН, Башҡортостан кит. нəшр.
Əкиəттəр: 1983. – 5-се кит. – 385 б..
9. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мəҡ., аңлатмалар, һүҙлек һəм мотивтар күрһəткесе авт. Ф.А.Нəҙершина; Яуаплы мөхəрр. Кирəй Мəргəн, Əхмəт Сөлəймəнов. – Өфө: Китап, 1997. – 2-се том: Риүəйəттəр, легендалар. – 440 б .
10. Башҡорт фольклоры фонды. БДУ, башҡорт əҙəбиəте һəм фольклор кафедраһы).
11. Башҡорт халыҡ риүəйəт, легендалары // БХИ / Төҙ., инеш мəҡ., аңлатмалар, һүҙлек һəм мотивтар күрһəткесе авт.

Ф.А. Нәҙершина; Яуаплы мөхәрр. Кирәй Мәргән. – Өфө: БКН, 1980. – 406 б.
12. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда/Яуаплы ред. Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө: БКН, 1990. – 1-се том. Урта быуаттар осоро. – 37-се б.
13. Восточнославянский фольклор: Словарь научной и народной терминологии. – Мн.: Навука и тэхніка, 1993. – С. 56–57.
14. Вәлиди Туған Әхмәтзәки. Хәтирәләр: Төркостандың һәм башҡа көнсығыш төрөктәрҙең милли булмыш һәм культура өсөн көрәше / Әмир Юлдашбаев; Фәнни мөхәрр. Әхиәр Хәким. – Өфө: Китап, 1996. – 425–426.
15. Галданова Г.Р. Относительно “Тэнгри” божества тюрко-монголов (По культовым текстам) // Тюркология – 88. – Фрунзе: Илим, 1988. – С. 551–552.
16. Graves R. A goroj nutoszok. Br., 1981. – 1. – S. 31 (Иожеф Торма менән Фирҙәүес Хисаметдиноваларҙың “Демоны болезней в традиционной башкирской этиологии” тигән мәҡәләһе буйынса. Ҡар.: Башҡорт фольклоры: Тикшеренеүҙәр һәм материалдар. – Өфө: ТТӘИ, 1998. – С. – 98–99).
17. Даль В.И. Баширская русалка // Башкирия в русской литературе / Сост., авт. предисл., коммент. Мурат Рахимкулов. Уфа: БКИ, 1989. – Т. 1. – С. 172 – 188.
18. Инан А. Дастаны Несели Ченгиз Хан // Башҡорт халыҡ ижады / Текстарҙы асыҡлап, барлап, томды төҙ. Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов, Миңнеғәли Нәҙерғолов; Инеш мәҡ. авт. Әхмәт Сөләймәнов; Һүҙ ахыры Ғайса Хөсәйенов, Әхмәт Сөләймәнов, Миңнеғәли Нәҙерғолов һәм Флүр Сибәғәтовтыҡы; Аңлатмалар һәм һүҙлекте Ғайса Хөсәйенов, Миңнеғәли Нәҙерғолов ҡатнашлығында Әхмәт Сөләймәнов әҙерләне; Яуаплы мөхәрр. Әхмәт Сөләймәнов. Өфө: Китап, 2004. – 7-се том: Яҙма ҡисса һәм дастандар. – 547 – 553-сө б.
19. Куз-Курпяч, башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем и переведенная на российский в долинах гор Рифейских, 1809 года / Обработка Т. С. Беляева // Башкирия в русской литературе / Сост., авт. предисл., коммент. Мурат Рахимкулов. – Уфа: БКИ, 1989. – Т. 1. – С. 247 – 313.
20. Катанов Н.Ф. Среди тюркских народов // ИРГО.Известия общества. Т. 29. – Б.М., Б.Г. – 23 с. (отд. оттиск).
21. Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. – Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1961. – 388 б.
22. Ковалевский А.П. Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921 – 922 гг. – Харьков, 1956. – 347 с.

23. Кудряшев П.М. Предрассудки и суеверия башкирцев// Башкирия в русской литературе / сост., авт. предисл. и коммент. М.Г.Рахимкулов. – Уфа: БКИ, 1989. – Т.I. – С. 357 – 368.
24. Мирасов С. 10 йыл эсендә башҡорт халыҡ әҙәбиәтен өйрәнеү, тикшереү юлында ниҙәр эшләнде // Белем. –1929. – № 3. – 89 – 96-сы б.
25. Нәҙершина Ф.А. Хөрәфәти хикәйәләр // Башҡорт фольклоры: Тикшеренеүҙәр, материалдар. – Өфө: ТТӘИ, 1993. – 100–173-сө б.
26. Руденко С.И. Башкиры. – М.; Л., 1956. – 3?ғ с.
27. Сыңғыҙнамә // Башҡорт әҙәбиәте анталогияһы: 2 томда / Төҙ., баш һүҙ авт. Миңлеғәли Нәҙерғолов. Сыңғыҙнамә // Башҡорт әҙәбиәте антологияһы: 2 томда / Төҙ., баш һүҙ авт. Миңлеғәли Нәҙерғолов, Ғайса Хөсәйенов. XIII – XVIII 1999. – I том. 255 – 262-се б.
28. Туҡай Ғ. Әсәрләр: Дүрт томда / Томды төз. һәм искәр. хәзерләүче Р.Гайнанов. – Казан: Татарстан кит. нәшр., 1975. – 1-че т. – Шигырьләр, поэмалар (1904 – 1908). – 432 б.
29. Урманче Фатих. Татар мифологиясе: Энциклопедик сүзлек. – Казан: Мәгариф, 2008.
30. Фрэзэр Дж. Золотая ветвь. Вып. 1. [БМ]: Изд. Научн общества “Атеист”, 1928.– 197 с.
31. Шүрәле // Аң. – 1914. – № 19.
32. Шәхси фонд.

***Һорауҙар һәм эш***

1. Ҡарһүҙҙәр системаһында инанмыштарҙың урынын билдәләгеҙ һәм уларҙың ҡайһы бер жанр үҙенсәлектәрен аңлатығыҙ.

2. Тәңреләр, раббылар һәм эйәләр хаҡында үҙегеҙ белгәндәрҙе дәфтәргә теркәгеҙ, уларға аңлатма бирегеҙ.

3. Башҡорт мифологияһына, инанмыштарына хас серле сихри заттар, уларҙың булмышы һәм төркөмләнеше хаҡында ни beləһегеҙ?

4. Ел культына бәйле инаныс һәм инанмыштар хаҡында белешмә бирегеҙ.

5. Тест өсөн һорау: серле мифик заттар менән мөнәсәбәткә ингәндә, уларҙан нисек һаҡлананалар? Яуап: ҡасалар, ҡаршы торалар, магик һүҙ әйтәләр.

# IV БҮЛЕК
# ХӘТИРӘЛӘР

Белгән-күргәнен кеше үҙ күңелендә генә һаҡлап ҡалмай. Уны башҡаларға хикәйә итә, шул туралағы уйҙары, кисерештәре менән уртаҡлаша. Әгәр йөкмәткеһе менән бүтәндәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ булһалар, башлап һөйләүсе йәшәгән дәүерҙә үк уның хикәйәләре телдән-телгә күсә... Бына шул телдән-телгә күсә алыусанлығы менән үндай хикәйәләр күптән инде фольклорсыларҙың иғтибарын үҙҙәренә йәлеп итә килә. Дөрөҫ, башҡорт фольклористикаһында "Башҡорт Йәнтүрәнең хикәйәһе" (уны һуңғы ваҡытҡаса риүәйәттәр рәтендә йөрөтәләр, дәреслектәргә лә ул риүәйәт жанры өлгөһө рәүешендә индерелә килә) "Һунарсыларға һабаҡ" тигән исем аҫтында 1849 йылда В. Зефиров имзаһы менән ташҡа баҫтырылған ике хәтирә (2, 408–411, 416–421) менән XX быуаттың 30–40-сы йылдарында яҙып алынған бер нисә текст һәм мәҡәләне иҫәпкә алмағанда, был тәңгәлдә әллә ни күҙгә күренерлек эш башҡарылманы. Уның ҡарауы башҡа халыҡтарҙа, мәҫәлән, рус фольклористикаһында, XX быуаттың 30-сы йылдарынан алып халыҡ сәсмәүеренең был өлкәһе менән ҡыҙыҡһыныу артҡандан-арта бара. Рус фольклорсылары уларҙы, ғәҙәттә, йә «сказ», йә «устный рассказ» тип йөрөтһә, башҡорт фольклорсыларының хеҙмәттәрендә иһә берсә «сказ», берсә «булған эште әкиәт итеп һөйләү» (быль), берсә «легенда», «риүәйәт», «хикәйә-хәтирә» тип исемләнде (5; 6; 7).

Атамаларҙы ҡулланыуҙа ғына түгел, уларҙың жанр тәбиғәте, составы хаҡында ла тикшеренеүселәр әлегәсә бер фекергә килгәне юҡ.

Рус фольклористикаһында халыҡ прозаһының һүҙ барған төрө хаҡында әле лә ике төрлө ҡараш-концепция йәшәп килә. Л.Е.Емельянов, мәҫәлән, хәтирә, рүәйәт кеүек үк телдән бәйән ителә торған был күренеште, ғөмүмән, фольклор әҫәре тип ҡарамау яғында (4, 245–264). С.Н.Азбелов иһә, әгәр быңдай сәсмәүер күренеше ижтимағи әһәмиәткә эйә икән, ул саҡта уны фольклор жанры тип ҡарарға була, шул шартҡа яуап бирә алмаһа, фольклорҙан тышта тора, тип иҫәпләй (1, 132–177).

Әлбиттә, халыҡ араһында осраған ҡарһүҙҙәрҙең хикәйә, хәтирә, риүәйәт кеүектәренең төрлөһө бар. Бар уларҙың ижтимағи әһәмиәткә эйә булып, жанр билдәләре асыҡланып, киң таралғаны. Бар бер-ике кешенең үҙ-ара бүлешкән иҫтәлектәрҙән ары китмәгәне. Жанр билдәләре яғынан да улар бер иш түгел. Башынан үткәнде хикәйәләүсе кеше үҙе бер үк ваҡытта шул хикәйәнең авторы ла, геройы ла булып сығыш яһай. Шуға күрә хикәйәләү шаһитлы үткән заманда беренсе зат исеменән алып барыла. Быңдай хикәйәләрҙе *хәтирәләр* тип кенә йөрөтөргә булыр ине. Ваҡиғала үҙе туранан-тура

ҡатнашмаһа ла, уны шаһит булараҡ тасуирлаүҙар ҙа стиле һәм функцияһы буйынса хәтирәләргә ҡарай.

Граждандар һуғышы ваҡиғаларына бәйле «Батыросҡанташ», «Ерәнсәкәй», XX быуаттың 50–60-сы йылдарында булған хәлдәр тураһындағы «Айыу ташы», «Хәмиҙә» әҫәрҙәре, хәтирәгә хас «шаһитлелек» билдәһен юғалтыу сәбәпле, геройҙары иҫән саҡта уҡ риүәйәт төҫөн алған. Икенсенән, бер үк ваҡиға төрлө кешеләр тарафынан төрлө формала, йәғни бер вариантта – хәтирә, икенсеһендә – ярым риүәйәт, ярым хәтирә, өсөнсөһөндә риүәйәт һымаҡ итеп һөйләнергә мөмкин. Мәҫәлән, 1918 йылда Дыуан-Мәсетле волосендә яңы властарға ҡаршы күтәрелгән фетнә тураһындағы иҫтәлектәр хәтирә рәүешендә лә («Комиссар Ҡотдостоң үлеме»), ярым хәтирә, ярым риүәйәтте хәтерләтерлек итеп тә башҡарылған («Болыпевиктәр бөтә буламы!»). Бынан сығып, ҡайһы осорҙо сағылдырыуына ҡарамаҫтан, әгәр хикәйәлә шаһитлелек билдәһе булмай икән, ундай әҫәр риүәйәт тип иҫәпләнергә лә лайыҡ.

Бәйән ителгән ваҡиғаларҙың ижтимағи әһәмиәте башҡарыусы йәшәгән осорҙан һуң да һаҡланып ҡалһа, хәтирәләрҙең риүәйәт булып китеүгә мөмкинлек тыуа. Тимәк, хәтирә-иҫтәлектәр риүәйәт формалашыу юлында тәүге баҫҡыс хеҙмәтен үтәүҙәре менән дә иғтибарға лайыҡ.

Хәтирәләрҙең, риүәйәттәр кеүек үк, этиологик мотивҡа (йәғни аңлатмалылыҡҡа) ҡоролғандары ла осрай. Урын исемдәрен аңлатыусы «Мөбәрәк ҡайыны», «Фатима соҡоро», «Хәйрулла ағаслығы», «Партизан урманы – Заһит баҡсаһы» ише хәтирәләр шуға миҫал. Аңлатмалылыҡ та хәтирәләрҙең риүәйәткә тартылыуына булыша.

Әгәр боронғо фольклорға оҙайлыраҡ дәүерҙәр, быуаттар һынауын үтергә мөмкинлек булһа, яңы заман фольклоры йәш әле: ул тыуыу һәм формалашыу юлының башында ғына тора. Ләкин ул да – дәүер емеше, үҙ заманының “ижтимағи факты”. Шуға күрә яңы дәүер фольклоры хаҡында һүҙ алып барғанда, уны Октябрь революцияһына тиклем оҙайлы ваҡытта, иләнере иләнә-иләнә, төрләнере төрләнә-төрләнә, быуаттар һүҙымында формалашҡан фольклор үлсәмдәре менән генә баһалау бик үк дөрөҫ булмаҫ ине. Шундай факторҙарҙы иҫәпкә алып, совет осоро риүәйәттәрен генә түгел, бер ни тиклем шартлыраҡ булһа ла, хәтирәләрҙе лә фольклор күренеше тип иҫәпләй алабыҙ. Һәр хәлдә, информант үҙе ҡатнашҡан йә ҡатнашмаһа ла, шаһит булған ваҡиға тураһында бәйән итеү һөҙөмтәһендә ҡолаҡҡа яғырлыҡ мәғлүмәтле текст импровизацияланһа, фабула, сюжет күҙлегенән ҡарағанда, әгәр ҙә ул бер бөтөн булып ойошҡан икән, фольклорсы уға иғтибарһыҙ ҡала алмай. Сөнки тап шундай текстаҙың йөкмәткеһе тыңлаусыларҙың хәтерендә ҡалыусан. Һөҙөмтәлә бөгөн хәтирә рәүешендә бәйән ителгән хәл-ваҡиғаны тәүге информанттың

тыңлаусылары, шарты тыуған һайын, “фәлән-фәләндең хәтирәһе” рәүешендәтелгә алыусандар. Артабан инде фольклорҙың эске ҡанундарына ярашлы, тәүге информант иҫән саҡта уҡ уның хәтирәһе үҙаллы йәшәй башлай ҙа, ваҡыт үтә килә, риүәйәттәр фондына күсә. Шулай итеп, тыуған мәлендә үк хәтирә тыңлаусыларҙы ҡыҙыҡһындырһа, уның фольклорлаша барыу процесын күҙәтергә форсат тыуа. Шуның менән дә ул фольклор ғилеме өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Бына ни өсөн *шартлы рәүештә булһа* ла, *хәтирәләрҙе лә фольклор күренеше тип* ҡарай алабыҙ икән.

Тематик принципҡа таянып эш иткәндә, хәтирәләр араһында: *1) элекке тормош, 2) граждандар һуғышы, 3)* XX быуаттың 20–30-сы йылдарында булып үткән тарихи һәм сәйәси ваҡиғалар тураһындағы, 3) XX быуаттың 20–30-сы йылдарында булып үткән тарихи һәм сәйәси ваҡиғалар*,)4)* Бөйөк Ватан *һуғышы, 5) Афған һуғышы, 6) мөстәҡиллек өсөн көрәш, )7) тормош-көнкүреш хәлдәре тураһында бәйән итеүсе төркөмдәр барлығы беленер ине.*

1. Элекке тормош хаҡындағы хәтирәләр

Тормош тыуҙырған ауырлыҡтарҙы үҙ елкәләрендә татыған кешеләрҙән яҙып алынған хәтирәләрҙә синфи тигеҙһеҙлеккә нигеҙләнгән йәмғиәттең ҡәһәрле яҡтары фашлана. «Кантондар бар саҡта», «Алдыҡ азатлыҡ алдыҡ», «Әхмәтша йырсы», «Сәйебеҙ ҙә булды, ерҙе лә һатманыҡ» (3, 77–78, 83, 86–87: артабанғы текстар ҙа ошо томдан булыр) ише хәтирәләрҙә батша түрәләренең, баярҙарҙың, байҙарҙың, буржуйҙарҙың минминлектәре, кирелектәре, мәкерлектәре, аяуһыҙлыҡтары асып һалына.

Традицион легенда һәм риүәйәттәрҙәге кеүек үк, элекке дәүер хаҡындағы хәтирәләрҙә лә ер һатыу проблемаһы үҙәк урындарҙың береһен алып тора. «Ленин булмағанда, бөтә ине башҡорт», «Әлдә революция сыкты» тигән әҫәрҙәрҙә бер деталь иғтибарҙы тарта: ер һатҡан башҡорттоң ат бәйләр ҡаҙыҡ ҡағырға ла урыны юҡ. Ошо ғына деталдә лә ер һатыуҙың фажиғәле һөҙөмтәһе тәрән мәғәнәле сағылыш алған.

Элекке тормош тураһындағы хәтирәләрҙә дини фанатизм менән йола хоҡуғының шәхес иркен сикләүсе, уны түбәнһетеүсе яҡтары нәфрәт менән телгә алына. Уларҙың был яҡтарына синфи йәмғиәт сәбәпсе икәне фашлана («Элекке тормош эт тормошо ине»).

Иҫке тормошто сағылдырыусы хәтирә һәм риүәйәттәргә социаль протест мотивы хас. Был мотив төрлөсә сағыла, әммә ул үҙен һәм синыфташтарын яҡлап көрәшкә күтәрелеүсе батырҙарҙың, айырым шәхестәрҙең образын поэтиклаштырыуҙа бигерәк тә тәрән асыла.

Традицион легенда, риүәйәттәрҙән айырмалы рәүештә, яңы осор «халыҡ хикәйәләре» яңғыҙаҡ батырҙарҙы идеаллаштырыу менән

генә сикләнмәй. Уларҙа күмәктең көсөн бергә туплаусы, бер маҡсатҡа йүнәлдереүсе конкрет шәхестәрҙең тарихи әһәмиәтен, тимәк, халыҡтың синфи берҙәмлектә көс булыуын таныу кимәленә күтәрелеүен күрһәтеү өҫтөнлөк итә («Әлдә революция сыҡты», «Тоҙҡойған приискыһында», «Сәйебеҙ ҙә булды, ерҙе лә һатманыҡ»).

## 2. Граждандар һуғышы тураһындағы хәтирәләр

Граждандар һуғышы осорон сағылдырыусы «ауыҙ-тел хикәйәләр идея-тематик яҡтан ҡап уртаға бүленеп, полдяр ҡапма-ҡаршы ике төркөм хасил итә. Уларҙың совет осоронда яҙып алынғандарында үҙәк урынды ҡаһарманлыҡ мотивы биләй. Унда төп иғтибар иң әүәл ҡаһарман шәхестәр ҡылған ғәмәлдәргә йүнәлтелә. Төп герой сифатында сығыш яһаусылар төрлө булған кеүек, улар ҡылған ҡаһарманлыҡтарҙың әһәмиәте лә төрлө кимәлдә асыла. Ләкин уларҙың барыһын да маҡсат аныҡлығы, фиҙәкәрлек, революцияға тоғролоҡ бер-береһенә яҡынайта һәм, бер сафҡа теҙгәндәй, берләштерә. «Сәрүәр», «Ҡыйыу казак», «Батыросҡанташ», «Нимә ул боевойлыҡ», «Ерәнсәкәй», «Аннаоскантау» һәм риүәйәтләшә башлаған башҡа хәтирәләрҙә геройҙары, мәҫәлән, Әжәл менән йөҙмә-йөҙ осрашҡанда ла, ҡаушап ҡалмайҙар, ирек, азатлыҡ, Совет власы өсөн йәндәрен фиҙа ҡылырға әҙер торалар. Шуға ла Граждандар һуғышы тураһындағы хәтирә һәм риүәйәттәрҙә ҡаһарманлыҡ мотивы трагик пафостан айырылғыһыҙ. «Аннаосҡантау». «Ерәнсәкәй». «Билдәһеҙ ҡыҙылармеец», «Ҡантубә» һ.б. әҫәрҙәрҙең геройҙары тиңһеҙ алышта баштарын һала. Әммә уларҙың оло маҡсат юлында ҡорбан булыуы ул трагедияны оптимистик рухлы итә.

Граждандар һуғышы тураһындағы әҫәрҙәрҙең байтағында герой сифатында айырым шәхес түгел, ә дөйөм коллектив, халыҡ, ҡыҙылдар сығыш яһай. Шуның менән революцион көрәштең хеҙмәтсән халыҡ, масса эше булыуына баҫым яһала.

Күп кенә риүәйәт һәм хәтирәләрҙә Блюхер, Чапаев, Точисский, Крупская, ағалы-ҡустылы Кашириндар, Муса Мортазин кеүек тарихи шәхестәр телгә алына. Улар ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең аҡыллы етәкселәре, дошмандарға ҡаршы көрәште ойоштороусылар рәүешендә һынландырыла («Чапаев дәресе», «Точисский рәхмәте», «Каширинсылар килгәндә»).

Шуның менән бергә совет осоронда һөйләү тыйылған хәтирәләрҙә “краснайҙар”ҙың (халыҡ ҡыҙылдарҙы шулай телгә ала) баш-баштаҡлыҡтары хаҡында хәтирәләр күп ине. Үкенескә ҡаршы, эҫе мәлендә улар йыйылманы. Шулай ҙа шул осор хаҡында быш-быш ҡына һөйләгәндәрҙе ишеткән быуын үҙенә етә килгән быуынға ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе еткергән. Шуларҙан, өҙөк-йолпоғораҡ риүәйәттәр хәлендә генә булһа ла, әле лә уларҙы ишеткеләргә була.

Мәғлүм булыуынса, Петорградта “Аврора”ның пушкаһы атыуынан таралған шаңдау һүнер һүнмәҫтән, төтөнө таралыр-таралмаҫтан 1917 йылдың 15 ноябрендә Ырымбур, Өфө, Пермь, Һамар, губерналарына ингән аҫаба башҡорт биләмәләре Рәсәйҙең автономиялы өлөшө, тип иғлан ителә. Әммә шовинистик рухлы большевиктарға милли республика тыуыуы оҡшамай. 1918 йылда Башҡортостан хөкүмәте ҡулға алына. Республиканы ойоштороусыларҙан Әхмәтзәки Вәлиди менән уның арҡадаштары төрмәгә юлыға. Уларҙы ҡоткарырға теләп, казактар менән Ғәлимйән Таған һалдаттарының төрмәгә һөжүме уңышһыҙлыҡҡа осрай. Әммә бөтөнләй үк һөҙөмтәһеҙ ҙә булмай. Уларҙың тағы килһә, үлтерелеүенән шөрләгән төрмә начальнигы Вәлдидиҙәрҙе үҙе сығара. Бында шуныһы ла мөһим: казактар менән башҡорттарҙың бер булып бер табандан ҡуҙғалып, төрмәгә һөжүм итеүе халыҡ араһында Вәлиди һәм уның арҡадаштарының абруйы ни тиклем ҙур булыуы тураһында һөйләй (Ә.-З. Вәлиди. Хәтирәләр. – 206 – 210-сы б. ).

Башҡорт хөкүмәте тотҡонлоҡта саҡта мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич хәҙерге Йылайыр, Ейәнсура, Баймаҡ райондары тирәһендә ҡыҙылдарҙан йәшенеп йөрөй. ул яҡтарҙа уның хаҡында әле лә риүәйәтләшә башлаған хәтирәләр ишетергә була. Уларҙан беҙ шағирҙың элеккесә шаян һәм оптимист булыуына төшөнәбеҙ. Берсә ул үҙен эҙәрләүселәрҙән иҫәргә һалышҡан кеше булып, берсә ваҡ мал араһына йәшенгән хәлдә күҙ алдына баҫтырабыҙ. Абзан ауылында уны баҫыуға тиҙәк сығарған санаға йәшереп алып ҡалалар. Саҡ ҡына тыныслыҡ тыуһа, Бабич төртмә таҡмаҡтар сығарыр булған. Ә Баймаҡтағы Таулыҡай ауылы хәҙрәте Шоңҡар ҡартта йәшенеп ятҡанында ул бөгөн һәр башҡорт ғорурланып һөйләй алған “Башҡортостан” тигән ҡобайырын яҙа.

Үҙ яҙмышы ҡыл өҫтөндә торғанда ла, илен, халҡын уйлай шағир, уларҙы бер-береһенән айырылғыһыҙ төшөнсә тип белә һәм киләсәктә икеһенең дә азат булырына инанып, былай тип яҙа:

Башҡортостан – гөлбоҫтан,
Сөмбөлстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан!
Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптайым тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ…

2005 йылдың ҡышында Баймаҡ районының хәтерле халҡы, хәтерҙең ҡәҙерен белгән етәкселәре Таулыҡай ауылында ошо ҡобайырға һәйкәл асты. Үҙ-үҙҙәрен хәүеф аҫтына ҡуйып, шағирҙы

һыйындырыуҙары кеүек үк был һәйкәл дә – халыҡтың Бабичты ни тиклем яҡын күреүенә, яратыуына дәлил ул.. Шул уҡ ваҡытта ҡара мәрмәр стела рәүешендәге ул һәйкәл һөйөклө шағирын үлтереүсе ҡара эсле заттарға халыҡтың ҡара ҡарғышын да, шул оло юғалтыу айҡанлы кисергән ҡара ҡайғыһын да символлаштыра кеүек.

“Краснайҙар” заманында бер ғәйепһеҙ муллалар ҙа уның яҙмышына дусар ителә. Ҡатын-ҡыҙҙы мәсхәрәләү осраҡтары була. Малтыуарҙы тартып алыу, башҡа төрлө талауҙар ғәҙәти хәлгә әерелә. Шундай саҡта Унасов кеүек ҡыйыуҙар совет власына ҡаршы ҡорал күтәрә. Шул сәбәптән Пенза, Семеновы полктары командованиеһына, Поленов, Кашириндар кеүек башкиҫәрҙәр өсөн һәр башҡорт потенциаль дезертир булып тойола. Бына шулай революция эшен яҡлайбыҙ тигәнсә, киреһенсә, халыҡты уға ҡаршы ҡуйыуға өлгәшәләр. Граждандар һуғышы һәм унан һуң урындарҙа совет власын нығытыу өсөн барған көрәш тураһындағы хәтирәләр шуға ла идея һәм йөкмәтке яғынан ҡапма-ҡаршылыҡлы. Уларҙың араһында рәсми властар үҙ күргәне менән улар күрә алмағандары ла бар. Муса Мортазин, Әхмәтзәки Вәлиди, Ш. Бабич тураһындағы хәтирәләр – ана шундаҙарҙың баҙыҡ миҫалы ул.

### 3. XX быуаттың 20–30-сы йылдарында булып үткән тарихи һәм сәйәси ваҡиғалар тураһындағы хәтирәләр

Был осор хәтирәләре үҙ эсенә Граждандар һуғышынан һуңғы дәүерҙә Башҡортостанда ғына түгел, тотош илдә барған сәйәси ваҡиғаларҙы үҙ эсенә ала. Бында совет власын эске дошмандарҙан таҙартыу һылтауы менән алып барылған эҙәрләүҙәр, ҡырылыштар, шул иҫәптән совет власы биргән хоҡуҡтарҙы файҙаланып, бауырын ҡалҡытып, ныҡлы хужалыҡ ҡороп өлгөргән эшсән һәм эшҡыуар крәҫтиәндәрҙе кулак синыфы тип Себергә оҙатыу, сәйәси золом ҡорбандары хаҡындағы хәтирәләр күҙ уңында тотола.

1918–1921 йылдарҙа Башҡортостандың әле бер мөйөшөндә, әле икенсеһендә совет власы һәм уның урындағы етәкселеге менән килешмәүселәрҙең күтәрелештәре ҡуба тора. Заманында тарихҡа һәм әҙәбиәткә дизертеиҙар хәрәкәте, контрреволюцион көстәр, милләтселәр хәрәкәте тигән яман ат тағылған был күтәрелештәрҙә ҡатнашыусылар ҙа, уларҙы баҫтырыусы хөкүмәт көстәре лә аяу белмәй көрәш йәйелдереү һөҙөмтәһендә, ике яҡтан да бик күп ҡорбандарҙың ҡаны ҡойола. Әммә совет осоронда яҙып алынған хәтирәләрҙә ул ҡанлы ваҡиғалар, рәсми тарихҡа ярашлы бер яҡлы ғына баһаланды. Был болалар ваҡытында урындағы партия, совет эшмәкәрҙәре, активистарҙың көрәше, тиңһеҙ алышта уларҙың ҡаһармандарса һәләк булыуына нығыраҡ баҫым яһалды. «Большевиктар бөтә буламы!», «Батыр ташы» һ. б. шундай хәтирәләрҙә, совет власына ҡаршы

сығыусылар вәхшиҙәрсә аяу белмәҫ синфи дошмандар тип нарыҡланды. Ә рәсми власть вәкилдәре тоғро заттар һуңғы һулыштарынаса уҙ бурыстарына тоғро ҡалыусылар һәм үҙҙәренең шаһиттарса үлеме менән дә ҡара көстәрҙе фашлаусылар итеп һынландырылды. “Ҡанлы көндәр”, “Большевиктар бөтә буламы”, “Комиссар Ҡотдостоң үлеме” ише хәтирәләрҙең геройҙары шуға миҫал. Былдай әҫәрәҙәрҙә кулактар һәм уларҙы шәриғәт исеменән ҡотортоусы итеп күрһәтелгән мулла (һуңғыһына “Ҡотҡосо” хәтирәһе миҫал) – бер яҡлы, большевиктар – икенсе яҡлы итеп күрһәтелеүҙән тыш, өсөнсө төркөмгә лә урын бирелә. Улар – кем яғынан булмаһын, ҡан ҡойошто үҙһенмәүсе ябай халыҡ вәкилдәре. “Ҡанлы көндәр” хәтирәһе буйынса тап шул төркөмдән берәү, анығыраҡ әйткәндә, Мәсетле районы Дыуан-Мәсетле ауылынан шул хәтирә менән уртаҡлашҡан 1904 йылғы Әсәҙуллин Ғәйнетдиндың атаһы, йәғни Байрам бабай, Хөснетдинов Хәйретдин тигән большевикты үлтерелеүҙән һаҡлап алып ҡала. Уны йәшереүгә ул саҡта ун дүрт йәш менән барған улы Ғәйнетдин дә булыша. Картуф араһына шыуышып килеп ингән комиссар шул малайҙың маскировкаһы арҡаһында ғына имен ҡала. Ғәйнетдин, картуф утаған кеше булып, ят күҙҙәр күрмәҫлек итеп, уның өҫтөнә ҡый үләндәрен өйә. Ә инде “Большевиктар бөтә буламы?!” тигән хәтирә, кулак ҡотҡоһона бирелеүселәр: “Большевиктар бөттө! Большевиктарҙы ҡырҙыҡ!” – тип маһайған бер мәлдә, бер үткенсе: “Дыуан-Мәсетлелә большевик бөтөү менән, илдә большевик бөтөр тиҙәр микән!” – тип, үҙ алдына һөйләнгәндәй итеүе менән үк улар менән бәхәскә ингәндәй була.

Колхозлашыу осоро тураһындағы халыҡ прозаһы өлгөләрендә лә синфи ҡаршылыҡ темаһы өҫтөнлөк ала. Ҡапма-ҡаршы көстәрҙең бәрелештәре хаҡында һүҙ барғанда, уларҙа ла әле асыҡланған тенденция өҫтөнлөк итә (“Колхозлашҡан саҡта”, “Хәсән шыршыһы”, “Ғиззәт ҡараҡ галошы”).

1920–1930 йылдарҙа илдә ҡупҡан сәйәси золом ваҡиғалары хаҡындағы хәтирәләр шул тамуҡта булған йә шундайҙарҙы үҙе күреп, ишетеп белгән кешеләр ауыҙынан бары 1956 йылдан һуң ғына ишетелә башланы. Ни өсөн тигәндә, шул йылда КПСС-тың XX съезында Сталиндың шәхес культы фашланды. Тора-бара сәйәси золомға дусар ителеүселәрҙең исемдәре аҡланды, һәм, шул яҙмышҡа дусар ителеп тә, иҫән ҡалғандарҙың, шундайҙарҙы һәм яман атлы “тройка”ның хөкөм ҡарары менән юҡ ителеүселәрҙе белгәндәрҙең теле сиселде. Унда ла тәүге осорҙа һәр кем, алдын-артын ҡарай-ҡарай ғына, хәтирәләре менән бүлеште. Ни өсөн тигәндә, берҙән, шул золомдо ғәмәлгә ашырыусы ҡанлы ҡулдарҙың байтағы иҫән ине; икенсенән, исеме берсә аҡланып, берсә тыйылғандар ҙа булды. Һуңғыһына Граждандар һуғышы ҡаһарманы (дөрөҫөрәге, өс тапҡыр геройы, сөнки өс тапҡыр “Хәрби

Ҡыҙыл Байраҡ" ордены менән бүләкләнгән) Муса Мортазиндың исеме миҫал.

Сәйәси золомдоң сәскә атыуына шымсылыҡ, әпкәләйлек һәм бохайырлыҡ "хәрәкәте" ҙур өлөш индерә. Шул сәбәптән шәхсән үс алыу маҡсатында үҙе күралмағандарҙы тотторою һәм башын юйҙырыу – ундайҙар өсөн бер ни ҙә тормай башлай. Бөрйән районынан ике миҫал. Хәҙер исеме илгә мәғлүм сәсән Сабирйән Мөхәмәтҡолов төртмә таҡмаҡтары һәм сатирик шиғырҙары өсөн золомға юлыҡтырыла. Бер өмәлә ул, шаяртып ҡына:

"Тарт!" – тигәс, тартып алдым
Бер тартайҙың тәпәйенән.
Унынһы ла артыҡ булды
Промартель әпәйенән" –

тип әйтеп һала. Икенсе осраҡта районды тәьминәт бүлегенең бер эшем эйәһенән он һорай. Тегеһе бирмәй. Сабирйән сәсән аптырап тормай:

"Мин үҙем – райснаб түгел,
Арт шөрөбөм бушаҡ түгел.

Бирһәң генә, тип һораным,
Бирмәһәң ни хәжәт түгел!" –

тип сыға ла китә. Бына шундай шиғырҙарынан теңкәһе ҡороған түрәләрҙең ҡотҡоһо менән урындағы Бохайыр һәм Әпкәләй затлыларҙың ошағы буйынса, уны совет власын ҡолатыу өсөн ҡоралы көрәш ойоштороусылар тип эҙәрләнеүселәр исемлегенә теркәйҙәр ("Сабирйәндең ҡулға алынғаны").

Ә Яңы Собханғол (Янһары) ауылынан бер ҡарт, төшөн һөйләгәнсә генә, башын һала. Ауылдан йыраҡта эш ерендә ятҡанында: "Балалар, бөгөн яман төш күрҙем: бер ҡарт ҡайын ҡоланы, – тигән дә, уны, – Сталин үлер микән", – тип үҙе үк юрап ҡуйған. Уны шул көндө үк ҡулға алалар ("Төшө етте башына"). Бындай хәтирәләр сәйәси золом дәүерендәге эҙәрләүҙәрҙең ни кимәлдә барғанын бик тә теүәллек менән сағылдыра.

### 4. Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы хәтирәләр

Был төркөмгә ҡараған әҫәрҙәр тарихта тиңдәше булмаған оло яуҙың айырым эпизодтарын күҙ алдына баҫтыра, һуғыш ветерандары яу ҡырындағы үҙҙәренең батырлыҡтарын, ғәҙәттә, үтә баҫалҡы баһалаусан. "Әбделхактың батырлығы" хәтирәһен генә алып ҡарайыҡ. Хәтирәне бәйән ҡылыусы Билалов Яхияның маҡсаты бәрәү – үҙенә ҡарағанда, тыңлаусыларына башҡалар данын еткереү. Шуға ирешеү өсөн, дошман дотына ҡыйыу ташланған яҡташы Әбделхаҡ Ғәйетҡоловҡа сикһеҙ һоҡланыуын, уның батырлығы менән уғата ныҡ ғорурланыуын да белдерә. Үҙе хаҡында бары һүҙ араһында ғына әйтеп үтеүе иһә

тыңлаусыла Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Билаловтың тап шул баҫалҡалығы хаҡында фекер уята ла инде. Ысынында ул үҙе лә ҡаһарманлыҡ өлгөһө күрһәтә. Ни өсөн тигәндә, Әбделхаҡ ҡылған батырлыҡтың дауамын атҡарыу бурысы уның үҙ өлөшөнә төшә. Яҡташы Әбделхаҡ шартлатып та атыуҙан туҡтамаған, улай ғына ла түгел уның йәнен ҡыйған дотты Билалов эштән сығара. Бының өсөн уға бары бер граната етә. Шуның һөҙөмтәһе хаҡында хикәйәсе, әлеге лә баяғы, баҫалҡалығына барып, сурытып һөйләп тормай. Әммә шул шартлауҙан саперҙарҙың понтон күпер һалыу форсаты алыуын да, тимәк, совет ғәскәрҙәренең үтә мөһим һөжүме өсөн, әллә кем түгел, тап шул Билаловтың юл асыуын да, шуның менән бергә яҡташы өсөн фашистарҙан үс алыу тойғоһон кисереүен дә яҡшы аңлайбыҙ.

Хәтирәсенең ни тиклем баҫалҡа булыуы тағы шунан да яҡшы аңлашыла.. Әбделхаҡтың да, уның да батырлығы тейешенсә баһаланмай. Һуғыш ваҡытында, бәлки, был хаҡта әйтеү мөмкин дә булмағандыр. Һис юғында яу хәтирәһе менән уртаҡлашҡанда булһа ла, уға ҡағылып үтә ала ине бит инде. Әммә был форсатты ла файҙаланмай. Әммә яҡташтары ауылдаштарының батырлығына битараф ҡалырға тейеш түгел.

Танкист Ҡотлобаев иһә үҙенең подвигтары менән иң ҡыйын хәлдә лә совет яугирының юғалып ҡалмауын, етеҙлеген, аҡыл менән эш итеүсәнлеген кәүҙәләндерә. Тәү ҡарашҡа уның ҡыланыштары дыуамаллыҡ кеүек күренгәндәй. Асылда иһә хәрби техниканы, тактика законлары яҡшы белеүе, оҫталығы, һалҡын ҡанлылығы, таһыллы булыуы арҡаһында өлгәшә ул үҙенең подвигтарына. Уның һәр хәрәкәтендә эшсән ауыл кешеһенә хас иҫәп-хисап менән эшләүсәнлек сағыла. Немец таныгын сафтан сығарғас, үҙенең данлыҡлы “Т-34” таныгында уның янынан деүләтеп үтеп китмәй. Уны немецтың башҡа танктары менән атышта ҡалҡан итеп файҙалана: уға ышыҡланып ултырған ерҙән сыға биреп ата ла йәнә уға ышыҡлана, ата ла ышыҡлана. Немецтар ҙа мәргән үк ата. Тик Ҡотлобаевтың таныгына сәпәп урынға, үҙҙәренең тәреле таныгының тетмәкәйен тетәләр генә.

Хәрби техниканы, тактиканы яҡшы белеүе, таһыллығы яғынан Ҡотлобаевҡа элемтәсе Алмаҡаев оҡшаш («Сос егет»). Ул үҙен хәрби хәйлә алымын оҫта файҙалана белеүсе «бошонмаҫ» һалдат итеп таныта. Уға «Мыйыҡ», «Эт иҫәбе» кеүек хәтирәләрҙең геройҙары яҡын.

Хәтирәләрҙә гел батырлыҡтар ғына тасуирланмай. Һуғыштың ауырлыҡтары ла, командованиеның белеп эш итмәүе арҡаһында һалдаттарҙың ауыр хәлгә ҡалыуы, әсиргә юлығыуы, һәләк булыуы ла сағыла. “Шайморатовсы ҡаһарман” тигән хәтирәнең геройы – Баймаҡ районы Темәс ауылы уҙаманы Арсланов Миндеғәле Днепрҙы аша сығыу операцияһы ваҡытында командиры генерал Миңлеғәле Шайморатов булған 112-се Башҡорт атлы дивизияһының 58-се кавполкы командиры Таһир Күсемовтың бойороғо буйынса, үҙенең расчеты менән

дошмандың оҙайлы ваҡытҡа иҫәпләнгән ете ут нөктәһен юҡ итә. Иптәштәренең һөйөнсөләүенә ҡарағанда, тәүгеләрҙән булып Советтар Союзы Геройы тигән данлыҡлы исемгә тәкдим ителһә лә, уны, ниндәйҙер аңлашылмаусылыҡ арҡаһында, Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән генә хушһынырға мәжбүр итәләр. Артабан Шайморатовтың аҡыллы фекере менән иҫәпләшмәй, 7-се корпус командиры генерал Борисовтың разведкаһыҙ-ниһеҙ ҡамауҙан сығырға мәжбүр ителгән 112-се башҡорт атлы дивизия нисек бәләгә тарығанда, командирһыҙ ҡалыу ҡайғыһын да, ҡамауҙан сығыу ауырлығын да кисергән был яугир ниндәй генә подвигтар яһамаһын, тура һүҙлелеге арҡаһында, батарея командиры уны һәр саҡ ҡыйырһыта. Расчет номерҙарын орденға тәкдим иткән бер сакта уға рәттән өс тапҡыр “Батырлыҡ өсөн” миҙалын ғына бирҙертә. ”Беҙҙе украин малайы ҡотҡарҙы” тигән хәтирә геройы Сәхиулла Зәйнүллин да (Бөрйән районы Байназар ауылы) шайморатовсы була. Ул полковник С.Х. Хәбиров полкында старшина булып хеҙмәт итә. Ҡамауҙан нисек сығыу хаҡында һүҙ сыҡҡас, ул: “Һуңғы патрондарҙы полктың имен ҡалған яугирҙарына үҙем өләшеп бирҙем. Ҡамауҙан сығыу йүнәлешендә арҡыры юл. Ул ҡалҡытып һалынған. Немец ике яҡтан шуның өҫтөнән генә ҡайсылатып пулеметтан һиптереп тик тора. Былай ҙа үлем. Тегеләй ҙә үлем. Шул ут аҫтынан тәүәкәлләргә булдыҡ. Күптәребеҙ шунда ятып ҡалды. Кем юлды аша төшкән, шул имен ҡалды. Юлды аша сығыусылар именлеккә именбеҙ ҙә, артабан ҡайҙа табан тартырға? Шулай аптырап ҡалғанда ғына (Йә инде, Хоҙайҙың ҡушҡаны!), алдыбыҙға бер украин малайы килеп сыҡты. Килеп сыҡты ла: “Дяденки, мин һеҙҙе фашист юҡ яҡтан алып сығам”, – тине. Һуғыш бөтөп, ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә, ветеран яугир шул украин малайын онотмай, ҡыры сыҡҡан һайын уны телгә алып, рәхмәттәр укый, доға ҡыла. Шул малай арҡаһында үлемдән ҡотолған кавалеристар уға үҙ мәлендә лә рәхмәт белдерә. Ул рәхмәттең белдерелеше лә бик үҙенсәлекле була. Хәтирәсе уны бына нисек һүрәтләне: “Оло ергә сығыуыбыҙ булды – ул малайҙы, өҙмәк тә йолҡмаҡ инде, ҡулдан-ҡулға йөрөтөп һөйҙөк. Ул арала кемдер үҙенең гимнастеркаһынан алып, уның күкрәгенә бер миҙалын таҡты. Эй, артабан ни булғанын күрһәңсе! Һә тигәнсе, малайҙың көпөһө алдан да арттан да ялт итеп тора ине: кеме – миҙалын, кеме – орденын таҡҡайны уға!”.Сәхиулла һалдаттың хәтирәһе бына шулай исеме билдәһеҙ ҡалған украин малайының башҡорт егеттәрен ҡотҡарыуы йөҙөндә бала-сағанан алып өлкәненә тиклем совет кешеләренең берҙәм булыуына ишара яһай.

Күкрәге менән фашист дзотын ҡаплап һәләк булған Советтар Союзы Геройы Александр Матросовтың, асылда, Учалы егете Шакирйән Мөхәмәтйәнов булыуы хаҡында күренеле журналист Рәүеф Насыровтың тырышлығы менән хәтирәләр донъя күрҙе. Был факт үҙе генә лә күп нәмә хаҡында һөйләй. Ул хәтирәләрҙән беҙ кешегә лаҡап

исем тағыу йолаһының да, документ төҙөүселәрҙең үҙ эштәренә формаль килеүенең дә, үлемесле ут сәсеп торған дошман пулеметы көбәген күкрәге менән ҡаплауҙы патриотизм һәм ҡаһарманлыҡтың юғары балҡышы тип баһалауҙа милләт айырыу тенденцияһының да сағылышын таныйбыҙ. Ә Сибайҙа йәшәүсе Солтангилдин Ғәлимйән Шакир улының (1925) хәтирәһендә әйтелгәндәрҙе нисек баһаларға? Ул бит, власовсыларҙы әсир иткәндә, үҙенең бер яуҙашы менән; “Әгәр ҙә мәгәр араларынан берәй башҡорт килеп сыҡһа, ошонда уҡ бәреп үлтерәбеҙ!” – тип план ҡороп тора. Һәр һалдатты күҙҙән кисерә улар. Тәңгәлдәренә азиат йөҙлө берәйеһе килеп етһә: “Ты кто такой? Башкир?” – тип һорау бирәләр. Тегеләр йә үзбәк, йә ҡаҙаҡ, йә Себер халыҡтарының береһе икәнен әйтһә: “Проходи!” – тип, үткәреп торалар. “Араларында бер башҡорт булһасы! Булманы! Бына ниндәй беҙҙең башҡорт!” – тип ғорурлыҡ тойғоһо менән тамамлай Ғәлимйән һалдат үҙенең хәтирәһен. Ә теге мәлдә, власовсыларҙы “сортҡа айырып торғанда”, улар араһында милләттәштәренең булмауын белгәс, уларҙың нисек шатланғанын һәм оло ғорурлыҡ кисереүҙәрен күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел.

Яугир хәтирәләренең әле телгә алынғандарының барыһын да бер уй, бер теләк, бер тойғо – фашист илбаҫарҙарынан илебеҙҙе тиҙерәк таҙартыу уйы, миллионлап-миллионлап һәләк ителгән, ҡоллоҡҡа ҡыуылған ватандаштарыбыҙ өсөн үс алыу теләге, ватансылыҡ, хәрби антҡа тоғролоҡ тойғоһо берләштерә. Ғәлимйән һалдат хәтирәһендә иһә улар ике яҡлы асыла. Власовсылар араһында башҡорттоң булмауы шуның бер күрһәткесе булһа, власовсы башҡорт була ҡалһа, уны һалдатса хөкөмгә тарттырырға ниәтләнеүҙең дә әһәмиәте шунан артыҡ булмаһа, һис кенә лә кәм түгел. Эйе, кәм түгел. Сөнки әлеге уртаҡ уй, теләк һәм тойғонан тыш, был хәтирә үҙенең яугирлыҡ бурысын еренә еткереп үтәгән миллионлаған ғәлимйәндәрҙең үҙ милләтенең исеменә тап төшөрмәүҙе ҡайғыртыуын да дөйөмләштерә.

### 5. Афған һәм Чечня һуғышы хәтирәләре

XX быуаттың һуңғы сирәге сигендә СССР-ҙың шул саҡтағы етәкселеге, партияның элекке съездары революцияны экспортлауға ҡаршы икәнен ҡайта-ҡайта тәкрарлаһа ла, тота килеп, Афғанстанға ғәскәрҙәребеҙҙең “сикләнгән контингент”ын индергәйне: йәнәһе, социализмға йөҙ алмаҡсы булған Бабрак Кармалға ярҙам итәбеҙ. Эштең киреһе килеп сыҡты: беҙ унда йәп-йәш һалдаттарыбыҙҙың ҡанын ҡойҙороп, иҫәпһеҙ техникабыҙҙы юғалтып, мәсхәрәле рәүештә әлеге “контингент”тың иҫән ҡалған өлөшөн нисек кире ҡайтарып алғаныбыҙҙы белмәй ҙә ҡалдыҡ. Тарихтан һабаҡ алһалар, ил етәкселәре еңел-елпе уйлап, ил сиген аша сығармаҫтар ине

ғәскәребеҙҙе. Тарих шуны яҡшы белә: Афғанға күптәр ҡыҙыҡҡан, әммә берәү ҙә уны үҙенеке итә алмаған.

Афған хәтирәләре әлегә ихласлап йыйылмаған. Әммә билдәләләре менән таныша башлаһаң да, сәстәр үрә торорлоҡ. Бөрйән районы Яңы Монасип ауылы Азамат Йәғәфәров хаҡында ағаһы шулай ти: “Ставрополгә Азамат ҡустымдың бер хеҙмәттәше һуғыштан имен-һау ҡайтып төшөүен ишетеп, барып күрҙем. Ҡустымдың ниндәй шарттарҙа һәләк булыуын һораштым. Хәл былай булған. Бөгөн-иртән дембель, тип торғанда ғына, тревога күтәргәндәр. Дошман һөжүм башлаған. Уларға, стариктар түгел, һалдатҡа яңы алынғандар ҡаршы торорға тейеш булған. Шул саҡ кемдер:

– Йәштәрҙе әрәм итмәйек! Әле дары еҫен еҫкәп өлгөрмәгәндәр бит улар, – тип әйтеүгә, команда ла яңғыраған.

– Старики! В ружье!

Дошмандар, ҡара себенме ни, һөрҙөгөшөп килә ти.

Позиция алғансы, беҙҙең егеттәрҙең бер нисәһе сафтан сығып та өлгөргән. Ҡараһалар, взвод командиры ла ауған. Арыҡ, ти. Арыҡтың брустверы артында ғына ята, ти, командир. Был яҡтан уның тапҡырында ғына – әрмән һалдат. Ҡулын һоноп ҡына, алмалы ерҙә ята икән командир. Азамат ҡысҡырған тегегә:

– Куда смотришь? Спаси командира!

– Погибнуть что ли. Завтра дембель! – тип әйтә, ти, теге. Шунан Азамат йән асыуы менән һикереп торған да барып, командирын ҡаплап өлгөргән. Шунда дошман йәҙрәһе килеп тә тейгән. Яралы командиры тере ҡалған. Уға аҙаҡ Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән. Азамат ҡустыға - Ҡыҙыл Йондоҙ” (Яңы Монасип ауылы Йәғәфәров Салауат Фазулла улы ауыҙынан авт.).. Ябай ауыл егете “сам погибай – товарища выручай!” тигән һалдат мәҡәле, һалдат әхлағы ҡушҡанса, эш итеп, бына шулай бер-бер артлы ике подвиг ҡыла: Дары еҫен еҫкәп өлгөрмәгәндәрҙең дә, командирының да йәнен һаҡлап алып ҡалыу бәрәбәренә үҙ йәнен фиҙа ҡыла.

Азаматтың подвигы Нафиҡ Аллабирҙиндыҡына оҡшаш. Кисә генә Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһыф факультетында уҡып йөрөгән Көйөргәҙе районы Яҡшәмбәт урта мәктәбен тамамлаған был егет Афған фронтына, теге мәлдә өйрәтелгәнсә, интернациональ бурысын үтәргә үҙ теләге менән килә. Курсташтарына яҙған хаттарынан уның бойоҡмаҫ егет булып ҡалыуы аңлашыла. Ә ул сигенеүсе яуҙаштарын ут менән ҡаплап тороп өсөн, боевой машинаһын дошмандарға ҡаршы бороп, уларға ҡаршы ут аса. Әммә дошман гранатометысыһы уны мушкаға алып өлгөрә. Бына шулай Нафиҡ та башҡалар йәшәһен өсөн үҙ ғүмерен фиҙа ҡыла. “Курсташтарыбыҙ, Аллабирҙиндың үҙе менән хатлашҡан кеүек, ул һәләк булғас, уның командирҙары мнән дә хатлашып торҙо… Уны һалдатҡа оҙатҡанда, беҙ,

ҡыҙҙар, йығылып ятып илағайныҡ…Күҙ йәшебеҙ бушҡа түгелмәгән икән. Нәфиғыбыҙҙы мәңге күрмәйәсәгебеҙҙе күңелебеҙ һиҙгән булған“ (Курсташы Рәшиҙә Мәһәҙиева-Лотфуллинаның хәтирәһенән). Нәфиҡ һәләк булғас, ҡалған егеттәребеҙ – Юлай Мәксүтов, Рәйес Түләков, Рәсүл Арслановтар: “Доброволец булып Нәфиҡ урынына сафҡа баҫасаҡ-быҙ!” – тип төйнәлә.башлағайны. Кемдәрҙер туҡтатты уларҙы. Дуҫына аранап Юлай “Башҡорт халҡының тоғро улы” тигән стенд эшләп элде. Нәфиҡтың ҡыҫҡа ғына тәржемәи хәле, хәрби хеҙмәте, һәләкәте хаҡында мәғлүмәттәр менән бер рәттән, курсташтары ул хеҙмәт иткән хәрби часть менән алышҡан хаттар ҡуйылған ошо стенд янында йылда ла 23 февраль көнө, тантаналы мәтам посы торор булды. Унда Нәфиҡтың курсташщтарынан тыш, Афған ялҡынында янһалар ҙа, имен ҡайтҡан яугирҙар ҙа торҙо.. . Ҡайһы бер “һиҙгер” бәндәләр шул стенд айҡанлы: “Почему “Верный сын башкирского народа?” – тип БДУ-ң партйыйыл-ышында һүҙ күтәреп, унан милләтселек сағылышын табырға маташҡайны. Дамир ағай Вәлиев урынынан тороп: “Сөнки Рәсәй менән берләшкәндә, Аҡ бей батша алдында бабаларыбыҙ биргән антка ярашлы, Оло Ватан саҡырыуы буйынса, башҡорт халҡы, ҡулына ҡорал алып, уның мәнфәғәттәрен яҡларға һәр саҡ әҙер торған. Ошондай традициялы халыҡтың тоғро улы булыу – ғәйепме ни!? Ғәйеп түгнел – интернаци-нализм тойғоһо менән һуғарылған патриотизм өлгөһөн күрһәткән беҙҙең студент”, – тигәйне, теге бәндә шиңгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды (Нәфиҡ Аллабирҙиндең хәтер кисәһендә һабаҡташтары һөйләгән хәтирәләрҙән).

Шуныһы үкенесле, мәғәнәһеҙ һуғыш меңәрләгән Нафиҡ һәм Азаматтарҙың башына етте.

Афғанстанда томшоҡ төбөнә алһаҡ та, генералдарыбыҙ уны тиҙ онотто.Мәскәү менән килешеү төҙөмәй, тулы мөстәҡиллыҡ хаҡында хыял иткән Чечен Республикаһын, сепаратиистик сәйәсәт алып барыуҙа ғәйепләп, һуғышырға ҡулы ҡысып торған урам ҡаһармандары һымаҡ, шул яҡҡа йоҙроҡ менән киҙәнә башланылар. СССР-ҙы тарҡатыуға өлгәшкән көстәр яңы дошман табылыуына ҡыуанғандай: “Һе, Чечняға бер десанет батольены менән привинтив кдар яһайбыҙ ҙа эшен дә бөтөрәбеҙ!” – тип маһайышты. 1994 йылдаың декабрендә Чечнеяға ғәскәр индерелде. Һәм бына шулай ил эсендә яңы фронт хасил булды. Рәсәй Федерацияһы Президенты Борис Ельциндан еңел генә генерал дәрәжәһе алыусылар, данлы ғәскәребеҙҙе йәнә мәсхәрәле һуғыш ҡаҙанында ҡайнарға мәжбүр итте. Кисә генә урамда һалдат уйыны уйнап йөрөгән малайҙарҙы ашыҡ-бошоҡ әҙерләп, йәнә ут эсенә тыҡтылар. Тағы иҫәпһеҙ ҡорбандар, тағы цинк табуттар ҡайта башланы. Федераль ғәскәр һалдаттарының күптәре әсиргә эләгеп, чечендарға ҡол булды. Чечен хәтирәләрендә ошо күңелһеҙ мотивтар сағылыш тапҡан. Әле уларҙы ихласлап йыяһы бар.

6. Мөстәҡиллек өсөн көрәш хаҡындағы хәтирәләр

Горбачев тәҡдим иткән яманатлы “перестройка”ның дүрт тәгәрмәсе лә бер урында әйләнә башлаған, ГКЧП-ның уңышһыҙ баш күтәргән, ил рулен реформаторҙар үҙ ҡулдарына алған замандарҙа башҡа төбәктәрҙәге кеүек үк, Башҡортостанда ла милли-мәҙәни клубтар эшләй башланы. Башҡортостан йәһүдтәренән, татарҙарыбыҙҙан күрмәксе, урындарҙа башҡорттарҙың төрлө милли-мәҙәни клубтары, йәмғиәттәре ойошторола башланы. Мәҫәлән, Мәләүездә “Көнгәк” (инициаторҙары – Ғәлинур Ҡалмурзин һәм Сәйфулла Әмиров), Өфөлә “Аҡтирмә” (башлаусылары – Рәшиҙә Солтанова, Сәфәрғәли Йәндүрин, Розалиә Солтангәрәева) шулай хасил булды. Торараҡ, шундай ойошмаларҙың эшмәкәрлеген координациялау маҡсатында милли-мәҙәни “Урал” йәмғиәте (тәүге рәйесе – Марат Ҡолшәрипов) эшләй башланы.

Милли-мәҙәни ойошмаларҙың эшмәкәрлеген урындағы партия һәм совет етәкселәре хуплап барманы. 1990 йылда Башҡортостанға союздаш республика статусы мәсьәләһе менән Мәләүез ҡала советында сығыш яһаған Ғ. Ҡалмурзинды, мәҫәлән, “Кәрәкмәй!”, “Тыңламайбыҙ!”, “Ҡыуығыҙ!” тигән репликалар менән бүләләр (4а). Башта ҡайһы бер көстәр Республикабыҙҙың мөстәҡллеге өсөн барған хәрәкәткә ҡаршы сыҡты: “Мөстәҡиллек башҡорттар өсөн генә буласаҡ!” – тип, халыҡты шуға ышандырырға маташты. Оппозиция үҙенең фекерен раҫлау өсөн, төрлө провакациялар яһап ҡараны. Шуның иң баҙыҡ миҫалы Айҙар Хәлимдең Өфөләге Совет майҙанында аслыҡ иғлан итеп ятыуы булғандыр, моғайын. Үҙенең шул тәртибе менән ул бары Республикабыҙҙа эшләп килгән Татар ижтимағи үҙәгенәң абруйына тап төшөрҙө. “Айҙар Хәлимдең үҙ тыуған республикаһының мөстәҡиллегенә ҡаршы сыҡҡаны” тигән хәтирә бына шул турала бәйән итә.

Халыҡтың рухи уяныуына йәмәғәт ойошмалары ҙур йоғонто яһаны. Студенттар, район, ҡала йәштәре вәкилдәре пикетта тороп БАССР Верховный советының мөстәҡиллек хаҡында декларация ҡабул итеүенә иреште.

Мөстәҡиллек өсөн көрәш, Ельцин әйткәнсә, уны “йота алған тиклем алғандан” һуң, төҙөлөштөң, юлдар, йорттар, мәғариф, мәҙәниәт усаҡтары төҙөү кеүек эштәрҙең алға китеүе кеүек ыңғай күренештәр менән бер рәттән, тиҙҙән конституциянан “мөстәҡиллек” һүҙенең алып ташланыуы, ерҙе, урманды, яғыулыҡ-энергетик комплексын, башҡаһын Мәскәү тартып ала башлауы, хосуси милекселеккә күсәбеҙ, фермерлыҡты үҫтерәбеҙ, тип, колхоз, совхоздарҙы көсләп таратыу, шулай уҡ Үҙәк менән договорға, Верховный Совет күрһәтмәһенән тайшанып, конституцияға һыймаған “Ҡушымта”ға ымһынып, Башҡорттан делегацияһының ҡул ҡуйыуына ҡаршы студенттарҙың аслыҡ иғлан итеүе хаҡындағы хәтирәләр әле үҙҙәренең туплаусыһын көтә.

## 7. Тормош -көнкүреш хәлдәре тураһындағы хәтирәләр

Был төркөмгә ингән әҫәрҙәрҙең, һәр хәлдә, мәғлүмдәренең байтағының топонимик риүәйәттәрҙе хәтерләтеүе күҙгә ташлана. “Салих тауы”, “Абыҙ үлеге”, “Минһаж шишмәһе”, “Партизан урманы – Заһит баҡсаһы” ише хәтирәләр – шуға миҫал. Уларҙа һүрәтләнгән ваҡиғалар урындарҙың аталышына сәбәпсе булған.

“Зар илатҡан заманда”, “Салих тауы”, “Абыҙ үлеге” ише хәтирәләрҙә Октябрь революцияһына тиклемге осор ваҡиғалары аша оло мөхәббәт, шуға нигеҙләнгән ғаилә һәм ҡатын-ҡыҙ азатлығы тураһында халыҡ хыялы сағылған. Шуныһы характерлы: ул хыял пассив уй йөрөтөү рәүешендә генә бирелмәй, әүҙем характерҙарҙың хәрәкәтендә асыла. Улар йөҙөндә шәриғәт хөкөмөнә, ғәҙелһеҙ закондарға, иҫкергән йола хөкөмөнә ҡаршы сығып, мөхәббәтте, шәхес иркен яҡларлыҡ әүҙем башланғыстарҙың башҡорт йәмғиәтенә борон-борондан типик күренеш булыуы раҫлана. Тик был типиклыҡ һәр конкрет әҫәрҙә үҙенсә асыла. Әгәр “Зар илатҡан заманда” тигән хәтирәнең героинялары Арыҫлан менән Бибисара, уларға суд ойошторған ауыл старостаһының һүҙҙәре менән әйткәндә, ни бары “көпә-көндөҙ күҙгә-күҙ ҡарашып, һөйләшеп, һөйөшөп торғандар”ы өсөн генә лә шәриғәт хөкөмөнә дусар ителеүҙәренә ҡарамаҫтан, ахырҙа ҡауышыуға ирешәләр, “Сәлих тауы” тигәнең героиняһы үҙен, байлығына таянып, көсләшеп алған ҡарт кейәүен үлтерә һәм шуның менән мөхәббәткә хаҡлы булыуын раҫлай. “Сәлих тауы” хәтирәһенә “Абыз үлеге” хәтирәһе ауаздаш. Бынываһында мөхәббәт темаһы егет кешенең әүҙемлеге аша асыла. Абыз тарафынан мәсхәрә ителеүе арҡаһында, Хәсәнә атлы һөйгән ҡыҙы үҙенә үҙе ҡул һалғас, егет, оло мөхәббәтем юғалды, тип ҡайғырып ятмай, әүҙем хәрәкәткә күсә: һөйгәненен йәберләүсенән үс алыуға өлгәшә. Бында шуныһы иғтибарға лайыҡ: берҙән, егет яңғыҙы ғына атҡармай был актты. Абызды ул үҙенең тоғро дуҫтары менән юҡ итә; икенсенән, ошо турала тирә-йүнгә мәғлүм булһа ла, халыҡ өндәшмәй. Хәтирәлә ғәҙел эш ҡылған шәхес халыҡ яҡлауына лайыҡ, абызмы ул кем, хәшәрәткә яҡты донъяла урын юҡ, бына шулай тигән идея үткәрелә. Өсөнсөнән, ошо әйтелгәндәр хәтирәлә мөхәббәткә тоғролоҡ идеяһы менән үрелеп килә. Мөхәббәткә тоғролоғон ҡыҙ үҙенең үлеме менән раҫлаһа, егеттең абыз тиклем абызға ҡул күтәреүе лә, асылда, шундай уҡ мәғәнәгә эйә.

Хәтирәләрҙә төрлө комик ситуациялы көлкөлө хәлдәр ҙә сағылыш алғылай. Шул арҡала ундай әҫәрҙәр, “Айыу ташы”, “Ҡынйыраҡ”, “Мулланың “ен” күргәне” тибындағы хәтирләр кеүек, көләмәс жанрына яҡынлай. Мәҫәлән, “Мулланың “ен” күргәне” хәтирәһе, мунса төшөүсе мулланың бесәй сыйылдауын, ен икән, тип һәндерәнән ҡолап төшөүе – хөрәфәткә инаныусының комик хәлгә

тарыуы көләмәс кеүек ҡабул ителә. Тик беренсе заттан киләсәкте уйлауҙы ла, экология проблемаһы хаҡында айныҡ фекер йөрөтә белеү хаҡында ла һөйләй. Ә Заһит тигән каширинсы партизандың ауыл янындағы урманды һаҡлауҙы үҙ өҫтөнә алыуы шәхсән уның граждандылыҡ тойғоло кеше булыуын күрһәтһә, халыҡтың шул урманды Заһит урманы тип атай башлауы иһә уның булмышына иң юғары баһа булып аңлашыла. Бына шулай үҙе имен саҡта уҡ Заһит тигән уҙамандың исеме, рәсми рәүештә түгел, халыҡ ихтыяры буйынса, мәңгеләштерелә, партизан тигән данына яңы дан өҫтәлә ("Партизан урманы – Заһит баҡсаһы").

"Мөбәрәк батыр", "Иғыт ҡарт", "Сафа менән Поддубный", "Сафаның үлеме", "Исхаҡ батыр" ише бәһлеүәндәр тураһындағы хәтирәләрҙе лә тормош-көнкүреш хәтирәләре рәтенә индерергә була. Исхаҡ батыр, ауылдан-ауылға йөрөп, көсөн күрһәтеү юлы менән тамаҡ туйҙыра. Икенсе төрлө итеп, халыҡса әйткәндә, кәмит ҡороуҙа ҡара көсө уға кәсеп сараһы ғына була. Ә Мөбәрәк, Сафа, Иғыт батырҙар өсөн майҙан тотоу – намыҫ һаҡлау сараһы иҫәпләнә. Мәҫәлән, Мөбәрәк тотконда ла көсөн ошо маҡсатта файҙалана. Шул уға төрмә түрәләре алдында абруй ҡаҙанырға ярҙам итә. Иғтибарға ул үҙе лә иғтибар менән яуап бирә белә. Ҡаҙан ҡалаһына көрәшкә алып барғас, өс тапҡыр көрәшеп, бер тапҡыр еңеү шарты ҡуйылған майҙанда тотҡон хәлендәге Мөбәрәк рәттән биш-алты көрәшсене алып ата, хатта Петербургтан килгән ике көрәшсене лә бер-бер артлы йыға. "Столичный" булыуҙарына, етмәһә күрер күҙгә имәнес тойолған ул заттар алдында йөҙәп тормай, һин дә мин алышып, уларҙы ла ҡотайтмауы Мөбәрәктең, берҙән, ҡаушап ҡалыусыларҙан түгел икәнен, икенсенән, теләһә ниндәй сетерекле хәлдән дә уңышлы сыға алыу һәләтенә лә эйә булыуын, бының өсөн ҡарамаҡҡа уҙағына һис һүҙһеҙ өҫтөнлөк бирергә тейешле билдәһен уның үҙенә ҡаршы ҡуллана алыуын күрһәтә. Питер көрәшселәре сынйыр билбау быуып, һис тә һис ҡиәфәттәре менән үк үҙҙәренә ҡаршы сығыусыларға психологик баҫым яһап, көнэлек уларҙың ҡотон алырға маташһа, Мөбәрәк өсөн уларҙың тап шул сынйырлы ҡиәфәте ҡулай булып сыға: бөйөрҙәре тәңгәлендә тотҡа кеүек беленеп торған сынйыр быуынынан тотоп ала ла һелтәй тегеләрҙе.

Сафа ла үҙен таһыллы билһынаш оҫтаһы тип таныта. Ә инде заманында иң көслө көрәшсе иҫәпләнгән Иван Поддубныйҙы, ысынмы-бушмы, ергә һалыусы тип раҫлап, хәтирәсе уны хәттин ашҡан батыр итеп күрһәтә.

Иғыт иһә, майҙан тотоп, бил һынашыуҙы өнәмәй, көрәшеп тә тормай, үҙенең дошмандарын һуға ла йыға, һуға ла йыға. Күрәһең, билһынашты ул бушҡа көс сарыф итеү тип белгән.

Ҡаршы яҡтан сығып, билһынашта еңелеүсе бәһлеүәндәр һаны еңеүсе көрәшсенең көс-ҡеүәтенең үлсәме кеүек баһаланған. Ауырлыҡ

күтәртеүҙә ал бирмәүгә лә хәтирәләрҙә шундай ук мәғәнә һалынған. Мөбәрәккә егерме биш ботлоҡ тимерҙе күтәреп, кәрәк ергә алып барып ҡуйыу бер ни ҙә тормай. Верхнеуральскиҙан килтерелгән иң һайлам көрәшсе тубығына тиклем саҡ күтәргән ташты Иғыт батыр иһә һә тигәнсе, күтәрә лә үҙенең өйө янына уҡ илтеп ҡуя. Ҡул көсөн һынауҙың был ысулы борон-борондан таныш булған башҡорттарға. Миҫал өсөн “Урал батыр” эпосында Һомайҙың Шүлгән менән Урал батырҙан таш күтәртеүен хәтергә төшөрөү ҙә етә. Шүлгән урынынан ҡумшыта ла алмаған ташты уның ҡустыһы Урал еңел генә күтәрә лә Әзрәҡә иленә ҡарай быраҡтыра.

Бәһлеүәндәр хаҡындағы хәтирәләрҙең барыһы ла ифрат көслө кешеләр менән һоҡланыу, уларҙы идеаллаштырыу тойғоһо менән һуғарылған. Был тойғо утыҙ өс йыл тотконда булып ҡайтҡан Мөбәрәк батырҙың портретынан айырым деталь рәүешендә генә телгә алынған һүрәтләмәлә лә сағылыш тапҡан. Хәтирәлә бына ни тиелә: “1924 йыл, утыҙ өс йыл ситтә йөрөгәндән һуң, Мөбәрәк ап-аҡ ҡарт булып ҡайтып төшә. Тик ул ауылдағы үҙенең тиңдәштәре кеүек һаҡаллы булмай, оҙон мыйыҡлы, түштәре яҫтыҡ кеүек ине. Эйәге түштәренә тоташып торған бәһлеүән бер кеше ине. Ауырлығы ла 6–7 бот самаһы булғандыр, моғайын” (3, 141).

Революцияға тиклем йәки ике дәүер араһында йәшәүсе бәһлеүәндәр тураһындағы хәтирәләрҙең геройҙары социаль ғәҙелһеҙлекте фаш итеүселәр, уға ҡаршы көрәшеүселәр рәүешендә лә һынлана. Был әҫәрҙәрҙең әһәмиәте лә шунда.

Хәтирәләрҙе яҙып алыу эше һуңғы йылдарҙа ғына йәнләнеп китте. Фольклор фондтарына тупланғандары иһә тематик йәһәттән күп төрлө. Сөнки улар илебеҙ кисергән тарихтың мөһим этаптарын сағылдыра. Шуға ла уларҙы реүәйәттәр кеүек үк, үткән дәүерҙәр хаҡында телдә йәшәп килгән йылъяҙма тип атарға ла булыр ине.

## 6. Хәтирәләрҙең поэтикаһы хаҡында

Хәтирәләрҙең поэтик үҙенсәлектәре күп яҡтан традицион легенда, риүәйәттәрҙекенә оҡшаш. Вариантлашҡан ваҡытта, уларҙың йөкмәткеһе, нигеҙҙә, тоторо҇ҡло һаҡланһа ла, уның бирелеш формаһы, текстарының күләме, һөйләнеү шартына (ваҡытына, аудиторияның үҙенсәлегенә) маҡсатына, башҡарыусының оҫталығына ҡарап, төрлө үҙгәрештәргә дусар ителә.

Миҫалға маҡсат ҡуйылышын ғына алып ҡарайыҡ. Маҡсат ҡуйылышы, традицион легенда, риүәйәттәрҙәге һымаҡ уҡ, һөйләүсе үҙе ҡатнашҡан йә шаһит булған, йәғни уның ғүмере эсендә тормошта ысынлап та булып үткән хәл-ваҡиғалар хаҡында ниндәйҙер мәғлүмәт биреүҙә лә, аңлатмалылыҡтың (этиологик мотивтың) булыу-булмауында ла сағыла. Аңлатмалылыҡ мотивы булмағанда, ғәҙәттә, тәү башта

ваҡиғаның ижтимағи, әһәмиәтлелек кимәленә ҡарап, тарихи йә көнкүреш шарттары, осор хаҡында мәғлүмәт бирелә. Был моменттың эстетик әһәмиәте уның экспозиция хеҙмәтен үтәүендә. Артабан үҫеү, өлгөрөү, тамамланыу моменттары теүәл булған бер бөтөн эпизод (йәки эпизодтар сылбыры, теҙеме) айырыңҡырап тасуирлана. Экспозицияла әйтелгәндәр шул рәүешле конкрет нигеҙләнеш ала, геройҙың башта билдәләнелгән ынтылыштарының ғәмәлгә ашыу-ашмауы асыҡлана («Әхмәтша йыры», «Тимербай батыр», «Точисский рәхмәте», «Сафаның үлеме»). Бындай әҫәрҙәрҙә информация теүәллегенә ныҡ иғтибар ителә. Шуға күрә лә уларҙа сюжеттың бөтә элементтары ла булыусан. Был әйтелгәндәр, аңлатмалылыҡ мотивы булмаған бөтә ауыҙ-тел хикәйәләре лә сюжетлы итеп бирелә, тигәнде аңлатмай, әлбиттә. Иҫтәлектәр һөйләгәндә, айырым эпизодтарҙы үҙәккә ҡуймайынса, баштан үткәнде күргән-белгәнде, анкета һорауҙарына яуап биргәндәге кеүек, бәйнә-бәйнә теҙеп сығыу алымы ла ҡулланылыусан. Ундай саҡта сюжет, аңлашыла торғандыр, булмай, әлбиттә.

Хәтирәсенең үҙе күргән, белгән, шаһит булған хәл-ваҡиға тураһында һөйләгәне генә хәтирә жанрына ҡарай. Бынан уның риүәйәттәрҙән айырмалы мөһим бер үҙенсәлеге лә аңлашыла. Хәтирәсе бер үк хәл-ваҡиғаны төрлө урында, төрлөсә төрләндерә биреп һөйләһә лә, әгәр ул мутлашмаһа, объективлыҡҡа хилаф итмәһә, хәтирәләр версия хасил итмәй. Варианттары иһә була. Быға бер үк хәтирәне унда бәйән ителгән ваҡиғала ҡатнашыусы йә шаһит булыусының һәм унан ишетмеш буйынса башҡаларҙың төрлө осорҙа һөйләүе сәбәп була.

Совет осоронда риүәйәтләшә барған хәтирәләрҙең аңлатмалылыҡҡа ҡоролғандары араһында бигерәк тә топонимик характерҙағылары ныҡ үҫеш алды. Хатта саф хәтирәләрҙең дә топонимик характерҙағылары осраштыра. “Сахалин” ере”, ”Партизан урманы – Заһит баҡсаһы” ишеләр шундайҙар иҫәбенә инә. Бының кеүек ҡарһүҙҙәрҙә, экспозиция булһа ла, сюжеттең тулы бирелеше шарт түгел.

Топонимик риүәйәттең төп маҡсаты – урын исемен асыҡлау. Шунлыҡтан йыш ҡына урын исемдәре асыҡланыуы була, хикәйәләү ҙә туҡтай. “Коммун тауы”, “Мәтәйес күпере”, “Ҡарауылташ, Партизандар ташы” кеүек инде күптән риүәйәтләшә башлаған хәтирәләр, шул традицияға тоғро ҡалыу һөҙөмтәһендә, тик экспозиция, төйөнләнеш һәм сиселештән генә тора. Бындай әҫәрҙәрҙә атаманың тарихы ике-өс һөйләм менән генә бирелергә лә мөмкин.

Аңлатмалы тамамланышты шартлы рәүештә *эпилог* тип атарға ла булыр ине. Эпилог аңлатмаһыҙ әҫәрҙәрҙә лә булғылай. Ул йыш ҡына бәйән ителгән ваҡиғанан, тасуирланған күренештәрҙән ғибрәтле һығымта сығарыу һымағыраҡ та бирелә. Революцияға тиклемге тормошто сағылдырыусы хәтирәләрҙә элекке менән совет осорон сағыштырыу, элеккене хурлау, совет ысынбарлығын маҡтау, бәхетле

тормошҡа сығарғаны өсөн, Ленинға, партияға, совет хөкүмәтенә рәхмәт тойғоларын белдереү менән тамамлау – шуның баҙык миҫалы ул. “Ленин булмағанда, бөтә ине башҡорт”, “Әлдә революция сыҡты” ише миҫалдарҙа быңдай тамамланыш хатта хәтирәләргә бирелгән исемдәр менән тап килә. Тасуирланған ваҡиғаларға, шул ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан шәхестәргә халыҡтың бөгөнгө мөнәсәбәтен белдереү, улар иҫтәлегенә йыр сығарыу, һәйкәл ҡуйыу, сәскә ултыртыу тураһында әйтеү менән һүҙҙе ослау алымы ла шундай уҡ функция атҡара (“Сафаның үлеме”, “Большевиктар бөтә буламы!”).

Персонаждарҙы һүрәтләгәндә, традициялылыҡ өҫтөнлөк ала. Риүәйәттәрҙә генә түгел, күреп-белгән шәхес хаҡында һөйләгән хәтирәләрҙә лә индивидуалләштереү алымы ҡулланылмай тиерлек. Автобиографик хәтирәләрҙә генә геройҙың эске кисерештәренә урын бирелергә мөмкин. Сөнки уның ролендә автор үҙе сығыш яһай. Ә дөйөм алғанда, персонаждарҙың иғтибарҙы тартырҙай һыҙаттары ла типик күренештең индивидуаль сағылышы кеүек кенә, йәғни теге йәки был сифат халыҡта күптән формалашҡан төшөнсәләр кимәленән сығып ҡына тасуирлана. Мәҫәлән, “Ҡыҙылдар менән бергә” тигән хәтирәлә хәтирәсе-герой йәһүт ҡыҙына ғашиҡ булыуы хаҡында атап ҡына бер һүҙ ҙә әйтмәй. Әммә уны: “Ҡыҙы бик матур ине. Үҙебеҙҙең башҡорт ҡыҙы кеүек ҡара ҡашлы, ҡара күҙле, ҡара сәсле. Итәғәтле”, – тип, һоҡланып тасуирлауы серҙе аса. Йәғни конкрет ҡыҙҙың булмышы ла, егеттең уға ғашиҡ булыуы ла, ғөмүмән, ҡыҙ һылыулығы хаҡындағы дөйөм милли эстетик идеал күҙлегенән генә асыла.

Геройҙы статик хәлендә генә түгел, эш-хәрәкәте аша һынландырғанда ла, традицияға тоғролоҡ күҙәтелә: ҡаһарман шәхестәр тураһында һүҙ барғанда, мәҫәлән, уларҙың ҡылыҡ-булмыштарынан айырыуса традицион батырҙар образын хәтерләтерҙәй һыҙаттарына баҫым яһала. Билдәһеҙ ҡыҙылармеец (“Батыросҡанташ”) менән батыр ҡыҙ Аннаның ҡаянан һикереүе («Аннаосҡантау»), мәҫәлән, Салауат, Бейеш, Ишмырҙа кеүек халыҡ батырҙарын иҫләргә мәжбүр итә. Был легендар батырҙар ҙа арттарынан ҡыуғын төшһә, ҡаянан йә ағас башынан һикереп, эҙ яҙҙырыр булған. Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманы танкист Ҡотлобаев Исламдың үҙенә беркетелгән “Т-34” таныгында егерме дүрт «Пантера»ға ҡаршы тороп, уларҙы еңеп сығыуы, утлы яу ҡырынан дошмандың бер таныгын, өс совет таныгын эвакуациялауы иһә уның хаҡында йыр һүҙҙәр менән: «Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ, һай, батыр ҙа ир икән!» – тип әйтергә мөмкинлек бирә.

Традицион жанрҙарҙа персонаждарҙың социаль сығышын әйтеү үк уларҙың ҡайһыһы ыңғай, ҡайһыһы кире икәнен билдәләү сараһын үтәһә, совет осоро «ауыҙ-тел хикәйәләре»ндә был үлсәм генә етмәй. Персонаждарҙың ыңғай йә кире булыуы уларҙың кем яғында, кемгә ҡаршы сығыуы, уның ҡылығының ҡайһы синыфҡа хеҙмәт итеүе,

йәмғиәткә, тирә-йүнгә мөнәсәбәте, әхлаҡи һыҙаттары менән билдәләнә.

Граждандар һуғышы, кулак фетнәләре тураһындағы хәтирәләрҙә кешеләрҙең яңы заманға хас яңы төркөмләнешен белдереүсе уртаҡлыҡ исемдәрен ҡулланыуға ныҡ иғтибар ителә. Ыңғай персонаждар «комиссар», «большевик», «ҡыҙылармеец», «партизан» тип кенә атала. Йыш ҡына был атамалар үҙ-ара синоним һымаҡ ҡулланыла. Шуның менән уларҙың уртаҡ маҡсатлы бер үк көс – йәмғиәтте революцион үҙгәртеп ҡороусы көс булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Ә кире персонаждар хаҡында һүҙ барғанда, ғәҙәттә, грамматика күҙлегенән ҡарағанда, ғүмерҙә лә синоним була алмаҫтай лексик берәмектәр синонимға әүрелә. Мәҫәлән, ҡаршы көстәр хәтирәләрҙә бына шундай мәғәнәгә ирешкән “дошмандар”, “кулактар”, “аҡтар”, “бандиттар”, “краснайҙар” тигән һүҙҙәр менән генә нарыҡлана.

Кире яҡ йыш ҡына «бандиттар» тигән уртаҡлыҡ исеме менән дөйөмләштерелһә, «большевик», «партизан», «ҡыҙылдар» тигән “яңы синонимдар” ҡайһы саҡта «батыр» һүҙе менән алмаштырыла (“Батыросканташ”, ”Батыр ташы”, “Сафаның үлеме”, “Ерәнсәкәй”). Ә «батыр» һүҙенә башҡорт фольклорында тәрән йөкмәтке һалына. Ул көслө һәм ҡурҡыу белмәүҙе генә аңлатып ҡалмай, ә тәүәккәллекте лә, мәргәнлекте лә, сәсәнлекте лә, ғәҙеллекте лә, игелекле булыуҙы ла, әхлаҡи камиллыҡты ла үҙ эсенә ала, йәғни халыҡтың идеал геройын да һынландыра.

Традицион легенда, риүәйәттәр объектив хикәйәләүҙе генә үҙ итеүсән. Ә хәтирәләр бындай алым менән генә ҡәнәғәтләнмәй. Улар араһында сатира һәм юмор пафослылары ла осрай. Комик эффект тыуҙырыуҙа геройҙың уҙ иркенән тыш көтөлмәгән ситуацияға юлығыуы һәм алдан ниәтләгәненә бөтөнләй оҡшамаған икенсе һөҙөмтәгә ирешеүе мөһим роль уйнай. “Айыу ташы” хәтирәһенең геройҙарының, мәҫәлән, мүкле ташты айыу тип уйлап, уны, атып-атып, ахырҙа бысаҡ менән сәнсеп алмаҡсы булып уҡталыуҙары – комик булмаған характерҙарҙың комик ситуацияға юлығыуҙарына, дөрөҫөрәге, ирекһеҙҙән үҙҙәре комик ситуация тыуҙырыуҙарына миҫал. Шул хәлде белә күрә күрше ауыл кешеләренең уларҙан: “Айыу атҡанһығыҙ икән, айыу майы бирегеҙ әле дауаға”, – тип ирештереүҙәре (3, 138) хәтирәнең дөйөм комик пафосына иш янына ҡуш була. Был ике миҫал, асылда, комик эффект тыуһын өсөн, комик ситуацияға комик характер юлығыуы шарт түгеллеген дә, ундай ситуацияны, әллә кем түгел, герой үҙе үк “ижад итә алыуын” да раҫлай.

Әйбер, хәл, күренеш хаҡында яңылыш фекер тыуыуы, ләкин шул яңылышты ысынға алыу ҙа хәтирәләрҙең комик эффектлы булыуына килтерә. Бындай алым бигерәк тә иҫке ҡараштарҙы, дини фанатиктарҙы

сатирик фашлауҙа ҡулланылыусан. Мәҫәлән, йәштәр трактор килеүенә ҡыуанышҡан бер мәлдә, Әхмәт тигән ҡарттың: «Йәшәү бөттө! Дәжжәл килә! Заман ахыры етте!» – тип, ҡолаҡтарына мамыҡ тығып, толопҡа төрөнөп, мөйөштә илап ятыуы («Дәжжәл»), мунсаға барған мулланың, ен икән тип, бесәйҙән ҡото осоп, иҫен юйыуы («Мулланың “ен” күргәне») иҫке хөрәфәттәргә, дини фанатизмға пародия кеүек ҡабул ителә. “Мулланың “ен” күргәне” хәтирәһенең геройы, хөрәфәткә инаныуы арҡаһында, “ҡурҡҡанға ҡуш күренә” тигән мәҡәлдең хаҡлығын да раҫлай.

Сатира һәм юмор пафослы әҫәрҙәргә, ғөмүмән, кинәйәлелек, әйтеп бөтөрмәй, уй йомоу хас. Комиклыҡ поэтикаһының был үҙенсәлеге лә хәтирәләргә ят түгел. Күләме кес кенә “Сахалин ере” тигән топонимик риүәйәткә хас үҙенсәлеккә эйә булған хәтирәнең комиклыҡ менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ кеүек. Ләкин тәү ҡарашҡа ғына шулай тойола. Ә, асылда, ул – башкөллө сарказм менән сиктәш аҫтыртын көлөүҙән ғибәрәт. Быға ул бер генә лексик сара топонимик атама менән генә лә өлгәшә. Колхозға инмәүсе хәллеләр өсөн ситтән бүлеп бирелгән сабынлыҡтың халыҡ тарафынан “Сахалин” ере” тип аталыуында ысын Сахалинға ым бар. Ә «Сахалин» тигән һүҙ колхозлашыу осоронда “һөргөн ере”, “кулак тип ҡулға алынғандарҙың һуңғы төйәге» тигән төшөнсә алған була. Тимәк, колхозды хушһынмаусыларҙың сабынлығын “Сахалин ере” тип атау менән үк халыҡ уларҙың кулак затлы булыуҙарына төрттөргән. Был хәтирә пародияның урын исеме менән мәңгеләштерелеүенә миҫал булыуы менән дә әһәмиәтле.

Риүәйәттәрҙең дә, хәтирәләрҙең дә теле башҡарыусының телмәр үҙенсәлектәрен сағылдыра. Риүәйәттәр нейтраль стилдә өсөнсө заттан һөйләнелә. Шуға күрә хәл-ваҡиғалар һәр саҡ объектив һүрәтләнгән кеүек була. Беренсе заттан шаһитлы үткән заманда һөйләнгән хәтирәләр, әҙәби мемуарҙарҙағы һымак, һөйләүсе фигураһы үҙәктәрәк була. Субъективлыҡ башланғысына ҙур ғына урын бирелһә лә, хәтирәләрҙең ундайҙарын да, «мин»де үтә фәстереүҙә ғәйепләмәйенсә, башҡа хәтирә, риүәйәттәр контексында ҡарарға кәрәк. Шул сакта ғына уларҙың да булып ятҡан хәл-ваҡиғаларға, киңерәк алғанда, тарихҡа кешенең битараф ҡалмауын, уны аңларға, үҙе аңлағанса, бүтәндәргә аңлатырға тырышыу һөҙөмтәһе булыуына, ижтимағи әһәмиәтенә төшөнөргә мөмкин.

Хәтирәләрҙә лә, риүәйәттәрҙә лә диалогтар йыш ҡулланыла. Улар ваҡиғалыҡ төшөнсәһен биреүгә лә, персонаждарҙың үҙ-ара һәм тирә-йүнгә мөнәсәбәтен күҙалларға ла, тотош алғанда, әҫәрҙең эмоционаллеген көсәйтеүгә лә булышалар. Тексттың сәсмә өлөшө менән аралашып йә уны оҙатып килеүсе йырҙарҙың эстетик функцияһын да, нигеҙҙә, шулай аңлатырға була.

Шулай итеп, ҡарһүҙҙең иң йәш әҫәрҙәрен кәүҙәләндереүсе жанр булған хәтирәләр традицион поэтик алымдарҙы яңы йөкмәткегә яраҡлаштырыу менән бер рәттән үҙҙәренә генә хас яңы художестволылыҡ билдәләре алыуға ла өлгәшә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Азбелов С. Н. Современные устные рассказы // Русский фольклор. – М. – Л., 1964. – IX. – С. 132–177.

2. Башкирия в русской литературе / Сост., предисл. и коммент. М.Г.Рахимкулова. – Уфа: Башкнигоиздат, 1989. –512 с.

3. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады / Төҙ, инеш мәк., аңлатмалар авт. Н.Т.Зарипв, Ә.М.Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. Ғ.Б.Хөсәйенов. – Өфө, 1982. – 424 б.

4. Емельянов Л.Е. Проблема художественности устного рассказа // Русский фольклор. – М. – Л., 1960. – Т. V. – С. 245–264.

4а. Ҡалмузин Ғ.З.; Ҡунафин М. Ҡояшты ҡаршылаусы тау// Йәшлек. – 2011. – 25. 01.

5. Сөләймәнов Ә. Башҡорт легендаларында Октябрь темаһы // Совет Башҡортостаны. – 1969. – №3. – 2007.

6. Сулейманов А. Великий Октябрь в башкирской народной устной прозе // Расцвет, сближение и взаимообогащение культур народов СССР. – Уфа, 1970.– Вып. II. – С. 197–200.

7. Усманов Әбүбәкер. Башҡорт совет фольклоры // Октябрь. – 1939. – №12. – 68–77-се б.

8. Һуғыш фольклоры / Төҙөүсеһе Әхнәф Кирәй. – Өфө, 1944. – 46-сы б.


***Һорауҙар һәм эш***

1. Инанмыш һәм хәтирәләр: оҡшаш һәм айырмалы яҡтары.
2. Элекке тормош хаҡындағы хәтирәләр: заман менән заманды сағыштырығыҙ.
3. Хәтирәләрҙә ихтилал темаһы: Граждандар һуғышы тураһындағы хәтирәләрҙә ижтимағи ваҡиғаларға ике яҡлы ҡараш һәм мөнәсәбәт сағылышы.
4. XX быуаттың 20–30-сы йылдарында булып үткән тарихи һәм сәйәси ваҡиғаларға хәтирәләрҙең баһаһы.
5. Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғалары тураһындағы хәтирәләрҙә ҡаһарманлыҡ, ватансылыҡ идеяһының асылышы.
6. Тормош күренештәре тураһындағы хәтирәләрҙең тәрбиәүи әһәмиәте.
7. Хәтирәләргә хас традицион алымдар, хикәйәләү стиле.

# V БҮЛЕК
# ӘКИӘТТӘР ТУРАҺЫНДА ДӨЙӨМ ТӨШӨНСӘ

Әкиәт донъя халыҡтарының һәр береһенең дә ауыҙ-тел ижадына хас. Хатта уларҙың барыһына ла күпселек әкиәти сюжет типтары уртаҡ. Һәр сюжет тибы милли фольклорҙарҙың барыһында ла үҙенсәлекле вариант, хатта ки версиялар хасил итә. Ул вариант һәм версияларҙың аталышы ла үҙенсә була. Шуның кеүек башҡорттар *“әкиәт”* тип белгән әҫәрҙәрҙе башҡа халыҡтар үҙҙәренсә атап йөрөтә. Рустарса улар, мәғлүмдер ки – *“сказка”*, украиндар менән белорустарса – *“казка”*, немец телендә һөйләшеүселәрсә – *“die Marchen”*. Телдәре, күптәре сығыштары буйынса төркиҙәр, белеүебеҙсә – ҡәрҙәштәр. Шулай булһа ла, уларҙың да һәр береһе башҡорттар менән татарҙар *“әкиәт”* тигәнде үҙенсә исемләй: ҡаҙаҡтар – *“эртеги”*, төрөкмәндәр – *“эртек”*, уйғырҙар – *“чөчөк”*, әзериҙәр (әзербайжандар) *“нағыл”*, ҡырғыҙ менән нуғайҙар – *“жомоҡ”*, үзбәктәр – *“эртәк”*, төрөктәр *“масал”* тигән термин менән билдәләй. Улай ғына ла түгел, хатта ки үҙебеҙҙең телдә лә уның төрлөсә аталышына миҫалдар бар.

Башҡорт теленең күпселек һөйләштәрендә уны “әкиәт” тип белһәләр һәм әҙәби телгә лә ул шул килеш килеп керһә, ниндәйҙер һөйләштә аңлашыусыларыбыҙ уны *иртәге* тип таныған. Үкенескә ҡаршы, был терминды телгә алған Нуриағзам Таһиров тигән тикшеренеүсебеҙ уның ниндәй һөйләштә ҡулланылыуын әйтмәгән (44). Уның ҡарауы, көньяҡ һөйләштә (мәҫәлән, Йылайыр, Күгәрсен, Ейәнсура, Хәйбулла, Мәләүез, Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ яҡтарындағы түңгәүер, үҫәргәндәр, ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең, уларға күрше булған өлөшө) *“әкиәт”* термины урынына бөгөн булһын *“ҡарһүҙ”ҙе* ҡуллана.

### 1. Әкиәт – рухи мәҙәниәттең үҙенсәлекле күренеше

“Әкиәт”, “ҡарһүҙ”, “иртәге”, йә “сказка”, йә “мәсләк”, йә “чөчөк”, йә башҡа халыҡтарҙа шул терминдарҙың эквиваленты булған һүҙҙәрҙе әйтеү менән һәр кемдең күҙ алдына берсә әҙәм телендә һөйләшә белеүсе йә үҙ-ара ла, әҙәми зат менән дә төрлө-төрлө мөнәсәбәттәргә инә алыусы фантастик заттар, тылсым эйәләре, ҡош-ҡорт, мал-тыуар, эт-ҡош йәшәгән хыяли донъя, берсә баштан-аяҡ ысынбарлыҡҡа оҡшаған сүрәттә лә, урыны ла, мәле лә мәғлүм булмаған

“Борон-борон заманда,
Кәзә – команда,
Бүре – бағауыл,
Ҡарға – ҡарауыл ...”

саҡта “булып үткән”, шул арҡала бик тә ғәжәп тойолған ваҡиғалар килеп баҫҡандай була. Шул уҡ ваҡытта шуны ла яҡшы беләбеҙ: беҙҙе нисек кенә борондан да боронғораҡ замандарҙа ниндәй генә ғәжәйеп

тарафтарҙа “булып уҙған” ваҡиғаларға алып китмәһен, персонаждарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте һәм шуға сәбәпсе йә уларҙың һөҙөмтәһе рәүешендә асылған изгелек һәм яуызлыҡ, мөхәббәт һәм нәфрәт, тоғролоҡ һәм хыянат шуның һымаҡ һәр кемебеҙгә тыумыштан уҡ үтә лә таныш төшөнсәләр киренән ысынбарлыҡҡа ҡайтырға, үҙебеҙгә, тирә-йүнгә бағып, шул төшөнсәләрҙе “конкретлаштырырға” ла мәжбүр итә.

Әкиәт – дөйөм алғанда, халыҡтың рухи мәҙәниәтенең (хәҙергесә әйткәндә, матди булмаған мәҙәниәтенең) үҙенсәлекле күренеше ул. Тарыраҡ мәғәнәлә әйткәндә иһә, ул халыҡ сәнғәте өлкәһенә, айырым алғанда, уның һүҙ сәнғәтенә ҡарай. Ошо әйтелгәндәр генә лә уның бик тә күп яҡлы, бик тә күп ҡырлы сәнғәти күренеш булыуы хаҡында һөйләй.

Хәл-ваҡиғаларҙың тасуирланышы, урыны, ваҡыты (заманы) йәһәтенән беҙҙе ысынбарлыҡтан айырғандай булһа ла, персонаждарҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәренең, шул мөнәсәбәттәрҙә асылған төшөнсәләрҙең хәс тә бөгөнгө тормоштағыса бирелеүе, әкиәттәр – эстетик һәм этик ҡиммәттәребеҙҙең гүзәл бер кәүҙәләнеше, тип танырға мәжбүр итә. Сөнки әкиәт һоҡландырып йә нәфрәтләндереп, эстетик ләззәт кисертеп кенә ҡалмай, тыңлаусыларға әхлаҡи ориентир ҙа күрһәтә.

### 2. Әкиәттең мифтарға нигеҙләнмеше

А.Н. Веселовский, К. Леви-Строс һ.б. абруйлы ғалимдар раҫлауынса, әкиәт менән миф борон йәнәш “ғүмер һөргән”: үҙаллы булыуҙарына ҡарамаҫтан, ут күршеләрҙең алыш-бирешкәне һәм “күршең һуҡыр булһа, күҙеңде ҡыҫ” тигән ҡағиҙәне күҙәткәне кеүек, бер-берсенә йоғонто яһашҡан. Әкиәтләшкән сағында, мифтар булмышы менән шартлы ғына булған урын менән билдәһеҙ заман төшөнсәһе биреүсе үҙенсәлектәрен юғалта. Башҡорт халыҡ әкиәттәренең, “борон –борон заманда”, тип башланыуы бына ҡайҙан килә икән ул. Ошо йөмләнән ҡарағанда, “борон-борон заманда, тауҙар – түңгәктәй, күлдәр күлмәктәй (йәғни күләүектәй)”, “борон-борон заманда, бүре – бағауыл, ҡарға – ҡарауыл, һайыҫҡан – һанат, … саҡта” тигәнерәк стереотип стилистик формулаларҙа мифтарға хас башлам традицияһы – ваҡыт “билдәһеҙлеге”(тәүваҡыт Uhr-zeit төшөнсәһе) һаҡлана, тип раҫларға була.

Шуныһын да әйтеү – зарур: башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтары әкиәттәре һүрәтләнәсәк ваҡиғаның бына шулай билдәһеҙлек төшөнсәле осорҙа булған хәл, тип раҫлаусы башламдан башланһа, рус халыҡ әкиәттәренең “в некотором царстве, в некотором государстве”, тип; Көнбайыш халыҡтарыныҡы “в некотором королевстве”, тибындағы урын билдәһеҙлегенә баҫым яһаусы һүҙбәйләнештәрҙән тора.

Әкиәт йөкмәтке кимәлендә лә мифтар менән бәйләнешен "өҙөп бөтмәгән" осраҡтар бар. "Архаик әкиәттәрҙең сюжетында тәүтормош

мифтары, йолалары, ҡәбилә ғәҙәттәре менән бәйләнеш асыҡ күҙәтелә. Тотемистик мифтарға, айырыуса шуҡ культур геройҙар, трикстерҙар, хаҡында мифологик көләмәстәргә хас мотивтар ҡош-ҡорт хаҡындағы әкиәттәрҙә киң сағылыш ала". Е.М.Мелетинский асыҡлауынса, ҡош-ҡорт ҡиәфәтендәге кеше менән никахҡа инеү хаҡында бәйән ҡылыусы АТ 400, 425 ише сюжет типтарына нигеҙләнгән тылсымлы әкиәттәрҙең тамыры тотем булған йән эйәләре менән бәйләнеш хаҡындағы мифтарға тоташа, ә АТ 301 (герой, ер аҫты донъяһына төшөп, кемделер иреккә сығара) тибындағылары шамандарҙың, сихырсыларҙың сир-зәхмәт ҡағылған йә үлгән кешенең йәне артынан теге донъяға сәйәхәт ҡылыуы хаҡындағы легендалар, мифтар менән бәйле имеш (31, 441). Әммә шуныһы ла бар: барлыҡ көс-кеүәтен, һәләтен кешелеккә фиҙа ҡылып, уның мәнфәғәтенә ниҙелер бар итеүсе (булдырыусы, яратыусы) миф ҡаһарманы – демиург, хатта ки мут һәм шаян (шомбайланыусан) трикестер ҙа бөтә кешелек, улай ғына ла түгел, бар тереклек, донъя, ғаләм әһәмиәтендәге эштәр ҡыла. Тимәк, кем итеп кенә күрһәтелмәһен, ике осраҡта ла миф геройҙары изге эштәр ҡылыусы демиург сифатында һынландырыла. Тәүгеһенә башҡорт мифологияһынан бер туған Әйнә менән Ғәйнә, Урал батыр, уның уландары Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Шүлгәндең улы Һаҡмар, Минәй батыр, Һәүбән – баҙыҡ миҫал. Әйнә менән Ғәйнә, Зевстың утын урлаған Прометейҙың, ете ятып, төшөнә бер кермәгән подвиг ҡыла: улар убыр йәшереп ҡуйған Ҡояшты урлап алып ҡасып, уны урын еренә ҡуйып, ғаләм әһәмиәтендәге подвигҡа ирешә. Йәншишмәнең һуңғы тамсылары үҙенә тәғәйен булһа ла, шуларҙы йотоп, мәңгелек ғүмер кисерер форсаттан баш тартып, Урал батыр бар кешелек, бар тереклек, бөтә донъя мәңгелеге хаҡына, услап алып, уны тирә-йүнгә һирпә. Уландары менән Һаҡмар ҡустыһы ул бар ҡылған ерҙә йылғалар булдыра. Әйнә менән Ғәйнә һәм Урал батырҙың бөйөк подвигтары менән сағыштырғанда, уларҙың был эшмәкәрлеге башҡорт өсөн “ватан” тигәндең синонимы мәғәнәһенә эйә булған Урал иле менән сикләнеп, локаль әһәмиәткә генә эйә, әлбиттә. Әммә улар шуның менән дә Урал батыр бар ҡылған урында тереклектең йәшәүен тәьмин итеп, үҙҙәрен уның эшенә тоғро батырҙар булыуҙарын иҫбатлайҙар. Минәй батыр ҙа, шул йәш батырҙар кеүек үк, Урал батыр бар ҡылған ерҙә йәйелдерә үҙенең эшмәкәрлеген. Ҡарамаҡҡа, уның алдындағы бурыс тағы ла бәләкәйерәк: ул юха кеүек әүермән Шүлгән урлаған кәләшен юллап уның донъяһына юлыға. Шул уҡ ваҡытта Шүлгәндең башына етеүе, заманында ер өҫтөндә социаль ғәҙеллек урынлаштырған Һәүбәнде шул яуыздың әсирлегенән (тимәк, “Аҡбуҙат” эпосының ҡаһарманы, шул зат менән тиңһеҙ алышҡа сығып, уңышһыҙлыҡҡа юлыҡҡан) ҡотҡарыуы – Минәйҙе Урал батыр ҙа, Һәүбән дә өлгәшә алмаған донъя әһәмиәтендәге бик тә мөһим бер бурысты атҡарыусы батыр тип

танырға мәжбүр итә. Ни өсөн тигәндә, ҡылған яуызлыҡтары менән Шүлгән үҙен донъя боҙоғо итеп таныта.

Мутлыҡҡа маһир шаян трикестерҙарҙың классик өлгөләре грек мифы геройы Прометей һәм башҡорт мифы ҡаһармандары Әйнә менән Ғәйнә образдарында һынланыш тапҡан. Тәүгеһе, мәңгелек ғазапҡа дусар ителәсәген белә-күрә, илаһтар илаһы Зевстың утын сәлдерә. Был аҙымды ул бар кешелек мәнфәғәте хаҡына яһай. Тик изге ниәт менән атҡарылған ошо изге батырлыҡтың һөҙөмтәһе генә, ул уйлағанса, гел изгелек кенә килтермәй. Утлы ҡоралдар уйлап табылғансы уҡ, иҫәпһеҙ һуғыштарҙа ут төп ҡорал иҫәпләнә. Бөгөн килеп кешелектең термоядро, вакуум ҡоралдары менән эш итергә өйрәнеүе – боронғо гректар хыялы тыуҙырған Прометей урлаған уттың һәләкәтле яғы ул. Ошо йөмләнән ҡарағанда, донъя кимәлендә киң мәғлүм игеҙәк (ағалы-энеле) демиург хаҡындағы халыҡ-ара миф, ҡаһармандары тибының бик тә баҙыҡ кәүҙәләнеше булған Әйнә менән Ғәйнә ҡылған уғрылыҡ ифрат та тәрән мәғәнәгә эйә. Беренсенән, мут һәм шаян ағалы-энеле (уларҙың игеҙәк тип күҙалланыуы ла ихтимал) был ике культур ҡаһарман “бурҙыҡы – бурға хәләл” принцибы буйынса эш ҡыла. Икенсенән, шул бер, әммә үлсәмдәргә һыйғыһыҙ берәгәй ғәмәл ҡылыуҙары менән был ике ағай, кешелек хаҡында ғына ҡайғыртыу менән сикләнмәй, ғаләм кимәлендәге проблеманы ыңғай хәл итеүсе, бар донъяны яҡтылыҡ, йылылыҡ, ғөмүмән, йәшәү шарты, уның мәңгелеген тәьмин итеүсе иң изге заттар, изгенән изге демиург рәүешендә күҙаллана башҡорт мифында. Үкенескә ҡаршы, был миф, дөрөҫөрәге, әһәмиәте йәһәтенән “Урал батыр” өләңенән һис кенә лә кәм булмаған эпик ҡомартҡы ярсығы, әлегә донъя фольклор ғилеме даирәһендә танылыу табып өлгөрмәгән, әммә быға бик күптән лайыҡ.

Шулай итеп, демиург ҡылған изге ғәмәлдәрҙең әһәмиәте ер өҫтө менән генә сикләнеп ҡалмай, ғаләмгә аша (Ҡояшты уҙ урынына элеү, Һыу, Ут, Ер яһау, йондоҙ, Ай хасил итеү һ.б.). Әкиәтләшкәнендә, мифтың был билдәһе лә үҙгәрә: герой, нигеҙҙә, шәхси, уҙа барһа, ғаилә мәнфәғәтендә генә ҡаһарманлыҡ ҡыла, йәғни уның маҡсаттары ла, бурыстары ла тарая. Совет осоронда яҙып алынған әкиәттәрҙә, социалогизациялау һөҙөмтәһендә, геройҙың революционер кимәленә еткерелеүе (иҙелгәндәрҙе ҡурсалаусы, халыҡты байҙарға, хандарға, батшаларға ҡаршы көрәшкә ойоштороусы итеп күрһәтелеүе) – әкиәттең тарихи нигеҙен, тәбиғәтен аңламауҙан килгән күренеш, әлбиттә. Әле әйтелгәнде ундай әкиәттәргә сюжетташ алыҫ сит ил халыҡтарына мәғлүм параллелдары ла ҡеүәтләй.

К.Г. Юнгтың архетиптар хаҡындағы теорияһы буйынса, әкиәт менән миф – индивидуумдың йәки "коллектив аңһыҙлыҡ"тың аңға тиклемге дәүере емеше ул. Мифтарҙың тамырҙары "бер ҡатлы тәүтормош (первозданный) донъяһына” барып тоташа. Ул дәүерҙең

рухи ихтыяждары, уларҙың сәбәптәре хаҡында әлегәсә шул дәүергә хас шарттарҙа йәшәгән халыҡтарҙың рухи мәҙәниәтен күҙәтеү күп нәмә бирә (54, 120). "Бер ҡатлы тәүтормош" кешеһе, Юнгтың уйынса, "аңлы рәүештә фекерләмәй. Әммә был унын башында фекер бөтөнләй ҙә тыумай тигәнде аңлатмай. Аңһыҙ рәүештә архетиптар һәр саҡ унын аңына үтеп инә тора, йәғни мифтар, бер яҡтан, ысынбарлыҡтағы "физик" ваҡиғаларҙың аллегорияһы булһа, икенсе яҡтан үҙендә "тәүтормош ҡәбиләһенең күңел (рухи) торошон да кәүҙәләндерә.

К.Г.Юнгса, төштәрҙә, фантазияла кеше миф, әкиәт мотивтарын, образдарын хәтерләткән күренештәр, образдар менән эш итә. Шулар, уныңса, архетип була ла инде. Был фекерен ул анима (кәләш булаһы батша ҡыҙы), аҡыл эйәһе булған рух (геройға кәңәш биреүсе) һәм уларҙың зооморф ҡиәфәттәге иштәрен (тотем-кейәү, ярҙамсыл хайуандар) архетибын тикшереүе менән нигеҙләй. Һәм шундай һығымтаға килә: баҡтиһәң, аңһыҙ рәүештә коллектив ижад буларак әкиәт – кешелек цивилизацияһы таңында тыуған мотивтарҙы, тип һәм образдарҙы, йәғни архетиптарҙы беҙгә килтереп еткергән күренеш имеш.

Иң боронғо архетиптарҙың береһе – “Тереһыу йәки Йәншишмә” мотивы икән. Һыуҙы илаһилаштырғанға тиклем үк, кеше уны, ғүмер биреүсе көс, тип таныған. Күп кенә халыҡтарҙың мифтарында, һыу – инә ҡарынына бәрәбәр изге сығанаҡ, тип баһалана. Боронғо һинд мифында һыу – донъяны бар иткән. Гректың боронғо мифтарының ҡаһармандары өсөн һыу – ҡасып йәшеренер, һыйыныр урын. Христианлыҡҡа иман килтереү, суҡындырыу, йолаһы ла һыу стихияһына бәйле. Ағын һыуға төшөү – яңынан инә ҡарынына ҡайтыу, яңынан тыуыу мәғәнәһенә эйә тип белгәндәр.

Башҡорт та борон-борондан һыуҙы илаһи сығанаҡ, илаһи көс, тип белгән. "Урал батыр" эпосында һыу, дарья – иҫке быуынды бөтөрөп, кешелектең яңынан тыуыуына сәбәпсе сара. Йәншишмә – үлем алдында ҡалғанға ғүмер биреүсе, тимәк, шулай уҡ яңынан тыуыуға сәбәпсе. "Аҡбуҙат", "Заятүләк менән Һыуһылыу" ише мифологик нигеҙле эпостарыбыҙҙың ҡаһармандары, һыу аҫты батшалығына төшөп, һыу батшаһының ҡыҙы менән никахлаша. Был осраҡта никах, тимәк, шуға сәбәпсе булған һыу стихияһы геройҙың яңы сифатта яңынан йәшәй башлауын тәьмин итеүсе ролендә кәүҙәләнеш ала. "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡара юрға" эпостарында кеше яҙмышында хәл иткес роль башҡарасаҡ толпар йә арғымаҡ һыуҙан сыға йә һыуҙа тыуа. Һыуҙың ошондай төшөнсәле магик ҡөҙрәте хаҡындағы мотив АТ 706 (Сулаҡ ҡыҙ) тибындағы әкиәттәрҙә, мәҫәлән, "Яуыз еңгә” тигәнендә (5, № 65) үҙәк урынды биләй. Әммә эпостағы мотив был осраҡта һүҙмә-һүҙ ҡабатланмай, бары тик мәғәнә яғынан тапкилеш кенә күҙәтелә. Өҙә ҡырҡылған ҡулды ла,

батырыу маҡсатынан һелтәнелгән сабыйҙы ла һыу һауыҡтыра: сулаҡ яҡынан ҡуллы була, йән биргән сабый терелә.

Әле беҙ һүҙ алып барған мотив гректың бер мифын хәтерләтә. Агос иле хакимы Акрисияға оракулдар, әжәлең ейәнеңдән булыр, тип күрәҙәлек итә. Шул сәбәптән хәүефкә төшкән хаким, берәй ир затынан ауырға ҡалып ҡуймағайы тип, Даная атлы ҡыҙын ете ҡат ер аҫтындағы ете ҡат бикләнмәле еҙ бүлмәгә бикләй. Уны шунда аҫырай. Әммә ҡыҙ, Зевстан ғоманлы булып, ир бала тыуҙыра. Уға Персий тип исем ҡушалар. Был яңылыҡты ишеткән Акрисий ҡыҙы менән ейәнен, ҡумтаға һалып, диңгеҙгә ташлата. Ҡумта Сериф утрауы ярына яға – әсәле-уллы тере ҡала. Байтаҡ мажараларҙан һуң, Даная ата йортона ҡайта, Ир еткән Персий, аңғармаҫтан ғына олатаһының башына етә. Беҙҙең иғтибарҙы тартҡаны шул: был мифта ла ҡыйырһытылыусыға мәрхәмәтлекте һыу күрһәтә.

Акрисия – Даная – Персий бәйләнеше хаҡындағы мифтағы ошо “һыуға ағыҙылған баланың имен ҡалғаны” мотивы "Иҫке Тәүрат"тан да билдәле. Унда бәйән ителеүенсә, әсәһе Муса атлы бәйғәмбәр булыр сабыйҙы, талдан үрелгән һауытҡа һалып, һыуға ташлай. Әммә баланы һыу ҡабул итмәй. Әйткәндәй, Муса бәйғәмбрҙе иудиҙар, христиандар Моисей тип атаған. Ә боронғо йәһүд теленән тәржемә иткәндә, "Моисей" тигән исем "һыуҙан алынған" тигәнде аңлата имеш (49, 292). Бөгөн булһын сабый бала әгәрҙә: "Мине ҡайҙан алдығыҙ?" – тип һораһа, әсәй кеше: "Һыуҙан тотоп алдыҡ”, – тип яуап бирә. Был мотив яҡташыбыҙ Роберт Миңнуллиндың Сара Садыҡова тарафынан көйгә һалынған “Әнкәй” шиғырында ла сағылыш тапҡан:

Әнкәй безне Сөннән алып кайткан,
Сөн суында юган иң элек…

“Баланы һыуҙан тотоп алыу”ҙы беҙ хәҙер алдаштырыу, мәрәкәләү тип кенә беләбеҙ. Әммә әле генә телгә алынған миҫалдар рәтендә ҡарағанда, уның да архетип һөҙөмтәһе икәнен танырға тура килә: унда ла һыуҙың ғүмер биреү башланғысы хаҡындағы боронғо "коллективтың аңһыҙ рәүештә" фекерләүе тыуҙырған төшөнсә сағылған.

Ҡая таштарына, мәмерйәләргә ташбыуат рәссамдары төшөргән януар һүрәттәрендә, шул дәүер скульпторҙары балсыҡтан әүәләгән йәнлек һындарында тикшеренеүселәр "яра" эҙҙәре тапҡан. Ташбыуат һунарсыһы ҡош-корттоң һүрәттә йә балсыҡ һында сағылған образына таш, һөңгө атыу, уны “яралау” – тере ҡошто йә кейектең үҙен яралауҙы анлата тип белгән (20, 16). Кешеләрҙең шул инаныуы менән әкиәттәргә хас "көсһөҙ көслөнө еңә" мотивы араһында функциональ оҡшашлыҡ бар (42, 11). Ә был мотив боронғо кешенең яҡшы – ни ҙә, яман – ни, изгелек – ни ҙә, мәкерлек – ни икәненә төшөнә башлауы менән бәйле.

Мифтарҙың поэтикаһы хаҡында яҙған хеҙмәтендә Е.М. Мелетинский: "Мифик ҡаһармандар йыш ҡына хәйлә һәм

мәкерлек менән эш итә. Сөнки тәүтормош аңында "аҡыл" хәйлә һәм мәкерлектән азат булмай", – тигән (31, 188) . Был һүҙҙәрҙе әкиәткә лә күсерергә була. Ни өсөн тигәндә, аҡыл менән хәйләкәрлек берлеге сатирик йөкмәткеле әкиәттәргә хас етеҙ хәйләкәрҙең ҡыланышында бик тә аныҡ сағыла. Шул уҡ ваҡытта әкиәттә аҡылды – изгелек менән, хәйләне – мәкерлек менән, тимәк, яуызлыҡ менән бәйләү осраҡтары ла бар. Был иһә әкиәттәрҙә архаик әхлаҡ та, уның артабанғы трансформацияһы ла сағылыуын аңлата.

### 3. Әкиәттәрҙең сакраль вазифа үтәгәне

Геройҙың маҡсаты, ирешкән һөҙөмтәһенең әһәмиәте тарайыуы, шәхес, ғаилә-көнкүреш кимәленә ҡайтып ҡалыуы, урын, ваҡыт билдәһеҙлеге кешеләрҙең яҡшы менән яманды, изге менән мәкерҙе айыра башлауы – әхлаҡ төшөнсәләрен үҙләштереүе мифтарға хас этиологик мотивтың ҡыҫырыҡланыуына сәбәп булған. Этиологик мотив мифологик сюжеттың (айырым эпизодтарҙы бәйән итеүҙең) тамамланышын “тамғалау” вазифаһын да үтәгәнлектән, унан “тороп ҡалған” урынды уға альтернатива хисабындағы әхлаки-нәсихәти мотив алған. Ул иһә айырым мәҡәл йә мәҡәлдәр теҙеме (Кирәй Мәргәнсә әйткәндә, әйтем) рәүешендә бирелергә лә йөкмәткенән аңлашылырға ла мөмкин. Ғибрәтле әкиәттәрҙән миҫалдар:

1) Кешегә баҙ ҡаҙма, үҙең төшөрһөң (“Өс юлбаҫар”, 41, 176);

2) Ҡатындарҙың эшкингәне яман ирҙе ир итә, эшкинмәгәне яҡшы ирҙе ер итә (“Яман ҡатын ирен хур иткән”, 41, 183);

3) Яҡшы һүҙ – йән аҙығы,
Яман һүҙ – баш ҡаҙығы (“Өс ауыҙ һүҙ”, 41, 191):

4) Эш эшләүҙә икән бөтә хикмәт,
Шуға кәрәк һәр даим да эш эшләмәк.
Эш эшләгән һис ваҡытта хур булмаҫ –
Эштән ҡасҡан һис ваҡытта ҙур булмаҫ.
Эшләнгән эш – эште эшләгән иргә ҡот,
Эшләгән эш, яҡшы булһа – илгә ҡот.
Эш эшләмәй, тирең түкмәй үткән ғүмер –
Шуға миҫал: ул – ни бары утһыҙ күмер… (10, 307).

Бар кешелек мохтажлыҡ кисергән нәмәләрҙең (Ҡояш, Ай, ут, һыу, ҡош-ҡорт, үҫемлектәр донъяһы һ. б.) табылырын тапҡан, юғын бар ҡылған демиургтар (культур геройҙар) тураһындағы мифтар борон бик тә изгеләштерелгән. Сөнки уларға ысынлап инанғандар. Тәүтормош йәмғиәте тарҡала башлағанда, тәбиғәт һәм йәмғиәт серҙәренә төшөнә килә, уларға инаныу шаҡтай һүрелә. Жрецтар, шамандар, баҡсылар, бағымсылар, имселәр боронғо традицияны һаҡларға тырышһа ла, эш барып сыҡмай. Элекке мифтарҙың изге

булыуына шик тыуа, һәм шул сәбәптән улар пародиялауға юлыға башлай. Миф геройҙарының берәүҙәре – зирәк, икенселәре аҡылға бер төрлө итеп күрһәтелә башлай. Һөҙөмтәлә ҡош-ҡорт ҡиәфәтендә кәүҙәләндерелгән культур герой хаҡындағы мифтарҙан ҡош-ҡорт (хайуандар) тураһындағы әкиәттәр, уларҙы кеше ҡиәфәтендә кәүҙәләндергәндәренән тормош-көнкүреш әкиәттәре яралған.

Тәүтормош йәмғиәте тарҡалып, мифтарға инаныу һүрелеүе, әкренләп уларҙы сакраль вазифа атҡарыуҙан арындырған. Һөҙөмтәлә мифтар тулыһынса әкиәттәр өсөн художестволы эшкәртелер әҙер сеймал, әҙер тематик материал хеҙмәтен үтәй башлаған. Тарихи яҡтан ҡарағанда, был үҙгәреш өҫкө палеолитҡа тап килә. Ул заман нимәһе менән үҙенсәлекле? Тап шул дәүерҙә тәүтормош көтөүенән ырыу йәмғиәте хасил була. Ә был яңылыҡ эстетик ҡараштар моронлауға, сәнғәти башланғыстар тыуыуға булышлыҡ иткән, тиҙәр (12, 70). Әммә был осраҡта ла миф традицияһы әкиәттәрҙә эҙен ҡалдырмай үтмәгән: “мифтарҙан күрмәксе”, әкиәттәр ҙә борон сакраль функция атҡарған.

Мәғлүм булыуынса, тәүтормош шарттарында йәшәгән бабаларыбыҙ мамонт, бизон кеүек ҡеүәтле кейектәргә күмәгеһе бер булып һунар иткән. Ошо традиция артабан да дауам иткән. Милли фольклорыбыҙҙа ла ул йоланың сағылышын табырға була. “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосының бер вариантында бәйән ителеүенсә, Албырбайҙың бер улы, Алтынбайҙың алты улы, Етембайҙың ете улы ауға бергәләп сыға:

Алтынбайҙың алты улы
Алты ала атлы икән, ти;
Етембайҙың ете улы
Ете ерән атлы икән, ти;
Албырбайҙың яңғыҙ улы
Ялбыр йолҡош атлы икән, ти.
Алтынбайҙың алты улы
Алты һунар ҡошло икән, ти;
Етембайҙың ете улы
Ете һунар ҡошло икән, ти;
Албырбайҙың яңғыҙ улы
Һигеҙ һуна ҡошло икән, ти…(11, 200).

Г.Н.Потанин, Н.Д.Зеленин, Л.Н.Потапов, П.А.Трояков, Н.А.Алексеев һ.б. тикшеренеүселәр асыҡлауынса, һаһа (якут), теленгит, ҡоман, алтай, хакас, шор һунарсылары ауға, артелдәргә тупланып ҡына, сығыр булғандар. Ошондай ысул менән һунар итеүгә бәйле үҙенсәлекле бер йола ла (ритуал да) хасил булған. Уны хәтерләүселәр Себерҙә йәшәүсе төрки халыҡтарында һуңғы дәүерҙә лә табылған. Был һунарсы халыҡтар, урман-тау эйәләре әкиәт, йыр, музыка тыңларға әүәҫ заттар,

тип уйлағандар. Ҡарурман эйәһе Байанай хөрмәтенә һаһа (якут) һунарсылары кисен әкиәт һөйләр булғандар. Йәнәһе, шул зат уны тыңларға килә: әкиәт оҡшаһа, һунарсылар йөрөр ергә кейектәрҙе ул үҙе үк сығарып ҡуя була. Хакас һунарсылары әкиәт һөйләй башлар алдынан, тау эйәһенә мөрәжәғәт итеп: "Һин тыңла ла беҙгә кейектәреңде күберәк бир, беҙ һиңә әкиәтте күберәк һөйләрбеҙ", – тип үтенеп, вәғәҙә бирер булғандар (1, 260). Хакастарҙың бер этник төркөмөн тәшкил итеүсе сарайҙар, әкиәтте тыңлап бөткөндән һуң, тайга эйәһе тәүге ике төндә килеп, әкиәт менән ҡәнәғәт булыуын, һунарсылар күпме кейеккә юлығасағын әйтеүенә инанғандар (1, 243, 276; 45, 24 – 34; 37, 129).

Һунар уңышлы тамамланһа, шор һунарсылары быны, тайга эйәһенең, әкиәткә мауығып, кейектәрен онотоуының һөҙөмтәһе, тип белгәндәр. Улар әйтеүенсә, әкиәт тыңларға ул зат кеше ҡиәфәтендә, йыш ҡына ҡыҙ сүрәтендә килә була (45, 26).

Шулай итеп, борон кешеләр, шул иҫәптән төрки-монгол хаылҡтары ла, әкиәттең магик көсөнә ышанған. Шуға күрә лә уның сифаты хаҡында хәстәрлек күргән. Бүрәт һунарсылары, мәҫәлән, әгәр һунар ваҡытында әкиәт яҡшы һөйләнһә, табыш мул була, тип уйлаған. Шуның өсөн дә, һунарсылар артелендә һәйбәт әкиәтсе булмаһа, уңышҡа ирешеү мөмкин түгел, тип иҫәпләгәндәр(45, 26). Хакас һунарсылары, ауға сыҡҡанда, үҙҙәре менән оҫта әкиәтсе алыр булғандар, һәм, табышты бүлгәндә, уға ла һәр һунарсыға тейгән тиклем өлөш сығарғандар (1, 160).

Башҡорттоң ҡайһы бер ырыуҙарының (Табын, Тиләү) тамырҙары Алтай, Иртыш, Төмән яҡтары менән бәйле. Төп кәсебе иҫәпләнгән шул башҡорт ҡәүемдәренә лә был йола заманында билдәле булһа, ни ғәжәп.

Мифтарҙан айырмалы рәүештә, ғаилә-көнкүреш фонында индивид, шәхес яҙмышы үҙәккә күсерелеү һөҙөмтәһендә, был тәңгәлдә әкиәттең үҙ тәғлимәте (концепцияһы) хасил була. Шәхес яҙмышы, унынса, һәр яҡтан да гармоник хәл ителергә тейеш. Шул арҡала ла әкиәттә, юмористик юҫыҡтағы ирония менән һүрәтләнгән иҫәрҙе иҫәпкә алмағанда, төп герой һәр саҡ маҡсатына ирешә, бәхеткә өлгәшә. Сөнки ул, үҙе изге ғәмәл ҡылғанға, башҡаларҙың игелеген күрә, ахырҙа үҙе үк изгелекте кәүҙәләндерә. Яуызлыҡ финалда еңелә, изгелек тантана итә: айрылғандар табыша, яратышҡандар ҡауыша, фәҡир байый, сырхауҙар һауыға, тәхеткә ғәҙел, хаким күтәрелә. Шул идеаль йәмғиәтте бар ҡылыусы тирәһенә гел ыңғай һыҙатлы, изгелектән башҡаны белмәгән заттар, ә уның антиподы тирәһенә зыянлы заттар туплана. Ике көс – контраст итеп ҡапма-ҡаршы кәүҙәләндерелә. Әкиәт уртасыллыкты үҙһенмәй.

4. Әкиәттәрҙе төркөмләү

Халыҡ әкиәттәренең барыһы ла уртаҡ ҡанунға буйһона. Иң әүәл улар – мотлаҡ сюжетлы була. Әкиәттең сюжеты иһә уның эске логикаһына, идеяһына буйһонған тәртиптә ойошҡан тематик мотивтар сылбырынан тора. Ул мотивтарҙың һәр береһе *геройҙың ишле хәрәкәтенә* (В.Я.Проппса әйткәндә, *парлы функцияһына*) бәйле ситуацияны, эпизодты үҙ эсенә ала. Һөҙөмтәлә үҙенсәлекле мини-сюжет хасил буцла. Ул үҙенсәлек шунан ғибәрәт: геройға ниндәйҙер эш ҡылыуҙан тыйылыу кәрәк икәне әйтелә – ул иһә тыйыуға ҡолаҡ һалмай; артабан "тыңлауһыҙлык – язаға дусар булыу функцияһы" килә; шунан инде "уның (төп ҡаһармандың) отоуы-отолоуы (йә отолоуы – отоуы)", "ҡыйырһытылыуы – тантана итеүе" һ.б. шуның кеүек ишле-ишле хәрәкәттәре (функциялары) теҙеме килә.

Бер үк тематик мотив, ғәҙәттә, өс мәртәбә ҡабатланып, әкиәт сюжетына композицион үҙгәлек бирә. Өсләтеү алымының мифологияға тоташҡан үҙ тамырҙары бар.

Әкиәттә ваҡиғалар ваҡыт эҙмә-эҙлелеге йәһәтенән, еп тартҡан кеүек, бер генә йүнәлештә бара. Сөнки, телдән башҡарылғанға, йәнәш ваҡиғаларҙы тасуирлау, тимәк сюжетты күп тармаҡлы итеү мөмкин булмай. Ана шул арҡала әкиәттә сюжет ваҡиғаның хронологик яҡтан эҙмә-эҙлекле барған "тәбиғи" ағышына яраҡлаша. Тимәк, бында беҙ фабула менән сюжеттың төкмә-төк тапкилеше менән осрашабыҙ.

Әкиәт персонаждарының, шул иҫәптән төп геройҙың да образы индивидуалләштермәй. Әкиәт өсөн, геройҙың характеры түгел, *тип булыуы* мөһим. Шул арҡала (ҡайһы бер юмористик һәм сатирик эффект тыуҙырыу маҡсатын иҫәпкә алмағанда) персонаждың ниндәй социаль ҡатлам вәкиле тип аталыуының әһәмиәте юҡ.

*Тип берлеге* йыш ҡына төрлө тематик мотивтарға бер әкиәттән икенселәренә һин дә мин иркен күсеп йөрөүенә форсат бирә. Шул сәбәптән сюжетты композицион яҡтан ҡатмарлаштырыусы, әкиәттең поэтикаһына өҫтәлмә үҙгәлек биреүсе контаминация күренеше хасил була.

Әкиәт өсөн шул да мотлаҡ: ул һәр саҡ яуызлыҡтың фаш ителеүен, еңелеүен, изгелектең тантана итеүен раҫлай. Шуға күрә ул геройҙың мотлаҡ еңеүе, юғарыраҡ статус алыуы (кәләшһеҙҙең – кәләшле, фәҡирҙең – бай, таҙҙың батша булыуы) менән тамамлана.

Шундай һәм башҡа уртаҡ ҡанундарға буйһоноуына ҡарамаҫтан, уйҙырма һәм ысынбарлыҡ нисбәте, тематикаһы, персонаждарының ниндәй йән эйәләре булыуы, геройының типтары, уның үҙ маҡсатына ирешеү ысулдары, сюжет структураһы һ.б. йәһәтенән әкиәттәр бер нисә төркөм хасил итә.

Әкиәт сюжеттарын төркөмләп ҡарау тәжрибәһенең башы XIX быуаттың икенсе яртыһына ҡарай. Көнбайыш Европала был тәңгәлдә

И. Ган, С. Баринг, Ф. Стил, Р. Темпл, Э. Коскен, Г. Гомм, И. Якобе, В. Шовен һ.б. байтаҡ тир түккән. Шуларҙың тәжрибәһенән сығып, үҙе төҙөгән әкиәт күрһәткесендә финн ғалимы Анти Аарне уларҙы төп өс төркөмгә бүлә: *1) хайуандар тураһындағы әкиәттәр, 2) ысын әкиәттәр (собственно сказки), 3) анекдоттар. Икенсе төркөмдө ул шулай тарҡата: A) тылсымлы әкиәттәр, B) легендар әкиәттәр, C) новеллистик әкиәттәр һәм D) иҫәр шайтан тураһындағы әкиәттәр.* Артабан ошо бүленеште рус фольклорсыһы Н.П. Андреев рус әкиәттәренә яраҡлаштыра (2), Ст.Томпсон иһә киңәйтеңкерәп ебәрә (13). Бөгөнгө көндә әкиәттәрҙе төркөмләгәндә, фольклорсылар, асылда, Аарне-Томпсон күрһәткесенә таяна. Мәҫәлән, шул әкиәт каталогы нигеҙендә көнсығыш славян әкиәттәре күрһәткесен төҙөүсе Л.Г.Бараг, И.П. Березовский, К.П. Кабашников, Н.В. Новиковтар ҙа (17а), Балтик буйы халыҡтары әкиәттәре хаҡында һүҙ алып барыусы Р.Я. Вийдалепп, Арайс К Медне һ.б. (4) уларҙың шул каталогтағы төркөмләнешен һүҙмә-һүҙ ҡабатланы (17, 7 – 15; 28, 69; 4).

Д.А. Яшин, М.А. Вавилова, Н.И. Кравцов иһә славян халыҡтары әкиәттәрен өс төркөмгә – *хайуандар тураһындағы, тылсымлы һәм социаль-көнкүреш әкиәттәренә* бүлеп, тикшерҙе (29, 112). В.П. Аникин, Э.В. Померанцева, М.А. Вавилова, Е.А. Костюхин (3; 35; 14; 25) һ.б. тикшеренеүселәр ҙә әкиәттәрҙе, нигеҙҙә, шулай төркөмләй. Әммә өсөнсө төркөм хаҡында һүҙ барғанда ла (был хаҡта тормош-көнкүреш әкиәттәре хаҡындағы бүлектә асығыраҡ әйтелер), айырым милли әкиәт репертуарын барлағанда ла, ғәҙәттә, фекерҙәр аймылышыусан. Һүҙ юҡ, быуаттар буйы Рәсәй иленең өлөштәрен тәшкил итеүсе, етмеш йылдан ашыу дәүерҙә СССР составында союздаш республика булып тороп, XX быуат ахырында берәм-берәм унан айырылып, мөстәҡиллек алған илдәрҙең фольклорсылары, әкиәттәрҙе төркөмләгәндә, асылда, рус әкиәт белгестәренә эйәрҙе. Шуға күрә лә алыҫ сит илдәрҙә был мәсьәләнең нисек хәл ителеше ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Үкенескә ҡаршы, был мәсьәләгә иғтибар итеүсе әлегәсә бик үк тойолманы. Урыҡ-һурыҡ ҡына килеп еткән мәғлүмәттәрҙән бары шул билдәле. Көнбайыш фольклорсылары нигеҙҙә "фин мәктәбе" вәкиле Анти Аарне һәм Ст. Томпсондар төҙөгән әкиәт каталогтарында бирелгән төркөмләнешкә иҫәп тоталар икән.

Төрөк фольклорсыларының да элек-электән халыҡ әкиәттәренә етди иғтибар биреүе мәғлүм. Заманында В. Эберһард менән П.Н. Боратов тигән тикшеренеүселәр төрөк әкиәттәренең күрһәткесен төҙөгән булған (13). Хәҙерге дәүерҙә төрөк фольклор ғилеме милли әкиәттәр иң әүәл *"халыҡ әкиәттәре" һәм "әҙәби әкиәттәр"* тигән ике төркөмгә айырыла. Артабан инде, тәүгеһе хаҡында һүҙ алып барғанда, уларҙың да, бер фекергә килә алмай, йонсоуына төшөнәһең. Мәҫәлән, Нәҡи Тәзелсә, төрөк әкиәттәре *а) хыяли әкиәттәр, б) реалистик әкиәттәр*

*(ысынбарлыҡ әкиәттәре)* төркөмдәренән тора. Мөхәмәт Туурул Мәхмүтғази Көйөнө иһә төрөк халҡының әкиәттәрен ***А) "ҡаһармандарына күрә"*** былай төркөмләргә була: *1) ҡаһарманы хайуан булған әкиәттәр, 2) ҡаһарманы кеше булған әкиәттәр, 3) ҡаһарманы кеше һәм хайуан булған әкиәттәр*[1], *4) ҡаһарманы кеше һәм вәхши хайуан булған әкиәттәр, 5) ҡаһарманы кеше һәм ғәҙәттән тыш мәхлүк булған әкиәттәр, 6) ҡаһарманы символ булған әкиәттәр* төркөмдәренә бүлә; ***Б) "уртаҡ һыҙаттарына (характерҙарына) күрә"*** тигәндәре иһә *1) реалист(ик) һәм 2) ғәҙәттән тыш (олаганүстү) әкиәттәр* төркөмөн хасил итә. 1966 йылдаВаррен С. Валкер менән Әхмәт Әдип Уйзал икәүһенең Америкала сыҡҡан "Tales Alive in Turkey" тигән уртаҡ хеҙмәтендә әкиәттәрҙе: *а) сихри (Табжтусту - сверхъестественные) әкиәттәр, б) мажаралы (шашыртыжы) һәм һөнәр эйәләре хаҡындағы (истидлалли) әкиәттәр, в) юмористик әкиәттәр, г) әхлаҡи әкиәттәр, ғ) Ҡороғло (күрәһегеҙ, дастанды ла әкиәттәр рәтенә индергәндәр), д) дингә ҡаршы* (күчүк цущурущ) әкиәттәр, *з) фыкралар-анекдоттар төркөмөнә* бүлгәндәр (46, 299–302).

Башҡорт халҡының әкиәттәренә беренсе мәртәбә, күренекле тюрколог Н.К. Дмитриев төркөмләү яһаған. А.Г. Бессонов йыйған әкиәттәрҙән йыйынтыҡ төҙөгәнендә, ул башҡорт әкиәттәренең милли үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, уларҙы шулай төркөмләгән: 1) батырҙар тураһындағы әкиәттәр (богатырские сказки), 2) тылсымлы әкиәттәр (волшебные сказки), 3) тормош-көнкүреш әкиәттәре (бытовые сказки), 4) ғибрәтле әкиәттәр (нравоучительные сказки), 5) хайуандар тураһындағы әкиәттәр (сказки о животных), б) әкиәт-легендалар (сказки-легенды). Әммә был төркөмләнеш һуңғы ваҡытҡаса иҫәпкә алынманы. Ә.И. Харисов иһә 1959 йылда донья күргән "Башҡорт халыҡ ижады"ның өс томлығының 2-се томына яҙған баш һүҙендә, авторын әйтмәй генә, рус фольклор ғилеменә һылтанма яһап: “Халыҡ ижадын өйрәнеүселәр араһында әкиәттәрҙе биш төркөмгә – хайуандар тураһындағы әкиәттәргә, тылсымлы йәки серле әкиәттәргә, мажаралы әкиәттәргә, тарихи әкиәттәргә, тормош-көнкүреш әкиәттәренә бүлеп йөрөтөү бар”, – тигән (6, 8). Әммә тәүҙә фантастика менән реаллек нисбәте принцибынан сығып, үҙе фантастик әкиәттәр һәм реалистик әкиәттәр тигән ике генә төркөмдө атап үтә (6, 7). Аҙаҡ иһә "Башҡорт халыҡ ижады”ның шул уҡ 2-се томына ингән әкиәттәрҙе “ҙурыраҡ өс төркөмгә бүлеп урынлаштырыу уңайлыраҡ” тигән һығымтаға килгән (6, 8; 48, 149-155). "Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы" тигән китабында ла ошо уҡ фекер һүҙмә-һүҙ ҡабатлана.

---

[1] Заманында В.Я. Пропп та әкиәттәрҙе кеше тураһындағы әкиәттәр һәм хайуандар (ҡош-ҡорт, эт-ҡош, мал-тыуар) тураһындағы әкиәттәр тигән ике төркөмгә бүлеп ҡарау мөмкинлеген әйткәйне (38). Тик был фекерҙе күтәреп алыусы булманы, автор үҙе лә ныҡышмалыҡ күрһәтмәне буғай.

Н.К. Дмитриев менән Ә.И. Харисовтарҙан айырмалы рәүештә, В.Е. Гусев тәкдим иткән фантастик уйҙырма менән төп конфликттан сығып тикшереү принцибына (18, 126) таянып, М.Х. Минһажетдинов башҡорт халыҡ әкиәттәрен түбәндәгесә төркөмләне: *1) батырҙар тураһындағы (богатырские, героические) әкиәттәр, 2) тылсымлы, серле (волшебные) әкиәттәр) 3) хайуандар тураһындағы әкиәттәр, 4) тормош-көнкүреш (реалистик) әкиәттәре* (33, 167). Торараҡ "тылсымлы, серле әкиәттәр" тигәненә ул асыҡлыҡ индерә төштө: төп ҡаһарманы, "үтә пассив" булып, әкиәти ваҡиғаларға бары тылсымлы әйбер, тылсымлы һүҙ, тылсым ҡөҙрәтенә эйә булған ярҙамсылар булышлығында ғына этәреш яһаһа, ундай әкиәттәрҙе М.Х. Минһажетдинов – “саф тылсымлы әкиәттәр" (рус фольклорсыларынса, "собственно волшебные") геройы тылсым ҡөҙрәтен дә, беләк көсөн дә файҙаланған әкиәттәрҙе иһә "тылсымлы-героик әкиәттәр” тип атаны. Аңлашылыуынса, ул “әкиәт-легенда” төркөмөн бөтөнләй инҡар итә. Сөнки Н.К. Дмитриев “әкиәт-легендалар” циклы тип алған төркөмгә ингән әҫәрҙәр, асылда, легендалар жанрына ҡарай. Ғибрәтле әкиәттәрҙе лә М.Х. Минһажетдинов айырым төркөм итеп ҡарамаған (33, 167).

Һуңғы осорғаса башҡорт фольклорсылары М.Х. Минһажетдинов классификацияһын файҙаланды. Күп томлыҡ "Башкорт халыҡ ижады” тупламаһы составында башҡорт һәм рус телдәрендә сыҡҡан әкиәт китаптары – шуның бер күрһәткесе ул. Ғөмүмән, М.Х. Минһажетновҡа тиклем әкиәттәребеҙҙе төркөмләгәндә, үлсәм (критерий) берлеге принцибы күҙәтелмәне. Ошо тәңгәлдә беренсе аҙым уның тарфынан яһалды.

Әкәиттәребеҙҙең төркөмләнеше хаҡында уйланғанда, иң әүәл башҡорт әкиәт ғилемендә тәүләп М.Х. Минһажетдинов ҡулланған *"фантастик уйҙырма"* һәм *"төп конфликт"* принцибына диҡҡәт итеп ҡарайыҡ. Был принцип әкиәттең башҡа жанҙарын билдәләүгә яраҡһыҙ. Ул, асылда, тылсымлы (саф тылсымлы, тылсымлы-героик һәм батырҙар тураһындағы) әкиәттәргә генә ҡулай. Әммә был осраҡта ла уның "ҡулайлылығы" шартлылыктан азат түгел. Ни өсөн тигәндә, эстетик категория булған *"тылсымлылыҡ"* менән *"героика"* – пафос билдәләре. Ә геройҙың баһадирлығы – уның образын физик булмышы яғынан асышыусы бер "сифат" ҡына. Тимәк, тылсымлы әкиәттәрҙең эске төркөмләнешен билдәләгәндә, сюжеттың сифаты менән төп ҡаһарман образының сифаты, йәғни тиңгәрелмәҫ үлсәмдәр тиңгәрелгән (бер тиң күрелгән). Хәйер, халыҡ әкиәттәренең тәүге, төп өс жанрға бүленешендә үк, ғөмүмән, донъя фольклор ғилеме кимәлендә үлсәм (критерий) берлеге күҙәтелмәй. Был кәмселек шунда күренә: әкиәттәрҙең персонаждар – классификацияның төп билдәһе тип иҫәпләнгән (хайуандар тураһындағы әкиәттәр), икенселәрендә –

ысынбарлыҡтың үҙ булмышына оҡшашлыҡта сағылдырылыу-сағылдырылмауынан, йәғни һүрәтләнгәндең реаллек нисбәтенән ("серле әкиәттәр", "реалистик әкиәттәр") сығып эш иткәндәр, тағы бер жанрын билдәләгәндә, ниндәй мөхит сағылған, шул төп билдә тип иҫәпләгәндәр. Тимәк, бында ла тиңгәрелеүе мөмкин булмаған үлсәмдәрҙе тиңгәрергә, эстетик һәм утилитар категорияларҙы бер тиң күрергә тырышыу күҙәтелә. Шул арҡала халыҡтың ауыҙ-тел сәсмәүеренең берҙәм система хасил итеүсе төр *күренеше* (*вид*) булған әкиәттәр эсендә классификациялауҙың төрлө принциптары ҡулланылған. Тимәк, был әйтелгәндәр М.Х.Минһажетдинов тәҡдим иткән классификацияға ғына ҡағылып ҡалмай һәм, ғөмүмән, бер башҡорт әкиәт ғилеменең генә кәмселеге түгел. Анти-Аарне, Аарне-Томпсон системаһындағы әкиәт сюжеттары типтары күрһәткесе һ.б. әкиәт каталогтарындағы классификацияға ориентир тотҡан донъя әкиәт ғилеме лә был сетерекле мәсьәләне әлегәсә хәл итә алғаны юҡ.

Әкиәттәрҙең айырым тәүге бүленешенән хасил булған төркөмдәре хаҡында һүҙ барғанда, башҡорт фольклор ғилемендә берсә *"цикл"* (Н.К. Дмитриев, 5, 25–27), берсә "төркөм " (Ә.И. Харисов, 6, 8–10; М.Х. Минһажетдинов, 7, 12–16; М.М. Сәғитов, 43; К.Ә. Әхмәтйәнов, 52, 300; 53; Кирәй Мәргән, 23, 56–57; берсә *"төр"* (К.Ә. Әхмәтйәнов, 52, 21; 53), берсә *"серия"* (Ә.И. Харисов, Ғ.Б. Хөсәйенов, 47, 26–28) тигән, йәғни уларҙың жанр йөҙөнә ишара яһамаусы нейтраль терминдар ғына ҡулланылды. Һуңғы осорҙа иһә был бүленеште жанр яғынан ҡылыҡһырларлыҡ терминдар ҡулланырға тырышыу тенденцияһы һиҙелде. Ләкин был осраҡта ла фольклорсылар бер ауыҙҙан – бер һүҙҙән булманы. Мәҫәлән, Н.Т. Зариповтың хеҙмәттәрендә улар *"жанр"* тип алынды (8, 6; 21), Н.К. Дмитриев, Ә.И. Харисов, Кирәй Мәргән, Ғ.Б. Хөсәйенов, М.М. Сәғитов, К.Ә. Әхмәтйәнов, М.Х. Минһажетдиновтар ҙа әкиәтте "жанр" тип иҫәпләнеләр. Шуныһы ҡыҙыҡ, ошо фекерҙе уртаҡлашыусыларҙың күптәре, әкиәтте классификациялағанда, уның тәүге бүленешен (йәғни хайуандар тураһындағы, тылсымлы, тормош-көнкүреш әкиәттәренә бүленеүен) әйтеүҙән (Н.А. Каргаполов, В.П. Аникин, Ә.И. Харисов, М.М. Сәғитов, Г.Н. Поспелов, К. Имамов, Кирәй Мәргән, Ғ.Б. Хөсәйенов, Т.Д. Курдованидзе һ.б.) йә уның тағы ла ваҡыраҡ төркөмсәләрҙән тороуын билдәләүҙән ары китмәнеләр.

Жанр йәһәтенән әкиәткә ике төрлө ҡараш йәшәүенең сәбәбе әкиәтте жанр тип алыу алмауҙа ғына түгел, ә *"жанр", "төр" ("вид", "род") төшөнсәләрен* нисек аңлауға бәйләнгән. Был хаҡта инештә әйтелгәйне инде.

Әкиәттәр бүтән эпик жанр һәм төрҙәрҙән ни яғы менән айырыла, тигәндә, йыш ҡына, "уйҙырмаға иҫәп тотоуы" ("установка на вымысел") менән, тип кенә ҡотолоусандар (35; 25, 311; 32, 441). Уйҙырмалылыҡ фольклорҙың эпос, легенда, йыр кеүек башҡа төр һәм жанрҙарына ла,

әҙәбиәткә лә хас күренеш. Шуға күрә ул әкиәтте әкиәт иткән билдә иҫәпләнә алмай.

Әйтелгәндәҙән сығып шундай һығымта яһарға ғына ҡала: әкиәт – тарихи яҡтан танып белеү, сакраль һәм эстетик вазифа атҡарыусы, сағыштырмаса тотороҡло йөкмәткеле, халыҡ-ара мәғлүм һәм үҙенә генә хас (специфик) сюжет типтарына нигеҙләнгән, ысынбарлыҡты йә тормошсан итеп; йә тылсымлы фантастика менән һуғарылған ғәжәйеп сер донъяһы, йә кешене тылсымһыҙ, әммә шаҡ ҡатырлыҡ фантастик заттар менән мөнәсәбәткә инеүсе рәүешендә; йә аллегорик юҫыҡта сағылдырыусы уйҙырманан торған, сәсмә ҡарһүҙ рәүешендәге эпик төргә (родҡа) ҡараған, импровизацияға үтә ныҡ бирелмәүсән "һүҙ – тауыш – ым – ишара синкретизмын файҙаланып" талғын хикәйәләү интонацияһында индивидуаль башҡарыла торған төр күренешенән (вид) ғибәрәт. Әлбиттә, был әйтелгәндәр камил билдәләмә булыуға дәғүә итмәй. Уны бары эш барышында ориентир өсөн генә файҙаланырға була. Бында шулай уҡ уның жанр билдәләмәһеме, түгелме икәне лә әйтелмәне. Сөнки жанрҙы жанр итеүсе билдәләрҙән пафос менән жанр йөкмәткеһе лә килтерелгән билдәләмәлә иҫәпкә алынманы. Иҫәпкә алыр инек тә, улар дөйөм әкиәткә хас "тарихи ҡабатланыусан аспект" була алмай. Ә бына жанр йәһәтенән тәүге эске төркөмләнештә улар хәл иткес роль уйнай. Шунан сығып, әкиәтте халыҡ сәсмәүеренең бер төр күренеше (вид) тип, ә уның беренсе баҫҡыс төркөмләнешен, йәғни шартлы рәүештә *"хайуандар (ҡош-ҡорт) тураһындағы әкиәттәр", "тылсымлы әкиәттәр", "тормош-көнкүреш әкиәттәре" тигән терминдар менән билдәләнгән төркөмдәрен жанр* тип, уларҙың форма яғынан (жанр билдәләре буйынса) эске төркөмсәләрен (жанровая разновидность) жанр төрҙәре (күренештәре) тип алырға тәҡдим итмәксебеҙ. Әйткәндәй, әкиәттең былдай төркөмләнеше фольклор ғилемендә ҡулланылғаны бар. Мәҫәлән, В.Я.Пропп, М.А.Вавилова, Е.А.Костюхин, Т.В.Зуева, Б.П.Кирдан һ.б. әкиәтте "вид народной прозы" тип билдәләй килә (38, 245; 25, 311; 22, 133). Әкиәтте жанр тип танығанына тиклем Н.И.Кравцов та "вид" тигәндә – художестволы форма тибы (әкиәттәр, йырҙар, һ.б.), жанр тигәндә – әҫәрҙәрҙең тематик төркөмө (унынса, мәҫәлән, тылсымлы әкиәттәр, хайуандар тураһындағы әкиәттәр, тормош-көнкүреш әкиәттәре лә, тарихи, ғаилә-көнкүреш, мөхәббәт йырҙары ла шул "вид"тың тематик төркөмдәре) иҫтә тотолорға тейешлеген иҫкәрткәйне (27 , 26).

Хайуандар тураһындағы, тылсымлы, тормош-көнкүреш әкиәттәрен жанр тип алыу башҡорт милли әкиәт репертуарының тәбиғәтен дә сағылдыра. Мәҫәлән, беҙҙә тылсымлы әкиәттәр саф (башкөллө, баштанаяҡ) тылсымлы, тылсымлы-героик һәм батырҙар тураһындағы әкиәттәр тигән жанр төрҙәренә бүленә. Жанр йөкмәткеһе

яғынан уларҙың тәүгеһе – романик, икенсеһе романик-героик, өсөнсөһө – героик (милли-героик) проблемалы. Әммә әкиәттең өс жанрының береһен персонажы йәһәтенән *(хайуандар тураһындағы әкиәттәр* тип), икенсеһен ысынбарлыҡты нисек сағылдырыуына (серлелегенә ҡарап, *тылсымлы әкиәттәр* тип), өсөнсөһөн ниндәй мөхитте һүрәтләүенән сығып *(тормош-көнкүреш әкиәттәре* тип) атап йөрөтөү – бер системаға ингән теләһә ҡайһы күренеште лә бер үк үлсәмдән (критерийҙан) сығып классификациялау принцибы менән күрәләтә иҫәпләшмәү булыр ине. Ә фән былдай баш-баштаҡлыҡ менән килешә алмай. Шуға күрә беҙҙең осраҡта өс жанрға ла уртаҡ знаменатель булырҙай бер үк үлсәм (критерий) табыу талап ителә. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, ысынбарлыҡтың нисек сағылдырылыуы шундай уртаҡ знаменатель була ала. Шул күҙлектән сығып, быға са *"хайуандар тураһындағы әкиәттәр"* тигән жанрҙы, шартлыраҡ рәүештә булһа ла, *аллегорик әкиәттәр* тип (шартлыраҡ, сөнки уның составында хайуандар тормошон реалистик юҫыҡта, уларҙы кеше менән мөнәсәбәттә сағылдырыусылары ла бар), тылсымлы тигәнен *мөғжизәүи (серле) әкиәттәр* тип, тормош-көнкүреш әкиәттәре тигәнен ҡайһы бер тикшеренеүселәр тарафынан быға са шул терминдың синонимы итеп йә шуның менән бер рәттән ҡулланған *реалистик әкиәттәр* атамаһы менән атап йөрөтөү хәйерле булыр кеүек. Әлегә иһә, өйрәнгән яу һуғышмаға яҡшы, тигән кеүек, яңы тәҡдим ителгән бүленеште күҙ уңында тота-тота (эш инструменты сифатында) элекке терминдарҙы "тотонорға" була.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Алексеев Н.А. Ранние формы религии тюркоязычных народов Сибири. – Новосибирск: Наука, 1980. - 260 с.

2. Андреев Н.П. Указатель сказочных сюжетов по системе Аарне. – Л., 1929.

2а. Амантай Ғабдулла. Башҡорт фольклорында жанрҙар // Ғабдулла Амантай. Һайланма әҫәрҙәр / Төҙ. Мөхөтдин Тажи; Баш һүҙ авт. Ғ.Зөлҡәрнәев. –Өфө, 1960. – 144–151-се б.

3. Аникин В.П. Русская народная сказка.– М.: Госучпедгиз,1959.- 256 с.

4. Arais K., Medne A. Latviesu Pesaku tipy Raditajs. – Riga: Zinatne, 1977 (Указатель типов латышских сказок).

5. Башкирские народные сказки / Запись и перевод А.Г.Бессонова; Сост., ред. Н.К. Дмитриева. – Уфа: Башгосиздат, 1941. – 367 с.

6. Башҡорт халыҡ ижады: 3 томда / Төҙ., мөхәрр., баш һүҙ һәм иҫкәр. бир. Ә.И. Харисов. – Өфө: Башгосиздат, 1959. – 2-се том. – 283 б.

7. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр: 5 китаптан / Төҙ. М.Х.Минһажетдинов, Ә.И.Харисов. – Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1973. – 1-се кит. – 375 б.

8. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр: 5 китаптан / Төҙ. Н.Т. Зарипов, М.Х. Минһажетдинов; Яуаплы мөхәрр. Ә.И. Харисов, Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө: Башкортостан кит. нәшр., 1978. – 3-сө кит.- 332 б.

9. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр: 5 китаптан / Төҙ. Ә.М. Сөләймәнов; Яуаплы мөхәрр. С.Ә. Галин. – Өфө: Башкортостан кит. нәшр., 1981. – 4-се кит.- 398 б.

10. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр: 5 китаптан / Төҙ. Ә.М. Сөләймәнов; Яуаплы мөхәрр. Н.Т. Зарипов. – Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1983. –5-се кит. – 390 б.

11. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ. Ә.М.Сөләймәнов; инеш мәҡ. М.М. Сәғитов; Һүҙ ахыры Ә.М.Сөләймәнов менән Р.Ф.Рәжәповтыҡы; Аңлатмалар, һүҙлек М.М.Сәғитов менән Ә.М.Сөләймәновтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Н.Т.Зарипов. – Өфө:Китап, 1998 – 3-сө том: Эпос. – 448 б.

12. Бонград-Левин Г. М., Ильин Г.Ф. Индия в древности. – М.: Наука, 1985.

13. Boratov P.N. Typen tifrkischen Volksmarchetn vom W.Eberhard und Boratov P.N.. –Wiesbaden, 1953.

14. Вавилова М. А. Русская бытовая сказка: учеб. пособие. – Вологда: Изд-во ВГПИ, 1981. – 80 с.

15. Введение в литературоведение / под ред. Г.Н.Поспелова. – М.: Высш. шк., 1976.

16. Вилданов Ғәбделхәт. Төрөк милләттәре әҙәбиәттәрен тикшереү һәм уларҙың йәкүне // Башҡорт аймағы. –1926. – № 2. –3–26-сы б.

17. Восточно-славянский фольклор: Словарь научной и народной терминологии. – Минск: Навука і тэхніка, 1993. – 478 с.

17а. Восточнославянская сказка: Сравнительный указатель сюжетов / сост. Л.Г. Бараг и др. – Л.: Наука, 1979. – 437 с.

18. Гусев В.Е. Эстетика фольклора. – Л.: Наука, 1967. – 504 с.

19. Ғәбитов Хәбибулла. Халыҡ поэзияһы тураһында // Башҡорт аймағы. – 1926. –№2. –30–48-се б.

20. Дмитриева Д.А., Виноградова Н.А. Искусство древнего мира. – М.: Детская литер., 1989.

21. Зарипов Н.Т. Научный свод башкирского фольклора // Башкирский фольклор: Исследования последних лет. – Уфа: Изд-во БФАН СССР, 1986. – С.4–17.

22. Зуева Т.В., Кирдан Б.П. Русский фольклор: учебник для высших учебных заведений. 4-е изд. – М.: Флинта и Наука, 2002. – 480 с.

23. Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады: Юғары уҡыу мәктәптәренең филология факультеты өсөн дәреслек / Яуаплы мөхәрр. Ә.М. Сөләймәнов. – Өфө: БДУ нәшр., 1982. – 244 б.

24. Колпакова Н.П. Русская народная бытовая песня. – М.; Л.: Изд-во АН СССР, 1982. – 284 с.

25. Костюхин Е.А. Сказка // Восточно-славянский фольклор: Словарь научной и народной терминологии. – Минск: Навука тэхн»ка, 1993. – С. 311 – 312.

26. Кофман А.Ф. Жанрообразующие признаки в фольклоре. – М.: Изд-во МГУ, 1979 (Рукопись в ИННОН АН СССР, 3628).

27. Кравцов Н.И. Введевие // Русское народное поэтическое творчество. – М.: 1971. – С. 5 – 24.

28. Кравцов Н.И. Сказка как фольклорный жанр // Специфика фольклорных жанров. – М., 1973. – С. 68–84..

29. Кравцов Н. И. Славянский фольклор: учеб. пособие для студентов филологических специальностей университетов. – М.: Изд-во МГУ, 1976. – 257 с.

30. Кәрим Мостай. Көндәлектәр // Ағиҙел. – 2007. – 5–36-сы б.

31. Мелетинский Е. М. Поэтика мифа. – М.: Наука, 1976. – 408 с.

32. Мелетинский Е.М. Сказки и мифы // Мифы народов мира: Энциклопедия. – М.: Советская энциклопедия.– 1988. – Т.2. 2-е изд. – С.441– 444.

33. Минһажетдинов М.Х. Ҡәләмендә көҙрәте бар / Төҙ., Т.Ә. Килмөхәмәтов һәм Ә.М. Сөләймәнов; Баш һүҙ авт. В.Ш. Псәнчин, Т.Ә. Килмөхәмәтов; Һуңғы һүҙ авт. Ә.М. Сөләймәнов. – Өфө: Китап, 1995. – 256 б.

34. Мирасов Сәғит. Ун йыл эсендә башҡорт халыҡ әҙәбиәтен өйрәнеү, тикшереү юлында ниҙәр эшләнде? // Белем. – 1929. – № 3. – 89–96-сы б.

35. Померанцева Э.В. Судьба русской сказки. – М.: Наука, 1965. – 220 с.

36. Поспелов Г.Н. Теория литературы. – М.: Высш. шк., 1978. – 351 с.

37. Потапов Л.П. Охотничьи поверья и обряды алтайских тюрков / Культура и письменность Востока. – Баку, 1929. – Кн. V. – С. 123 – 149.

38. Пропп В. Я. Фольклор и действительность: Избр. ст. / сост., ред., предисл. и примеч. Б.Н. Путилова. – М.: Наука, 1976. – 326 с.

39. Путилов Б.Н. Народные исторические песни. – М., – Л., 1962.

40. Сөләймәнов Ә.М. Тормош-көнкүреш әкиәттәре: Жанр үҙенсәлектәре / Яуаплы мөхәрр. Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1990. – 269 б.

41. Сулейманов А.М. Башкирские народные бытовые сказки: Особенности сюжетного состава, типология персонажей, жанровая проблематика и поэтика: дисс. ... д-ра филол. наук. – Уфа: БГУ, 1991.

42. Сөләймәнов Ә.М. Башҡорт балаларының ҡарһүҙе: 2 китаптан. – Өфө: Китап,2008. – 1-се кит. – 244 б.

43. Сәғитов М.М. Хәҙерге әкиәттәрҙең ҡайһы бер үҙенсәлектәре // Башҡорт совет әҙәбиәте һәм халыҡ ижады мәсьәләләре / Яуаплы мөхәрр. Ғ.Б. Хөсәйенов, С.Ә. Галин. – Өфө: СССР ФА-ң Башҡортостан филиалы нәшр., 1968. – 226 – 229-сы б.
44. Таһиров Нуриағзам. Башҡорт халҡының байҙығын белеү, тарихы, йәғрәфиәләренә кәрәкте уҙыктарын йыйыу ҡомартҡыларын сүптәп табыу һәм туптау өсөн ҡулданма. – Стәрлетамаҡ, 1922. – 44 б.
45. Трояков П.А. Промысловая и магическая функция сказывания сказок у хакасов // Советская этнография. – 1969. – № 2. – С. 24 – 44.
46. Turk Dunyasi Ortak Edebiyati: Turk Dunyasi Edebiyat Kavramalari ve Terimleri Ansiklopedik Soslugu. – Ankara: AKDTYK Ataturk Kultur Merkezi, 2004. – Cild IV. – 526 s.
47. Харисов Ә.И., Хөсәйенов Ғ.Б. Халыҡ ижады // Башҡорт әҙәбиәте: VIII Класс өсөн дәреслек. – 1986. –17 – 63-сө б.
48. Харисов Ә.И. Мираҫ: Башҡорт фольклоры буйынса күҙәтеүҙәр, тикшеренеүҙәр һәм ауыҙ-тел ижады өлгөләре / Төҙ. Зөлфирә Мамаева, Әхмәт Сөләймәнов; Инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Әхмәт Сөләймәнов. – Өфө: Китап, 2004. – 392 б.
49. Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт халҡының рухи донъяһы. -– Өфө: Китап, 2004. – 480 б.
50. Фрэзер Д. Дж.. Фольклор в ветхом завете. – М.: Изд-во полит. литер., 1985. –
51. Чистов К. В. Введение//Русское народное творчество: учеб. пособие. – М.: Высш. шк., 1966. – С.5–39.
52. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Башкортостан кит. нәшр., 1971.
53. Әхмәтйәнов К.Ә. Халыҡ ижады // Башҡорт әҙәбиәте: VIII кл. өсөн дәреслек. 3-сө баҫма. – Өфө, 1992. – 14 – 63-сө б.
54. Юнг К.Г. К пониманию психологию архетипа младенца // Самосознание европейской культуры. – М.: Изд-во политической литер., 1991. –

***Һорауҙар һәм эш***

1. Рухи мәҙәниәттең үҙенсәлекле ҡомартҡыһы булараҡ әкиәт.
2. Әкиәттең мифтарға нигеҙләнмеше.
3.Әкиәттәрҙең сакраль вазифа үтәгәне.
4. Әкиәттәрҙе ниндәй принциптан сығып төркөмләйҙәр?
5. Бер студент әкиәт һөйләй, ҡалғандар тыңлай ҙа, хәтерҙә ҡалған тексты үҙенсә тергеҙә.

# VI БҮЛЕК
# ХАЙУАНДАР ТУРАҺЫНДАҒЫ ӘКИӘТТӘР

Шартлы рәүештә аллегорик йәки, халыҡ-ара фольклор ғилеме традицияһы буйынса, хайуандар тураһындағы әкиәттәр тип аталған әкиәт был жанр4а ҡараған әҫәрҙәр, классик мәҫәлдәр һымаҡ, шау аллегориянан, ә уларҙың персонаждары тик дүрт аяҡлы хайуанҙан, кейектәрҙән тора икән, тип уйларға ярамай. Уларҙың тегеһенең дә быныһының да һәр төрлөһө бар.

### *а) Персонаждары һәм аллегоризм*

Иң элек, әлбиттә, “Төлкө менән бүре” (АТ – ; *8А*, Төлкөнөң бүрене ҡамышлыҡта һунар итергә өйрәткәне һәм яндырып үлтергәне), “Етем төлкө” (АТ 8, Исем ҡушыусы төлкө), “Төлкө менән айыу” (АТ 57, яҡынса “Ҡоҙғон менән төлкө” сюжетына оҡшаш, “Төлкө айыу өңөндә” (*80***, Үҙе иҫерткән айыуҙан ҡыуылған төлкөнөң уны һунарсыларҙан аттырғаны, уның исеменән кейектәрҙән бүләк алып ятҡаны), ”Ҡуян менән арыҫлан” (АТ 93, Ҡойо төбөндәге үҙ шәүләһен үҙе кеүек януар арыҫландың шунда ташланғаны) (20 б, №№ 31,, 34, 45, 52, 53) тибындағы әкиәттәр иғтибарға ташлана. Уларҙа төп герой сифатында ла, ярҙамсы персонаждар ролендә лә ҡыр кейектәре, йыртҡыс йәнлектәр сығыш яһай.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең бер төркөмөндә төп герой һәм ярҙамсы персонаждар роле кеше тарафынан бик борон уҡ ҡулға эйәләштерелгән хайуандарға тапшырылған. “Кәзә менән һарыҡ” (АТ 154, Кәзә менән һарыҡ бүреләрҙең ҡотон алған), ”Ишәк, эт, бесәй, әтәс” (АТ 130 B, Йәнлектәрҙең урмандағы төн үткәрер урыны булғаны), “Бесәй”( АТ – , Бесәй менән үгеҙ йорт һалған), ”Аҡыллы бәрәс” (АТ – , Ергә хужамын тигән бүрене бәрәстең эттән талатҡаны) (20а, №№ 70, 74, 75, 82) – ана шундайҙарҙан.

Ҡайһы бер әкиәттәрҙә йорт ҡоштарына өҫтөнлөк бирелә.. “Ҡаҙҙар ниңә ала булған” (АТ –, Әсир ҡыҙҙың ҡаҙ бәпкәһенә әүрелгәне), “Күркә” (АТ –, Күркәнең йорт ҡоштары башлығы вазифаһынан ҡолаҡ ҡаҡҡаны), “Әтәс нимә тип ҡысҡыра” (АТ – , Әтәс, тауыҡҡа биреп торған ҡойроғон һорап, ҡысҡыра), “Тауыҡ менән тәйлөгән.” (АТ – , Төйлөгәндән һалдырып алып, әтәс биргән муйынсаның таралтҡан тауыҡтың, уның бөртөктәрен эҙләп, сүплектә соҡонғаны), “Алдаҡсы себеш” (АТ –, Себеш бесәй балаһының ҡотон алған) (20 б, 14 – 17, 100).

Мәғлүм булыуынса, башҡа халыҡтар кеүек үк, борон башҡорттар ҙа төрлө йән эйәләрен, үҫемлектәрҙе изгеләштергән. Башҡорт ырыуҙарын бер-береһенән айырыусы атрибуттары араһында ҡош, ағас булыуы шуның бер миҫалы ул. Бынан тыш мышар (миләш), артыш, эйәле ағас, һандуғас ҡунған ботаҡ, бүре, торна, йылҡы малы, аҡ болан, кәкүк, күгәрсен, аҡҡош, ҡарлуғас, ҡара ҡарға кеүек мал-тыуар, ҡош-ҡорт культына инанған беҙҙең бабаларыбыҙ. Әммә хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә шундай тотем

культы менән уртаҡлыҡ күҙәтелмәй. Күрәһең, улар генетик яҡтан шундай инаныуҙарға тиклем тыуған. Быны, логик яҡтан фекерләп тә аңлатыуы ҡыйын түгел. Бары тамаҡ туйҙырыу хәстәрлеге менән һунар итеүсе бабаларыбыҙға, күрәһең, культ ҡайғыһы булмаған.

Икенсенән, әкиәттең башҡа жанрҙарының сюжеттары кеүек үк, әле һүҙ барғанының да сюжеттары башлыса башҡа, хатта ғүмерҙә лә башҡорт аралашмаған, ер аяғы-ер башында йәшәгән халыҡтарҙыҡы менән оҡшаш йә уртаҡ. Тимәк, бындай осраҡта бары типологик оҡшашлыҡ тураһында һүҙ барырға мөмкин. Шуның менән бергә был уртаҡлыҡ һәм оҡшашлыҡтар күп кенә сюжеттарҙың бер мәҙәни үҙәктән (культурный центрҙан) килеүе һәм яңы урынға йәтешләп кенә яраҡлашыуы менән аңлатылырға ла мөмкин. Уртаҡ сюжеттарҙың беҙҙең әкиәт репертуарындағы варианттарындағы төлкө урынына һинд, иран, ғәрәп, Урта Азия варианттарында сүл бүреһе күрһәтелеүе шулай "йәтешләп кенә яраҡлашыу"ға тос миҫал ул. Көнъяҡ халыҡтарының әкиәттәренә хас арыҫландың башҡорт әкиәтенә килеп инеүе иһә уның сюжетының көнъяҡ халыҡтары репертуарынан үтескә алыныуына миҫал булыуы ихтимал.

Әле һүҙ барған әкиәт жанрына, шартлы рәүештә булһа ла, йәнһеҙ тәбиғәт һәм ғаләм күренештәре хаҡындағы әкиәттәрҙе лә индерергә мөмкин. "Шартлы рәүештә булһа ла" тигәнгә шул нигеҙ. Хайуандар тураһындағы ҡәҙимге әкиәттәттәрендәге хайуан, ҡош-ҡорт кеүек үк, уларҙа ел дә, ут та, һыу ҙа, тупраҡ та ("Ел, ут, һыу, тупраҡ", АТ - , Кешенең үтенесе буйынса, ел, ут, һыу, тупраҡ кешегә хеҙмәт итә), ямғыр ҙа ( "Ләйсән ямғыры", АТ–, Үгәй ҡыҙҙың Ләйсән ямғырына әүрелгәне), йыл миҙгедәре лә ("Дүрт һылыу", АТ – , Ай исемле ҡарттың дүрт ҡыҙының йыл миҙгелдәре булғаны) кешесә һөйләшә, үҙ-ара кешесә мөнәсәбәткә инә (20 б, №№ 18, 19, 20) 20).

Хайуандар тураһындағы әкиәттәр тип аталһалар ҙа, уларҙа кешегә лә урын бирелеүсән. Әле телгә алынғандарында кеше, нигеҙҙә, ярҙамсы персонаж рәүешендә генә урын ала. "Алмасыуар ат" тигән әкиәттә, мәҫәлән, ул төп герой вазифаһын атҡара: ат кеүек сыбар булырға теләгән айыуҙың аяҡ-ҡулын бәйләп, һуҡа төрәнен ҡыҙҙырып, шуның менән айыуҙың йөнөн өтә; сыбарлай, йәнәһе (20а, №33, АТ 8, Айыу төҫөн үҙгәрттерә). "Айыу, төлкө, егет" тигәнендә утынсы егет әүҙем, әммә бөтәһен дә тик төлкө кәңәше буйынса ғына эшләй.

Шуныһы анығ һәм асыҡ иғтибарға ташлана: ҡош-ҡорт һәм тәбиғәт, ғаләм күренештәре төп герой урынын алған әкиәттәр, ғәҙәттә, этиологик мотивлы була. Бындай билдә уларҙың йә мифологиянан айырылып бөтмәүе, йә шундайҙарға эйәреп ижад ителеүе хаҡында һөйләй. Һәр хәлдә, улар, мифтар һымаҡ уҡ, тәбиғәт, ғаләм күренештәре хаҡында бары фаразға ҡоролған мәғлүмәт биреү сараһы кеүек аңлашыла. Шуға ла бындай әкиәттәрҙең персонаждарының образы артында ниндәйҙер социаль көстәрҙе күреү ситен. Тимәк, уларға аллегоризм хас түгел. Шартлы

рәүештә хайуандар тураһындағы жанрға теркәлгән мифологик тамырлы бындай әҫәрҙәргә һунарсы, малсы балыҡсы, ҡортсо һ.б. кеүек фәҡәт ауыл кешеләренә генә хас һөнәр эйәләренең, ҡош-ҡорттоң булмышы, ҡыланмышы, шуға бәйле хәл-ваҡиғалар хаҡында күҙәтеүҙәр менән уртаҡлашыуы рәүешендә хасил булған ауыҙ-тел хикәйәләре яҡын.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең бүтәндәре иһә ҡош-ҡорт тураһында бәйән итә, әммә беҙ уларҙың образы артында социаль типтарҙың образы кинәйәләнеүен аңлайбыҙ. Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә аллегория шуға тиклем барып етә, хатта уларҙың ҡайһы берҙәренең тормош-конкүреш әкиәте рәүешендәге версиялары ла осрай. Халыҡ-ара әкиәт күрһәткестәрендә *"АТ 170 Һарыҡ тояғына – тауыҡ + 158 Үгеҙ нишанаһы"* тип күәтелгән ике тематик мотивтан ойошҡан сюжеттың бер весияһы беҙҙә "Алдар төлкө", "Хәйләкәр төлкө" тигән хайуандар тураһындағы әкиәт рәүешендәге ике вариантта китапҡа ингән (20 б, № 87.). Шуның тормош-көнкүреш әкиәте рәүешендәге версияһының "Мал башы – себеш", "Таяҡ", "Үле ҡыҙға – тере ҡыҙ" тигән варианты 18 томлыҡ "Башҡорт халыҡ ижады" тупламаһының юмористик әкиәттәрҙән торған китабында донъя күргән (19, №№ 34 - 36). Шул әкиәттәргә бирелгән аңлатманан был версияның бик күп архив варианттары барлығын беләбеҙ (19, 342). Сюжеттың хайуандар тураһындағы әкиәттәр рәтенә ингән версияһы буйынса, табып алған ҡыу тояҡты, фатирға төшкән һайын, төлкө бәләләшеп, ҡиммәтлерәк әйбергә алмаштыра бара.. Тормош-көнкүреш версияһында иһә шул уҡ ролде үткенсе кеше атҡара. Ике осраҡта ла төп персонаж үҙен мутлыҡҡа тиң хәйлә оҫтаһы тип таныта. Әкиәт эстетикаһы бары ғәҙел хәйләкәрлекте генә хуп күрә. Ә бында хәйләкәрлек мутлыҡтан айырылғыһыҙ. Халыҡ алға һөргән сәләмәт эстетик бағланыш менән ҡапма-ҡаршы булғанға ла хәйләкәр геройыбыҙ аҙаҡ мәсхәрәгә ҡала: ҡыҙ икән тип йөкләп килгәне эт булып сыға.. Бындай финал сюжеттың юмористик әкиәт рәүешендәге версияһының варианттарында айырыуса тоторо͡ҡло һаҡлана. Хайуандар тураһындағыларында ни өсөндөр күҙәтелмәгән. Шуға күрә сюжет сиселеп бөтмәү тойғоһо ҡала.

Халыҡ-ара әкиәт сюжеттары каталогында АТ 545 В – "Итекле бесәй" тибы тип билдәләнгән сюжет та, ғәҙәттә, хайуандар тураһындағы әкиәт рәүешендә осрай; фәҡир егеттең батша ҡыҙын алыуына төлкө ҡорған хәйлә яҡшы булыша. Ә уның "Бабай менән егет" тигән тормош-көнкүреш әкиәте рәүешендәге версияһында төлкө ролен бабай алған (19, 41). Шулай итеп, аллегоризм билдәһе булыу-булмауына ҡарап, бер үк сюжет ике жанрға ҡарай ала. Икенсе төрлө әйткәндә, аллегоризм жанр хасил итеүсе билдә, алым тип вазифаһын атҡарыу ҡеүәһенә эйә.

Юғарыла әйтелгәндәр ҙә хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең бер жанр төрөн (жанровая разновидносын) аллегорик әкиәттәр тип атау маҡсатҡа ярашлы икәне тураһында һөйләй.

### *б) Төлкөнөң әҙәм балаһы менән бүрене көлкөгә ҡалдырғаны*

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең күптәрендә төлкөнөң хәйләкәрлеге һоҡландыра. «Хәйләкәр төлкө» [1]тигән бер әкиәт бар. Төлкөнөң үлгәнгә һалышып ятыуы уға балыҡсы ҡартты һемәйтеүгә ярҙам итә. Тәү ҡарашҡа төлкөнөң был ҡылығы хуплауға лайыҡ түгел кеүек. Ни тимә, ул оло кешене төп башына ултырта. Бындай ҡылыҡ беҙҙең әхлаҡ нормаһына һыймай. Әммә мәсьәләгә икенсе яҡтан ҡараһаң, бабайҙың үҙен шелтәләргә лә ерлек бар. Ул, «Хыялбай»[2] тигән юмористик әкиәттәге аусы кеүек, анһат ҡына байымаҡсы: йәнәһе, ҡышҡы һалҡында ер аяғы ер башына барып, төлкө эҙен табып, уға ҡапҡан ҡороп аҙапланмай ғына йәки көнө буйы өшөп-туңып аңдып ятып, атып-нитеп тормаҫтан, йәғни анһат ҡына, яғалыҡ төлкө алып ҡайтып, әбейен ҡыуандыра! Әммә көс түкмәйенсә, бер кем дә, шул иҫәптән әкиәт геройы ла маллы һәм данлы була алмай. Шуға күрә лә әкиәт балыҡсы ҡартты үсәгәндәй итә. Шул сәбәптән төлкөнөң хәйләкәрлеге хуплана.

Бабай менән хәйләкәрлектә ярышыуға ярышмаһа ла, төлкө ул әкиәттә унан аҡыллыраҡ та, хәйләкәрерәк тә итеп күрһәтелә. Үлгән булып ҡыланыусы төлкөгә юлыҡҡан кешене әкиәтселәр бер малай, бер егет йә башҡа берәй кем тип тә таныштыра алырҙар ине (сөнки әкиәт өсөн персонаждың социаль сығышының да, йәшенең дә әһәмиәте, ғәҙәттә, булмай). Әммә улай итмәйҙәр. Юҡ. Уны мотлаҡ бабай йә ҡарт тип кенә атайҙар. Был сюжет ҡайһы халыҡҡа хас, уларҙағы варианттарында ла шул уҡ хәл күҙәтелә. Ни өсөн? Сөнки «бабай», «ҡарт» тигән һүҙ, «йәш булмаған кеше» тигән мәғәнәнән тыш, «йәшәрен йәшәп, аҡыл туплаған» тигәнде лә аңлата. Әкиәттәге ҡарттың мул итеп балыҡ тотоп алып ҡайтып барыуы ла әбейе өсөн оло ҡыуаныс. Уның тунын яғалатып, шул ҡыуаныс өҫтөнә ул тағы бер ҡыуаныс өҫтәргә теләй. Ошо хаҡта уйлауы уҡ уның рациональ фекер йөрөтөрлөк кеше булыуын аса. Шулай аҡылға бөткән кешене лә алдай алғанын күрһәтеп, әкиәтселәр төлкөнө хәйләкәрлектә камиллыҡтың сиген үткән зат тип раҫлауға ирешәләр ҙә инде. Шуға ла «Ас айыу, төлкө, егет» әкиәтендәге төлкөнөң кешегә хәйләкәрлек буйынса үрнәк, хәҙергесә әйткәндә, үҙенсәлекле мастер-класс үткәреүсе педагог кимәленә күтәреп күрһәтелеүенә бер ҙә аптырайһы түгел.

Шуныһы ҡыҙыҡ, был әкиәттә айыу ҙа хәйлә йәһәтенән үҙенең бер ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел икәнен күрһәтә. Әммә әкиәт шул уҡ ваҡытта: «Хәйләкәрлек менән хәйләкәрлек – бер түгел шул ул», – тигәндәй ҙә итә. Бына үҙегеҙ хөкөм йөрөтөгөҙ. Айыу утынсы егеткә былай ти: «Утын алам, тип әйт тә, мине арбаға төртөп йыҡ», – ти. Маҡсаты – төлкөнөң яҡыныраҡ килеүенә ирешеү һәм уны тотоп ашау була. Хәйләкәрлекме был?

---

[1] Артабанда миҫалдар “БХИ”-ның 13-сө томынан алынды (20а)[1]

[2]

Хәйләкәрлек, әлбиттә! Әммә әкиәттең яҙылмаған үҙ ҡануны бар: уның өсөн мотлаҡ төлкө генә – хәйләкәрлек символы. Шуға күрә артабан ваҡиғаның нисек үҫеүе хаҡында хәбәрҙар булмаған сүрәттә лә, шул ҡанунды яҡшы белгән тыңлаусы айыуҙың был хәйләһенең барып сыҡмаясағын күҙаллай, тик шул күҙаллауы нисек ғәмәлләшерен генә белмәй. Ысынлап та, урман хужаһы үҙе ҡорған хәйлә ҡапҡанына үҙе юлыға: төлкө егеткә «утынды», йәғни айыуҙы сырмарға, быраулап нығытырға, һәм уның ҡойроғо аҫтына шына ҡағырға булыша. Шулай итеп, айыуҙың хәйләле кәңәше буйынса эшкә тотонған егет, уны төлкөнөң хәйләле кәңәше буйынса тамамлай. Шул уға айыуҙан үсен алырға ла сәбәп була. ни өсөн үс алырға? Сөнки айыу егетте уйнатып ҡына тормай, уны ашарға ниәтләнгән була. Нисек булғанда ла, егет төлкөнөң хәйләһенә өҫтөнлөк бирә, хәйләкәрлектә унан дәрес ала.

***в) Алдыҡ һүҙҙе ысынға алыусылар һәм уларҙы төлкөнөң төп башына ултыртҡаны***

Артабан бүрене алдап, төнө буйы ҡойроғон мәкегә тығып ултырырға "аҡыл биреүе" иһә (йәнәһе, ул үҙе балыҡты шулай тотҡан) төлкөгә симпатияны тағы ла көсәйтә. Башҡа төрки ҡәрҙәштәребеҙҙең фольклорындағы һымаҡ уҡ, башҡорт легендалары ла изге зат итеп таныҡҡан мифик бүре образынан ("Башҡорт" һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан?", "Башҡорт ҡайҙан килеп сыҡҡан?", "Башҡорт" һүҙенең килеп сығышы", 2, № 124 –1261) айырмалы рәүештә, ҡош-ҡорт (кейектәр) хаҡындағы әкиәттәрҙә бүре, ғәҙәттә, яуызлыҡ символы рәүешендә һүрәтләнә. Шуға күрә лә уның мәкенән һыу алырға килгән ҡатындарҙың көйәнтәһен татыуы әкиәт тыңлаусыларҙа йәлләү тойғоһо уятмай. Киреһенсә, шулай туҡмалыуға сыҙай алмай, үрле-ҡырлы һикерә торғас, ҡойроғо өҙөлөп, сонтор ҡалыуы карикатура эффекты тыуҙырыу һөҙөмтәһендә, яуызлыкты кәүҙәләндереүсе заттың тап бына ошондай хәлгә тарыуы юмор тойғоһонан мәхрүм булмаған һәр кемде көлөргә мәжбүр итә. Комик эффектты, иш янына ҡуш булып, йәнә шул да көсәйтеп ебәрә: әкиәттең финалы, бер яҡтан, хәйләкәрлектә төлкөнөң ни тиклем камиллашҡанын баҙыҡландырып ебәрә, икенсе яҡтан, яуызлыҡ символы булған бүрене үтә бер ҡатлы иҫәр хәленә ҡуя. Төлкө өсөн был – үҙенә күрә үс ҡандырыу алымы.

"Сысҡан, айыу, бүре, төлкө" тигән әкиәт иһә: «Аптырамағыҙ. Төлкөнөң хәйләкәрлеге шуға тиклем барып етә: бүрене генә түгел, урман хужаһы айыуҙы ла, үҙе өсөн файҙалы итеп, төп башына ултыртыу уға бер ни ҙә тормай», – тигәндәй була. Бер төркөм януар сиратлап араларындағы көсһөҙ йәнлекте ашау тәртибе урынлаштырыу һөҙөмтәһендә, үҙенең ашалыр мәле еткәс, төлкө, ҡарамаҡҡа, ҡотолғоһоҙ тойолған ошо хәлдән дә имен-аман сығыу юлын таба. Был осраҡта ул, драматик ситуация уйлап сығара һалып, үҙен оҫта фантазер һәм сәхнәләштереүсе итеп таныта: йәнәһе, тәүҙә айыу ағаһы менән бүрене үлемдән ҡурсалай ҙа, шунан һуң

ғына ҙур теләк менән улар тарафынан ашалмаҡсы. Уның өсөн, йәнәһе, үҙ башына ҡарағанда, башҡаларҙыҡы ҡиммәт. Шуға инандыра ул айыу менән бүрене. Асылда иһә, имен-аман саҡта уларҙан тайыу яғын ҡарай. Был осраҡта ла бүре менән айыуҙың бер ҡатлылығы, эштең аҙағын уйлап тормай, алдыҡ һүҙҙе ысынға алып, тиҙ ышаныусанлығы юҫығында асыла. Ә төлкөнөң хәйләкәрлеге иһә, киреһенсә, уларҙың шул булдыҡһыҙлығын иҫәпкә алып, артабан ниндәйерәк эш ҡылһа, үҙенә ниндәй файҙа булырын көнэлгәре планлаштыра белеүендә һәм шул ниәтенең бойомға ашыуында күренә.

### *г) Төлкөнөң хәйлә академияһы*

Атаҡлы хәйләкәр кимәленә нисек күтәрелә һуң төлкө? Шундай һорау тыуырын белгән кеүек, халыҡ төлкөнөң хәйләкәрлеген үҙенә күрә эволюцияла күрһәтә. “Төлкө менән бүҙәнә” тигән әкиәт тап ошо маҡсатта ижад ителгәнгә оҡшай. Әгәр ҙә мәгәр ошо фаразда хаҡлыҡ бар икән, унда төлкө хәйләкәрлек мәктәбендә дәрес алыусы өйрәнсекте генә хәтерләткән булыр. Ҡарамаҡҡа, үҙ яйын ғына яйлап, бытбылдай-бытбылдай, үҙ аллы көн күргән ҡәҙимге бытбылдыҡ “хәйләкәрлек мәктәбе шәкерте” – төлкөгә хәйлә ысулдары буйынса дәрес бирә. Ул дәрес “теория”нан ғына тормай, ғәмәли дәрес рәүешенә эйә: бытбылдыҡ, ир менән ҡатынды үҙенә ымһындырып, берсә төлкөнөң тамағын туйҙыра, берсә кәмит күрһәтеп, уның күңелен күрә.

Әгәр хәйләкәр төлкө төп герой вазифаһын атҡарған әкиәттәрҙе бер система итеп күҙ алдына килтереп, комплекста ҡараһаҡ, шундай логик эҙмә-эҙлелек күҙәтелгәндәй булыр: башта бытбылдыҡтан һабаҡ алып, хәйләкәрлеген камиллаштырып, иң элек бүрене, шунан айыуҙы, артабан балыҡсыны ла уңайһыҙ хәлгә ҡалдырыуға өлгәшеп, тора-бара кемгә-кемгә – кешенең үҙенә үк «хәйләкәрлек һабағы» биреү кимәленә еткән кеүек булыр ине. Әммә, яҙылмаһа ла, шундай бер ҡанун бар: мәғлүмдер ки, маҡтала-маҡтала ҙур-ҙур дәрәжәләргә өлгәшкән әҙәм балаһы, тағы ла нығыраҡ маҡтала. Данлана торғас: “Мин-мин икән дә, мин – кем икән!” – тип уйлай башлай һәм яуланған дәрәжәләр түбәһенән тәгәрәгәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Шуны күҙ уңында тотҡан һымаҡ, әкиәт төлкө образын икенсе яҡлап тулыландырып ҡуя: хәйлә өлкәһендә ниндәй ҙур уңыштарға өлгәшмәһен, бер саҡ ул да уңышһыҙлыҡҡа осрап ҡуя, хатта үҙ башына етә. Быға кемдеңдер түгел, уның үҙ хәйләһе сәбәпсе була. ”Сысҡан, айыу, бүре, төлкө” тигән әкиәттә, ғәҙәттә, әтәс менән тауыҡты үҙенең хәйлә тоҙағына эләктереүсән төлкөгә Әтәсбай ҡаршы ҡуйыла: төлкөнөң хәйлә алымын файҙаланып, уның ҡотон ала. Үҙен ашарға йыйынған айыу менән бүрене: «Ҡарағыҙ әле бына был тау башына. Күрәһегеҙме, унан бер һунарсы төшөп килә? Туп-тура беҙҙең өҫкә килә», – тип алдап, уларҙан йәнен ҡотҡарған төлкө әтәскә (әйтерһең, һөйөнсө ала) килеп: «Ишеттеңме әле һин... яңы закон буйынса, ҡуян, бүре, төлкө менән әтәс бер-береһенә теймәйҙәр», –

тип, уны кәртә башынан үҙ янына төшөрмәк була. Әммә әтәс: «Бик яҡшы закон икән. Анау яҡтан беҙгә ҡарай бер кеше килә», – тигәс, төлкө унын янынан нисек табан ялтыратҡанын үҙе лә һиҙмәй ҡала (3, 46).

### *ғ) Хәйлә мутлыҡҡа әүрелһә…*

«Етем төлкө» әкиәтендә лә төлкө тәүҙә хәйләгә бөткән зат булып күҙ алдына баҫа. Бергәләп ҡышларға йыйынып, көндәр һалҡынайғас, ашарға һары май әҙерләгән кейектәр янына унын меҫкенләнеп килеп инеүе үк һиҫкәндерә. Һиҫкәнеү бушҡа булмай. Унын тиген ниәт менән йөрөмәүе тыңлаусыларға яйлап асыҡлана бара, әммә әкиәттең персонаждары өсөн сер булып ҡала. Төлкө, бурһыҡ балаларына исем ҡушырға саҡырылған кеше булып, ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгән майҙы, йорттан сыҡҡан һайын, ашап, төпләп ҡуя. Был осраҡта инде унын хәйләкәрлегенә әкиәт тыңлаусылар симпатия менән ҡарай алмай. Ни өсөн тигәндә, ул башҡа кейектәрҙең татыу ғаиләләй берҙәм коллективынын намыҫлы хеҙмәте менән табылып, изге ниәт менән һаҡланған уртаҡ малына уғрыларса ҡул һала. Шуға ла был мутлығы өсөн унын януарҙар хөкөмөнә тарттырылыуын кескәйҙәр ҙә ғәҙеллек тантанаһы тип таный.

Хәйләкәрлектең символына ғына түгел, синонимына әүерелгән төлкө – шунын өсөн дә төлкө: ул һуңғы минутынаса мутлашмай ҡалмаҫҡа тейеш. Быны унын характерынын логикаһы талап итә. Һәм шулай булып сыға ла. Майҙы кем ашағанын белер өсөн, ауалатып ут яғып, шунын янында ҡыҙыныу ойоштормаҡ була януарҙар: ашаусынын эсендәге май ireп, тышҡа сығасаҡ, йәнәһе. Әлбиттә, төлкөнөң тәне майлана башлай. Әммә майҙы ул йоҡоға талған айыуға һөртөп, уны бурға сығарып, үҙ йәнен ҡотҡармаҡ була. Бына шулай был әкиәттә хәйләкәрлеге өсөн хөкөм алдына еткәндә лә, төлкө үҙенең хәйләкәрлек ғәҙәтен ташламай. Әгәр тәүҙә ошо сифаты уға уғрылыҡ ҡылырға булышһа, был юлы үҙ башына була. Ул, тотолоп, хур була, язаһын да ала.

«Төлкө менән айыу» тигән әкиәттә лә төлкөнөң хөкөмгә тарттырылыуына тыңлаусылар шундай уҡ мөнәсәбәт белдермәй ҡалмай. Сөнки бында ла төлкөнөң хәйләкәрлеге, айыуҙың ышанысына инеп, уға тауыҡ кетәге яһағанда, үҙе һыймалы тишек ҡалдырып, тауыҡтарҙы берәм-берәм урлауы мутлыҡ билдәһе, тип баһалана. Унын ҡарауы, “Етем төлкө” әкиәтендә төлкөнөң мутлығын эт менән ҡуяндан тыш, бүре фашлай. “Төлкө менән айыу” әкиәтендә уны фашлаусы ролен бүре бер үҙе атҡара. Күрәһегеҙ, кешеләр араһындағы мөнәсәбәтте кейектәр тормошона күсергән әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, яуызлыҡ символы рәүешендә һынландырылған бүре ике осраҡта ла был юлайы, ғәҙел хөкөмдар ролендә сығыш яһай. Бүре образын шулай интерпретациялауға, бәлки, мифологик легендалар буйынса игелекле (сүллектә аҙашҡан башҡорт ҡәүемен юлды ул күрһәтә бит) изге зат (бүре – тотем) тип иҫәпләнеүе

йоғонто яһағандыр. Икенсе яҡтан ҡарағанда, бүре образын тыуҙырған әкиәттәрҙе беҙ бер система итеп күҙ алдына килтереп, уны, ғәҙәттә, бер төрлө генә ҡылыҡһырлайбыҙ: йәнәһе, ул яуызлыҡты кәүҙәләндереүсе зат. Ул система тигәнебеҙҙең шартлы булыуын иҫәпкә алғанда, хыялда беҙ күҙ аллаған рамкаға уның образы һыймауына ғәжәпләнәһе түгел. Өсөнсө яҡтан, хатта система күҙәтелгән сүрәттә лә, һәр ҡағиҙәнең, юридик ҡанундың сығармаһы, иҫкәрмәһе булғанда, әкиәткә ниңә шул мөмкинлектән файҙаланмаҫҡа, ти. Нисек кенә булғанда ла, әле күҙҙән кисерелгән әкиәттәр ике һығымтаға килтерә: беренсенән, улар хәйләгә һалыш, әммә саманы онотма, тигәндәй була; икенсенән, аҫтыртын эш итеп, намыҫһыҙланып, башҡалар өлөшөнә инә башлаған сүрәттә төлкөнөң гел ҡазаға юлығып, унан язаға тарыуын күрһәтеп: «Хәйләләш, әммә намыҫыңды онотоп, мутлаша күрмә!» – тип иҫкәртә кеүек.

### д) Әкиәттәге йәнлектәрҙең символик мәғәнәгә эйә булғаны

Хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙә һәр йәнлек билдәле бер сифаттың символы (төлкө – хәйләкәрлек; бүре, арыҫлан – яуызлыҡ, айыу иһә көс-ҡеүәтенә кире пропорциональ булған сифат – бер ҡатлылыҡ, үтә тиҙ ышаныусанлыҡ, ауыр түләк, ҡуян – ғәҙелһеҙлек ҡорбаны, ҡыйырһытылыусыларҙы кәүҙәләндереүсе) кеүек ҡабул ителә. Әммә быға тиклем ҡаралған әкиәттәрҙә төлкө менән бүренең тик бер яҡлы ғына һынландырылмауынан сығып, әкиәттәр был ҡағиҙәне ҡанунлаштырмай, тип әйтергә була. Айыуҙың да, әтәстең дә хәйләкәр роленә инә алыуы был әйтелгәнгә – иш янына ҡуш. Ундай әкиәттәрҙең “тел төбөндә” яуыздың да бер мәл ип-һапҡа ҡалыу ихтималына өмөт өҙмәҫкә өндәү ята булһа кәрәк. Икенсе яҡтан, быңдай әкиәттәрҙең конкрет кем менәндер эш итеүҙән бигерәк, характер тибын үҙһенеүенең ғилләһе сағылыуы ла ихтимал: хикмәт персонаждың ниндәй зат итеп исемләнеүендә түгел, ә тип булараҡ нисек бирелеүендә.

Ә инде «Ҡуян менән арыҫлан» әкиәтендә ҡуяндың яуыз арыҫланды хәйлә ярҙамында ҡоҙоҡ төбөнә ташланырға мәжбүр итеүе, дәрт итһә, ихтыярын туплай алһа, көсһөҙ ҙә көслө була ала тигән ышаныс тәрбиәләүгә ҡулай. Был әкиәт менән танышҡас, бары бына шундай һығымта яһарға ғына ҡала:

Форсат тыуа тик бер саҡ,
Форсат тыумай ул һәр саҡ.
Ысҡындырмай шул сакты,
Файҙаланһаң форсатты,
Булырһың шаттың шаты.

Бытбылдыҡ менән әтәс төлкөнән дә хәйләкәрерәк итеп күрһәтелгән осраҡтар ҙа ошо фекерҙе ҡеүәтләй.

* * *

Башҡорт халҡының әкиәттәренә тәүләп сағыштырмаса тулыраҡ күҙәтеү яһаған Марат Минһажетдинов, хайуандар тураһындағыларының генезисы мәсьәләһенә ҡағылып, уларҙың бик борон, кешеләр үҙҙәре менән йәнлектәр араһындағы айырманы белеп етмәгән саҡта, тәбиғәт көстәре менән көрәше һөҙөмтәһендә килеп сығыуын билдәләгән ине. Синфи йәмғиәттәр хасил булғас, был жанрҙың “социаль һәм синфи ҡаршылыҡтарҙы сағылдырыу” маҡсатына яраҡлашыуын, тематик яҡтан сыбар булыуын һәм айырым януарҙар образының кешеләргә хас һыҙаттар символына әүрелеүен әйткән ине (14, 16–20). Ғалимдың ниндәйҙер сығанаҡтарға таянып тормайынса, нигеҙләнешен һуңға ҡалдырып торғандай, бары ярым фараз, ярым һығымтаны хәтерләткән был фекерҙәре артабан Рәхим Ильясов, Фәнүзә Нәҙершина, Рәшит Аҡкүбәков һәм Гөлнур Хөсәйеноваларҙың тикшеренеүҙәрендә ҡеүәтләнде һәм тәрәнәйтелде. Мәҫәлән, Ф.А.Нәҙершина, донъя халыҡтары, айырата төньяҡ халыҡтары этнографияһынан, һунарсылар тәжрибәһенән, боронғо сүмәр иле ҡомартҡыларынан бихисап миҫалдар килтереп, күптәрен башҡорт ерлегенән табылған параллелдәр менән сағыштырып, “хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең тыуыуын тәүтормош осорона ҡайтарып ҡалдырырға нигеҙ”, ысынлап та, барлығын иҫбатлағайны. Ғалимә үҙенең мәкәләһендә хайуандар тураһындағы әкиәттәребеҙҙең сюжет составының сыбар булыуына ла иғтибар иткән. Был ниҙә күренә һуң тигәндә, автор, берҙән, хайуандар эпосының саф формалары менән бер рәттән, “күсмә формалар, дөрөҫөрәге легендаларҙан килгән”дәре лә, яҙма сығанаҡтарҙан күскәне лә; икенсенән, “тарихи нигеҙҙәре яғынан ҡарағанда”, боронғораҡтарынан тыш, һуңғыраҡ дәүерҙә ижад ителгәндәре лә; өсөнсөнән, йөкмәткеһе йәһәтенән донъя халыҡтары әкиәттәренә оҡшатары ла, милли ерлектә тыуғандары ла етерлек икәнен; дүртенсенән, бер аҙының “башҡа жанрҙарҙың сифаттарын берләштергән”ен дә билдәләгән. Һуңғыһының “әкиәт-легенда” тип аталырға лайыҡ икәнен дә әйтеп уҙған. Шул уҡ ваҡытта ундайҙары араһында тылсымлы әкиәт һыҙаттарына эйә булғандары ла, “мәҫәл менән әкиәт араһында торған”дары ла барлығын күҙәткән. Репертуарыбыҙҙағы әкиәттәребеҙҙең сюжеттары типологик яҡтан башҡа халыҡтарҙыҡына оҡшаш булған сүрәттә лә, милли ерлеккә уларҙың ныҡ ерегеүен дә геүаһлай ғалимә. Кейектәр (төлкө-трикстер, айыу, бүре) образының һынланышына яһаған күҙәтеүҙәре иһә авторға һүҙ барған жанрға ҡараған әҫәрҙәрҙә сюжет конфликтының “көслө – көсһөҙ” антитезаһы рәүешендә бирелеүенән, ваҡиғаны персонаждар тыуҙырыуынан сығып, был әкиәттәрҙе төркөмләгәндә, шул заттарҙан сығып эш итергә ерлек бар икәнен билдәләгән. Уныңса, башҡорт халҡының хайуандар тураһындағы әкиәттәрен “ҡырағай хайуандар”, “йорт хайуандары”, “персонаждары ҡырағай һәм йорт хайуандары булған” әкиәттәр төркөмдәренә бүлергә була. Бынан тыш автор каталогтарҙа

рубрикаларҙың ишәйеү мөмкинлеген дә иҫкәрткән (61а, 26–48). Хайуандар тураһындағы әкиәттәргә юғарыла яһалған ҡыҫҡаса байҡау ғалимәнең күҙәтеүҙәрен һәм һығымталарын әҙме-күпме ҡеүәтләй булһа кәрәк.

***Һорауҙар һәм эш***

1.Ҡош-ҡорт, мал-тыуар, эт-ҡош образдарының кеше тормошона мөнәсәбәтлелеге: уларҙа аллегорик башланғыс.

2.Хайуандар тураһындағы әкиттәрҙең образдар системаһы.

3.Хайуанадар тураһындағы әкиәттәрҙең килеп сығышы.

# VII БҮЛЕК
# ТЫЛСЫМЛЫ ӘКИӘТТӘР

## 1. Асылы менән (саф) тылсымлы әкиәттәр

### *а) Тылсымға эйә булыу мотивы*

Асылы менән (йәки башкөллө, саф) тылсымлы әкиәттәрҙә сюжет үҫеше, ғәҙәттә, әбей менән бабайҙың, йә уларҙың япа-яңғыҙ ғына улының, йә, ғәҙәттә, кинйә улының булмышына (ә ул һәр саҡта ла тик ыңғай яҡтан ғына күрһәтелә), тылсымға нисек эйә булыуына (ә ул бындай форсатҡа тыңлаусанлығы, игелекле булыуы арҡаһында өлгәшә), уның менән нисек эш итеүенә (ә ул уны яманлыҡҡа файҙаланмай) бәйләнә. «Йәшмәташ», «Серле йөҙөк» (14, № 40, 41) ише әкиәттәрҙә, тылсымлы йәшмәташы йә йөҙөгө ҡулынан ысҡынғанда ла, герой меҫкен хәленә төшмәғ, игелекле һәм изге күңелле булыуы сәбәп итә: егеткә бесәйе менән эте ярҙамға килә, юғалтҡанын табып бирә.

«Йәш һунарсы» әкиәтенең (14, № 44) геройы бүрегә, бөркөткә, алтын балыҡҡа изгелек күрһәтә: уларҙы аяй һәм имен ҡалдыра. Аҙаҡ шул изгелеге, күмәртәләй булып, үҙенә ҡайта: иң хәл иткес мәлдә – мәскәйҙең ҡыҙын алыр өсөн, өс ат, өс ҡош, өс балыҡ тоторға тейеш сағында, йәғни әҙәм заты үтәп сыға алмаҫлыҡ шарт алдына ҡуйылғанда, уның мәрхәмәтен кисергән шул йән эйәләре уға үҙҙәренең мәрхәмәтен һала.

### *б) Үгәйҙәр яҙмышы*

Башкөллө тылсымлы әкиәттәрҙә ваҡиғалар, тимәк, сюжет та, үгәй ҡыҙ йә үгәй малай яҙмышына бәйле үҫтерелергә лә мөмкин. Халҡыбыҙҙа «етем-еһер илаһа, тау-таш илар», «етем илағанда, тәңре тәхете дер килер», «етемде илатма, ҡарғышы төшөр» тигән мәҡәлдәр бар. «Үгәй ҡыҙ», «Йомғаҡ» тигән әкиәттәр, мәҫәлән, ана шул аҡыллы һүҙҙәрҙе иллюстрациялау өсөн махсус ижад ителгән һымаҡ. Үгәй ҡыҙын гел генә ҡағып-һуғып, һәр яҡшылығын – яманлыҡ, тип, һәр уңышын – уңышһыҙлыҡ тип, йә булмаһа уға нахаҡ бәләләр тағып, унан ҡотолорға маташҡан үгәй әсә (йә ул уны урманда аҙаштырып маташа, йә сүбәкте ебәк кеүек итеп иләп йомарлаған йомғағын алып атып, йортта эйәрсән ҡыҙы менән рәхәтләнмәксе була) был донъялыкта уҡ үҙ язаһын ала. Улай ғына ла түгел, шул холоҡһоҙлоғо арҡаһында, үҙенең эйәрсән ҡыҙының башына етә: үлемгә дусар ителергә ебәрелгән үгәй ҡыҙы урмандан байып ҡайтҡас, үҙенең ҡыҙын да байытырға ебәрәм тигәнсе, уның һөйәк-һаяғын ғына ҡабул итеп ала («Үгәй ҡыҙ»); үгәй ҡыҙҙан күрмәксе, йомғаҡ артынан барып, байып ҡайтырға тейеш тип, ебәрелгән эйәрсән ҡыҙға иһә, кешегә игелек ҡылырға өйрәтелмәүе, гел кирелек эшләргә күнекмә алыуы арҡаһында, затлы бүләк урынына тешһеҙ әбейҙән йылан-саян тултырылған ҡумта алырға, әсәһенең дә һәм үҙенең дә башына етергә тура килә («Йомғаҡ»).

Үгәй ҡыҙ хаҡындағы әкиәттәргә «Батимаҡай» (14, № 50), «Мәкерле еңгә» (14, № 105), «Гөлсәсәк» кеүек әкиәттәр яҡын. Уларҙа мәкерле еңгә менән бәхетһеҙ ҡайынһеңле (бикәс) араһындағы конфликт шул уҡ үгәй әсә менән үгәй ҡыҙ тураһындағы әкиәттәрҙәгесәрәк хәл ителә.

***в) Персонаждарҙың әүермәнлек һәләте***

Асылы менән (йәки саф, башкөллө) тылсымлы әкиәттәрҙең бер төркөмөнөң геройы төрлө йән эйәһе ҡиәфәтенә инә алыусы әүермән зат рәүешендә күҙалланыла. «Әрмәнде тун», «Өс килен» (14, № 69, 70), «Һыу ҡыҙы» кеүектәрендә төрлө йән эйәһе ҡиәфәтенә – ҡатын кеше, «Үгеҙ», «Ҡара эт», «Йылан батыр» (14, 83, 84, 86) ишеләрендә, киреһенсә, ир-егет инә. Әммә уларҙың шундай тағы бер хикмәтле яғы бар: төнгөлөгөн икәү генә аулаҡта ҡалғанда, егеттең әүермән кәләше – күҙҙең яуын алмалы һылыу ҡатынға, әүермән ир урта бармаҡ һымаҡ егеткә әүерелә ала. Кәләшен гел ошо хәлендә күрергә теләгән ир уның серле кейемен юҡ итә. Ирен гел һылыу егет ҡиәфәтендә ҡалдырыу уйы менән уның кәләше лә шулай итә. Шул арҡала икеһе лә һөйгәндәренән яҙа. Әгәр классик әкиәткә хас уның эске ҡануниәт күҙлегенән ҡараһаҡ, сюжеттың артабанғы үҫешенә этәргес биреүсе мөһим бер быуыны төшөп ҡалғаны аңлашылыр. Бында әүермән егет йә кәләштең тылсымлы кейеменә теймәҫкә ҡушыуы, В.Я.Проппса әйткәндә, тыйыу функцияһы, етешмәй. Уның ҡарауы, ошо иҫкәртмәнең үтәлмәүе арҡаһында тыйыуһыҙҙың яза алыуы йә ҡаза кисереүе функцияһы бар: кәлешленең – тылсымлы кәләшен, кейәүленең тылсымлы кейәүен юғалтыуы – шуға бәрәбәр. Бик күп ыҙалыҡтар кисерә-кисерә юғалған йәнкәй-йәнешен эҙләй торғас ҡына, өр-яңынан ҡауыша улар. Шуны тасуирлап, әкиәттәр сабыр булырға өндәй. Шуның менән бергә, юғыңды юҡлап өйҙә ятма, уны юллап, юлға сыҡ, йәғни, үҙеңә тәғәйен бәхетеңде үҙең яула: хәрәкәттә – бәрәкәт, тигәндәй ҙә була.

**2. Батырҙар тураһындағы әкиәттәр**

Тылсымлы әкиәттәрҙән бала-сағаны айырыуса батырҙар тураһындағылары йәлеп итеүсән. Балаларҙы батырҙарҙың иҫ киткес көслө булыуҙары өҫтөнә ғәҙеллек, тоғролоҡ кеүек сифаттарҙы кәүҙәләндереүҙәре ҡыҙыҡтыра. «Фантастик картиналар тыуҙырған һүҙҙәрҙе тыңлағанда йә әйткән сағында, баланың йөрәге алҡымына килә», – тигәндә (76а, 164), күренекле педагог В.А.Сухомлинский иң әүәл героик йөкмәткеле, батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙе күҙ уңында тотҡандыр, моғайын. Ни өсөн тигәндә, тап шундай әкиәттәр халыҡтың аҡыл еткеһеҙ фантазияға ирек ҡуя алыуын күрһәтә.

***а) Батыр булыр ир баланың мөғжизә ярҙамында тыумышының “Тәүрат” һәм “Ҡөрьән-Кәрим” мотивы менән уртаҡлығы***

Үҙен һыуҙан тотоп алыуҙары йә кәбеҫтә араһынан, йә ҡайҙан табыуҙары хаҡында ишетеп үҫкән баланы бигерәк тә әкиәт геройының

донъяға яралыу рәүеше, ай үҫерен көн үҫеүе ғәжәпкә ҡалдыра. Әгәр ҙә әкиәтсе: «Әбей менән бабай бала күрмәй интеккәндә генә, ғәжәйеп тылсым уларҙы балалы итә. Ул бала бик тиҙ генә ир етә», – тиһә, дөйөмләштерелгән бындай мәғлүмәт әкиәт тыңлаусы балала бер ниндәй һоҡланыу ҙа, хыяли уй ҙа уятмаҫ ине. Классик әкиәт ошо кәмселеккә юл ҡуймай. Баштан уҡ хәл-әхүәлде тасуирлау ярҙамында герой хаҡында тәүге төшөнсә тыуҙырыу юлын һайлай. «Ҡамыр батыр» әкиәтендә, мәҫәлән, малайҙар ҡамырҙан ярала. Әкиәтсе был хәлдең нисек булғанын балыҡсы ҡарттың әбейе ауыҙынан әйттерә: «Һин балыҡҡа сығып китеүең менән, ҡамыр баҫтым да, ике малай яһап, һандыҡҡа һалдым. Шул арала үҙем ишек алдына сығып әйләндем. Килеп инһәм, ҡолағыма бала илаған тауыш салынғандай булды. Ипләберәк тыңлаһам, тауыш һандыҡ эсенән килә. Һандыҡты асып ебәргәйнем, шаҡ ҡаттым: минең бая һалып ҡуйған малайҙарыма йән ингән!».

Бала һөйөү бәхетенән мәхрүм булып, шунан интегеүселәрҙең, шул бәхеткә ирешергә теләп, атҡарған им-томдоң этнографик асылы бында ярайһы юйыла төшкән: әйтерһең дә, әбей ҡамырҙан бала һынын осраҡлы ғына яһаған да осраҡлы ғына һандыҡҡа һалған. Балсыҡтан, ҡамырҙан әүәләнгән кеше һындарын, ҡурсаҡты бала билгәндәй итеп биләп, ҡуйынға һалып ятһаң, бишеккә һалһаң (бында һандыҡ бишекте алмаштырыусы ғына), шул им балалы булыуға булышлыҡ итә, тип инанғандар борон. Шул инаныс Тәүратта ла Ҡөрьәндә лә сағылыш алған. Тәүгеһендә әйтелеүенсә, донъяны барлыҡҡа килтереп, уны алты көн эсендә йән эйәләре йәшәрлек хәлгә еткергәс, Алла балсыҡтан үҙенә оҡшаш заттың, кешенең, һынын эшләй ҙә уға йән өрә. Ҡөрьәндә әйтелеүенсә иһә, Хаҡ Тәғәлә кешене «ҡатышма тамсынан» хасил итә («Эл-инсан (кеше)» сүрәһе). Бындай тылсымлы йоланы атҡарғанда, әлбиттә, үҙенә генә хас теләк, ялбарыу, тәбиғәттең илаһи изге көстәренә, Тәңрегә (Раббыға, Аллаға) һығыныу һүҙҙәре лә әйтелгән булырға тейеш. Әкиәттә бына ошо этнографик үҙенсәлек бөтөнләй әйтелмәй. Борон был «кәмселек» аҡланыр ине. Сөнки йола бөтәһенә лә мәғлүм булған. Тәүрат, Ҡөрьән кеүек изге китаптарҙа ла уларҙың тәфсирҙәрендә лә аңлатма бирелгән. Шуға күрә уны хәтергә төшөрөп тороуға бөтөнләй ҙә мохтажлыҡ кисермәгәндәр. Әкиәт яҙып алынған дәүерҙә иһә йола онотолған. Шулай булғас, этнографик яҡтан аңлатма биреүҙе һораусы булған сүрәттә лә, әкиәтсе уны әйтә алмаҫ ине.

Инаныс буйынса, ҡамырҙан әүәләнгән ир бала һыны балалы булыуға булышлыҡ ҡына итһә, әкиәттә был инаныс *«ҡамырҙан әүәләнгән сабый һыны ысын балаға әүерелә»* мотивына әйләнеп, ысынлап ғәмәлләшә: Тәүраттағы – балсыҡтан, Ҡөрьәндәге ҡатышма тамсынан әүәләнгән әҙәм һыны кеүек, ҡамыр һын үҙе үк кешегә әүерелә. *«Ҡамырҙан әүәләнгән сабый һыны ысын балаға әүерелә»* мотивы, шулай итеп, инаныстан хасил булып, үҙе әкиәт сюжеты

барлыҡҡа килтереү мөмкинлеге алған. Үҙ сиратында уның килеп сығышы әҙәм затының иң тәүге ҡанбабаһы Ғәҙәмде (Әҙәмде) Хаҡ Тәғәләнең балсыҡтан (йә «ҡатышма тамсынан») әүәләүе хаҡындағы антропогоник миф рәүешендәге архетиптан килеүе ихтимал. Ә был бәйләнеш махсус тикшеренеүҙе талап итә. Әлегә иһә әкиәттең был мотивының этнографик яҡтан нигеҙләнеше, ҡамырҙан бала һыны яһау атай-әсәй булыу бәхетенән мәхрүм ир менән ҡатынға теләгәндәре алдарына килеренә инаныуҙы хәтерләтеү рәүешендәге бәйләнеш менән генә хушһынып торорға ҡала. Хәйер, әкиәтте тыңлаусыларҙы, айырыуса балалар аудиторияһын «ҡамырҙан әүәләнгән сабый һыны ысын балаға әүерелә» мотивының тарихы түгел, ә уның үҙе ҡыҙыҡһындыра, мөғжизә булараҡ ғәжәпләндерә. Тимәк, был мотив саф эстетик яҡтан аҡлана ла ҡуя. Артабан тыңлаусыларҙы шул бала менән ни булыры ҡыҙыҡһындыра башлай.

***б) Батыр булыр ир баланың тиҙ арала үҫеп еткәне***

Ғәжәйеп мөғжизәлек башланғысы батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә ир затлы баланың үҫешен һүрәтләгәндә лә һаҡлана. Шул уҡ «Ҡамыр батыр» әкиәтендә, мәҫәлән: «Был малайҙар көн үҫәһен бер сәғәттә үҫкәндәр», – тиелә, «тиҙ үҫеү формулаһының» боронғо формаһын үҙгәртә биреп. Ә борон быңдай саҡта ошондай стереотип стилистик формула ҡулланылған: «Малайҙар ай үҫәһен – көн үҫеп, йыл үҫәһен – ай үҫеп, өс ай тулғанда, урамға йүгерешеп сығып та китәләр» («Бер туған ике батыр»).

Әкиәт геройы булаһы бала шулай ҡапыл ғына үҫеп еткәс, әлбиттә, тиҙ арала батыр булып та етешергә тейеш. Ысынлап та, әкиәттә был логик эҙмә-эҙлелек күҙәтелә. «Бер туған ике батыр»ҙың геройы урамда уйнап йөрөр сағында уҡ, тәҙрә ватҡан өсөн, үҙе бикләп ҡуйылған суйын йорттоң ишеген емерә тибә.

«Тиҙ үҫеү формулаһы»н ҡулланмаған сүрәттә лә, әкиәтсе әкиәт геройының һә тигәнсе ир ҡорона инеүен күҙаллатырлыҡ һүҙҙәр таба. «Алтын сабаҡ» (16, № 97) әкиәтендәге «малайҙар бик бәһлеүән булып үҫәләр». Әгәр «Бер туған ике батыр»ҙа тәүҙә геройҙың тиҙ үҫеүе, шунан уның көс-ҡеүәте хаҡында әйтелһә, быныһында, тиҙ бәһлеүән булыуына тәүҙә үк иғтибар иттерелә лә, шунан һуң ғына малайҙарҙың быға тиҙ арала өлгәшеүе хаҡында төшөнсә бирелә. Баҡтиһәң, дүрт-биш йәштәрендә урамдағы оло кешеләрҙе лә тәгәрәтә һуғырлыҡ булғандар, имеш. Бәс, шулай булғас, тыңлаусы, батырҙар тураһындағы бүтән әкиәттәрҙән алған төшөнсәһенә таянып та, уның «ай үҫәһен – көн үҫеп, йыл үҫәһен – ай үҫеүен» үҙе үк күҙалларға тейеш була. Быныһы – бер булһа, ике тигәс тә, шул булыр: әкиәттә ололар бары сағыштырыу өсөн генә телгә алына. Дүрт-биш йәштәге малайҙар «оло кешеләрҙе лә тәгәрәтә һуғырлыҡ булғандар», тип әйтеү – ҡамырҙан әүәләнгән

һындан яралған ике ир баланың, үҙ тиңдәштәренә ҡарағанда ғына түгел, ололарҙан да көслөрәк булыуын әйтеү ул.

Тиҙ үҫеп, тиҙ арала батыр булыуы ғына әйтелгән осраҡта ла әкиәт геройы ошо дөйөм мәғлүмәтте үҙе ҡылған ғәмәлдәре менән дөрөҫләргә, раҫларға тейеш була. «Оморҙаҡ бик тиҙ үҫкән, батыр булып етешкән», – тип әйтелә «Оморҙаҡ батыр» әкиәте геройының бала сағы хаҡында. Үҙенең алдына ҡуйылған тәүге бурысты үтәгәндә үк, Оморҙаҡ ошо әйтелгәнде раҫлай: бығаса өс бәһлеүәнгә лә бирешмәгән батырҙы ул бер үҙе лә еңел генә еңә. Әйткәндәй, «еңә» тип хәбәр һалыу ғына әҙ.

***в) Батырлыҡ сифаттарының художестволы асылышы***

Әкиәт алышты ла, еңеүҙең яуланышын да айырыуса ентекләп һүрәтләүгә әүәҫ. Шул уҡ «Оморҙаҡ батыр» әкиәтендә: «Эй көрәшәләр былар, эй көрәшәләр. Көрәшә торғас, Оморҙаҡ теге бәһлеүәнде һауаға сөйөп ебәргән дә, төшөп кенә килгән сағында, тибеп ебәреп, тегенең башын өҙгән дә ҡуйған». Әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, теп теүәл өс баһадирға бирешеүҙең ни икәнен белмәгән бәһлеүән менән Оморҙаҡ батыр бына шулай алыша.

Яңғыҙаҡ батырға иһә «бер кем дә ҡаршы тора алмай» тигән даншөһрәте алдан йөрөгән батырҙар батыры менән алышырға тура килә: «Яңғыҙаҡ көрәшә башлай, теге батырҙы һауаға сөйөп ебәрә лә, төшөп килгәндә генә, арт һанына берҙе тибә – батыр көл-күмергә әйләнә» («Яңғыҙаҡ батыр», 16, № 4).

«Бер кем ҡаршы тора алмай» тигән даны сыҡҡан бәһлеүән менән алышты ентекләп һүрәтләү, йәнле итеп тасуирлау нимәгә кәрәк? Ошондай һорау тыуа ҡалһа, уға, шул юл менән төп геройҙың артабанғы алыштарға әҙерлек кимәле асыҡлана, тип кенә яуап бирергә булыр ине. Ә инде әкиәт геройына артабан осраясаҡ ҡаршылыҡтар, ул алышаһы көстәр, тәүгеһе менән сағыштырғанда, арта бара, арта бара. Ошо ҡағиҙәгә ярашлы рәүештә Яңғыҙаҡ батыр тәүҙә, ҡайныһы булған батшаның оло ҡыҙына дәғүәләшеүсе күрше дәүләт башлығының да кинйә ҡыҙын алырға яу сапҡан – ғәскәрҙәрен яңғыҙы зил-зәбәр килтерә.

Шулай итеп, әкиәт геройының тәүге еңеүе уның алдында тағы ла ауырыраҡ һынауҙар торасағын иҫкәртә һәм шул сәбәптән сюжеттың йылдам үҫеүенә стимул тыуа. Батырҙар тураһындағы әкиәт геройының кешеләрҙе тәгәрәтә һуғыуы, донъя емереп йөрөүе, уҙаҡтарының башын өҙөүе йә билен һындырыуы, йә көл-күмер итеүе әхлаҡ күҙлегенән тәү ҡарашҡа сикһеҙ аяуһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек булып тойолһа ла, эстетик яҡтан аҡлана. Бындай мотивтар ҙа, асылда, батырҙың ни тиклем көслө, ни тиклем ғәйрәтле икәнен, алда осраясаҡ ҡаршылыҡтарҙы еңеүгә күнекмә мәғәнәһенә генә эйә.

Әкиәт геройы тышҡы булмышы, ҡиәфәте йәһәтенән, ғәҙәттә, махсус тасуирланмай. Күрәһең, ниндәй ҡаршылыҡтарҙы еңеүе үҙе үк тыңлаусыға уны күҙ алдына килтереү мөмкинлеген бирә тип

иҫәпләнгән. *Тасуирламаларҙың «төшөрөп ҡалдырылыуы»* тыңлаусының ундай алым теүәл бирелгән бүтән әкиәттәрҙе белергә тейешлегенә иҫәп тотолоуы менән дә аңлатылыуы ихтимал. «Иҫәп тотоуы ихтимал»дар, йәғни көс-ғәйрәт эталоны тип аталыуға дәғүә итмәле батыр рәүешендә тасуирланыусылар рәтенә «Һунаҡ менән Имрәк» әкиәтенең геройҙары ла инә.

Әкиәт геройын ашамһаҡ итеп күрһәтеү ҙә уның батырлыҡ сифатын асыу сараһы иҫәпләнә. Әгәр бер ултырғанда бер ҡаҙан итте ашап бөтә икән, ул бермә-бер батырҙар батыры була. Һунаҡ менән Имрәк был үлсәмгә төкмә-төк тап килә. Шул уҡ ваҡытта әкиәткә Үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш тигән лаҡап исем менән килеп игән мифик ҡарт та үтә лә ашамһаҡ зат булып хәтерҙә ҡала. Ул, мәҫәлән, Аҡъял батырҙың һәр юлдашы бешергән бер ҡаҙан итте, бер ултырғанда, һыпрып ашап китә. Ашау мәсьәләһендә Имрәк менән Һунаҡ ише батырҙарҙан ҡалышмауы – уның да бик көслө булыуына ишара. Хәйер, әкиәттә уның был сифаты ғәмәлдә лә асыла: килгән һайын Аҡъял батырҙың бер юлдашын йә ҡолағынан ҡаҙаҡҡа элеп китә, йә өй бураһын күтәреп, бармағын бүрәнә ҡатына ҡыҫтыра.

Әкиәт геройының батырлыҡ сифаты алып кәүҙәлелек, беләк, йоҙроҡ көсө һәм бил ныҡлығы менән генә билдәләнеп ҡалмай. *Оҙаҡ итеп йоҡлау ҙа уның батырлыҡ сифатынан килә.* «Ай үҫәһен – көн үҫкән» Имрәк «бер йоҡлаһа, өс көн, өс төн» йоҡлай алған. Ағаһынан да көслө булған Һунаҡ иһә: «Ул, бер йоҡлаһа, ете көн, ете төн йоҡлар булған, ти» («Һунаҡ менән Имрәк»). Бына шулай йоҡоһоноң оҙайлылығы ла әкиәт геройының батырлыҡ дәрәжәһенә бәрәбәр була, икенсе төрлө әйткәндә, “батырҙар йоҡоһо” (“героик йоҡо”) мотивы әкиәт геройының батырлыҡ сифатын асыу алымы иҫәпләнә.

Үҙ илендә Һунаҡ батыр менән көс һынашырлыҡ батыр табылмай. Уны йоҡлаған сағында ғына, унда ла ыҙалыҡ менән генә сырмап һалып ҡуялар: тәүҙә бер бау ҙа сыҙамай, бары әҙәмдең һырт ҡайышы менән генә, йәғни, инаныс буйынса, *тылсым ҡөҙрәтенә эйә булған бау* менән генә бәйләй алалар уны. Шуның менән әкиәт, *донъя батырын еңһә, бары тылсым ғына еңә* ала, тигәндәй була. Ағаһынан да былайыраҡ баһадир булған йоҡлап ятҡан Имрәкте батшаның ярандары бына нисек тасуирлай: «Шундай бер кеше ята: суҡмары – бер тау, үҙе – бер тау, һис янына барыр әмәл юҡ». Ысынлап та, *«Имрәк тын алғанда, ярандар йүгереп барып, уның танауы эсенә инеп китәләр, тынын сығарғанда, йүгерешеп килеп сығалар, ти».*

***г) Быуын-быуын батыр алмашынғаны***

Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә йәнә шундай бер үҙенсәлек күҙәтелә. Ул да булһа – батырҙарҙың быуын-быуын алмашыныуы. «Һунаҡ менән Имрәк» әкиәтендә Һунаҡ батырға етә килеүсе батыр ролен уның бер туған ҡустыһы Имрәк атҡара. «Яңғыҙаҡ батыр»

әкиәтендә ғаиләһе менән иленә ҡайтып барған Яңғыҙаҡ батырҙың улы юлда осраған ғәскәрле батшаның көрәшселәре менән майҙан тота. Уның көрәшен тасуирлау ҙа Яңғыҙаҡтың көрәшен тасуирлауҙы хәтерләтә: «Шул ерҙә Яңғыҙактың улы бер батырҙы әләктереп ала ла һауаға сөйөп ебәрә».

«Оморҙаҡ батыр» әкиәтендә батырҙарҙың өс быуыны сығыш яһай, өсөһө лә үтә әүҙем хәрәкәттә күрһәтелә Шуныһын да билдәләмәк кәрәк: әкиәт геройҙары быуын-быуын күрһәтелһә, һәр яңы быуын вәкиле үҙенән өлкәненән көслөрәк тә, таһыллыраҡ та итеп кәүҙәләндерелә. «Һунаҡ менән Имрәк» әкиәтендә, ағаһына ҡарағанда, Имрәк еллерәк батыр итеп бирелһә, «Оморҙаҡ батыр»ҙа Оморҙактан – улы, шул улынан ейәне көслөрәк булып сыға. Оморҙакты еңгән батырҙың бәҫен алған баһадир менән улы көрәшә. «Көрәшә торғас... теге батырҙың ҡолағынан ғына тотоп алған да һауаға сөйөп ебәргән. Һауанан төштөм тигәндә генә, йоҙроғо менән теге батырҙың арт һанына биргән икән – батыр көл-күмергә әйләнгән дә ҡуйған». Ә Оморҙаҡтың улының улы, өс көн, өс төн көрәшеп, дейеү тиклем «дейеү батшаһының батырын һауаға атып ебәргән икән, теге батыр килеп төшкән ыңғайы ергә һеңгән дә ҡуйған».

***ғ) Әкиәт батырының әхлаки-этик яҡтан камил булғаны***

Әкиәт геройының һын-килбәтен, көрәшен йөрәк алҡымға килерлек итеп һүрәтләп, батырлыҡ, тәүәкәллек кеүек сифаттарға һоҡландырыу менән бер рәттән, уларҙың әхлаҡи-этик камиллығына ла иғтибар ителә.

Әкиәт батырҙары араһында шундай әхлаҡи-этик ҡағиҙә тотороҡло күҙәтелә: кесе олоно оло тип белә; оло, ололоғона барып, кесенең фекере менән иҫәпләшә. «Яңғыҙаҡ батыр» әкиәтендә Яңғыҙаҡтың ҡайтыу юлында осраған батша сиреүе асҡан майҙанға килгәс, улы: «Атай, миңә батырҙар менән көрәшергә рөхсәт ит!» – тип, атаһынан рөхсәт алғас ҡына көс һынаша. Оморҙаҡ батырҙың бер батырҙан еңелеүен күреп, улы йүгереп килеп етә лә унан көрәшергә рөхсәт һорай. Үҙ сиратында Оморҙаҡтың улының улы ла, үҙ атаһы рөхсәт иткәс кенә, дейеүҙәр батшаһының батыры менән көрәшергә тотона.

Атанан рөхсәт һорауҙа уны улының ни хәтлем ныҡ хөрмәт итеүе лә, үҙен уның алдында кеселекле тотоуы ла, ауыр саҡта, бөтә ҡыйынлыҡты үҙенә алып, уны ҡурсаларға әҙер тороуы ла һүҙһеҙ аңлашылмалы итеп бирелә. Шул ыңғайҙан, нотоҡ уҡып тормаҫтан, тыңлаусы күңеленә һүҙһеҙ генә этнопедагогиканың бер аҫыл ҡануны ла, ата менән ул араһында дөрөҫ мөнәсәбәт урынлаштырыуға ирешеүҙе нәсихәт итеүсе идея ла күндерелә. Ошо яҡтан ҡарағанда, рөхсәт һорау күренешенең диалог рәүешендә бирелеүе айырыуса тәрбиәүи

әһәмиәткә эйә. Оморҙаҡтың бер батырҙан еңелгәнен күреп, «улы йүгереп килеп сыҡҡан да:

— Атай, был батыр менән үҙем көрәшәйем әле? – тигән.

— Ҡуй, улым, һин йәшһең бит әле, – тигән Оморҙаҡ.

— Көрәшәйем инде, атай!

— Ярай, улай булғас, көрәш,– тигән атаһы» («Оморҙаҡ батыр», 16, 48.)

Оморҙаҡтың улы атлап түгел, йүгереп сыға майҙанға. Ошо деталь үҙе үк – атаһын ҡурсаларға, уның намыҫын якларға йәш батырҙың ашҡынып тороуына ишара. Ә инде уның үтенесен Оморҙаҡтың башта кире ҡағыуы – улы ҡабул иткән ҡарарҙың ҡәтғиме, юҡмы икәнен һынауы ғына ул. Бары улының уй-ниәте нигеҙлеме икәненә тамам ышанғас ҡына, рөхсәт биреүе лә шул фекерҙе ҡеүәтләй.

Быға тиклем көс һынашып ҡарамаған батыр менән майҙан тоторға ҡарар итеүҙең әхлаҡи әһәмиәтен икенсе яҡтан асыуға ла иғтибар ителә әкиәттә. Оморҙаҡтың улы атаһын еңгән батырға ҡаршы сыҡҡас, тегенең:

— Нимәгә ышанып минең менән көрәшергә сыҡтың? – тип һорауына:

— Батыр, артыҡ һүҙ һөйләмә. Үлһәм, батыр ҡулынан үләйем, тип уйланым, – тип кенә яуап бирә.

Яңғыҙаҡ батыр ҙа ошондай ҡағиҙәне күҙәтә. Бөтә батырҙарҙы еңгән батырға батшалыҡтан ҡаршы торор бүтән батыр ҡалмағас, батшанан Яңғыҙаҡ рөхсәт һорай һәм хакимының:

— Һин йәшһең әле. Күрәһеңме уның батырлығын. Көсөнөң самаһы юҡ бит, – тип иҫкәртеүенә ҡаршы:

— Үлгәс, батыр ҡулынан үлергә кәрәк! – тип кенә яуап бирә («Яңғыҙаҡ батыр», 16, 44). Бындай диалогтар балаларҙа баҫалҡалыҡ, сәм, намыҫланыусанлыҡ тәрбиәләүгә ҡулай, әлбиттә.

Батырҙар тураһындағы әкиәттәр балаларҙа берҙәмлек, тоғролоҡ тойғоһо тәрбиәләүгә лә булыша. Был йәһәттән айырыуса шул әһәмиәтле: әкиәт геройы, ғәҙәттә, көсөнә маһаймай. Яңғыҙ-ярым эш итмәй, Урман батыр, Тау батыр, Күлуртлар батыр, Уғатар батыр, Йүгерек батыр кеүек һәр кеме уғата бер һөнәргә маһир егеттәрҙең өсәүһен үҙенә юлдаш итеп алыуы ана шуға дәлил. Һәләттәренә ҡарап, алдарына ҡуйылған бурысты уларҙың һәр береһе, йәғни ҡулалмаш, үҙенә күрә «хеҙмәт бүленеше» принцибына таянып, мотлаҡ атҡарып сыға: уҡ атыусы кәрәк булғанда – Уғатар батыр, йүгерешергә тиһәләр – Йүгерек батыр, эҫе мунсаға япһалар – Күлуртлар батыр эшкә тотона һ.б.

Атай һүҙе, атай рөхсәте, намыҫлы атайға лайыҡ ул намыҫы тураһында әйтелгәндәр «Урал батыр» эпосындағы «тыйылған ҡанды

эсеү» мотивын һәм уға бәйле фекерҙәрҙе хәтерләтә. Ата һүҙен тотоп, турһыҡтан (ҡабырсаҡтан) өлкәндәр генә эсергә хаҡлы булған ҡанды эсеүҙән тыйылып ҡалған Урал батыр – бар кешелеккә, тәбиғәткә мәңгелек йәшәргә шарт тыуҙырған донъя батыры (бөтә ҡара көстәрҙе еңеп, тереһыуҙы тирә-йүнгә бөркөп, бар тәбиғәтте йәнләндерә), улай ғына ла түгел, изге илаһи затлы кеше рәүешендә кәүҙәләндерелә (фәндә ундайҙарҙы демиург, культур ғероій тип нарыҡлайҙар). Уралдың юха ҡотҡоһона бирелгән ағаһы Шүлгән иһә кешелектең дошманына әүерелә.

Иле алдында бурысын үтәгәс, эпос геройы фани донъянан баҡый донъяға күсеүсән. «Урал батыр»ҙың геройы ла ошондай яҙмышҡа дусар була. Ә әкиәт геройы үлмәй, «бөгөн булһа ла йәшәп ята». Был ҡағиҙә батырҙар тураһындағы әкиәттәр өсөн дә уртаҡ.

### 3. Тылсымлы героик әкиәттәр

#### *а) Батырҙар тураһындағы әкиәт геройынан тылсымлы-героик әкиәттенең айырмаһы*

Тылсымлы героик әкиәттәр ҙә батырҙар тураһындағыларға тартым. Уларҙың да төп геройы ҡәҙимге кешенең ҡулынан килмәҫлек эштәрҙе атҡара. «Незнай» әкиәтенеке бер үҙе тәүҙә өс башлы, унан ике башлы дейеү һәм уларҙың ғәскәре менән алыша. Шул тиклем ҡаршы көскә сыҡҡанында, ул туранан-тура тылсымды файҙаланмай. Юҡ. Әммә уның үҙ булмышы – тылсым һөҙөмтәһе. Дөрөҫ, ул, батырҙар тураһындағы әкиәт геройынан айырмалы рәүештә, донъяға мөғжизә ярҙамында яралмай. Тәүәккәл батырҙарға ғына тәтер көскә, егет ҡорона тулғас ҡына, эйә була: атының һул ҡолағынан үтеп сығыуы һөҙөмтәһендә, бәһлеүәнгә әүерелә. Ундай баһадирҙарға хас көс-ғәйрәтенән тыш, ул тылсымлы ярҙамсыларына ла таяна: тылсымлы атының ҡөҙрәте менән бәһлеүәнлек сифаты алыуға ирешә, ата йортонан үҙе менән бергә ҡасып килгән эте менән бесәйе лә Незнайға төп таяныс. Шуның өҫтөнә ул ҡарт дейеүҙән тылсымлы ярҙам алырға ла өлгәшә һәм тағы ла бәһлеүәнерәк булып китә: һигеҙ башы киҫелеп, дүртәүһе генә имен ҡалған дейеү, атаһына бара һалып килергә ялбара. Әммә, уға был теләген үтәргә юл ҡуйған Незнай, тоғро атының кәңәше буйынса, ҡарт дейеүгә алданыраҡ барып, уның улына тәғәйен көстө үҙе алып өлгөрә («Незнай», 15, № 2*)*.

#### *б) Тылсымлы героик әкиәт геройыны батырлыҡ сифаттары*

Ҡайҙан һәм нисек көс алыуы хаҡында әйтелмәгән сүрәттә лә, тылсымлы героик әкиәт геройы баһадирҙарса эш итә. «Таҙ батыр» (15, № 8) әкиәтенең геройы Аҡылбай, ҡарамаҡҡа, ҡәҙимге кеше. Буҙ тарпан (ҡырағай ат) булып осрап, өс тапҡыр уны һынаған (егет, асыҡһа ла, уны атып әрәм итергә теләмәй) аҡ һаҡаллы ҡарттың ҡөҙрәте ярҙамында толпарға әүерелеүенә ирешә.

Таҙ батыр ҡылыссан (йәғни ҡылыс менән таһыллы эш итә белеүсе) яугир затлы баһадир рәүешендә күҙ алдына баҫтырыла. Һунар мәлендә юлбарыҫ батшаның муйынын һығам тигәндә генә, ҡылысы менән бер киҙәнеүҙә януарҙың башын ҡыйып та төшөрә. Ҡулына уҡ-һаҙағын алһа, баш осонан осоп үтеп, күҙҙән юғала башлаған аҡҡоштарҙың, иң алда барғанының ҡанатындағы урта ҡауырһынына тигеҙерлек мәргәнлек менән ата. Таҙ батыр бына шулай үҙен ҡыйыу һәм етеҙ ҡылыссан икәнен дә, мәргәндең дә мәргәне булыуын да таныта.

Әкиәт геройына баһадирлыҡ сифаты Толпар ярҙамында бирелә.Толпарға эйә булыу үҙе үк – тылсымлы героик әкиәт геройы өсөн баһадирлыҡ сифаты. Әммә әкиәт бындай «даими билдә» менән сикләнмәй. Толпарының кәңәшен тотоп, Аҡылбай унының уң яҡ ҡабырғаһына ҡамсыһы менән бер тамыҙа – һул ҡабырғаһынан ҡан атылып килеп сыға. Улай ғына ла түгел, шул ыңғайы толпар, «ун ике ҡолас бейеклектәге таш ҡойманы һикереп үтеп, һарай ишеге алдына барып та төшкән» (15, 66).

Ошондай күренештәр менән танышҡас уҡ, күҙ алдына әллә кем түгел, мотлаҡ баһадир килеп баҫҡандай итә, әлбиттә.

Тылсымлы героик әкиәт ҡануны буйынса, герой алдына беләк көсөн генә түгел, тылсым көсөн дә талап иткән бурыстар ҡуйыла. Шуға күрә лә Таҙ батыр иң кәрәк саҡта тылсым ҡөҙрәтен дә файҙалана. Батшаның аты хәлһеҙләнә башлағас, тылсымлы ҡаурый менән унының һыртын бер һыпыра – ул һин дә мин шәбәйә лә китә. Ағалары зинданға япҡас, Таҙ бөтмәҫ ризыҡ менән туҡлана. «Алтынсәс», «Кесе ул», «Туғыҙ улан» (15, № 28 – 30) ише әкиәттәрҙең геройы ла күп яҡтан Аҡылбайҙы хәтерләтә.

Бәһлеүәнлек, мәргәнлек, тылсымды эшкә егә белеү кеүек сифаттар ғына түгел, әхлаҡи камиллыҡ та биҙәй тылсымлы героик әкиәт батырын: ул кешелекле, ғәҙел, эскерһеҙ булыуы менән дә айырылып тора.

***Һорауҙар һәм эш***

1. Әкиәттә тылсымлылыҡ һәм мөғжизәлектең эстетик вазифаһы низән ғибәрәт?

2. Тылсымлы әкиәтәрҙе жанр күренештәренә (жанровая разновидность) айырыу принциптары.

3. Китапҡа инмәгән әкиәт беләһегеҙме? Белгәнегеҙҙе һөйләп ишеттерегеә (Студеннтар тыңлай һәм аҙаҡ шуны дәфәтәргә яҙа).

# VIII БҮЛЕК
# ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ ӘКИӘТТӘРЕ

Әкиәттәрҙе, ғәҙәттә, мөғжизәүи сәсмәүер тип нарыҡлайҙар. Былай тигәндә, аңлашыла торғандыр, беренсе нәүбәттә тылсымлы (башкөллө йәки баштан аяҡ, саф тылсымлы; тылсымлы героик һәм батырҙар тураһындағы) әкиәттәр, шуға етә хайуандар тураһында әкиәттәр күҙ уңында тотола, әлбиттә. Әммә әкиәт эпосының биләмәһе улар менән генә сикләнмәй. Уның сиктәре, «мөғжизәүи сәсмәүер» кеүек үк, төр күренеше (вид) йәһәтенән атамалаш, сюжет хасил итеүгә, уның төрлө бөгөлөштәр яһай-яһай, йылдам ғына үҫеп китеүенә этәреш биреүсе эске мөмкинлектәре (механизмы, поэтикаһының башҡа үҙенсәлектәре, стиле уртаҡ законсалыҡҡа буйһонһа ла), нигеҙҙә, кеше ышанырлыҡ ваҡиғаларҙы, ғәҙәттә, комиклыҡ призмаһы аша яҡтыртҡан әҫәрҙәрҙе лә үҙ эсенә ала. Фәндә уларҙы төрлөсә атап йөрөтәләр: берәүҙәр «новеллистик әкиәттәр», «новеллистик тормош-көнкүреш әкиәттәре», «халыҡ новеллаһы» тип (В.Я. Пропп, 67; М.А. Сакали, 72; В.П. Аникин, 5; Д.С. Яшин, 91; А.А. Глонти, 33; Равшани Рахмонов, 94, 12–13 һ.б.), икенселәре «сатирик тормош-көнкүреш», «көнкүреш-сатирик», «сатирик» әкиәттәр (Д.М. Молдавский, 57; Е.Ф. Тарасенкова, 77; Н.А. Каргаполов, 41; У.С. Конкка, 46; Е.Д. Торсонов, 81; Д. Обидов, 64; Н.В. Соболева, 74), тип нарыҡлаһа, өсөнсөләре «мажаралы (авантюр) әкиәттәр» йәки «мажаралы новеллистик әкиәттәр» (К.П. Кабашников, 32а, 312–313), ҡайһы берәүҙәр иһә «реалистик әкиәттәр» (Ю.М. Соколов, 75, 335–368; Ә.И. Харисов, 13, 7, 9; 85, 67) тип тә атап ҡуйғылай. Төрөктәр иһә ошоға яҡынураҡ «Ger ekli masallar» («ышаныслы, достоверный әкиәттәр») тигән терминды ҡуллана (97, 301). Әммә уларҙың барыһы ла башлыса бер үк сюжет типтары һәм уларҙың варианттары менән эш итә. Айырма бары ул сюжеттар теҙемен теге йә был остан иңләү кимәленә генә ҡайтып ҡалды. Шуғалыр ҙа инде хайуандар тураһындағы әкиәттәр менән тылсымлы әкиәттәр (саф тылсымлы, тылсымлы героик һәм батырҙар тураһындағы әкиәттәр) тип йөрөтөлгәндәренең сигенән тышта ҡалған сюжеттарҙың барыһын да үҙ эсенә алғандарын «тормош-көнкүреш әкиәттәре» («бытовые») тип атауға һуңғы осорҙа өҫтөнлөк бирелә башланы: (Э.В. Померанцева, 66; И.П. Лупанова, 52; М.А. Унгвицкая, 82; М.А. Хәсәнов, 87; Е.А. Костюхин, 47; А. Усенбаев, 83; Е.С. Сидорова, 73; А.С. Федосик, 21; Н.М. Ведерникова, 29; Ю.И. Юдин, 90; Л.Ш. Ямалетдинов, 79; Кирәй Мәргән, 43; Ф.А. Алиева, 4; М.А. Вавилова, 27; К. Имомов, 98, 129, 148–156; С.Ә. Галин, 92, 233–235 һ.б.). Хайуандар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәрҙән башҡаларын «тормош-көнкүреш әкиәттәре» тип атаған сүрәттә лә, жанр билдәләре буйынса уның эске бүленеше хаҡында һүҙ барғанда, башҡалар «сатирик әкиәттәр», «сатирик-комик»,

«социаль көнкүреш», «мажаралы» («авантюр») әкиәттәр тигәнде берләштереп, «анекдотик әкиәттәр» һәм уларҙан башҡаларын новеллистик әкиәттәр тип таныусылар ҙа бар (93, 157–164). Телгә алынған атамалар барыһы ла, әлбиттә, шартлы.

Беҙҙә лә бындай әкиәттәрҙең әлегә берҙәм генә ҡабул ителгән атамаһы юҡ. Халыҡтың йәнле телендә уларға ҡарата берсә «ҡыҫҡа әкиәттәр» йә «көлкөлө әкиәттәр» тигән, берсә «хикәйә» йә «хикәйәт» тигән атамалар ҡулланыла. Башҡорт әкиәттәренә башлап мөрәжәғәт итеүселәр ҙә халыҡ телендәге атамаларҙы иҫәпкә алырға тырышҡан. Мәҫәлән, 1859 йылда Мирсалих Биксурин «әкиәт» тип баҫтырған реалистик характерҙағы сәсмә әҫәрҙе (23, 49–59) М.Березин 1876 йылда сыҡҡан «Төрөк хрестоматияһы»нда хикәйәт (22, 5–62) тип бирә. И.Ильминский шундайыраҡ типтағы икенсе бер әкиәттең жанрын 1861 йылда «хикәйә» тип кенә билдәләгән (40). Профессор Ғ.Б. Хөсәйеновтың аңлатыуынса, фантастик һәм реалистик хикәйәттәр бар: «реалистик хикәйәттәр күберәк тормош-көнкүреш әкиәттәренә, бигерәк тә ... көләмәстәргә тартым» була (86, 248).

«Хикәйәт атамаһы ғәрәп телендәге үҙенең тәүге мәғәнәһе буйынса «эләкләү», «ирештереү», «мәрәкәләү» тигәнде аңлата. Аҙаҡ «хикәйәт» атамаһы ошо мәғәнәлә фарсыларға, афғандарға килеп инә һәм итальяндар «новелла» тип йөрөткән әҫәрҙәргә оҡшаш хикәйәләргә күсерелә (24, 8; 37, 37–44). Беҙҙә лә ул халыҡ телендә, асылда, ошондайыраҡ мәғәнәлә йөрөй. Әммә башҡорт фольклор ғилемендә ул баштан уҡ ерегеп китә алмаған. 1926 йылда башҡорт әкиәттәрен беренсе булып төркөмләгән Ғ. Вилданов тылсымлы (уныңса, «мифлы-ялған ышаныулы», «хыяли», «рухани») һәм хайуандар тураһындағы (уныңса, «хайуандар тәңгәлендә»ге) әкиәттәрҙән башҡаларын «әхлаҡи һәм тормош әкиәттәре» тип кенә атаған (31, 16). Төрки телдәре белгесе Н.К. Дмитриев, 1941 йылда башҡорт әкиәттәренең яңы бүленешен тәҡдим итеп, хайуандар тураһындағы, тылсымлы һәм батырҙар тураһындағы әкиәттәр менән бер ҡатарҙан «тормош-көнкүреш әкиәттәре» һәм «ғибрәтле әкиәттәр» тигән төркөмдәр күрһәткән (9, 25–27). Аҙаҡ башҡорт фольклористикаһында, атап әйткәндә, Ә.И. Харисов (13, 9; 85 69–10), М. Х. Минһажетдинов (14, 12–15; 54), Кирәй Мәргән (43, 69–13), Ғ.Б. Хөсәйенов (86, 243), Ә.М. Сөләймәнов (18, 6–30; 19, 6–29; 76) хеҙмәттәрендә улар, ике төркөм берләштерелеп, «тормош-көнкүреш әкиәттәре» тип кенә йөрөтөлә башланы.

### 1. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең тамырҙары

Үткән быуаттарҙа фольклор ғилемендә шундай ҡараш өҫтөнлөк иткән: тормош-көнкүреш әкиәттәре – йәнәһе лә, башҡа әкиәттәрҙән аҙаҡ барлыҡҡа килгән күренеш. Был ҡарашты совет осоронда Ю.М.Соколов, В.П.Аникин, В.Померанцева, А.А.Мордвинцев,

В.А.Бахтина, Н.И.Кравцов, В.Н.Морохин, Н.В.Соболева кеүек рус фольклорсылары ла, башҡалар ҙа (Х.Жумалиев, М.Эүәзов, Д.А.Яшин, Ф.А.Алиева һ.б.), шул иҫәптән башҡорт ғалимдары ла (Ә.И.Харисов, Ғ.Б.Хөсәйенов, Кирәй Мәргән, К.Ә.Әхмәтйәнов) яҡланы. «Фольклор эстетикаһы» тигән китабында В.Е.Гусев ул ҡараштарын шулай дөйөмләштерҙе: «Иң боронғо әкиәт төрҙәре – хайуандар тураһындағы әкиәттәр менән архаик тылсымлы әкиәттәр; шунан тәүтормош община ҡоролошо дәүерендә – нахаҡтан рәнйетелеүсе геройҙар һәм үҙҙәренә ҡатын табыусы геройҙар тураһындағы әкиәттәр (батырҙар әкиәте), *феодализм дәүерендә – синфи конфликтлы тылсымлы әкиәттәр, шунан аҙаҡ тылсымлы әкиәттәрҙе ҡыҫырыҡлаусы мажаралы һәм көнкүреш әкиәттәре тыуған»* (35, 127). Һуңғы дәүергәсә был фекерҙе аксиома кеүек ҡабатлаусылар бар. Ирле-ҡатынлы фольклорсылар Т.В. Зуева менән Б.П. Кирдандар – шуға миҫал (9ҡ, 134–135). Был һығымтаға ҡушылыусылар, асылда, XIX быуат урталарында Ф.И. Буслаев, А.А. Котляровский, А.Н. Пыпин кеүек мифология мәктәбе вәкилдәре алға һөргән концепцияға нигеҙләнә. Ул концепция буйынса, татар-монгол иҙеүе дәүерендә мифтарҙан былиналар (тарихи йырҙар), былинанан эпик әкиәттәр айырылып сыға. Артабан әкиәттә лиризм, идиллик хыялланыу, ваҡыты менән сатира формаһын алыусы ғибрәтлелек үҫешә барып, повесть һәм ғибрәтле мәҫәлдәр менән тоташыусы мәрәкә-новеллалар хасил була (1, 62). Рус иле татар-монгол баҫҡынсылары иҙеүен XIII–XV быуаттарҙа кисерә. Тимәк, юғарыла телгә алынған ғалимдарса, эпик (йәғни тылсымлы) әкиәттәр шул дәүерҙән дә һуңырак барлыҡҡа килә була. Ә сатирик һәм ғибрәтле тормош-көнкүреш әкиәттәренең хасил булыу ваҡытын В.Е. Гусев тағы ла һуңғыраҡ дәүерҙәргә ҡайтарып ҡалдыра. Беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡалған бик боронғо яҙма ҡомартҡылар ҙа, һынлы сәнғәт үрнәктәре лә шуның киреһен раҫлай. Мәҫәлән, боронғо Һинд сығанаҡтарында шундай сюжеттар айырыуса мул файҙаланылған. Тимәк, улар бик боронғо замандарҙа уҡ Һиндостанда популяр булған. Хәҙер АТ 875В тибы[1] тип йөрөтөлгән зирәк ҡыҙ тураһындағы сюжет «Махабхарата» менән «Ятака»ға ингән (18, 352). Ул шулай уҡ «Шукасаптати» тигән йыйынтыҡта ла бар (87, 80–81). Беҙҙәге «Фәүкинур», «Аҡыллы ҡарт» ише новеллистик әкиәт[2] шул сюжетҡа нигеҙләнә. «Шукасаптати» ҙа шулай уҡ АТ 1730, 1410 типтарын хәтерләтеүсе сюжеттарҙа килтерелгән. Тәүгеһе иренә тоғро ҡатындың аҙғын мулланы хур итеүе тураһындагы «Мулла шайтанға әйләнде», икенсеһе «Ҡатын хәйләһе» тигән башҡорт новеллистик әкиәттәренә оҡшаш. Грузин фольклорсыһы А.А.Глонти раҫлауынса, «Тарих атаһы»

[1] Сюжет һәм мотив тибы хаҡында мәғлүмәтте ошо сығанаҡтарҙан алырға була (10; 11; 14; 16; 18; 19).

[2] Сығанағы күрһәтелмәһә, әкиәт «Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр» йыйынтығының 4-се, 5-се китаптарынан (18; 19) алынған булыр.

Геродот теркәгән (Геродот. История, Кн. 2, разд. 12). Рампсинит хазинаһы тураһындағы сюжет (АТ 950) б. э. тиклем XII быуатта йәшәгән Рамнсиниттар династияһынан булған Рамзес III тигән фирғәүен исеме менән бәйле (34, 353). Ул сюжетҡа нигеҙләнгән етеҙ бур тураһындағы әкиәттәр хәҙер бик күп халыҡтарҙа, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла («Мәскәү ҡарағы менән Петербург ҡарағы», «Байҙы бөлдөргән таҙ», «Батша менән бур») билдәле. Геродоттың «Тарих»ында беҙгә «Ер әкиәте» рәүешендә билдәле сюжет та теркәлгән. Заманында бөйөк «Тарих атаһына» уны скиф риүәйәте тип еткергән булғандар. Антик донъяла сатирик, юмористик әкиәт мотивтары комедияларҙа файҙаланылған. Ошондайыраҡ мәғлүмәттәргә таянып, В.Я.Пропп тормош-көнкүреш әкиәттәренең йәшен байтаҡҡа «ҡартайта» төшә. Әммә ул: «Тәүтормош укладтары менән тормош-көнкүреш әкиәттәренең бер уртаҡлығы ла юҡ», – тип, уның барлыҡҡа килеүен «ер эшкәртеү үтә ябай стадиянан сығып, ырыу ҡоролошон ҡол биләүселек дәүләте алыштырған» (6?, 251) дәүер менән бәйләй.

Шуның менән бергә үткән йөҙыллыҡтың 30-сы йылдарынан алып тормош-көнкүреш әкиәттәренең шишмә башы феодализмдан бик күп алдағы дәүерҙәрҙә башлана, һәм улар башҡа әкиәт жанрҙары менән бер рәттән үҙ аллы үҫеш ала тигән фекерҙәр ҙә әйтелә килә. Мәҫәлән, А.И. Никифоров, көлөү һәм сатира кешенең үҙ-үҙен кеше итеп һиҙә башлау дәүере менән бәйләнгән, тиһә (60, 50), И.И.Колесницкая АТ 851А тибындағы сюжетҡа ҡоролған әкиәттәр (башҡорттарҙа «Балҡан таҙ» шундайҙар рәтенә ҡарай) матриархат дәүеренә хас никах алды һынау йолаһын сағылдырыуын (44, 132–137), В.И.Чичеров тормош-көнкүреш әкиәттәренең, ғөмүмән, бик боронғо замандарҙа барлыҡҡа килеп, төрлө әкиәт жанрҙары менән йәнәш үҫеү ихтималын әйткән (88, 277), А.М.Золотарев иһә тормош-көнкүреш әкиәттәренең тәүге яралғылары дуаль йәмғиәттә үк тыуыуын ғилми яҡтан нигеҙләгән (дуаль йәмғиәт – кешеләрҙең тәүтормош көтөүенә алмашҡа килгән йәмғиәт. Унда ырыуҙар пар-пар булып берләшкән, һәм улар үҙ-ара ғына никах мөнәсәбәтенә инә алған. Ырыуҙаштарҙың никахлашыуы ҡәтғи тыйылған, 39а).

Көнкүрешендә хәҙерге заманғаса тәүтормош билдәләрен һаҡлаған халыҡтар ижадын өйрәнеү XX быуаттың 50-се йылдарында Е.М. Мелетинскийҙы ла ошондайыраҡ һығымтаға килтергән. Айырым әйткәндә, «Героик эпостың килеп сығышы» тигән хеҙмәтендә ул тормош-көнкүреш әкиәте тылсымлы әкиәт менән бер мәлдә, «нигеҙҙә, ырыу ҡоролошо тарҡалған мәлдә үҫешә», тигән (53, 23). Л.М. Золотарев менән Е.М. Мелетинскийҙарҙың концепцияһы һуңғы йылдарҙа У.Н. Конкка (46), Т.И. Михайлов (56), Е.С. Котляр (48), Ю.И. Юдин (890, М.А. Вавилова (26), Е.Д. Торсонов (81) һ.б. тарафынан

нығытылды һәм артабан үҫтерелде. Башҡорт фольклорында был ҡарашҡа беренсе булып М.Х. Минһажетдинов ҡушылды (55).

Тормош-көнкүреш әкиәттәренең тәүтормош ырыу ҡоролошо дәүере менән бәйләнешен палеолит осоронда мәмерйә стеналарына төшөрөлгән һүрәттәр ҙә ҡеүәтләй. Ҡайһы берәүҙәр феодализмға тиклем сәнғәттә реализм булыуын шик аҫтына алһа, тәүтормош аусылары яһаған һүрәттәр был фекерҙе тулыһынса кире ҡаға: «Палеолит сәнғәте баштан уҡ үҙенең объекттарын, иң әүәл кейекте, реалистик һынландырыуға ынтылған» (65, 105). Палеолит реалисы айырым деталь менән дә йәнлек тураһында тулы төшөнсә биреп була, йәнлектең эҙен һүрәтләү – йәнлектең үҙен һынландырып, уның ишен булдырыу, тип белгән (65, 35). Кейектәрҙе теүәл һүрәтләргә өйрәнеп алыу менән, кешеләр уларҙың айырыуса характерлы һыҙаттарын айырыңҡырап һүрәтләргә тырышҡандар. Быңдай саҡта тәүтормош рәссамдары ырыуҙаштарының кейек-натурщик хаҡында мәғлүмәттәре булыуына, һүрәтләнгән өлөшөн күреү менән, ҡалған яғын күҙ алдына баҫтыра алыу һәләтенә иҫәп тотҡандар. Тәүтормош һынлы сәнғәтенә хас «әйтеп бөтөрмәү» алымы тел төбө менән хикәйәләп һөйләнеүсе тормош-көнкүреш әкиәттәрен хәтерләтә.

«Тәүтормош сәнғәте хаҡында әйткәндәребеҙҙән шул да яҡшы аңлашыла: ул сәнғәт кейектәрҙе дөйөм һүрәтләүҙе маҡсат итеп ҡуймай, ә һунарсылар белгәнсә, улар күреп өйрәнгәнсә, сағылдыра. Йәнлектәр донъяһын тәрәндән белеү улар өсөн йә йәшәү, йә үлем мәсьәләһе менән бәйле була... Шуға күрә лә кейектәр донъяһына үтеп инеү, уларҙы үҙҙәре менән бер күреү боронғо кешеләрҙең донъяға ҡарашының һәм психологияһының мөһим һыҙаты була, уларҙың бөтә рухи донъяһында үҙенең эҙен ҡалдыра. Тарихтағы иң боронғо «хайуандар эпосы» шулай тыуа. Унда кейектәр кешесә сығыш яһай», – тигән А.П.Окладников (635 113). Тимәк, боронғо таш быуат һүрәттәре – «кешесә сығыш яһаусы» хайуандар тураһындағы әкиәттәргә лә «үҙенсәлекле иллюстрация» булып торған (25, 141). Иң боронғо әкиәттәр, тимәк, һынлы сәнғәттән айырылғыһыҙ булған. Улар бер үк ваҡытта йәнлектәр тураһында ла һөйләгән. Тәүтормош ижадына хас синкретизмдың бер формаһы бына шулайыраҡ күҙ алдына баҫа. Бер осраҡта хайуандар тураһындағы, икенсе осраҡта тормош-көнкүреш әкиәттәре рәүешендә һөйләнелә торған уртаҡ сюжетлы «Алдар төлкө» (АТ 170; 14, № 11) һәм «Үле ҡыҙға – тере ҡыҙ», «Тутый менән һаңғырау ҡоштар» (60, оп. 10/315, 58–59-сы б.) һәм «Туғыҙ Туңҡылдаҡ менән бер Мыймылдаҡ» (АТ 1535), «Һаламторхан» (60, оп. 10/38, 47–48-се б.) һәм «Бабай менән егет» (АТ 545 Б) тибындағы әкиәттәр, заманалар үтә килә, ошо синкретик ижадтан ралған. Тимәк, шартына ҡарап, бер үк сюжет тибына ике әкиәт жанры (хайуандар тураһындағы әкиәт тә, тормош-көнкүреш әкиәттәре лә) эйә

була ала. Был хаҡта хайуандар тураһындағы әкиәттәргә арналған бүлектә бер ни тиклем әйтелгәйне инде.

Тормош-көнкүреш әкиәттәренең тылсымлы әкиәттәр менән дә уртаҡ «мөлкәте» бар. Әлегә шул «уртаҡ мөлкәт»тең төбө-тамырын асыҡлап тормаҫтан, фантастика билдәләренә тылсымлы әкиәттәр генә түгел, тормош-көнкүреш әкиәттәре лә дәғүә итергә хаҡлы икәнен, ул билдәләрҙең айырым мотив, образ, художестволы деталдәрҙә осрауын констатациялау менән генә сикләнергә.тура килә

Шулай итеп, тормош-көнкүреш әкиәттәренең синыфтар барлыҡҡа килгәнгә тиклем бик күп алда тыуыуы бәхәсһеҙ.

## 2. Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәренең өйрәнелеше

Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәренең фольклористик маҡсаттарҙа яҙып алыу һәм баҫтырыу эше нигеҙҙә XIX быуаттың икенсе яртыһында һәм XX быуат баштарында башлана. Был тәңгәлдә бигерәк тә А.Г. Бессоновтың эшмәкәрлеге баһалап бөткөһөҙ.

Д.К. Зелениндың хеҙмәте лә иғтибарҙы тарта (30, 441–490). Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәрен яҙып алыу менән күренекле яҙыусы Н.А. Крашенинников (18, № 85) һәм беренсе башҡорт алфавитының авторы М. Ҡулаев та (19, № 92, 97) шөғөлләнгән.

XX быуаттың 30-сы йылдарынан башлап, республикабыҙҙағы ғилми архивта тормош-көнкүреш әкиәттәренең тотош фонды барлыҡҡа килә. Был эштә Р. Ниғмәти, Б. Бикбай, Ғ. Әмири, Ш. Насыров, М. Тажи, Н. Асанбаев кеүек яҙыусылар, Ә.И. Харисов, Кирәй Мәргән, М.Х. Минһажетдинов, Н.Д. Шоңҡаров, С.Ә. Галин, Ғ.Б. Хөсәйенов, С.Ф. Миржанова һымаҡ фольклор, әҙәбиәт, тел белгестәре, Әхмәт Исламғолов, Хәлим Ҡәнзәфәров, Ғата Исхаҡов, Ғәли Ишбулатов, Роза Нафиҡова кеүек һәүәҫкәр фольклорсылар, айырым энтуазиастар, бигерәк тә М.Х. Минһажетдинов, Ә.М. Сөләймәнов етәкселегендәге Башҡорт дәүләт университетының башҡорт бүлеге талиптары ҙур әүҙемлек күрһәтте. Тормош-көнкүреш әкиәттәре фонды айырыуса XX быуаттың 60-80-се йылдарында ныҡ тулыланды.

1939 йылда сыҡҡан «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» тигән китаптан башлап 1961 йылға тиклем уларҙың айырым өлгөләре егерменән ашыу йыйынтыҡта баҫылып сыҡты. Әммә, бөтәһен бергә алғанда ла, ул баҫмалар башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәре репертуарының байлығын да, уларҙың тематик төрлөлөгөн дә, художестволы үҙенсәлектәрен дә аныҡ итеп күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек бирер хәлдә булманы, сөнки, А.Г.Бессонов йыйынтығын иҫәпкә алмағанда, китаптан китапҡа бер үк әкиәттәр күсеп йөрөнө. Ә уларҙың һаны утыҙға ла етмәне. Бары һуңғы осорҙа ғына башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәре репертуарын тулыраҡ

күҙалларға мөмкинлек бирерлек йыйынтыҡтар донъя күрҙе. Бында «Башҡорт халыҡ ижады» тигән күп томлылыҡҡа ингән әкиәт томдары күҙ уңында тотола. Уларҙың башҡортсаларына 271 тормош-көнкүреш әкиәте, 20 көлдөрөк, 27 ымһындырыҡ ингән. Ә инде шул тупламаның яңы баҫмаһының 11-се томы 153 новеллистик әкиәттән тора. Әлбиттә, был һандар эсенә уларҙың ҡайһы бер варианттары ла инә. Рус халҡының әкиәт репертуарында ла тормош-көнкүреш әкиәттәре күпселекте тәшкил итә икән. Т.В.Зуева менән Б.П.Кирдандарҙың иҫәпләүе буйынса, уларҙың дөйөм һаны 783-гә барып етә. Моғайын, был осраҡта ла варианттар иҫәпкә алынғандыр. Шуныһы ла мөһим: беҙҙеке кеүек үк, рус тормош-көнкүреш әкәиәттәренә хас сюжеттарҙың да байтағы бүтән халыҡтарҙың репертуарында осрамай икән (93, 158–159).

Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәрен ғилми яҡтан баһалауҙа тәүге һүҙҙе Н.К. Дмитриев әйткән. А.Г. Бессонов йыйынтығына яҙған баш һүҙҙә ул тормош-көнкүреш әкиәттәрен тематик циклдарға бүлеп, ҡайһы бер күҙәтеүҙәр яһаған. Уның ҡарашы Ә.И. Харисов һәм М.Х. Минһажетдиновтарҙың хеҙмәттәрендә артабан үҫтерелде.

Башҡорт әкиәттәренең поэтикаһы, стиле хаҡында ла әлдән-әле әйтелә килә. А.Г. Бессонов йыйынтығына яҙған баш һүҙендә Н.К. Дмитриев тоторoҡло стилистик формулаларға иғтибар иткән (9, 21–28). Башҡорт әкиәттәренә хас бындай күренештәр һәм уларҙың ҡайһы бер үҙенсәлектәре тураһында Р.М. Әхтәров, Ж.Ғ. Кейекбаев, М.Х. Минһажетдинов, Н.Т. Зариповтарҙың хеҙмәттәрендә лә әйтелде. Бынан тыш «стиль күҙлегенән башҡорт халыҡ әкиәттәренең лексикаһы ла иғтибарға лайыҡлы» булыуы (Ж.Ғ. Кейекбаев (42, 181–182), шиғри диалогтарҙың (М.Х. Минһажетдинов (14, 19, 27), «йыл үҫәһен көн үҫә» (Ә.И. Харисов (83, 7), «бер бите ай, бер бите көн» (Н.Т. Зарипов (16, 24–28) ише тасуирлау формулаларының әһәмиәте хаҡында ла әйтелде. Һуңғы йылдарҙа әкиәт теленең үҙенсәлеге лә иғтибарға алына башланы (М.В. Зәйнүллин, 39). Тик әкиәт теле хаҡында яҙыусыларҙың, бындай әҫәрҙәрҙең йәнле башҡарылышына иғтибар итмәй, ташҡа баҫылған текстар менән генә эш итеүҙәре күңелде ҡыра.

Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәренең поэтикаһына, стиленә ҡағылышлы хеҙмәттәр исемлеге, нигеҙҙә, ошолар менән сикләнә ине.

Башҡа халыҡтарҙың фольклорсылары был йәһәттән әүҙемерәк эшләй (Р.М. Волков, 32; Н. Рошияну, 70; Н.В. Новиков, 62; Ю.М. Соколов, 75, 292–373; В.И. Чичеров, 88, 276–309; В.Я. Пропп, 68; 69; Н.П. Аникин, 5; Л.Г. Бараг, 6; В.А. Бахтина, 8, 7–8; Н.М. Ведерникова, 29; С.Г. Лазутин, 50; Д.С. Лихачев, 51; Э.В. Померанцева, 66; Т.Д. Курдованидзе, 49; А.И. Алиева, 2; Л.Ш. Ямалетдинов, 79; Л.Ф. Дунаевская, 38). Әммә шуныһы үкенесле, әкиәт поэтикаһы һәм

стилен тикшереүгә бағышланған күп кенә хеҙмәттәрҙең авторҙары, шул иҫәптән башҡорт ғалимдары ла, үҙ-ара һүҙ ҡуйышҡандай, ғәҙәттә, тылсымлы әкиәттәргә генә мөрәжәғәт итте. Г.Р. Хөсәйенованың хеҙмәттәре лә шул өлкәгә ҡарай.

Тормош-көнкүреш әкиәттәренең поэтикаһы хаҡында һүҙ алып барғанда, фольклорсылар иң әүәл уларҙың көтөлмәгәнсә тамамланыуын (Ю.М. Соколов, 75, 342; Е.Ф. Тарасенкова, 77, 78; Ф.А. Алиева, 4, 71–78; аңғармаҫтан бөгөлөштәр яһауын (У.Б. Далгат, 36, 78), йыйнаҡ булыуын билдәләне (В.И. Чичеров, 88, 306; В.П. Аникин, 5, 216); Е.Ф. Тарасенкова, 78, 78, Л.Ш. Ямалетдинов, 77, 16). Бынан тыш уларҙа тел төбө менән әйтеү, контраслылыҡ (4, 78–84), баҫҡыслылыҡ алымы файҙаланылыуы (78, 72–80), ситуацияларҙың герой тарафынан ойошторолоуы, персонаждарҙың үҙ-ара урын алмаштырышыуы (29, 112–113) һ.б. хаҡында ла һүҙ булды. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр тормош-көнкүреш әкиәттәренең аллогизмды үҙ итеүен (В.П. Аникин, 5, 215–216), мауыҡтырғыс булыуын (Л.Ш. Ямалетдинов, 79, 16; С.Г. Лазутин, 50, 16–20 һ.б.) һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Тикшеренеүселәр тормош-көнкүреш әкиәттәренең комиклыҡ поэтикаһына ла әҙме-күпме ҡағылғаны бар. Н.А. Каргаполов (41, 6–8), А. Усенбаев (83, 25), Д. Обидов (64, 16–17), Н.В. Соболева (74, 77–78) һымаҡ белгестәр нигеҙҙә комик эффект тыуҙырыусы гипербола, эпитет, сағыштырыу һымағыраҡ тасуирлау сараларын, В.П. Аникин (5, 214–216), Е.Ф. Тарасенкова (78, 77–78), У.Б. Далгаттар (36, 91–103) комик ситуация тыуҙырыу алымдарын күҙҙән кисерҙе, Н.А. Савушкина (71), Л.Ш. Ямалетдинов (79, 16–17) шул мөмкинлектәрҙең икеһенә лә иғтибар итте. Уларҙың хеҙмәттәрендә традицион формулаларҙың ҡулланылышы, диалог һәм башҡа телмәр үҙенсәлектәре хаҡында ла ҡыҙыҡлы ғына фекерҙәр бар. Тормош-көнкүреш әкиәттәрен махсус тикшергән байтаҡ фольклорсылар, мәҫәлән, У.С. Конкка, И.П. Лупанова, Д.М. Молдавский, М.А. Унгвицкая, Е.Д. Торсонов, Ю.И. Юдин һ.б. поэтика мәсьәләһенә бөтөнләй һуғылманы. Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәренең поэтикаһы өҫтөндә лә һуңғы дәүерҙәргәсә күҙәтеүҙәр яһаусы булманы. Бары яңыраҡ ҡына ҡайһы бер хеҙмәттәр күренә башланы (19, 18–9; 76; 10, 5–13; 11, 5–14).

### 3. Тормош-көнкүреш әкиәттәрен төркөмләү

Жанр билдәләре йәһәтенән тормош-көнкүреш әкиәттәрен төркөмләү мәсьәләһендә лә ғалимдар әлегәсә уртаҡ фекергә килгәндәре юҡ. Берәүҙәр уларҙы был яҡтан бүтәнсә бүленмәҫ художестволы берәмек кеүек күрә. Быға үҙҙәре үҙ иткән «новеллистик» йәки «көнкүреш-новеллистик», «халыҡ новеллаһы», «сатирик» йәки «сатирик-көнкүреш әкиәттәре» терминдарына, хатта «тормош-көнкүреш әкиәттәре» тигәненә лә тарыраҡ мәғәнә һалыуҙары, аҙ һанлы

сюжеттар менән эш итеүҙәре сәбәп булған. Ҡайһы бер фольклорсылар был кәмселекте иҫәпкә ала, әммә әле беҙ һүҙ алып барған әкиәттәрҙең тәүге эске төркөмләнешен хайуандар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәр менән «тиң хоҡуҡлы», тип ҡарай. Мәҫәлән, В.И. Чичеров уларҙы ике эре төркөмгә бүлә һәм һәр төркөмдө, тылсымлы, хайуандар тураһындағы әкиәттәр һымаҡ уҡ, «жанр» тип атай. Унынса, тәүгеһенә – новеллистик, мажаралы әкиәттәр, икенсеһенә көнкүреш-сатирик әкиәттәр менән көләмәстәр инә. Э.В. Померанцева ла, асылда, ошо уҡ принципҡа таяна. Айырма тик шунда ғына: В.И. Чичеров «жанр» тигән урында ул «төр» («вид») һүҙен ҡуллана һәм тәүге «төр»ҙө – «мажаралы әкиәттәр», икенсеһен «көнкүреш әкиәттәре» тип айыра. Мажаралыһына, унынса, тарихи һәм өләшләтә новеллистик әкиәттәр, икенсеһенә сатирик әкиәттәр менән көләмәстәр инә. Н.В. Соболева иһә новеллистик, сатирик, тылсымлы, хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙе һәм шулай уҡ көлдөрөк менән көләмәстәрҙе бер тиң күрә: уларҙың бөтәһен дә жанр төркөмдәре (жанровые разновидности) тип иҫәпләй.

Тормош-көнкүреш әкиәттәрен ғилми яҡтан төркөмләүҙә ғалимдарҙың консенсусҡа ирешә алмауы билдәле бер йөкмәтке һәм персонаж тибына нигеҙҙә билдәле бер форма тибы, анығыраҡ әйткәндә, сюжет тибы тап килеүен иҫәптән сығарыуҙарынан килә булһа кәрәк. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, тап шул үҙенсәлек менән әҙме-күпме иҫәпләшеүселәр тормош-көнкүреш әкиәттәрен уңышлыраҡ төркөмләй. Бына шуға бер нисә миҫал: Ю.М. Соколов уларҙы әкиәт-новеллалар (новеллистик әкиәттәр йәки новеллистик көнкүреш әкиәттәре), юмористик әкиәттәр менән сатирик әкиәттәр һәм әкиәт-көләмәстәр төркөмөнә, А.С. Федосик – әкиәт күрһәткестәрендәгесә разрядтарға, Л.Ш. Ямалетдинов – сатирик, юмористик, мажаралы һәм ғибрәтле, М.А. Вавилова – мажаралы-новеллистик (новеллистик, тарихи) һәм сатирик-комик (сатирик һәм юмористик), М.Х. Минһажетдинов иһә көнкүреш ваҡиғаларын объектив хикәйәләүсе, сатирик-юмористик һәм ғибрәтле әкиәттәргә бүлеп сыға. Т.В. Зуева менән Б.П. Кирдан "тормош-көнкүреш әкиәттәрендә ваҡиғалар һәр саҡ *шартлы реаль бер арауыкта* бара, әммә был ваҡиғалар үҙҙәре әҙәм ышанмаҫлыҡ" булыуын, әкиәттәр төрө (вид) эсендә үҙаллы ярым төр (подвид) хасил итеүен билдәләп, улар "анекдотик әкиәттәр" һәм "новеллистик әкиәттәр" тигән ике жанрҙан тора тигән фекергә килгәндәр (93, 158–159).

Жанр йөкмәткеһе йәһәтенән тормош-көнкүреш әкиәттәре, ысынлап та, бер төрлө түгел. Йәғни, уларҙың йөкмәтке яғынан бер-береһенә яҡыныраҡ, оҡшашыраҡ булған һәр төркөмө билдәле бер жанр формаларындараҡ бирелеүсән. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең берәүҙәрендә аҡыллылыҡ, әхлаҡи камиллыҡ, ғаилә татыулығы кеүек

мөһим проблемалар күтәрелә һәм улар, ғәҙәттә, көтөлмәгәнсәрәк хәл ителә; икенсе бер төркөмөндә хәйләкәрлек, мутлыҡ, тапҡырлыҡ, етеҙлек йәки шуларҙың киреһе булған – иҫәрлек, бер ҡатлылыҡ, аңралыҡ һыҙаттарына эйә булыусы персонаж типтары үҙәккә күсә. Тыңлаусыларҙың зирәклеген, уяулығын һынау маҡсатында һөйләнелә торған әкиәттәр ҙә бар.

Жанр йөкмәткеһе йәһәтенән үтә лә сыбар башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәрен өҫтөнлөк итеүсе художестволы пафос, композиция үҙенсәлеге, персонаждар функцияһындағы төп оҡшашлыҡтар нигеҙендә *новеллистик һәм юмористик (сатирик)* әкиәттәр тигән жанр төрҙәренә (жанровые разновидности) бүлергә мөмкин .

# IX БҮЛЕК
# НОВЕЛЛИСТИК ӘКИӘТТӘР

«Новелла» (novella, novellus) – италиан һүҙе. Үҙебеҙҙең телгә һүҙмә-һүҙ тәржемә иткәндә, ул “яңылыҡ”, «яңы» тигәнде аңлата. Һүҙ сәнғәте өлкәһендә ул башҡорттоң «ҡарһүҙ»е кеүек, был термин тәүҙә жанр йәһәтенән төрлө-төрлө сәсмә әҫәрҙәргә ҡарата ҡулланылыр булған. Аҙағыраҡ, башлыса, көнкүреш йөкмәткеле, ҡәҙимге хикәйәнән композиция баҙыҡлығы һәм көтөлмәгәнлек эффекты биреүсе тамамланышҡа эйә булған киҫкен сюжеты менән айырылып торған «анекдотик» хикәйәләрҙе новелла тип йөрөтә башлағандар.

Тарихи яҡтан ҡарағанда, әҙәби новеллалар, үҙҙәренең барлыҡҡа килеүҙәре менән халыҡ новеллаһына, новеллистик әкиәттәргә бурыслы. Шик юҡ, үҙ аллы әҙәби жанр булып формалашҡас, әҙәби новелла үҙе лә фольклорға йоғонто яһай башлаған. Айырым әкиәти сюжеттарҙың әҙәби сығанаҡтарҙан, яҙма хикәйәттәрҙән килеүе лә ихтимал. Һәр хәлдә, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады репертуарындағы байтаҡ новеллистик әкиәттәрҙең сюжеты ғәрәптең “Мең дә бер кисә. Панчатантра” тигән яҙма ҡомартҡылары, көнбайыш әҙәби сығанаҡтары менән уртаҡ. Был хаҡта новеллистик әкиәттәр томына (18; 20 а) бирелгән аңлатмаларҙан бай мәғлүмәт табырға мөмкин. Мәҫәлән, АТ 887 (Ҡиммәт хаҡҡа төшкән кәләш) + АТ 860 В* (Кеше кәләшен карапта урлау) + АТ 974 (Ир кеше үҙенең кәләше туйында) тибындағы сюжеттарға нигеҙләнгән “Рәссам менән батша ҡыҙы” әкиәте (20 а, № 84) менән “Мең дә бер кисә” китабындағы “Нуретдин менән Мәрйәм” сюжеты (863 – 893-сө кисәләр) араһында оҡшашлыҡ бар. Әммә был оҡшашлыкты һүҙмә-һүҙ тапкилеш тип уйларға ярамай. Ғәрәптең бик тә күләмле был әкиәтендәге күп кенә эпизодтар башҡорт әкиәтендә күҙәтелмәй, ҡайһы бер эпизодтар танығыһыҙ булып үҙгәртелгән. Нуретдиндың сибәрҙән сибәр ҡол ҡыҙ осратыуы, диңгеҙҙә сәйәхәте, ҡоллоҡта ҡиммәт хаҡҡа Мәрйәмде һатып алыуы, уны бөкөрө вәзирҙең франктар иленә алып ҡасыуы, Нуретдиндең франктарға әсир булыуы, әсирлектән Мәрйәм менән ҡасыуы кеүек эпизодтар башҡорт әкиәтенең әле һүҙ барған вариантында юҡ. Уның байына, ғәрәп китабында геройҙың рәссамлығы, ҡыҙыҡай менән икеһенең башынан үткәндәрҙе бәйән итеүсе картина төшөрөүе, кәләшенең туйына өлгөрөп, уны урлаусыны фашлауы кеүек эпизодттар ғәрәп әкиәтенә инмәгән. Шуның кеүек АТ 883 А (Рәнйетелгән ҡыҙ) тибындағы сюжетҡа ҡоролған новеллистик әкиәттең “Мулла менән сауҙагәр ҡыҙы Көнһылыу” (20 а, № 139) тигән варианты менән XVI быуатта йәшәгән Нах-шаби атлы һинд-фарсы әҙибенең “Тутыйнамә”һе (“Тутыйғош китабы”) араһында ла уртаҡлыҡ, оҡшашлыҡ һәм

айырмалыҡтар табырға була. Лев Бараг был әкиәттең хатта Италия яҙыусыһы Базиленың 1634 – 1636 йылдарҙа донъя күргән “Пентамерон” (II, № 4) тигән китабы менән оҡшашлыҡ тапҡан (20 а, 546)

Новеллистик әкиәттәр төркөмөнә ингән әҫәрҙәр менән эш иткәндә, йәнә шуны ла иҫтә тотоу кәрәк: классик әҙәби новеллалар һымаҡ уҡ, новеллистик тормош-көнкүреш әкиәттәренең дә күптәрендә сюжет конфликты ябыҡ формала, йәғни ваҡиғаның башланышы, үҫтерелеше, хәл ителеше мотлаҡ сюжет рамкаһы эсендә барһа ла, уларҙың араһына тигеҙлек билдәһе ҡуйып булмай. Новеллистик әкиәттәрҙә новеллизм билдәләре (новеллаларға хас көтөлмәгәнлек эффектының бушағыраҡ булыуы, герой характерында киҫкен үҙгәреш) аныҡ ҡына күҙәтелмәүе лә ихтимал. Ҡайһы саҡта быны̇ң сәбәбе йә башҡарыусының, йә яҙып алыусының профессиональ әҙерлегендәге кәмселек менән дә аңлатыла. Шуға күрә халыҡ новеллаларын әҙәби новеллалар үлсәме менән баһаларға ярамай.

*Тематика, йөкмәтке, геройҙар һәм сюжеттар тибы* яғынан новеллистик әкиәттәрҙе бер нисә төркөмгә бүлгеләргә мөмкин: 1) зирәктәр, 2) мөхәббәт һәм ғаилә тоғролоғо, 3) үтә үҙ һүҙле ҡатындар, 4) ҡыйыу ҡыҙ менән яуыз ҡараҡтар тураһындағы новеллистик әкиәттәр, 5) йомаҡ-әкиәттәр һәм ғибрәтле әкиәттәр.

### 1. Зирәктәр тураһындагы әкиәттәр

Күп кенә новеллистик әкиәттәрҙә сюжет конфликтын сисеүҙә аҡыл эйәләре хәл иткес роль уйнай. Шулай булһа ла, улар тәүҙә үҙәктә күрһәтелмәй. Билдәле бер ваҡытҡа тиклем ижтимағи тормошта ла ҡатнашмайҙар, баһаланып та бөтмәйҙәр, хатта ҡыйырһытылалар, эҙәрләүҙәргә дусар ителәләр. Ҡыҫҡаһы, ваҡиғанан ситтә торалар. Тик кемдәрҙер бәләгә тарығас ҡына, иҫкә алыналар, сөнки кәңәштәренә мохтажлыҡ тыуа. «Ҡурайсы» (*927*)[1] әкиәтендә ҡайҙалыр аҡыллы ҡурайсы барлығы хаҡында башта бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирелмәй. Ул бары, кешеләр бик ҡыйын хәлдән сығыу сараһын тапмай аптыраған саҡта, сюжеттың иң көсөргәнешле мәлендә генә, пәйҙә була. Пәйҙә була – эштең аңын-тоңон белеп тә ала, конфликтты ла хәл итә. Баштан уҡ әҫәрҙең коллектив геройы, халыҡ, хәл иткеһеҙ мәсьәлә алдына ҡуйыла: байҙың хәбәрһеҙ ғәйеп булған улын тапмаһалар ҙа, уның хаҡында ҡайғылы хәбәр килтерһәләр ҙә, ауыр яза көтә. Уны йыртҡыстар өҙгөләүе мәғлүм булғас, хәүеф ана-бына ғәмәлгә аша тигәндә генә, ҡурайсының пәйҙә булыуы ҡайғылы хәбәрҙе һүҙһеҙ генә, ҡурай моңо менән, һөйләп биреүе, халыҡты бәләнән ҡотҡара ла ҡуя.

[1] Бындай йондоҙсоҡ сюжеттың халыҡ-ара әкиәт күрһәткестәрендә иҫәпкә алынмауын күрһәтә булыр

«Лоҡман Хәким» (AT 654C), «Аҡыллы ҡарт менән иҫәр батша» (AT 981) тибындағы әкиәттәрҙә тәүҙә эҙәрләнгән, үлемгә хөкөм ителгән аҡыллы ҡарттар, батшаға һәм батшалыҡҡа килгән ҡыйын хәлдән сығыу юлын әйтеп, ҡарттарҙы үлтереү йолаһының юҡҡа сығарылыуына сәбәпсе була.

Социаль ғәҙелһеҙлек менән осрашҡанда, аҡыллы ҡарттар төрлө юлдар менән үҙҙәренең аҡыллылығын, дошманының (антагонисының) ахмаҡлығын иҫбат итә. Һүҙ барған әкиәттәрҙә аҡыллылыҡты иҫбатлап, конфликтты хәл итеүҙең иң таралған сараһы – тапҡыр һүҙ. Тапҡыр һүҙ йә йомаҡ, йомаҡҡа тартым кинәйә, мәҡәл кеүек төрлө осраҡҡа ярамалы формала, йә, тураһын әйтеп, фаш иткәс, аҙаҡ кире ҡайырып, ҡаты әйтелгәнде йомшартып ҡуйыу рәүешендә була. «Батша менән һабансы» әкиәтендә батша һабансы менән уй-фекерҙәрен йомаҡҡа йомарлап ҡына һөйләшә. Вәзир шул һөйләшеүгә шаһит була. Тик һүҙ айышына төшөнә алмай. Шуның менән үҙенең отҡор түгеллеген, аңралығын күрһәтеп, бер хур була: язаға тарттырыу менән ҡурҡытып, батша шул йомаҡ-диалогтың мәғәнәһен әйтеүҙе талап иткәс, уны һабансынан йөк-йөк алтын-көмөшкә һатып алып, үҙе лә һиҙмәҫтән, йомаҡ талап иткән яуапты «башҡарып күрһәтеүсе» хәленә төшә. Шулай ул үҙ иҫәрлеген үҙе фашлай. Көтмәгәндә тағы бер мәсхәрәгә ҡала.

Аҡыллылыҡ, геройҙың һүҙенән бик, ҡайһы бер әкиәттәрҙә ғәмәлдәре аша асыла. Эш-хәрәкәттең һөҙөмтәһенә юлыҡмайынса, антагонист уның асылы хаҡында бер ни ҙә белмәй. «Ҡурай тураһында әкиәт»тә (AT 782) әсә, үҙенең һөтөнә баҫып бешерелгән өшәне батшаға ашаттырыуы арҡаһында, сәсҡырғырҙың әсәһе шул яуыз хакимды, йола буйынса, үҙенең улы хисабына индерә. Һөҙөмтәлә улы үлемдән ҡотола. Төптәнерәк төпсөгәндә, бында әсә һөтөнөң ҡөҙрәтенә инаныу, уны олоҡлау сағылыуына төшөнөргә була.

Аҡыллылыҡ сифатын асыу асылыу үҙенсәлеге йәһәтенән *әкиәт зирәктәренең, дүрт тибы* айырым-асыҡ күҙгә ташлана. Шартлы рәүештә, *зирәктәрҙең беренсе тибына,* герой ҡуҙғалғанға тиклем үк, уға үҙ белдеге (инициативаһы) менән файҙалы кәңәш биреүсе персонаж ҡарай («Өс ауыҙ һүҙ», AT 910B; «Ата васыяты», AT 915A; «Ата һүҙе» AT 911* + 893; «Әсә һүҙе», өлөшләтә AT 911* + 893). Герой кәңәш һорап мөрәжәғәт иткәндә, аҡыллы кәңәш биреүсене лә ошо типҡа индерергә була («Яҡшы һүҙ – йән аҙығы», AT 910B; «Аҡыллы ҡарт менән иҫәр батша», AT 981; «Лоҡман Хәким», *654C*). Һорағанда ғына, кәңәш биреләме, әллә һорамағандаламы, әкиәттең йөкмәткеһе өсөн бының артыҡ әһәмиәте юҡ. Хәйер, аҡыл эйәһен герой ҡайҙа, ҡасан (сюжеттың төйөнләнеү өлөшөндәме, әллә ваҡиға үҫешендәме), нисә мәртәбә осрата, йөкмәтке өсөн уларының бер ҙә әһәмиәте юҡ. Былары хаҡында ла шуны уҡ әйтергә була. Иң мөһиме – шул кәңәштең геройҙы уйға һалырлыҡ, уны уйҙан эшкә ҡыбырлатырлыҡ булыуында. Хикмәт шунда,

кәңәш мәҡәл рәүешендә лә («Өс ауыҙ һүҙ»: «Йәнең кемде һөйһә, шул матур», «Яҡшылыҡҡа итмә яманлыҡ», «Боҫло ашты бора баҫма»; «Яҡшы һүҙ – йән аҙығы», АТ 920В; «Буръяҡ һыуға кермә», «Бөркөт һауалаған ерҙә ем булыр», «Ашыҡҡан – ашҡа бешкән»), афоризмһыҙ ғына ла йә васыят («Ата васыяты», АТ 910; «Урамға таяҡһыҙ сыҡма, атыңды кешегә йомош итеп бирмә, бисәңде үҙеңдән башҡа ҡунаҡҡа ебәрмә»), йә иҫкәрмә («Әсә һүҙе», яҡынса АТ 911* 893: «Байҙар менән ҡулдашаһың ҡулдашыуға! Ағаларыңа яҡын бул») рәүешендә бирелергә мөмкин. Геройҙың нисек «ҡыбырлауы» иһә бирелгән кәңәштең табышмаҡлылыҡ, йәшерен мәғәнәлелек кимәленә бәйләнгән.

Ике осраҡта ла уртаҡ бер законлылыҡ күҙәтелә: кәңәштә билдәлелек билдәһеҙлектә бирелә. Кәңәштең аҡыллы һүҙ булыуы билдәле. Шулай булмай, уны геройға, әллә кем түгел, аҡһаҡал һатып бирә, йә иң ҡәҙерле кешеһе атай, йә әсәй әйтә бит. Ҡасан, ҡайһы осраҡта, нисек уны тоторға кәрәк икәне иһә билдәһеҙ. Шул уртаҡлыҡ та еткән кеүек. Әммә әкиәт өсөн кәңәштең әйтелеү рәүеше формаль күренеш кенә түгел. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, сюжеттың хәл ителеү үҙенсәлеге лә, геройҙың характерының булмышы ла, йөкмәткенең мәғәнәлелеге лә күп йәһәттән ошо фактор менән билдәләнә. Кәңәш мәҡәл рәүешендә әйтелә ҡалһа, әкиәт геройы уны һүҙмә-һүҙ үтәй, ҡәҙимге телмәр рәүешендә булһа, уның хаҡмы, түгелме икәнен тикшереү өсөн, тәжрибә яһап ҡарай. «Өс ауыҙ һүҙ» әкиәтенең геройы: «Ике ҡыҙымдың ҡайһыһы матур?» – тип һораған ҡартҡа көн элгәре аҡһаҡалдан тәүҙә һатып алған, «йәнең кемде һөйһә, шул матур» тигән һүҙҙе әйтә – шул арҡала аңһыҙ үлемдән (аңғармаҫтан үлеүҙән) ҡотола, сөнки ҡарт ҡутырлы ҡыҙын яратҡан. Шуға ла һорауына кем ул теләмәгән яуапты бирә, шуның башын ҡыйып ултырыр булған.

Халыҡ аңында мәҡәлдәр шикләнерлек урыны булмаған, яҙылмаған закон, аксиома тигән ҡараш йәшәй. Шул ҡараш, күрәһең, әкиәткә лә күскән. Шуға ла герой уға ревизия яһап тормай. Ә бына «Ата васыяты»нда кәңәштә «аксиома»лыҡ юҡ. Сөнки ул мәҡәл рәүешендә әйтелмәй. Уның байына «ни өсөн?» һорауына урын бар. Ана шул геройҙы уйға һала ла инде. Шуға ла ул, кәңәштең киреһен эшләп, уның асылын тикшереп ҡарай.

Шул уҡ ваҡытта зирәктәр тураһындағы новеллистик әкиәттәр аҡыллы һүҙҙең догма булырға тейеш түгеллеген дә иҫкәрткәндәй итә. Мәҡәл-кәңәштәр йыш ҡына йомаҡҡа яҡын күсмә мәғәнәле була. «Васыят» әкиәтендә кәңәш, ҡарамаҡҡа, мәҡәл рәүешендә түгел, әммә бер нәмәне әйтеп, икенсене күҙ алдында тотоу йәһәтенән йомаҡҡа тартым мәҡәлсә. Үлер сатында бер ҡарт уландарының берәүһенә: «Улым, һин ауыл һайын һарай һал, – ти, икенсеһенә, – аҙна һайын кәләш ал, – ти, өсөнсөһөнә, – ерҙе һөргәс, баш-баштарын ҡондоҙ ҡауырһыны

менән ҡаймалап ҡуй», – ти. Кәңәш ошо рәүешле йомаҡса бирелһә, ғәҙәттә, әкиәткә уны аңлатыусы ҡарт образы индерелә.

Кәңәш ни рәүешле генә бирелмәһен, ваҡиғаның үҙендә ҡатнашмаған, әммә герой юлығыр ситуацияны алдан күҙаллаусы аҡыл эйәләре хаҡындағы новеллистик әкиәттәр, тотош алғанда, бер маҡсатҡа хеҙмәт итә. Улар үҙ аллы фекер йөрөтөргә, кеше һүҙенә һуҡыр рәүештә эйәрмәҫкә кәрәк икәнен иҫкәртә.

*Әкиәт зирәктәренең икенсе тибы* тәүгеһенән шуның менән айырыла: *беренсенән,* зирәк зат унда үҙе үк төп герой вазифаһын атҡара; *икенсенән,* эҙәрләүсе биргән мәсьәләне, логик фекер йөрөтөү юлы менән сисә һәм ике аралағы сәкәләшеүҙе (конфликтты) үҙ файҙаһына хәл итә. «Өс икмәк» (*655*) әкиәтенең геройына батша һынау үткәрә. Герой, әле әйткән ысулды ҡулланып, батша аҫыл таш тип иҫәпләгәндең ябай быяла, шәп ат тигәндең ишәктән дә алама мал, ә унның үҙенең батша нәҫеленән түгел, икмәк бешереүсе затынан икәнен иҫбатлап, язанан ҡотола. «Бабай, Хызыр, батша» (*656*), «Һанай белеүсе өс ағай» (АТ 655А) ише әкиәттәрҙең дә геройы зирәктәрҙең икенсе тибына ҡарай.

*Әкиәт зирәгенең өсөнсө тибы* – «Фәүҡинур», «Аҡыллы ҡарт» (АТ 875В + 875Е*) әкиәттәренең төп геройы булған аҡыллы ҡыҙ йөҙөндә һынлана. Батшаның тәкәһен бәрәсләтергә, бер тиренән тун тегергә; юлдан да килмәһен, юлһыҙ ҙа килмәһен, бүләкле лә килмәһен, бүләкһеҙ ҙә килмәһен, тип аҡыл етмәҫлек мәсьәләләр ҡуйыуына, ҡыҙ шул уҡ принципта яуап бирә: батша, атайың ҡайҙа, тиһә, бала килтерә, тип яуап бирәң үлсә, ти; батша янына кәзә менеп, юл ҡырлап бара, ҡулындағы турғайҙы уға бүләк итергә һона ла – осора ла ебәрә.

«Әғзәм» (*921*), «Йылҡысыбай» (АТ 889) ише әкиәттәрҙең геройын *әкиәт зирәгенең дүртенсе тибы* иҫәбенә индерергә була. Уның үҙенсәлеге шунда, ул үҙен, алдаша белмәүе, намыҫлылығы арҡаһында, теләһә ниндәй сетерекле ситуациянан да еңел сыға ала торған кеше итеп таныта.

Һөнәргә, ғилемгә эйә булыу ҙа новеллистик әкиәттәрҙә аҡыллылыҡ, зирәклек тип баһалана («Әминбәк», «Шакир», АТ 654В*; «Әлмирйән», яҡынса АТ 922А). «Өс ауыҙ һүҙ», «Ата васыяты» ише әкиәттәрҙә герой аҡыллы һүҙҙең мәғәнәһенә төшөнеүҙә ҡыйынлыҡ кисерһә, был төркөмгәсә ҡараған әкиәттәрҙеке һөнәр, ғилем алыу юлында ауырлыҡтар күрә. Шуныһы иғтибарҙы йәлеп итә: сюжет тибы бер үк булһа ла, уның төрлө халыҡҡа мәғлүм варианттарында был ауырлыҡ төрлөсәрәк асыла. АТ 654 В тибындағы монгол әкиәтендә (5h, 36 – 37) бик күп йылҡы өйөрөнә хужа булған байға, улын уҡытыу өсөн, бер аҙ мал бүлергә тура килһә, шул уҡ сюжетҡа ҡоролған «Әминбәк» тигән башҡорт әкиәтенең геройы ата-әсәһенең һуңғы малын, һуңғы тинен тотона. Шулай итеп, башҡорт

әкиәтенә социаль мотив үтеп инә. Әммә бер михнәттең бер рәхәте тигәндәй, ҡыйын үҙләштерелгән һөнәр, ғилем, аҙаҡ геройға бүтән ауырлыктарҙы еңеп сығырға ярҙам итә.

*Зирәктәрҙең айырым бер тибы* Ерәнсә сәсән йөҙөндә һынланыш тапҡан. Уның бер үҙенсәлеге шунда: ул быға тиклем телгә алынған әкиәт зирәктәренә хас һыҙаттарҙы бер үҙендә дөйөмләштерә. Әммә, уларҙан айырмалы рәүештә, ул бер үк мәлдә Ейәнсура, Күгәрсен райондарында киң таралған риүәйәттәрҙең (мәҫәлән, Ерәнсә ҡәбере, Ерәнсә тирәге, Бәндәбикә кәшәнәһе тураһындағы риүәйәттәрҙең), көләмәс һәм ҡобайырҙарҙың да геройы. Ерәнсә сәсәндең исеме ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ даирәһендә лә киң билдәле. Уның хаҡындағы сюжеттарҙың параллелдәре үзбәктәрҙә – Алишер Науаи, төрөкмәндәрҙә – Мирали исемдәренә бәйле латифа (көләмәс) һәм әкиәттәр рәүешендә таралған. Ерәнсә сәсән әрмәндең Пул-Пугы менән Һиндостан батшаһы Әкбәрҙең баш кәңәшсеһе Бирбалды ла хәтерләтә.

Ерәнсә сәсән сюжет ситуацияларында бай йә хан менән сәкәләшә. Хакимдарҙы төп башына ултырта, йәберләнеүсене ҡурсалай. Төрлө ситуацияға, мөхиткә яраҡлаштырып, әкиәтселәр уны йә көтөүсе малай («Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән», *875Е** – *921* + 920 С + 875В + *927*** S – *2890*), йә халыҡҡа итәғәтле абруйлы йомарт ир («Ерәнсә сәсән менән хан»), йә вәзир («Ерәнсә сәсән хикмәттәре», *1533* + *921 С* + *921Н* + 1362А* + *921** + АТ 920С + өлөшләтә АТ 922А һ. б.) тип күрһәтә. Социаль яктан кем сифатында ла, Ерәнсә, төрлө ситуацияла (хатта бер үк әҫәрҙә лә) төрлө-төрлө роль атҡара: бер осрашҡанда, ул язаға тартылыуға хөкөм ителеүсенең ғәйепһеҙ булыуын иҫбат итеүсе ғәҙел хөкөмдар («Ерәнсә сәсән хикмәттәре»), икенсе ҡараһаң, ҡарт менән уның ҡыҙын, зирәклектә һынап ҡарап, кәләшлеккә ҡыҙ һайлаусы егет, йә булмаһа, ҡатынына дәғүәләшеүсе хакимды хур итеп, ғаиләһен ҡурсалаусы намыҫсан ир («Торахан, Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән», «Ерәнсә сәсән менән хан»), йә ике хан араһындағы ыҙғышты бер үҙе тыныс юл менән хәл итеп, илде амбициоз хан баҫҡынсылығынан, ҡан ҡойошло яуҙан ҡурсалап алып ҡалыусы оҫта дипломат («Торахан, Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән»). Былар бөтәһе лә уның зирәклектә, ғәҙеллектә ил эсендә бер кеше булыуын раҫлай һәм уны шулай танырға мәжбүр итә. Шуға күрә сәсән тип йөрөтөлөүе лә бушҡа түгел. Ә сәсән тип халыҡта:

Ҡылыстан үткер, яу ҡыйған,
Ҡан сығармай, яу һуйған,
Ил сигендә дан алған,
Ил тышында һан алған,
Ханға ҡаршы уҡ булған,
Бейгә ҡаршы ут булған

кешегә генә әйтәләр (20, 135).

Әммә новеллистик әкиәттәрҙә Ерәнсә сәсәндең шундай бер үҙенсәлеге лә асыла: әйтерһең дә, уның йөҙөндә ике кеше сығыш яһай. Йәш сағында берәүҙең дә кәңәшенә мохтажлыҡ кисермәй, үҙе белеп, үҙе ҡуйып, ниндәй ҡыйын ситуацияға юлыҡһа ла, юғалып ҡалмай. Өйләнеүе була – алыштыралармы ни: башына бәлә төштөмө – юғала ла ҡала, бошонорға тотона. Шул саҡ уны ҡатыны йыуата, аҡыллы кәңәше менән уға ярҙамға килә. Бары уның кәңәшен тотҡан сүрәттә генә, Ерәнсә ҡыйын хәлдән еңел ҡотола: хаким дәғүәләренең мәғәнәһеҙлеген фаш итә, еңеүсе булып сыға («Ерәнсә сәсән хикмәттәре», «Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән», «Ерәнсә сәсән менән хан»). Инде лә ҡатынының һүҙе менән иҫәпләшмәнеме – Ерәнсә уңайһыҙ хәлгә ҡала. "Үәт мин ир: бер һүҙемә бер алтын алам," – тип маҡтанған сағында, ҡатыны: "Һин – ир түгел әле, һин – иргәләк кенә. Ирҙәр менә шулай була: ирҙәрҙең күкрәгенең уртаһында йөн була," – тип әйтеүенә ҡарамаҫтан, һунарҙа үҙенән көслө һунарсы менән һүҙгә килә. Үлемдән уны ҡатынының ысын ир хаҡында әйткәне генә ҡотҡара: тегенең күкрәгендәге йөндө күреп, Ерәнсә шул хаҡта уға һөйләп бирә. Уныһы иһә аҡыллы ҡатыны хаҡына ғына Ерәнсәне үлтермәй («Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән). Ә ҡатыны ҡатнашмаған ситуацияларҙа Ерәнсә үҙен әүәлгесә зирәк итеп күрһәтә. Тимәк, өйләнгәс тә, зирәклеген юғалтмай Ерәнсә, бары үҙенә тиң күреп алған үтә теремек, өлгөр кәләше менән сағыштырғанда ғына, һүлпәнләнгәндәй тойола.

Ерәнсәнең ҡатынын зирәктәрҙең зирәге, иренә ҡарағанда ла, аҡылға теремек һәм өлгөр итеп күрһәтеүҙең сәбәбе бар. Сәбәп тигәндә, был урында новеллистик әкиәттәр өсөн яҙылмаған бер ҡанун күҙ уңында тотола. Ул ҡанун буйынса, төп герой йәки уның иң яҡын партнеры сифатында ҡатын-ҡыҙ күрһәтелгән сүрәттә, уны, ғөмүмән, интеллектуаль һәм әхлаҡи яҡтан камиллыҡта ир кешенән өҫтөн итеп һүрәтләйҙәр. Беҙгә таныш «Фәүкинур» әкиәтенең героиняһы зирәклектә батша тиклем батшаға ал бирмәй. Батша ҡатыны булыуға өлгәшеүе – шул камиллығын баһалау мәғәнәһенә эйә. Яңы шарттарҙа иһә уның үҙаллылыҡ, тәүәккәллек кеүек сифаттары асыла. Батша үҙе өйҙә юҡта бер ниндәй хөкөм ҡылмаҫҡа әйтһә лә, бер бәхәсте аҡыллы хәл итә Фәүкинур. Әкиәттең эске кануны шулай: кем тыйғанды тотмай, шул тейешле язаһын алмай ҡалмай. Батша ла Фәүкинурҙы айырырға була. Шул ниәт кенә лә яза мәғәнәһенә эйә. Әммә: «Нимә теләйһең, шуны ал», – тип уға һайлау мөмкинлеге биреүе – бүләктән дә ҡиммәт. Фәүкинур иһә батшаның үҙен генә һайлай.

Шулай итеп, әкиәт уны ярата белеүсе, хәләлен генә тиңһенеүсе, уға тоғро ҡатын кимәленә күтәрә. «Өс таҙ менән бер аҡыллы ҡыҙ» (АТ 921), «Алтмышта ҡыҙ һораткан хан» (*921*) әкиәттәрендә аҡыллы ҡыҙ үҙен кәләшлеккә алырға итеүселәрҙе тиңһенмәй һәм тапҡыр яуаптары менән уларҙы ниәттәренән баш тартырға мәжбүр итә.

Ҡатын-ҡыҙҙы шулай интеллектуаль һәм рухи, әхлаҡи яҡтан камил, хатта ошо йәһәттән ир партнерынан да өҫтөн итеп күрһәтеүҙең тамыры матриархат дәүеренә хас әсәлек башланғысын олоҡлау традицияһына барып тоташа. Феодаль-патриархаль шарттарҙа ул, әлбиттә, яңы интерпретация алған: ҡатын-ҡыҙҙың ир-аттан һис кенә лә кәм түгеллеге идеяһын үткәреүсе художестволы сараға әүерелгән. Тимәк, ҡатыны менән йәнәш күрһәтелгәндә, Ерәнсәнең зирәклеге кәмһетелмәй. Киреһенсә, зирәктәрҙең-зирәге тип танылған кешенең үҙ ҡатынының зирәклеге менән иҫәпләшеүе синфи йәмғиәттә лә әсәлек башланғысы һанланырға тейеш тигән идеяны асыуға хеҙмәт итә һәм уның абруйлы аҡыл эйәһе булыуына тағы бер мәртәбә генә өҫтәй.

## 2. Мөхәббәт һәм ғаилә тоғролоғо тураһындағы әкиәттәр

Кешелекте борон-борондан йәмғиәттең тәүге ячейкаһы, ғаилә проблемаһы, ир менән ҡатын мөнәсәбәтен юлға һалыу мәсьәләһе борсой килгән. Шуға күрә лә фольклорҙа никах һәм ғаилә темаһы мөһим урын алған. Тормош-көнкүреш әкиәттәрендә ул *ике юҫыкта,* бер-береһен яратышыусыларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте һәм ғаилә тоғролоғо юҫығында яҡтыртыла. Геройҙың әүҙемлек кимәле ошо ике факторға бәйле. Беренсе осраҡта егет актив, икенсеһендә – ҡатын. Шул факторҙар һүҙ барған әкиәттәр төркөмөнөң идея йүнәлешен дә билдәләй.

Һүҙ мөхәббәт тигән илаһи тойғо хаҡында барһа ла, әкиәт хис, кисереш, уйланыуҙарға туҡталып тормай. Егет менән ҡыҙ яратышыуы хаҡында, ғәҙәттә «Борон-борон заманда бер егет менән ҡыҙ бер-береһен бик яратып йөрөгәндәр» («Фәҡир кейәү») тибындағы бер-ике һөйләм генә әйтелә. Йыш ҡына уныһы ла булмай, сөнки әкиәт өсөн туранан-тура психологизациялау мөһим түгел. Уның ҡарауы, яратышыусыларҙың эш ҡылыҡтарын, ҡауышыу юлында тыуған ҡаршылыҡтарҙы үтеүҙәре ентекле һүрәтләнә, һәм шул уларҙың хис-тойғоларының кимәле хаҡында төшөнсә тыуҙыра. Ә ҡаршылыҡтар тормоштағыса төрлө яҡтан төрлө кимәлдә бирелә. Егеттең ярлы балаһы, ҡыҙҙың бай балаһы булыуы ла («Фәҡир кейәү», *875*), яратышыусы йәштәр араһына бай килеп инеүе лә («Кашиҡәрип менән Маһимөһөр», АТ 974), һылыу ҡыҙға төштә ғашиҡ булып, өндә уны эҙләп ыҙа сигеү ҙә («Төштә ғашиҡ булған», «Буйҙаҡ батшаның төштә ғашиҡ булғаны, өндә кәләш алғаны», АТ 725), башҡаһы ла – ҡаршылыҡ. «Һалдат тураһында әкиәт» (АТ 854), «Таҙҙың һалдат булғаны, шунан батша булғаны» (СУС – 855*) ише әкиәттәрҙең геройына бер кем дә үтеп инә алмаҫлыҡ тип иҫәпләнгән нығытмаға инеү ҡыйынлығын үтергә тура килә.

Генетик яҡтан ҡарағанда, һүҙ барған әкиәттәр бер кимәлдә тормайҙар, әлбиттә. Уларҙың күпселегендә синфи йәмғиәт билдәләре (синфи йәмғиәткә хас этнографик мәғлүмәттәр конфликт характеры, әҙәби әҫәргә яҡынлыҡ) өҫтөнлөк итә. Әммә улар – тышҡы күренеш,

һуңғы дәүер өҫтәмәһе булыуы ихтимал. Һәр хәлдә, мәҫәлән, ҡарамаҡҡа, ярлы менән бай араһындағы ҡаршылыҡҡа ҡоролғандай тойолған «Фәҡир кейәү» әкиәтендә ҡыҙы менән яратышҡан кейәү булаһы егетте бай ауыр һынауға дусар итә. Бының ише әкиәттәр “синфи уяу” заттарға, ошо миҫалдан сығып ҡына ла, “бында һис һүҙһеҙ синфи тигеҙһеҙлектең хатта мөхәббәт һәм никах өлкәһенә лә килеп ҡыҫылыуы баҙыҡ сағылған”, “быны, мөхәббәт һәм синфи тигеҙһеҙлек конфликты, тип атарға ла була” һ.б. шуның кеүек һығымталар яһарға ифрат та ҡулай. Әммә сюжеттың генетик тамырҙарына күҙ һалһаҡ, уның нигеҙендә матриархатҡа хас йола ятыуына төшөнөрбөҙ. Ул осорҙа кейәүҙе никах алды һынауҙары аша үткәреү фарыз булған. Ҡыҙ йортона килгәндә, егеттән йәйәү ҙә килмәҫкә, һыбай ҙа килмәҫкә талап итеүҙә, уны ҡышҡы сатлама һыуыҡта яғылмаған өйгә бикләп ҡуйыуҙа, әле генә мейестән алынған эҫе икмәкте телдереүҙә, асылда, шул боронғо никах алды һынауының сатҡылары сағыла, тип уйларға ерлек бар. Һәр йола һәр кемсәнә өсөн фарыз тип иҫәпләгән замандар үтеп китеп, синфи ҡаршылыҡтар көсәйә башлағас, никах алды һынауын әкиәт түбән ҡатлам кешеһенең бәхет юлында синфи тигеҙһеҙлек тыуҙырған кәртә кеүек аңлата башлаған. Шуның кеүек, башҡа новеллистик әкиәттәрҙәге ғашиҡ егеттең алдында тыуған ҡаршылыҡтарҙы ла төптән уйлағанда, кейәүлеккә кандидатты никах алдынан борон мотлаҡ һынау йолаһына дусар ителеүенең тора-бара яңы интерпретация алыуы һөҙөмтәһе тип ҡарарға була. Әйткәндәй, ҡайһы бер әкиәттәрҙәге ҡаршылыҡ мотивында, боронғолоҡтоң эҙемтәләре «күҙгә бәрелеп» үк тора. Тарихи яҡтан ҡарағанда, еткән ҡыҙҙы әҙәм заты үтеп инмәҫ таш һарайҙа тотоу мотивы борон батша балалары кеше-ҡара күҙенән айырыу (изоляциялау) йолаһына барып тоташа (63, 43–45). «Һалдат тураһында әкиәт»тә таш йорттоң ун дүртенсе ҡатындағы балконда торған батша ҡыҙына һоҡланған, икенсе төрлө әйткәндә, бер күреүҙә ғашиҡ булған һалдатҡа хаким шундай шарт ҡуя: «Ҡырҡ көн эсендә, һиҙҙермәй генә минең өйөмә (таш нығытмаға. – Ә.С.) кер. Керһәң – ҡыҙым һинеке, керә алмаһаң, башыңдан яҙырһың!»

Тарихи нигеҙҙәре нисек булғанда ла, мөхәббәт хаҡындағы тормош-көнкүреш әкиәтенең геройы үҙенең алдына ҡуйылған бөтә төр ҡаршылыҡтарҙы ла уңышлы үтеп сыға. Шуның менән үҙенең хистәренең сафлығын да, көсөн дә, мөхәббәте хаҡына теләһә ниндәй һынауҙарға ла сыҙарға, уларҙы еңергә әҙер икәнен дә иҫбатлай.

Сюжет конфликтының хәл ителешендәге айырмалыҡтарына ҡарамаҫтан, был төркөмсәгә тағы шундай бер билдә уртаҡ: улар һәр кемдең шәхси бәхеткә, үҙе тиңе, Халыҡ шағиры Мостай Кәримдең Оло инәһе әйтмешләй, икенсе яртыһын табып, шуның менән (“Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”) менән менән ҡауышырға хаҡлы булыуын раҫлай. Ә был идея дөйөм кешелек әһәмиәтенә эйә.

Әле генә ҡаралған төркөмсәләге кеүек үк, *мөхәббәт темаһын ғаилә юҫығында яҡтыртҡан* новеллистик әкиәттәрҙә лә башта егет кеше бик әүҙем итеп күрһәтә үҙен. «Ғафи улы менән Сафи улы» (АТ 882А + өлөшләтә 881*) әкиәтенең геройы, йолаһын йола итеп, башта, унда сабып, бында сабып, ҡыҙ күҙләй. «Хәйерсе ҡыҙы» (яҡынса АТ 880 + өлөшләтә 882А) тигәненеке лә кәләшлеккә ҡыҙҙы үҙе һайлай: уҡ ата ла, уғы кем йортона төшһә, шуның ҡыҙын алмаҡ була. Үҙҙәре бай булһа ла, ике егет тә ярлы ҡыҙы менән никахлаша. Был осраҡта ла социологизациялау башланғысы, синфи тигеҙһеҙлек – ғашиҡтар ҡауышыу юлында ла ҡаршылыҡ, тип аңлатыу ҙа ярлы егет менән бай ҡыҙының мөхәббәте хаҡындағы әкиәттәргә ҡарата әйтелгәндәр кеүек үк, һәр нәмәне тик “синфи күҙлектән ” баһаларға тырышыуҙың һөҙөмтәһе булыуы ихтимал.

Мөхәббәткә бағышланған әкиәттәрҙең геройҙарының социаль тигеҙһеҙлек сиген аша атлауҙары – быға тиклем ҡаралған миҫалдарҙағы кеүек үк, уларҙың да мөхәббәтенең көслө булыуына ишара.

Шулай итеп, мөхәббәт һәм никах мәсьәләһен социологизациялау, сюжетҡа баштан уҡ көсөргәнешле үҫергә форсат тыуҙырыуы һөҙөмтәһәндә, үҙенсәлекле художестволы алымға әүрелеп, эстетик функция атҡара башлаған.

Егет менән ҡыҙ мөхәббәте хаҡындағы әкиәттәрҙең геройынан айырмалы рәүештә, был төркөмсәгә ингәндәрендә, ҡауышыу бәхетенә ирешеүе була – унаң әүҙемлеге һүнә лә ҡуя. Сюжеттың көсөргәнешлеген бары башта билдәләнгән соцологизация башланғысы ғына тәьмин итә. Тимәк, бында ла социологизация эстетик бурыс атҡара.

Мөхәббәт темаһын ғаилә төҙөүгә ынтылыш юҫығында яҡтыртҡан әкиәттәрҙә – егет кеше, никахлашҡандан һуңғы дәүер юҫығында яҡтыртҡандарында ҡатын һынауҙарға дусар була. Ике осраҡта ла һынау, һыналыу сюжет үҙәген хасил итә.

Героиняның һынауҙарға юлығыуына, формаль яҡтан ҡарағанда, ҡатын тоғролоғона бәхәс («Ғафи улы менән Сафи улы», «Хәйерсе ҡыҙы») йә ире өйҙә юҡта ҡатынын аҙғынлыҡҡа ылыҡтырырға маташыу («Батша булған батша ҡыҙы менән батша малайы», «Ғәзиз», АТ 881) һөҙөмтәһендә, антагонист ауыҙынан сыҡҡан нахаҡ һүҙ сәбәпсе була. Әммә, кәләш алғансы, бик әүҙем булып та, шул ялған һүҙҙе дөрөҫкә алып, ҡатынын битәрләгән ирҙең аҡылына килмәүе, ятаҡҡан ҡатынын эҙләп табып, ғаиләне яңынан тергеҙергә аҙым яһамауы, улай ғына ла түгел, хатта апатияға бирелеүе мәсьәләгә икенсе яҡтан ҡарарға ла мәжбүр итә. Күрәһең, бында ғаилә төҙөүҙә инициативаны үҙ ҡулына алыуға өлгәшкән ир үҙенә тәғәйен мөмкинлекте әлегә тулыһынса файҙаланыуға өлгөрә алмаған осор, ғаилә эсендә ҡатынды донъя тотҡаһы, тип таныу элекке матриархат дәүере традицияһы үҙенсәлекле

сағылыш алған. Тимәк, был төркөмсәлә лә һүнеүгә табан барған матриархат традициялары менән яңы ғына һөжүмгә күскән патриархаттың үҙ-ара мөнәсәбәте, атап әйткәндә, патриархаттың, бер йүнәлештә ярайһы уңышҡа өлгәшһә лә, икенсе йүнәлештәрҙә матриархат алдында баҙап, ҡаушап ҡалғылаған, һәм сигенгеләгән осоро художестволы сағылыш тапҡан. Бынан иһә шундай һығымтаға килеүе ҡыйын түгел. Ғаилә тоғролоғо тураһындағы новеллистик әкиәттәрҙең үҙәгендәге мотив бик боронғо дәүерҙәргә барып тоташа. Шуға ла бындай әкиәттәр ике йәш кешенең никахҡа тиклемге мөнәсәбәттәре тураһындағы әкиәттәрҙән бүленеп сыҡҡан булыуы ла ихтимал, тип уйларға ерлек бар. Кәләш алғанға тиклем «Ғафи улы менән Сафи улы» һәм Ерәнсә сәсән хаҡындағы әкиәттәр ише әкиәттәрҙең геройының инициативалы булыуы ла ҡеүәтләй был фекерҙе.

Һүҙ барған әкиәттәр төркөмөнә инеүсе сюжеттарҙың боронғолоғона шул да дәлил. Эҙәрләнә башлағас, героиня ирҙәр кейеме кейә һалып ала. Шул уны ят ирҙәрҙең бәйләнеүенән ҡотҡара. Ирҙәр кейемен башта уҡ кейгән ҡатын ят ирҙәр эҙәрләүенә бөтөнләй ҙә дусар булмай. Сауҙа итеп йөрөгәнендә, мәкер әбейҙән отолоп, бар байлығынан ҡолаҡ ҡағыуы арҡаһында, ҡайтырға оялған Сәлимйәнде эҙләргә сыҡҡан кәләше ирҙәр кейәме кейеү менән генә сикләнмәй, хатта үҙенә Сәтәи Тәхәүи улы тип паспорт та ала (“Сәлимйән”) .

*«Ирҙәр кейеме кейеү»* мотивы художестволы вазифа йәһәтенән «Ала ҡарға» (АТ –; 14, № 54), «Ҡарамулла» (АТ 313А; 14, № 60) ише тылсымлы әкиәт геройының эҙәрләнеүселәрҙән әүермәнлек («ҡиәфәт үҙгәртеү») юлы менән ҡотолоуын хәтерләтә. Был оҡшашлыҡ ике мотивтың генетик яҡта тамырҙаш булыуынан килә. Әммә йөкмәтке йәһәтенән улар айырыла. Тылсымлы әкиәттә ҡиәфәт үҙгәртеү – йәнде һаҡлау сараһы булып ҡына аңлашыла. «Ирҙәр кейеме кейеү» мотивына ла был идея ят түгел. Әммә новеллистик әкиәттә әхлаҡ проблемаһы үҙәккәрәк күсә: ирҙәр кейеме кейеү – нахаҡтан рәнйетелгән ҡатындың ғаиләгә тоғролоҡ һаҡлау өсөн, бөтә сараларҙы күреүен, намыҫлылығын асыу алымы ла. Сараһыҙҙан ситкә сығып киткәс, башҡа һынау ғазаптарын да ул бары ошо маҡсат хаҡына кисерә. Шулай тоғролоҡ һаҡлай белеү бәрәбәренә ире менән яңынан ҡауыша. Әкиәт бына шулай ғаилә тоғролоғона мәҙхиәгә әүерелә.

«Ун ике биғлый» (СУС – 968 А*), «Ышаныслы ҡатын» (АТ 1350), «Һалдат менән батша ҡатыны» (СУС 983*), «Үгәй әсә, ҡырҡ вәзир менән мулла» (АТ 875), «Ҡатын хәйләһе» (АТ 1410) ише әкиәттәрҙә лә ир – мәшәү, ҡатын кеше бик әүҙем, бик инициативалы, тик кире яҡҡа, аҙғынлыҡ яғына. Әкиәт шуны фашлай ҙа инде. Асылда, бында ла ғаилә тоғролоғо, сафлыҡ проблемаһы үҙәккә сыға. Бындай әкиәттәр ҙә ғаилә бөтөнлөгөн һаҡлауҙа ҡатын кешенең хәл иткес роль уйнауын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Шулай итеп, мөхәббәт, ғаилә тоғролоғо, намыçлылыҡ идеяһы әкиәттәрҙә симпатия менән ыңғай күренештәрҙе һүрәтләү аша ғына түгел, намыçһыҙлыҡты, хыянатты фашлау ярҙамында ла үткәрелә.

### 3. Үтә үҙ һүҙле ҡатындар хаҡындағы әкиәттәр

Был төркөмгә ирле-ҡатынлыларҙың психологик яҡтан һыйышыу-һыйышмау проблемаһы үҙәк урынды алған новеллистик әкиәттәр ҡарай. Әлегәсә күҙҙән үткәрелгән төркөмдәргә ингән әкиәттәрҙә, башта үҙен төп герой сифатында таныткан ирҙе ситкәрәк ҡыçырыҡлап, алғы планға ҡатын сығыусан булһа, улар менән сағыштырғанда, был тарафта ҡаралаһы әкиәттәрҙә ир менән ҡатын роль алмаштырышҡан кеүек: ир кеше баштан уҡ инициативаны үҙ ҡулына эләктерә лә аҡыл эйәһе урынын ала, ә ҡатын икенсе планға күсә. Әммә ул ире өсөн тәрбиә объектына әүерелә. Шуға күрә лә Ю.М. Соколов, Е.Ф. Тарасенкова, А.А. Глонти, В.Я. Пропп, В.П. Аникин, Ю.И. Юдин һ.б. тикшеренеүселәрҙең быңдай әкиәттәрҙе үҙәк герой итеп кире холоҡло ҡатын һынландырылған әкиәттәр рәтенә ҡуйыуҙары менән һис тә килешеп булмай. В.Я. Пропптың АТ 900 һәм 901А тибындағы сюжеттарға нигеҙләнгән (башҡорттарҙа улар «Наҙлы ҡыҙ», «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» ише) әкиәттәр генетик яҡтан тылсымлы әкиәттәр менән бәйләнгән тигән ҡарашы ла бәхәсле.

Үтә үҙ һүҙле ҡатындар хаҡындағы әкиәттәр, үҙҙәренең идея йүнәлеше, йөкмәткеһе буйынса, логик яҡтан үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә торған ике төркөмсә хасил итә. Улар бер-береһенән ир кешенең үтә үҙ һүҙле ҡатындың холҡон төҙәтеү буйынса эш күрә башлау ваҡыты, әүҙемлек кимәле һәм никахта тороу дәүеренең оҙайлылығы менән айырыла, сөнки тап шул ваҡыт факторы менән ир кешенең әүҙемлек кимәле ул ҡулланған сараларҙың үтемлелеген, улар биргән һөҙөмтәнең сифатын билдәләй. Ошо принципты төп үлсәм итеп алған, *беренсе төркөмсәгә* «Наҙлы ҡыҙ», «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» ише әкиәттәрҙе индерергә була. Уларҙың төп геройы, йәш егет, белә-күрә, үҙ һүҙле ҡыҙға өйләнә. Хикмәт ана шунда ла инде. Тимәк, егет үҙ көсөнә ышана. Быныһы – бер булһа, икенсенән, башҡаға уның күңеле ятмай, тимәк, егет шул ҡыҙҙы ғына ярата. Был һығымтаны шул да ҡеүәтләй: 1) «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» тибындағы әкиәттәрҙә үҙһүҙлелеге менән яманаты сыҡҡан ҡыҙҙы кәләшлеккә алыу уйынан егетте үҙ әсәһе, хатта шул ҡыҙҙың атаһы ла кире күндерергә тырыша, уға өйләнмәçкә кәңәш бирә; 2) «Наҙлы ҡыҙ» ишеләрендә, яусылаусы егеттәрҙе, үҙен әллә кемгә ҡуйып, ҡыҙ бик тә битәрләй, ныҡ кәмһетә. Әммә бер егет ун йылдан һуң да ниәтенән ҡайтмай. Ике әкиәттә лә егет үҙ һүҙен һүҙ итә. Иң мөһиме шул: ул белә-күрә алған үҙ һүҙле кәләшен, ип-һапҡа килтереп, уны

тулыһынса үҙ идеалына еткереү өсөн, тәрбиә эшенә тәүге көндән үк тотона һәм ыңғай һөҙөмтәгә ирешә.

*Икенсе төркөмсәгә* ҡараған әкиәттәрҙә иһә үҙһүҙлелек никахлы хәлендә байтаҡ йәшәгән, тимәк, инде характеры формалашҡан ҡатындың төп һыҙатына әүерелгән. Ул ҡатындың ни тиклем ныҡ үҙ һүҙле булыуы тыңлаусы күҙ алдына килтерерлек итеп тасуирлана: унан хатта дейеү бәрейе ҡурҡып ҡаса. Шулай булғас, уның иренең хәлен аңлауы ҡыйын түгел. Үҙһүҙлелектең, ғөмүмән, ни тиклем яман икәнен асыу өсөн дә, шундай уҡ принцип менән эш итә әкиәт: һыу төбөнә китеп барғанда ла, ҡатын үҙ һүҙен бирмәй, ҡулын күтәреп, бармаҡтарын ҡайсылата. Йәнәһе, үләнде салғы менән сабалар, тип һин яңылыш һөйләйһең, уны ҡайсы менән киҫәләр. Һуңғы ике деталдә ирҙең кемлегенә лә ишара бар. Ғүмер буйы шул ҡатын менән тороуы уның үтә лә сабыр кеше булыуын да, шул арҡала ҡатынының характерында үҙһүҙлелек һыҙатының нығыныуына үҙе лә булышлыҡ итеүен аңлата. Тап бына шуға ла уны әҙәм рәтенә килтерергә һуңлап тотоноуы бушҡа көсөргәнеү генә булып сыға («Яман ҡатындан дейеү бәрейе ҡасҡан», АТ 1365 +1364А + 1164; «Яуыз ҡатын менән дейеү», АТ 1164). Ирекһеҙҙән, “Һуң булһа ла, уң булһын” тигән мәҡәл гел генә аҡланып тормай икән тигән фекер тыуа.

Ошо урында тағы бер мәҡәл хәтергә килә. Тормош тәжрибәһе хаҡында һүҙ барғанда: «Күп йәшәгән ни белгән, күп йөрөгән шул белгән», – тиҙәр. «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә», «Наҙлы ҡыҙ» әкиәттәренең геройы ил гиҙгәнме, нисек, ул хаҡта һүҙ юҡ. Әммә үҙ һүҙле кәләшен тәүге көндәрҙән үк тәрбиәләй башлауы әле генә ҡаралған әкиәттәрҙең геройына (ғаиләле булып байтаҡ йәшәгән иргә) ҡарағанда, күпкә тәжрибәле итеп таныта. Ундай тәжрибә үҙенән-үҙе генә килмәй. Күп йөрөү, күп күҙәтеү генә ирештерергә мөмкин быға. Һәр хәлдә, әкиәтселәрҙең тел төбө әлеге мәҡәлгә барып терәлгәне яҡшы аңлашыла. Тәрбиә ысулын егеттең уңышлы һайлауы ла шул турала һөйләй.

«Наҙлы ҡыҙ» әкиәтендә кейәү булған батша улы «маска кейеү» алымы менән эш итә, йәғни үҙенең ысын булмышын йәшереп, тәүҙә, һоратып-һоратып та, ала алмаған наҙлы батша ҡыҙын кәләш итеүгә өлгәшә. Быйың өсөн ул тәккәбер ҡыҙын атаһы ярлы егеткә бирергә ҡәһәтләнеүен оҫта файҙалана. Йәғни үҙен танытмай, фәҡир егет булған булып (ә был – тәғәйенләнеше һәм йөкмәткеһе яғынан тылсымлы әкиәт персонаждарына хас әүермәнлеккә тиң), шул үҙһүҙле ҡыҙҙы тағы һората. Ныҡ ҡәһәтләнгән батша, үҙенең һүҙен һүҙ итеп, уны ошо “фәҡир” егеткә тоттора. Фәҡирҙәр тормошон татытып, донъя көтөргә өйрәткәс кенә, батша улы кәләшенә үҙенең ысын йөҙөн аса. «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» әкиәттәрендә иһә кейәү егет, «фәһемле (күргәҙмә) тәрбиә» ысулын ҡуллана: ул ике әйтеп тә, бер тыңламаған эте менән

атын кәләше алдында үлтерә һуға. Шулай күргәҙмә һабаҡ алған кәләше, ике әйттермәй, ылдым ғына донъя көтөп ала ла китә.

«Үтә уҡымышлы» замана кешеһе әкиәттәрҙә һүрәтләнгән тәрбиә сараларын белеп, сәсенә йәбешеүе, педагогика менән уртаҡлығы булмауҙа ғәйепләп, уларҙы шелтәләүе ихтимал. Шуға күрә шуны ла әйтеп китеү урынлы булыр: әкиәт өсөн (новеллистик әкиәт өсөн бигерәк тә) нимә һүрәтләнеүенән, нимә әйтелеүенән бик, ни әйтергә теләү, асыл мөһим. Ҡарамаҡҡа, туҙға яҙмаҫтай, ҡолаҡҡа яҡмаҫтай тойолған шаштырыу, бүрттереҙәр шуның менән аҡлана ла инде. Шуға ла быndай осраҡта, “маҡсат сараны аҡлай” (йәки “сараны маҡсат аҡлай”) тигән һүҙҙе үҙгәртә биреп, “маҡсат художество сараны аҡлай” тип әйтергә була.

«Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» әкиәтенең «Ике ҡабат әйттермә» (60, 61/12, 86) тигән вариантында шундай бер фәһемле эпизод бар. Ҡыҙының, тиҫкәрелекте ташлап, әҙәм рәтенә килеүен күреп, ҡайны ҡарт үҙ һүҙле әбейен дә тәрбиәләп биреүен һорағас (Бына ҡайҙан килә икән ҡыҙының кирелеге: алма ағасынан йыраҡ төшмәй шул ул), кейәүә ҡарттан ике сыбыҡ бөктөрөп ҡарай: ҡыуы бөгөлмәй – шарт һына, йәше түңәрәк яһап бөгөлә. Йәш булһа ла, кейәү егет йәшәрен йәшәгән ҡартҡа кешене йәштән тәрбиәләргә кәрәк, аҙаҡ тәрбиәләүҙең файҙаһы юҡ, тимәксе.

Ҡартайғас ҡына, әбейен тәрбиәләтергә теләгән ҡарт «Яман ҡатындан дейеү бәрейе ҡасҡан», «Яуыз ҡатын менән дейеү» ише әкиәттәрҙәге ирҙе хәтерләтә. Шуға ла кейәү егеттең ҡайныһына биргән һабағы уға ла ҡағыла. Ә инде, ғөмүмән алһаҡ, ул – һәр кемгә лә фәһем бирерлек һабаҡ. Әгәр мәсьәләгә тарихи яҡтан килһәк, был төркөмгә ингән әкиәттәрҙә лә заманында матриархаттың үҙ позицияларын, тартҡылаша-тартҡылаша ғына, патриархатҡа ҡалдыра барыуын, «Наҙлы ҡыҙ», «Халиҡ ҡыҙы Хәҙисә» ише әкиәттәрҙә патриархат башланғыстарының тантана итә башлауын, «Яман ҡатындан дейеү бәрейе ҡасҡан», «Яуыз ҡатын менән дейеү» кеүектәрендәге уның ваҡыт-ваҡыт инициативаны юғалтыуын, матриархаттың яңынан һөжүмгә күсеүен төҫмөрләргә лә була.

### 4. Ҡыйыу ҡыҙ менән яуыз ҡараҡтар тураһындағы әкиәттәр

Башҡорт халҡының әкиәт фондында ҡыйыу ҡыҙҙың яуыз ҡараҡтар менән алышы хаҡындағы әкиәттәр АТ ҡ»), АТ 9568 («Ҡырҡ ҡараҡ»), АТ 156 («Аҡ келәт»), АТ 976 («Хәтирә») кеүек күп вариантлы сюжет типтарын үҙ эсенә ала.

Ҡайһы саҡта тикшеренеүселәр (В.М. Ведерникова, (29, 98–99; Л.Ш. Ямалетдинов, 7?, 10) яуыз ҡараҡтар тураһындағы әкиәттәрҙе етеҙ бурҙар тураһындағылар менән бер рәткә ҡуя. Улар был әкиәттәрҙең геройҙары ла, структуралары ла бер-береһенә оҡшамауын иҫәпкә алып бөтмәй. Әле һүҙ барасаҡ төркөмгә ингән әкиәттәрҙәге бур һәм

ҡарактар нахаҡтан рәнйетелеүсе ҡыҙҙы һыйындырған («Зариф бай менән Һаҙый бай», АТ 709; 60, оп. 6513, 445–447) тылсымлы әкиәт геройына ла, хакимдарҙы, байҙарҙы өкләп йөрөгән етеҙ бурҙарға ла («Алдарҙың алтын урлағаны», «Ҡасим бур» һ.б. юмористик әкиәттәр) һәм уларҙың риүәйәттәрҙәге Бейеш, Ишмырҙа, Баяс, Ғәҙибәк Насир һымаҡ аналогтарына ла тамсы тартмаған (оҡшамаған). Яуыз ҡараҡтар кеше айырмай. Улар байын да, фәкирен дә, хеҙмәтсене лә, түрәне лә талай. Был үҙенсәлек башҡа халыҡтарҙың әкиәттәрендә лә күҙәтелә: татар әкиәтендә байҙың йортон баҫалар (79, № 40), төрөктөкөндә батшаның хазинаһын (78, № 52), рустарҙыҡында поптыҡын (59, № 343) талай. Етмәһә, улар садистарса эш итә: ҡыҙҙарҙы ла («Яңғыҙ ҡыҙ» (60, оп. 10/38, 40–50-се б.), сабыйҙы ла («Һуҡтырылған һалдат») аямай һ. б.

Яуыз ҡараҡтар тураһындағы әкиәттәрҙең килеп сығышы хаҡында төрлө фекер бар: сыуаш фольклорсыһы Е.С. Сидорова уларҙың генезисын – татар-монгол яуы осоро (73, 193), рус фольклорсыһы В.М. Ведерникова – XVIII–XIX быуаттарҙағы ҡасҡындар хәрәкәте (29, 99) менән бәйләй. Дөрөҫөндә, улар, татар фольклорсыһы Л.Ш. Ямалетдинов әйтмешләй, «килеп сығыуҙары яғынан боронғораҡ» (79, 10) күренеш. Халыҡтың мифологик ҡараштары менән аҙмы-күпме таныш кеше иғтибар итмәй ҡала алмаҫлыҡ шундай үҙенсәлектәр бар был әкиәттәрҙә. Яуыз ҡараҡтар ҡараңғы төпкөлдә йәшәй, ҡара кәсепкә ҡара төндә генә сыға. Ошо үҙенсәлектәре, мифологик ҡараштар, инаныуҙар буйынса, көн яҡтыһынан ҡурҡыусы ен, шайтан, бәрей кеүек зыянлы мифик заттарҙы (ен ҡараҡтары тип әйтеү ҙә бушҡа түгелдер), уларҙың ҡыҙ урлауҙары иһә шундай уҡ кәсеп менән шөғөлләнеүсе тылсымлы әкиәттәргә хас дейеүҙәрҙе, убырҙарҙы хәтерләтә. Кәсепкә сыҡҡанда, ҡараҡтарҙың йә мосафир («Ҡырҡ ҡараҡ менән ҡыҙ»), йә ҡыҙ («Ен ҡараҡтары»), йә баҙарсы («Хәтирә») булып кейенеүҙәре шул зыянлы мифик заттарҙың әүермәнлегенә (үҙ ҡиәфәттәрен үҙгәртә алыуҙарына) оҡшаш. Уларға сихырсы һыҙаттары ла хас. «Ҡыҙ менән ҡырҡ ҡараҡ» (АТ 955, 956 В; (60, оп. 218. – 353–369-сы б.) әкиәтендә ҡараҡтың йоҡлап ятҡан ҡыҙҙарҙың битен үле ҡул менән һыйпауы була – улар үлек кеүек йоҡлай. Татар (79, № 40), төрөк (80, № 52) әкиәттәрендә ошо уҡ маҡсатта улар ҡәбер тупрағын файҙалана. *Бындай миҫалдар, яуыз ҡараҡ образы – яуыз мифик заттарҙың образын* яңынан баһалау һөҙөмтәһе, тип әйтергә нигеҙ бирә, буғай. Аҙаҡ улар «Урман төпкөлдәрендәге» ирҙәр йортонда йәшәп, ирҙәр ҡорона инеү хоҡуғына имтихан тотоусылар (инициация йолаһы үтәүселәр) образы менән ассоциациялашыуы ихтимал. Сөнки В.Я. Пропптың әйтеүенсә, инциация йолаһына йәлеп итеүселәр (ир-ат ҡорона инергә әҙерләнеүселәр) өсөн ҡараҡлыҡ менән шөғөлләнеү мотлаҡ була. Етмәһә, улар күмәгенә бер ҡатын тотҡан (67, 104, 109-сы б.). Әкиәт ҡараҡтары ла ҡыҙҙарҙы шул маҡсат менән урлай. «Урланған ҡыҙ» (12, ед.

хр. 94, 182–183-сө б.), «Аҡ келәт» ише әкиәттәрҙә генә һәр ҡараҡ үҙенә айырым ҡатын йүнләй. Бындай миҫалдар иһә әле һүҙ барған әкиәттәрҙең тәүтормош ғаиләһе йәшәгән һәм ул тарҡала башлаған осорҙарҙағы ҡараштар менән бәйле булыуын тоҫмалларға мөмкинлек бирә. Хәйер, күмәк ирҙең уртаҡ бер ҡатын менән (йәки киреһенсә, бер ҡатындың бер юлы күмәк ир менән) никахта тороуы – ҡатын-ҡыҙ баш та, түш тә булған матриархат заманына хас күренеш. Был традиция XIX быуатта алеуттарҙа, эскимостарҙа, Һиндостандың төньяғында йәшәгән ҡәүемдәрҙә, уларға күрше Тибетта күҙәтелгән. Әйткәндәй, Тибет һәм уның күшеһе Камбоджа халҡы был йоланы әле лә күҙәтә. Төркөм никахы (групповой брак) фәндә, ғөмүмән, *полигамия* тип атала. Бер ирҙең бер нисә ҡатын менән никахта тороуы *полигиния* тигән аталыш алған. Бер ҡатындың бер юлы бер нисә ир менән никахҡа тороуын фәндә *полиандрия*[1] тип йөрөтәләр. Шундай ғаиләлә тыуған баланың атаһын нисек беләләр? Шулай тигән һорау тыуырға мөмкин. Полиандрия өсөн уның әһәмиәте юҡ. Сөнки уларҙа нәҫәл-нәсәб (шәжәрә), йәһүдтәрҙәге кеүек, әсә яғынан билдәләнә (Авторҙың 2001 йылда Трансгималай экспедицияһы ваҡытындағы кңҙәтеүҙәренән).

Традицион әкиәттең эске законсалығы буйынса, әгәр герой тыйылғанға ҡолаҡ һалмай икән, ул бермә-бер язаға тарый, ҡазалана. Әле һүҙ барған әкиәттәрҙә ҡыҙҙың ҡараҡтар ҡулына юлығыуының сәбәбе асыҡ ҡына әйтелмәй. Ҡараҡтарҙың хәбәрсеһе (разведчигы), ҡыҙ сығып киткән арала, өйгә инеп йәшеренә. Тимәк, ата-әсәһе, ҡунаҡҡа киткәндә, уға өйҙән сыҡмаҫҡа ҡушҡан. Хәйер, «Ен ҡараҡтары» әкиәтендә тыйыу мотивы аныҡ ҡына әйтелгән. Ҡараҡтар йортона ҡыҙ барып ҡайтҡас, ағаһы: «Ни эшләп барҙың?» – тип, уны ороша (18, 275). Әммә шуныһы мөһим: ҡыҙ тәүҙә, үҙенең һаҡһыҙлығы арҡаһында, бәләгә тарый яҙғас (йә тарығас), бик һаҡ эш итә башлай һәм шул уға ҡараҡтарҙы фашларға мөмкинлек бирә. «Ен ҡараҡтарын»да ҡараҡтарҙы ҡыҙ өйгә ылыҡтыра – ағаһы уларҙың килгән береһен ҡылыстан үткәреп тора. «Ҡырҡ ҡараҡ» тибындағы әкиәттәрҙә, ҡараҡтар тотҡононан ҡасып ҡайтып еткәс, ҡыҙ уларҙың башына үҙе етә. Дөрөҫ, «Хәтирә» әкиәтендәге ҡыйыу ҡыҙыҡай һымаҡ уҡ, бөтәһен дә ҡырып һалмаған сүрәттә лә, үсен ҡайтармай ҡалмай. Әммә шуны ла иҫтә тотоу кәрәк. Боронғо ырыу ҡоролошо дәүерендәге хәрби тәртип буйынса, ике яҡтың көстәре осрашҡас, еңеүсене билдәләү өсөн, уларҙың бөтәһенең дә дөмбәҫләшеүе шарт тип иҫәпләнмәгән. Тәүҙә ике яҡтың берәр батыры алышҡан. Ҡайһы яҡтың ҡашҡаһы (батыры) еңелә йә һәләк була, шул яҡ тотошлай еңелгән булып иҫәпләнгән. Шуның кеүек үк, әгәр ҡараҡ атаманы үлтерелә ҡалһа, уның иптәштәре үҙҙәрен еңелгән тип иҫәпләргә тейеш була. «Ҡырҡ ҡараҡ»,

---

[1] Поли (грекса – polys) – күп һанлы; aner – ырыу; andros – ир; gune – ҡатын; полиандрия – күп ирлелек; полигиния – күп ҡатынлылыҡ (Советский энциклопедический словарь. – М.: 1982. – С. 1023).

«Аҡ келәт» әкиәттәрендә беҙ, асылда, шундай ситуация менән осрашабыҙ. Ҡарактар күмәк («ҡырҡ» һүҙе лә әкиәттә, аныҡ иҫәптән бигерәк, «бик күп» тигән мәғәнәлә ҡулланыла). Ә ҡыҙ яңғыҙ. Тотҡонлоҡтан ҡотолғас, артынан килгән бер ҡараҡтың башына етеүе була – ҡалғандары килеп тормай («Ҡырҡ ҡараҡ»). Шуға ла ҡыҙҙың тәүәккәллеге, ҡыйыулығы айырыуса тәрән мәғәнә ала.

«Хәтирә» әкиәтенең героиняһы иһә ҡыйыулыҡ йәһәтенән башҡа әкиәттәрҙең героиняларынан байтаҡҡа юғарыраҡ тора. Сөнки, ни генә тимә, эҙәрләүсе ҡараҡтарҙы ул символик рәүештә генә еңмәй, ә атаманын да, ҡалған ҡараҡтарҙы ла үлтерә: тәүгеһен бысаҡтан үткәрә, тегеләрен, мискәлә йәшеренеп ултырғандарында, ҡайнар май менән ҡойондора.

Шуныһы ла бар. «Ҡырҡ ҡараҡ» тибындағы әкиәттәрҙә ҡыҙҙың күмәк ҡараҡ менән йөҙмә-йөҙ осрашыуҙан һаҡланыуы, әммә улар алдында теҙ сүгергә теләмәүе бер ни тиклем айҙа ҡыуышып йөрөгән ике зат тураһындағы мифты хәтерләтә (17, № 2). Ул миф кешенең, үҙенән ҡеүәтле ҡара көстәргә ҡаршы торорға хәле етмәһә лә, уларҙан еңелеп ҡалырға теләмәүен сағылдыра. Әйтелгәндәрҙән сығып, яуыз ҡарактар хаҡындағы әкиәттәрҙең башҡалары менән сағыштырғанда, хронологик яҡтан «Хәтирә» әкиәте байтаҡҡа йәшерәк тип баһаларға була.

### 5. Мәкер заттар тураһындағы новеллистик әкиәттәр

Әгәр новеллистик әкиәттәрҙе төркөмләү принцибына эҙмә-эҙлекле таянһаҡ, был фондтың әле беҙгә билдәле булған өлөшөндә генә лә тағы бер нисә төркөмдө айырып күрһәтергә булыр ине. Шуларҙың күҙгә иң ныҡ бәрелеп торғаны мәкерҙәр тураһындағы новеллистик әкиәттәр төркөмсәһелер. Уларҙа ла сюжет асылда аҡыллы кәңәш биреүсе зирәктәр хаҡындағы новеллистик әкиәттәр принцибына нигеҙләнә: берәү кәңәш бирә, башҡалар ул кәңәшкә һүҙмә-һүҙ эйәрә («Мәскәй», «Кеше һүҙе кеше үлтерә», АТ 1353; «Кеше менән шайтан», АТ 1577; «Ялғансы вәзир», *975***). Әммә әгәр зирәктәр тураһындағы новеллистик әкиәттәрҙә кәңәше – кәңәш алыусыны уңышҡа юлыҡтырыусы изге ниәтле кәңәш бирһә, һуңғы төркөмсәләгә кәңәш – мәкер кәңәше, уны тотоусыны уңайһыҙ хәлгә ҡуйыусы, хатта һәләкәткә юлыҡтырыусы кәңәш. Шуға ла был әкиәттәрҙе «зирәктәр тураһындағы новеллистик әкиәттәрҙең киреһе» тип нарыҡларға ла булыр ине.

Мәкерҙәр тураһындағы әкиәттәрҙә лә сиселеш көтмәгәнсә була, хатта кульминация моменты менән тап килә яҙа. Бындай саҡта мәкер ниәте менән башҡаларҙы һәләкәткә этәреүсе персонаж үҙ маҡсатына ана ирешәм, бына ирешәм тигән мәлгә килеп етә. Әммә тап ошо саҡта ул, ғәҙәттә, үҙ язаһын таба. «Ялғансы вәзир» ҙә баш вәзирҙе, йоғошло сир менән ауырый, тип, ханды ышандырыуға ирешкән икенсе вәзир, үтә сабырһыҙлығы арҡаһында, үҙ башына үҙе етә. Беренсе вәзир аша хан

ебәргән пакетты йәлләттәргә үҙе алып бара. Ә ундағы хатта пакетты килтереүсене язаларға ҡушылған була.

Әкиәттәрҙең ахырында яуыз зат, ғәҙәттә, бына шулай язаға тарттырыла, яҡшылыҡ еңә. Ә бына мәкерҙәр тураһындағы әкиәттәр үҙҙәре лә «мәкерерәк» һәм шунлыҡтан был законсылыҡҡа буйһоноп бөтмәй: ҡайһы берҙәре мәкерлектең тантанаһы менән тамамлана («Мәскәй», «Кеше һүҙе кеше үлтерә», «Кеше менән шайтан»).

* * *

Новеллистик әкиәттәрҙә, ғәҙәттә, зирәк зат, аҡыл эйәһе ваҡиғалар уртаһында ҡайнаусы түгел, ә кәңәш биреп, үҙе ситтә ҡалыусы персонаж төп герой була, сөнки сюжеттың бөтә үҫеш юлын ул билдәләй. Әйтелгәнде мәкерҙәр тураһындағы әкиәттәр ҙә раҫлай.

Герой тураһында һүҙ сыҡҡанда, тағы шуны ла әйтергә кәрәк. Новеллистик әкиәттәрҙәге берәй персонаж башта кире яҡтан нарыҡланып, эҙәрләүҙәргә дусар ителһә, ул, асылда, ыңғай персонаж булып сыға. Ошо әйтелгәндең киреһе лә булып ҡуя. Герой үҙ аллы һәм етеҙ эш итеүсән булғанда, сюжет та етеҙ үҫә. Әгәр ул башҡаларға ҡолаҡ һалып ҡына, кеше һүҙе буйынса ғына йөрөһә, үҙе лә ваҡиғалар ҡоло булып ҡала. Ә сюжеттың тармаҡланыуы быуындары, бөгөлдәре, герой алдына ҡуйылған бурыс, уға әйтелгән кәңәш (йә ҡотҡо һүҙ) һанына бәрәбәр булыусан. Дөйөм алғанда, новеллистик әкиәттәр әүҙем, әхлаҡи һәм интеллектуаль яҡтан камил шәхесте идеаллаштыра, шуның кимәленә етергә саҡыра.

***Һорауҙар һәм эш***

1. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең тылсымлы әкиәттәрҙән төп айырмалары.
2. Новеллалыҡ билдәләре ниҙән ғибәрәт?
3. Новеллиститик әкиәттәрҙең эске төркөмләнеше.
4. Новеллистик әкиәттәрҙә зирәклекте идеаллаштырыу алымдарын әйтегеҙ, зирәктәр образының асылышын аңлатығыҙ.
5. Новеллистик әкиәттәрҙә аҡыллы (зирәк) ир һәм аҡыллы ҡыҙ, аҡыллы ҡатын, үҙһүҙле ҡыҙ һәм үҙһүҙле ҡатын образдары нисек асылған?
6. Мөхәббәт һәм ғаиләгә тоғролоҡ проблемаһы новеллистик әкиәттә нисек хәл ителә? Ошо йөмләнән бындай әкиәттәрҙе тылсымлы әкиәттәр менән сағыштырығыҙ. Ошо мәсьәләләрҙең актуаллеген билдәләп, әңгәмә ҡороғоҙ (диспут үткәрегеҙ).

# X БҮЛЕК
# ЙОМАҠ ӘКИӘТТӘР МЕНӘН ҒИБРӘТЛЕ ӘКИӘТТӘР

Әкиәттәрҙең һәр жанры ла тәрбиәүи әһәмиәткә эйә. Иллә-мәгәр шулар араһында ошондай маҡсатҡа туранан-тура тәғәйен ике әкиәт жанры бар. Шуға ла элек-электән халыҡ педагогикаһында уларҙың баҙары ҙур булған. Был ике жанрҙы әкиәт белгестәре *йомаҡ-әкиәттәр* һәм *ғибрәтле әкиәттәр* тип йөрөтә.

Йомаҡ-әкиәттәрҙе – зирәклек күнекмәһе яһауға, ғибрәтле әкиәтттәр иһә сәләмәт әхлаҡи-этик сифаттар тәрбиләүгә хеҙмәт иткән. Шуға ла, уларҙы, ғәҙәттә, бала-сағаға тәғәйен әкиәттәр тип иҫәпләгәндәр. Был яҡтан уларҙың тәүгеһен – тулыһынса, икенсеһен, шартлыраҡ булһа ла[1], балалар фольклоры бүлегенә индерергә лә була. Әммә уларҙың икеһенең дә ҡарһүҙ икәнен, тәүгеләренең уй йомоу, тел төбө менән әйтеү һәләтенә эйә булыуын, икенселәренең тематикаһы, проблематикаһы, тамамланышында көтөлмәгәнлек эффекты һүрелеүен иҫәпкә алмағанда, сюжет ҡоролошо яғынан новеллистик әкиәттәргә яҡын тороуын иҫәпкә алып, уларҙы махсус рәүештә ҡарһүҙгә бағышланған был китапта әкиәттәр рәтендә, анығын әйткәндә, новеллистик әкиәттәр менән йәнәш ҡарау маҡсатҡа ярашлы тип табыл

## 1. Йомаҡ-әкиәттәр

Ғалимдарҙың фекеренсә, фольклор синкретик хәлдә булған замандарҙа әкиәттәрҙе һөйләгәндә, пантомима, музыка элементтары ла ҡулланылған, йомаҡтар өйөлгән. Йомаҡтар, мәҫәлән, әкиәт һөйләгәндә әле лә йыш ҡулланыла. Улар, ғәҙәттә, әкиәт сюжетының «йә эпизоды, йәки хатта бөтә ваҡиғаға йүнәлеш биреүсе үҙәк элементы сифатында» килтереләләр (108, 221). Тик ундай әкиәттәрҙең күптәрендә йомаҡҡа тыңлаусынан яуап таптырыу мотлаҡ булмай, һөйләүсе үҙе яуап бирә[2]. Башҡорт фольклорында ошондай принципҡа ҡоролған һәм яуап эҙләүҙе тыңлаусыға ҡалдырған әкиәттәр ҙә бар.

Йомаҡ-әкиәттәрҙә лә уйын элементтары ҡулланырға мөмкин. Ләкин, уйынға ҡоролған ымһындырыҡтарҙан айырмалы рәүештә, уларҙа сюжет бөтөн була («Бүләк», «Кем кейәү булыр», «Ялҡау менән шайтан»).

Йомаҡ-әкиәттәр тыңлаусыларҙың иғтибарын сарлауға, уларҙың логик фекерләүен, зирәклеген үҫтереүгә иҫәп тотоп ижад ителгән. Уларҙың ҙур тәрбиәүи әһәмиәте шуның менән аңлатыла. «Ялҡау малай менән шайтан» ишеләрендә, мәҫәлән, ялҡаулығы арҡаһында, шайтандан

---

[1] Ни өсөн шартлыраҡ булһа ла? Сөнки тематикаһы иңләгән мөхиттең киңлеге, күтәргән проблемаларының муллығы һәм етдилеге, персонаждары араһында күптән бәлиғ булыусыларыҙың күплеге ғибрәтле әкиәттәрҙең ололар аудиторияһына ла тәғәйен булыуы хаҡында һөйләй.

[2] Мәшһүр «Тутыйнамәлә» былдай әкиәттәрҙең һөйләнеү рәүеше бик һәйбәт бирелгән. Ҡарағыҙ: Шукасаптати: Семьдесят рассказов попугая. М.: Изд-во Восточной литературы, 1960.

отолоусынан фәһем алырға саҡырыу ярылып ята. Ошондайыраҡ үҙенсәлектәре был төркөмдө ғибрәтле әкиәттәргә яҡынайта.

2. Ғибрәтле әкиәттәр

Ғибрәтлелек мотивы ҡарһүҙҙең әкиәт тигән бөтә жанрҙарына ла хас. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең әле һүҙ барасаҡ төркөмөнә ҡарағандарында иһә ул үҙәк урынды биләй һәм, асылда, уларҙы башҡа әкиәттәрҙән айырыусы форма билдәһе, жанр төрө (жанровая разновидность) билдәһе, вазифаһын аткара. Ғибрәтле әкиәттәрҙе, ғәҙәттә, телмәр контексында дидактик фекерҙе раҫлау, иллюстрациялау, өгөт-нәсихәт биреү маҡсатында һөйләйҙәр. Ошондай тәғәйенләнеше арҡаһында улар мәҡәл (русса әйткәндә, пословицаны) һәм ярым мәҡәлдәрҙе (тапкыр һүҙҙәрҙе, русса әйткәндә, поговорканы) хәтерләтеп ҡуя. Быңдай әкиәттәргә сюжеттан тыш үҙенсәлекле ҡушымталар хас. Улар йә башта уҡ, йә урта тирәлә, йә иң аҙаҡ мәҡәл йә башҡа төрлө дидактик һығымта рәүешендә әйтелеүсән. Башта килгәндә, әкиәттең йөкмәткеһе шуға асыклыҡ индереүсе вазифаһын ғына аткара (“Юлдыбай һунарсы”), аҙаҡ әйтелһә, бөтә бәйән ителгәнде йомғаҡлай (Маҡтансыҡ һунарсы”, “Вәзирҙең батшаны хур иткәне”), уртала иһә әкиәттең һөйләп ишеттерелгән өлөшөн логик яҡтан төйнәп ҡуйыуға булыша (“Өс ауыҙ һүҙ”). Был алым, берҙән, әкиәттең ғибрәтлелек пафосын бермә-бер көсәйтә, икенсенән, уның сюжетына композицион үҙгәлек бирә. Тасуирланған ваҡиғалар әкиәтте әкиәт итеүҙә ни тиклем мөһим роль уйнамаһын, улар (ваҡиғалар) шул фекер төйөнләнешен аңлатыу, уға иллюстрация өсөн генә һөйләнгән кеүек тәьҫир ҡалдыра һәм мәҡәл, ярым мәҡәл тарихы һымаҡ ҡабул ителә..

Ғибрәтлелек башланғысының роле бары тик пафос булыу менән генә сикләнмәй. Ғибрәтлелеккә баҫым яһау әкиәттәрҙең тематикаһын, герой тибын, сюжет үҙенсәлектәрен дә билдәләй.

Ғибрәтле әкиәттәр тематик яҡтан күп төрлө. Шулар араһынан һөнәр һәм һөнәрһеҙлек, уңғанлыҡ һәм ялҡаулыҡ тураһындағылары айырыуса популяр. «Алтын тамсы» әкиәтендә бай малайы хеҙмәтте, мал ҡәҙерен баһалап өйрәнмәгән кеше итеп һүрәтләнә. Ярлыланғас ҡына, хеҙмәттең ләззәтен табырға өйрәнә. Әкиәт шулай хеҙмәт кешеһенең генә һәнәргә һәләтле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. «Ярлы малайы менән бай малайы» (60, 65/3. – 188-се б.) әкиәтендә был идея йәштән һәр төрлө эшкә күнеккән ярлы малайын, һөнәрһеҙ бай улына ҡаршы ҡуйыу, «Мәүлихафиз»да ярлы егетенең, үлән үҫмәй ҡаҡ ятыр ташлы түбәне гөл баҡсаһы итеүе аша раҫлана.

Совет осоронда рәсми идеологияға ярашлы синфи бүленеш мәсьәләһе үтә бер яҡлы баһаланды: ярлы икән – һәйбәт, байғура йә түрәғара икән – насар. Шул уҡ ваҡытта ололарҙың: “Революцияға тиклем кем ялҡау – шул ярлы булды,” – тигәненн ишетергә була ине. Шуның кеүек ғибрәтле әкиәттәр ҙә геройҙы һәм уның эшмәкәрлеген,

социаль сығышы яғынан сығып ҡына, баһалау мәсьәләһенә үтә бер яҡлы килеүҙе өнәп бөтмәй. Һәр хәлдә, «ярлы» тигән менән «һөнәрле», «эшһөйәр», «уңған» тигән төшөнсәләрҙе синоним итеп ҡарамай. «Ялҡау Аусаф» (102, 252–253), «Ялҡау малай» ише әкиәттәрҙә ялҡауҙар, һөнәрһеҙҙәр сифатында ябай халыҡ вәкилдәре кәүҙәләнә. Ярлылыҡ өҫтөнә ялҡаулыҡ һәм һөнәрһеҙлек арҡаһында, улар икеләтә ыҙа сигә. Бындай әкиәттәрҙә ялҡаулыҡ менән һөнәрһеҙлек, ярлылыҡ кеүек үк, социаль фажиғә мәғәнәһенә эйә һәм әхлаҡи камиллыҡтан йыраҡ торған сифаттар кеүек тә баһалана.

Әхлаҡ проблемаһы байтаҡ ҡына ғибрәтле әкиәттәрҙә үҙәк урынды биләй. «Юлдыбай һунарсы», «Батша менән вәзир» (60, 47/58. – 150-се б.) әкиәттәре халыҡтың дуҫлыҡ, тоғролоҡ кеүек сифаттарҙы юғары баһалауын сағылдыра. Тәүгеһендә ул, берәү ауыр хәлгә тарығанда, уны ташлап ҡасҡан юлдаштары йөҙөндә тоғролоҡҡа, берҙәмлеккә хыянат, икенсеһендә дәүләт ҡаҙнаһын үҙләштереү фашлана. Шул фашлау аша әкиәт тоғролоҡҡа өндәй, намыҫты бысратмаҫҡа саҡыра.

Әгәр әле һүҙ барған әкиәттәрҙә тоғролоҡ проблемаһы йәмғиәт кимәлендә күтәрелһә, «Әсә йөрәге», «Ҡарт әсә», «Бер әсәнең зарыҡҡаны», «Ир менән ҡатын низағы» әкиәттәрендә ул ғаилә-көнкүреш планында хәл ителә. Уларҙа ситуациялар драматик, хатта трагик төҫ ала. Шул арҡала ғибрәтлелек мотивы айырыуса көслө бирелә.

Ғибрәтле әкиәттәрҙә халыҡтың яҙмышҡа, уны юрап, алдағынн көнәлек белеү, алғыш, ҡарғыш кеүек теләктәр менән уға үҙең теләгәнсә йоғонто яһау мөмкинлегенә инаныуҙары ла сағыла («Ризыҡ», «Яҙмыш» (60,. 21/6. – 211-се б.; оп. 65/7. – 61–62-се б,), «Дәрүиш менән мосафир»). Шуныһы характерлы, хөрәфәттәргә ысынбарлыҡта (тормошта) инаныуҙан айырмалы рәүештә, бындай ғибрәтле әкиәттәргә, ғөмүмән алғанда, төшөнкөлөк тойғоһо ят.

Характер булып өлгөрөү йәһәтенән ғибрәтле әкиәттәрҙең геройҙары төрлөсә бирелә. «Мәүлихафиз», «Эш кешеһе» кеүек әкиәттәрҙең геройҙары, традицион әкиәттәрҙәгесә, баштан уҡ әҙер характер, формалашҡан шәхес булып күҙ алдына баҫтырыла, уңғанлыҡ, һөнәрлелек, тырышлыҡ өлгөһө итеп күрһәтелә.

Әкиәт ғилемендә, бындай фекер ҡалыплашҡан: йәнәһе, бөтә әкиәттәрҙең дә геройҙары статик хәлдә һүрәтләнә, уларҙың образы сюжеттағы ролдәренә ярашлы хәрәкәттә генә асыла[1]. «Ялҡау малай»,

[1] Мәҫәлән, Т.В. Зуева менән Б.П. Кирдан был хаҡта бына ни ти: “Они (т.е. персонажи сказки. – Ә.С.) внутренне статичны, что может подчеркиваться повторяющимся прозвищем, портретом, изображением жилища и проч. Однако внутренняя неизменяемость образов сочетается с глубоко им присущим внешним динамизмом. Сказочные персонажи (вернее, образы сказочных персонажей. – Ә.С.) раскрываются прежде всего в действии, и это – главный прием их изображения. Они целиком и полностью зависят от своей сюжетной роли (т.е. роли персонажей, в том числе главного героя, зависят от той роли, которая отводится им в сюжете. – Ә.С.) (91, 135).

«Алтын тамсы» ише ғибрәтле әкиәттәрҙә иһә геройҙың образы, шул фекер менән бәхәсләшкәндәй, үҫеш эволюцияһында бирелә. Улар, ситтән ыңғай йоғонто кисереү һөҙөмтәһендә, ялҡаулыҡтан арыналар, уңған кеше булып етешәләр. Был фекерҙе “Ике ялҡау”, “Ярлы малайы менән бай малайы”, “Юлбаҫарҙар” ише әкиәттәр ҙә ҡеүәтләй. Тик киреһенсә. Хикмәт шунда: бындай әкиәттәрҙең геройына үҙ мәлендә ыңғай йоғонто яһаусы булмай. Мәле үткәс, ундай йоғонто яһарға маташыуы ыңғай һөҙөмтә бирмәй.

Шулай итеп, ғибрәтле әкиәттәрҙең был төркөмө ғаиләлә балаға дөрөҫ тәрбиә биреү проблемаһын алға ҡуя, уны ыңғай хәл итеү мөмкинлегенә ышаныс тыуҙырыуға хеҙмәт итә.

Ғибрәтле әкиәттәрҙә тылсым элементтары ла файҙаланылырға мөмкин. Ләкин, шунан сығып ҡына, уларҙы тылсымлы әкиәт тип һанап булмай. Сөнки тылсым менән мөғжизәлек, беренсенән, геройҙың физик мөмкинлегенә ниндәйҙер ҡеүәт өҫтәмәй, төп конфликтты хәл итеү сараһы итеп бирелмәй; икенсенән, әкиәттең структураһына ла ул йоғонто яһамай. Бында ул бары пафос тэффекты тыуҙырыу сараһы рәүешендә генә ҡулланыла: ғибрәтлелекте, өгөт-нәсихәтте көсәйтеүгә генә булыша. «Әсә йөрәге» әкиәте – шуға баҙыҡ миҫал. Һөйгәненең талабы буйынса егет әсәһенең йөрәген йолҡоп ала ла, уны усында тотоп барғанында, абына. Шул саҡ үлгән әсәнең йөрәге телгә килеп (мөғжизә!), улының хәлен һораша. Быны беҙ бары әсә мөхәббәтенең сикһеҙ икәнен асыуға хеҙмәт итеүсе гиперболаик шаштырыу алымы тип кенә ҡабул итәбеҙ.

Шулай итеп, ғибрәтле әкиәттәр, донъяуи ҡараштарға таянғанда ла, инаныстарҙан сығып фекер йөрөткәндә лә, кешеләрҙә сәләмәт әхлаҡи сифаттар тәрбиәләү маҡсатын алға ҡуя, уларға хөрмәт менән ҡарарға саҡыра. Ғибрәтле әкиәттәрҙәге аҡыл эйәләре «оҫта халыҡ педагогы» ролен атҡара (105, 348) .

Өгөт-нәсихәт традицияһы тәүтормоштағы синкретик ижадта уҡ тыуа. Ләкин уның әкиәттәр төркөмөнөң жанр йөҙөн билдәләрлек үҙәк мотивҡа әүерелеүе һуңғыраҡ дәүерҙәргә ҡарай, һәр хәлдә, әлеге көндә лә тәүтормош билдәләрен һаҡлаған халыҡтарҙа ғибрәтле әкиәт осрамай (81, 71 – 74; 115; 48, 180 – 182; 106, 234).

***Һорауҙар һәм эш***

1. Ни өсөн әкиәттәрҙең айырым жанрҙарын йомаҡ-әкиәттәр йә ғибрәтле әкиәттәр тип айыралар?

2. Йомаҡ-әкиәттәр менән ғибрәтле әкиәттәрҙә күтәрелгән проблемалар, уларҙың художестволы хәл ителеше.

3. Ғибрәтле әкиәттәрҙә бала менән ата-әсә, ир менән ҡатын, шәхес һәм йәмғиәт араһындағы мөнәсәбәттәрҙең мәғәнәүи яҡтыртылышы, (трактовкаланышы). Ошо хаҡта әңгәмә ҡороғоҙ.

4. Ғибрәтле әкиәттәрҙә ғаиләлә бала тәрбиәләү проблемаһының ҡуйылышы.

5. Шәхес тәрбиәләүҙә хеҙмәттең әһәмиәте мәсьәләһе әкиәттәрҙә нисегерәк ҡуйыла?

6. Этнопедагогика күҙлегенән йомаҡ-әкиәттәр менән ғибрәтле әкиәттәрҙең тәрбиәүи һәм танып белеү әһәмиәтен билдәләгеҙ.

# XI БҮЛЕК
# САТИРИК ҺӘМ ЮМОРИСТИК ӘКИӘТТӘР

Сатира һәм юмор әкиәттәрҙең бар жанрына ла, жанр күренешенә лә (жанровая разновидносҡа ла) ят түгел. Ләкин хайуандар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәрҙә шулай уҡ тормош-көнкүреш әкиәттәренең новеллистик характерҙағыларында һәм ғибрәтлеләрендә уларҙың булыу-булмауы тәүшарт иҫәпләнмәй. Уның ҡарауы тормош-көнкүреш әкиәттәренең бер жанр күренешен ундай пафостан башҡа күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Уларҙа сатира һәм юмор хатта форманы хасил итеүсе тәүшарт хеҙмәтен дә үтәй. Шундайҙарҙы фольклор ғилемендә сатирик һәм юмористик әкиәттәр тип йөрөтәләр ҙә инде.

Сатира һәр саҡ социаль йөкмәткеле була. Шуғалыр ҙа инде, тикшеренеүселәр үҙҙәренең синфи симпатияларынан сығып, бер үк көнкүреш әкиәттәрен, көләмәстәрҙе баһалағанда, ике сиккә ташланыр булды. XIX быуат ғалимдары А.Пельтцер менән Н.Сумцов, мәҫәлән, был жанрҙарҙың сатираға эйә булыуын асыҡтан-асыҡ инҡар итте. Совет осоронда тикшеренеү алып барған әкиәт белгестәренең күбеһе сатирик әкиәт, сатирик көләмәс барын таный. Әммә улар хаҡында һүҙ алып барғанда, нигеҙҙә, бай ҡатламдарға, поптарға, батшаға, хатта кулакка ҡаршы йүнәлтелгән сатирик әкиәттәр төркөмдәрен һәм Яҙмыш, Бәлә, Ҡайғы тураһындағы сюжеттарҙы ғына айырып күрһәтер булдылар (Г.П. Лупанова, 77; Е.Ф. Тарасенкова, 78; Н.А. Каргаполов, 45; М.И. Афзалов, 81а). Шуға ла бындай тикшеренеүселәрҙе социологизмда ғәйепләүе менән Ю.И. Юдин хаҡлы ине. Әммә ошо йәһәттән сама белмәүе уны тормош-көнкүреш әкиәттәренең сатираға хаҡлы булыуын инҡар итеүгә килтерҙе. Ә үҙе, нигеҙҙә, оппоненттары файҙаланған материал менән эш итте (90).

Сатира ла, юмор ҙа алдынғы ҡараштарҙы, гуманистик башланғыстарҙы, юғары эстетик идеялдарҙы раҫлай. Әгәр юмористик әкиәттәр ошо кимәлдән сығып, дөйөм кешелеккә хас һәм ниәте, тәғәйенләнеше, тәбиғәте менән ыңғай булған күренештәрҙе лә, бары төрлө аңлашылмаусылыҡтар арҡаһында, уларҙа ла һаҡланып ҡалыусан кәмселектәрҙән көлөүсе әкиәттәрҙе лә үҙ эсенә алһа, сатирик әкиәттәр йәмғиәт өсөн үтә зыянлы күренештәрҙе бөтөнләй инҡар итә, һис булмағанда, уларҙы тамырынан үҙгәртеү кәрәклеген яҡлай. Уларҙың социаль йөкмәткеле булыуы шунан килә лә инде. Тимәк, сатира өсөн тик синфилыҡ, батшаға, байҙарға, олигархтарға, дин әһелдәренә ҡаршы йүнәлтелгән, тип бүлгеләү шарт түгел. Ошо үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алыптыр инде, ҡайһы бер тикшеренеүселәр юмористик һәм сатирик әкиәттәрҙе ике башҡа ҡарарға тырыша. Бындай бүлгеләүгә мохтажлыҡ юҡ. Сөнки бер үк тормош-көнкүреш әкиәтендә сатира ла, юмор ҙа

булырға, бер үк сюжетка ҡоролған әкиәттең варианттарының бәғзеләре юмористик, бәғзеләре сатирик планда интерпретацияланырға ла мөмкин.

Төп герой һәм сюжет тибын, йөкмәтке үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, башҡорт халҡының сатирик һәм юмористик әкиәттәрен: 1) хәйләкәрҙәр, 2) тоттормаҫ, тиктормаҫ һәм оттормаҫ етеҙ бурҙар, 3) иҫәрҙәр, 4) серле заттар һәм хәйләкәрҙәр хаҡындағы әкиәттәр тигән төркөмдәргә айырыу ҡулай.

*Сатирик һәм юмористик әкиәттәр, көлдөрөктәр* өсөн мөһим бер үҙенсәлек уртаҡ. Ул – көлкөлөлөк. Ләкин был әкиәттәр көлдөрөү өсөн көлдөрөүҙе түгел, ә халыҡтың иң яҡты эстетик идеалдары кимәленән сығып көлдөрөүҙе, көлкө аша тормоштағы ғәҙелһеҙлектәрҙе һәм башҡа килбәтһеҙлектәрҙе – йәшәргә йәбешеп-тырмашып ятҡан, ләкин, ғәмәлдә, йәшәргә хаҡы булмаған күренештәрҙе фашлауҙы күҙ уңында тоталар. Хәйер, был үҙенсәлек сатирик һәм юмористик жанрҙарҙың бөтәһенә лә хас. Шуға күрә әле әйтелгәндәрҙе мәшһүр аҡыл эйәһе Карл Маркстың комедия хаҡындағы һүҙҙәре менән йөпләргә мөмкин. «Тормоштоң иҫкергән формаһын ҡәбергә илткән саҡта, тарих еренә еткереп эш итә һәм байтаҡ фазистарҙы үтә. Бөтә донъя-тарихи форманың һуңғы фазисы – уның *комедияһы.* Бер тапҡыр трагик формала – Эсхилдың «Ҡаҙаҡланған Прометейында», үлемесле йәрәхәтләнгән Греция илаһтарына тағы бер мәртәбә комик формала – Лукиандың «Әңгәмәләрендә» – үлергә тура килгән. Тарихтың барышы ни өсөн шулай? Был кешелек үҙенең үткәндәре менән *күңелле* айырылышыуы өсөн кәрәк булған» (113, 417).

Сатира һәм юмор менән һуғарылған әкиәттәр, ниндәй генә ауырлыҡтар килгәндә лә, халыҡтың төшөнкөлөккә бирелмәҫ рухын, оптимизмын сағылдыра. Улар шулай уҡ, ҡыуаныстар кисергәндә лә, халыҡтың баҫалҡы булып ҡала белеүен дә, заман саңы баҫмаҫ зирәк аҡылын да кәүҙәләндерә.

Әкиәттәрҙең башҡа жанрҙары һәм жанр күренештәре (руссалап әйткәндә, жанровые разновидности) кеүек үк, әле һүҙ барғандары ла – бик боронғо мираҫ. Әммә улар бөгөн дә популяр. Хикмәт ниҙә? Хикмәт шунда, әкиәт халыҡтың үткән тормошо менән таныштыра, быуаттар һынауы үткән аҡылын еткерә. Тағы шул: элекке замандар тураһында бәян ҡылһа ла, беҙгә бөгөнгө кәмселектәрҙе лә ҡайыҙлағандай тойола. Сөнки йөкмәткеһе үҙгәрмәгән сүрәттә лә, “сатираның адресы тарихи яҡтан хәрәкәтсән”(103, 27).

### 1. Хәйләкәрҙәр тураһындағы әкиәттәр

Был тематик төркөм эсендә Алдар тураһындағы әкиәттәр башҡаларынан ныҡ айырылып тора. Сюжет нисек кенә төрләнмәһен, Алдар һәр саҡ отолмаҫ, тотолмаҫ, бер кемде лә ҡотайтмаҫ,

дошмандарын ҡотолтмаҫ хәйлә оҫтаһы булып сығыш яһай. Алдар тигән яманаты сыҡһа ла, ул бер кемде лә тота килеп алдап бармай. Кемдер, хатта ки батша йә хан, данлыҡлы алдаҡсы икәнен белә күрә, мине лә алдай алырмы икән, тип, һынамаҡ өсөн уны үҙе эҙләп килә. Шуның менән башҡаларҙы отоу, төп башына ултыртыу үҙенең төп “һөнәре” икәнен фашлай. Әммә “алдашыу бәйгеһенә” инергә лә өлгөрмәҫтән, алданып, хур була. Уҙактарын, эҙәрләүселәрен ялған мөғжизә (йомош-юлға йөрөүсе өйрәтелгән ҡуян, тип ҡәҙимге ҡуян), тылсым (тыңлауһыҙ ҡатынды тыңлата торған бысаҡ тип ҡәҙимге бысаҡ; үлгәнде терелтә торған ҡамсы тип ҡәҙимге ҡамсы) менән албырғата. Етмәһә, үҙе менән алдашыуҙа ярышмаҡ булған шул асыҡ ауыҙҙарға ялған мөғжизә сараларын ҡиммәт хаҡҡа һатыуға өлгәшә. Үҙен эҙәрләп, өйөнә үк килгәндәрҙе төп башына ултыртыуҙа уға, ассистент роленә инеп, алдан иренән кәрәкле “инструкция” алған ҡатыны ярҙамлаша (“Алдарҙың батша кейәүе булғаны”, АТ 1542 II + 1530 +654 B + өлөшләтә 1528: “Хан менән Алдар”, АТ 1542 II + 1530 + 1539).

Алдар циклына «Ике шәкерттең ураҙа һатҡаны», «Байбисәне отҡан һалдат», «Аллаҡай» ише әкиәттәр яҡын тора. Уларҙың ҡаһармандары ла хәйлә һәм алдашыу сәнғәте өлкәһендә Алдарҙан һис тә ҡалышмай. Үҙҙәренең дошмандарын эҙәрләгәндә, ул файҙаланған төрлө-төрлө хәйлә алымдарына таяна: йә ул үҙенең кемлеген йәшереп, икенсе кеше роленә инә, йә дошмандарының ҡылығын, һүҙен уларҙың үҙҙәренә ҡаршы файҙалана, йә юрый йүләргә һалышып, әйткәнде һүҙмә-һүҙ башҡара, йә эш рәтен белмәгән кеше булып, бөтәһен дә киреһенсә эшләй, йә үҙен эҙәрләүселәрҙең юҡ-барға, моғжизәләргә ышаныуын иҫәпкә алып, эш итә. Хәйлә сәнғәтенең бындай алымдарын ҡулланыуға бигерәк тә ялсы, хеҙмәтсе ролен атҡарыусы геройҙар йә үҙ туғандары тарафынан эҙәрләнеүселәр әүәҫ. «Ялсының бай булғаны, байыҡкас, хан булғаны», «Аҡыллы егет менән ҡомһоҙ байҙар», «Туғыҙ Туңҡылдак менән бер Мыймылдаҡ» ише әкиәттәрҙә, мәҫәлән, герой үҙенә ҡаршы көстө кәүҙәләндереүселәрҙең һыу аҫтында донъя барына инаныуҙарын файҙалана.

Хәйләкәрҙәр йөҙөндә хеҙмәтсән халыҡ вәкиле сығыш яһай. Уның роле аҡыл, зиһен камиллығы йәһәтенән ябай халыҡтың юғары ҡатламдарҙан өҫтөн тороуын раҫлауға ҡайтып ҡала. раҫлана. Ошо яҡтан Алдар образы айырыуса әһәмиәтле. «Аллаҡай», «Аҡыллы егет менән ҡомһоҙ байҙар», «Етем Ҡалмаҡҡол» ише әкиәттәрҙең геройҙары иһә шул өҫтөнлөктө раҫлап ҡына ҡалмай, уны әүҙем көрәш ҡоралы итеп файҙаланып, социаль ғәҙелһеҙлекте бөтөнләй юҡҡа сығарыу мөмкинлегенә ышаныуҙы кәүҙәләндерә. Ысынбарлыҡта улай булмаһа ла, халыҡ ошондай әкиәттәре менән бөтөн ҡатламдарҙан һәм, ғөмүмән, үҙенең сәләмәт идеалы менән һыйышмаған социаль көстәрҙән үсен алырға тырышҡан. Үҙендә булмағанды барға иҫәпләп, өлгәшмәгәнен

өлгәшкәнгә һанап, шул кәмселектәрҙе күңелдән булһа ла компенсациялай. Шул үҙе үк унда рухи ҡәнәғәтләнеү тойғоһо, эстетик кинәнес уятҡан.

Хәйләкәр үҙ туғандарын да («Туғыҙ Туңҡылдаҡ менән бер Мыймылдаҡ»), хеҙмәтселәрҙе лә («Алдар күҫә»), бурҙарҙы ла («Алдарҙың байҙы алдағаны»), йәғни синфи яҡтан үҙенә яҡындарҙы ла аяп тормай. Быны нисек аңлатырға? Уға хәйләкәрҙең хәйләкәре Алдарҙың: «Аҡыллы кешене, изгелекле бәндәне алдағаным юҡ. Аңралар, уҫал уйлы кешеләр алдана икән, унан ни зыян?» – тип әйткәне менән яуап бирергә лә була (“Алдар менән Ямар”, 19, 276: АТ 1920). Ҡыҫҡаһы, хәйләкәрҙәр тураһындағы әкиәттәр социаль ғәҙеллекте раҫлап ҡына ҡалмай, кешелек йәмғиәтендәге һәр төрлө кәмселектәрҙе (аңралыҡты, оңҡотлоҡто, мәкерлекте, хөрәфәттәргә ышаныуҙы һ. б.) фашлай. Шуға күрә лә, ҡайһы бер тикшеренеүселәрҙең, айырыуса тормош-көнкүреш әкиәттәре составында Иван Грозный, Петр I йә башҡа тарихи шәхестәр тураһында, дингә (антирелигиозный, антипоповский), кулактарға ҡаршы көрәште (антикулацкий) сағылдырған сюжеттар булыуын хәйләкәрҙе синфи аңы үҫешкән хеҙмәтсәндәр вәкиле, уның антиподтарын, антагонистарын иһә иҫәр заттар тип иҫәпләүе менән килешеп булмай. Әкиәт хәйләкәренең дошмандары, күпселектә үҙҙәре лә хәйләкәр, хатта мәкер заттар. Шуға күрә лә герой, асылда *“хәйләгә – хәйлә” принцибы* менән эш итә. Бында бер үк сюжет тибының бер саҡта ла бәйләнешкә инмәгән ер аяғы-ер башында йәшәгән төрлө халыҡтарға ла мәғлүм булыуын, әкиәт өсөн геройҙың ниндәй милләт, ниндәй синыф, ниндәй һөнәр эйәһе булыуы түгел, ә уның мәғлүм типты кәүҙәләнднреүе мөһим икәнен иҫкә төшөрөү ҙә етә.

## 2. Етеҙ бурҙар тураһындағы әкиәтттәр

Етеҙ бурҙар күп яҡтан тәүге төркөмсәләге хәйләкәрҙәрҙе хәтерләтә. Айырма шунда ғына: әгәр хәйләкәрҙәр «йөй ҡалдырмай» алдай белһә, былары «эҙ ҡалдырмай» урлашыусы, тотолмаҫ һәм отолмаҫ геройҙар итеп һүрәтләнә.

Урлашыуҙы төп кәсеп тип белһәләр ҙә, ҡайһы бер әкиәттәрҙә шундай уҡ кәсеп менән шөғөлләнеүсе рәүешендә күрһәтелгән юлбаҫар-ҡараҡтарҙан (18, №№ 97–101,) улар ҡырҡа айырыла. Ундай ҡараҡтар күмәкләшеп, бер шайка булып сығыш яһай, ә етеҙ бур, ғәҙәттә, бер үҙе генә эш ҡыла. Юлдаштары була ҡалһа, улары, асылда, төп герой образының тағы ла баҙығыраҡ итеп һүрәтләнеүенә генә булыша. Әгәр юлбаҫар-ҡараҡтар байына-ярлыһына ҡарап тормаһалар, хатта канниабализмға (кеше ашауға) тиклем барып етһәләр («Ен ҡараҡтары», «Ҡырҡ ҡараҡ», 18, № 98, 99) һәм үҙҙәренең ҡыланыштары менән йыртҡыстарҙы, кешегә тик зыян итеүҙе генә маҡсат иткән яуыз мифик заттарҙы хәтерләтһәләр, «етеҙ бурҙар» легенда, риүәйәттәрҙә

халыҡ тарафынан үҙ итеп, яратып һүрәтләнеүсе игелекле ҡаҫҡын-ҡараҡтар һымаҡ уҡ, байҙарҙың ғына мал-мөлкәтенә ҡул һала. Асыҡ ауыҙ синыфташтарын комик ситуацияға юлыҡтырған хәлдә лә, уларҙың милкенә оронмай. Ә аяуһыҙлыҡтары үҙ дошманын көлкөгә ҡалдырып мәсхәрәләүҙән, милкенән мәхрүм итеүҙән үтмәй.

Етеҙ бурҙар хаҡындағы әкиәттәр араһында айырыуса АТ 1525–1525 А («Ҡасим бур», «Хажи ҡарт балалары») һәм АТ 950 («Батша менән бур», «Ике батшаның ҡыҙын алған бур») сюжет типтарына ҡоролған әкиәттәр киң таралған. Уларҙың геройҙары бурлыҡ сифаттарын йәштән үк күрһәтә башлай. Әкиәттәрҙең ике тибында ла етеҙ бур, сослоғо арҡаһында, ахырҙа йә бай, йә вәзир, йә батша кейәүе (тимәк, киләсәктә батша) булыуға өлгәшә. Ләкин ул һөҙөмтәгә өлгәшеү юлдары буйынса ике сюжет тибының геройҙары бер-береһенән ныҡ ҡына айырыла.

*Беренсе типтың геройы* ата-әсәһенең ихтыярынан тыш бурлыҡҡа тотоноп китһә, *икенсеһенеке,* киреһенсә, уларҙың ризалығы, хатта фатихаһы менән урлаша. Әммә тәүгеһендә бурлыҡҡа ысынлап тотонорға бай ҡоторта, хатта мәжбүр итә. Ҡасан нимә урларға кәрәклеген дә ул билдәләй. Урлай алмаһа, язаға тарттырыласағын иҫкәртә: йәғни герой «икенең берен һайларға» – тимәк, дөйөм алғанда, ҡотҡоға бирелеп, сараһыҙҙан урлашырға тейеш була. Хатта геройҙың бурлыҡ менән шөғөлләнеүе, бәхәсләшеп, ҡыҙыҡ өсөн генә урлашыу кеүегерәк аңлатылғанда ла («Ҡасим бур»), уның был эшкә тотоноуына бай үҙе сәбәпсе була.

*Икенсе осраҡта* урлашырға нужа мәжбүр итә. Йәғни әкиәттең финалындағы һөҙөмтәгә АТ 1525-се сюжет тибының геройы бер-бер артлы ҡуйылған шарттарҙы эҙмә-эҙ үтәй барып, үҙенең етеҙ бур булыуын күп тапҡыр иҫбатлағандан һуң ғына ирешһә, икенсеһенеке (АТ 950) уға, урлашыуын фаш иттермәҫ өсөн, эҙен оҫта йәшерә белеүе арҡаһында өлгәшә, шуға ла бында тегеһендәге кеүек шарт ҡуйышыу юҡ.

*Ике осраҡта ла* сюжет конфикты бурҙың йә бай, йә вәзир, йә батша кейәүе, йә батша булып китеүе менән сиселә. Быға өлгәшеүе бай йә батша тарафынан уның бурлыҡ оҫталығын таныу, хуплау, шул оҫталыҡҡа ярышта еңеп сыҡҡаны өсөн иң ҡиммәтле приз менән бүләкләү кеүек аңлашыла. Бурлыкты шулай хуплағас, улар үҙҙәре кем була инде? Әлбиттә, үҙҙәренең дә таҙа ҡуллы кеше түгел икәнлектәре асыла. Бына шулай, ирекһеҙҙән улар үҙ-үҙҙәрен фашлай. Шуға күрә лә был *әкиәттәр, «бурҙыкы – бурға хәләл» тигән кеүек үк, байҙыкын йә батшаныкын урлауҙы хуплай.*

Бурлыҡ менән шөғөлләнеүсене ыңғай герой итеп күрһәтеү, хатта уны идеаллаштырыу беҙҙең бөгөнгө әхлаҡҡа ла, законға ла һыймаҫлыҡ хәл кеүек. Ләкин «әкиәттәге бурлыҡтың тормоштағы бурлыҡҡа һис бер төрлө лә мөнәсәбәте юҡ» (45, 166). Әкиәттәге алдашыу, урлашыу – социаль дошманды мыҫҡыллау, көлөү ярҙамында уны мәсхәрәләү, сатира уты менән көйҙөрөп

хурлау, хакимдарҙың, уларҙың таяныстары булған юғары ҡатламдарҙың рухи социаль булмышын фашлау сараһы ул. *Бынһы бер.* Әлбиттә, был һығымта идеаль йәмғиәтте күҙ уңында тота. Шуға күрә лә ул шартлы. Ысынбарлыҡ ваҡыт-ваҡыт шуның киреһен раҫлай. *Икенсенән,* тарихи яҡтан ҡарағанда, етеҙ бурҙар тураһындағы сатирик әкиәттәрҙең боронғо мифтарға, хайуандар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәргә барып тоташыуын һиҙемләргә була. Боронғо бабаларыбыҙҙың ҡарашынса, культур (изгеләштерелгән, илаһилаштырылған) геройҙар, мәҫәлән, кешеләргә кәрәкле нәмәләрҙе әҙер хәлендә табалар, йыш ҡына уларҙы һаҡлаусыларҙан урлайҙар: Прометей, мәҫәлән, кешеләргә Зевстан – ут, башҡорт мифы геройҙары Әйнә менән Ғәйнә убыр йәшергән ерҙән – Ҡояшты урлап алып бирә(17, № 38).

## 3. Ялған күрәҙәселәр тураһындағы әкиәттәр

Ялған күрәҙәселәр ҙә, асылда, хәйләкәрҙәр галереяһын тулыландыра. Уларҙың, бөтәһе өсөн дә шундай уртаҡ сифат хас: герой үҙен күрәҙәсе итеп иғлан итә, уның күрәҙәселек һәләте һынала; хөрәфәти ҡараштарҙан арынмау арҡаһында күрәҙәгә нығ ышаныусылар унан отола. Дөрөҫлөгөн тикшереүе ҡыйын йә бөтөнләй мөмкин булмаған яуабы менән герой үҙенең күрәҙәсе булыуын «иҫбатлай».

Ялған күрәҙәселәр, тылсым менән берниндәй уртаҡлығы булмаған нәмәне тылсымлы тип, шуның ярҙамында ла күрәҙәселек итә. Күрәҙәгә ышаныусы персонажды һөҙөмтә генә ҡыҙыҡһындыра, ә һөҙөмтәгә килеү юлдарын ул иҫәпкә алмай, иҫенә лә төшөрмәй. Шул арҡала үҙенең көлкөгә ҡалыуына үҙе үк булыша. Ғөмүмән, сатирик әкиәттәрҙең был төркөмсәһе асыҡ ауыҙҙарҙан әсе көлә. “Батша хаҡы”(АТ 922, 56 19, № 59),”Белемле Тыз-Быз”(АТ 1641, 19, № 57), “Хикмәтле ҡош” (АТ 1358 А, 19, № 59) ана шундайҙарҙан. Йәмғиәтебеҙ “перестройка”, “реформа” дәүерен кисергәндә, һәр төрлө экстрасенс, күрәҙәселәр, астрологтар, буш вәғәҙә, ниәттәр менән “һыйлаусы” хакимдар ишәйгәндә, бындай әкиәттәрҙе халыҡ буштан-бушҡа һәм юҡтан ғына ижад итмәүенә нығыраҡ төшөнәһең. Уларға инаныусылар ҙа шул әкиәттәрҙәге бер ҡатлыларҙы хәтерләтә.

## 4. Иҫәрҙәр тураһындағы әкиәттәр

Юмористик әкиәттәрҙең был төркөмөн тылсымлы әкиәттәр менән бутарға ярамай: тылсымлы әкиәттәрҙәге “иҫәр” (ғәҙәттә, кинйә ул, Таҙ), иҫ китерлек эштәр башҡарып, аҙаҡ сиктә үҙен зиһене камил, өлөшлө зат итеп таныта. Ә юмористик әкиәттәрҙәге иҫәр – ысынлап та диуана, аңра зат. Шау ахмаҡлығы арҡаһында ул әҙәм ышанмаҫлыҡ комик ситуацияларға юлыға. Уның аңралығы, ғәҙәттә, шундай хәлдәрҙә күренә:

1) герой йәнһеҙ әйберҙе йәнле итеп, йәнлене йә кеше, йә башҡа зат итеп күҙ алдына баҫтыра («Йорттотмаҫ кейәү»);

2) бер осраҡҡа әйтелгән кәңәште уға тура килмәгән бөтөнләй икенсе осраҡта ҡуллана («Иҫәр»);

3) өлөшләтә оҡшаш билдәләре булған йәнле һәм йәнһеҙ әйберҙәрҙе бер үк әйбер итеп күҙ алдына килтерә («Бер туған өс иҫәр»);

4) әйтелгәнде һүҙмә-һүҙ башҡара («Таҙ»);

5) хыялдағын ысынға ала, йәғни эшләнмәгән эшкә хыял ҡора («Хыялбай»);

6) әйтелгән һүҙҙе яңғырашы буйынса икенсе һүҙ итеп аңлай («Дөгө, көбө, билмән»);

7) яҡындарын, хатта үҙен дә танымай («Ахмаҡ Шомбай»);

8) ҡушылған эште гел киреһенсә эшләй («Алйот ағайҙар»);

9) әйбер менән шул әйберҙе аңлатыусы һүҙ араһындағы айырманы белмәй («Кеҫәл»).

Икенсе, өсөнсө, дүртенсе, алтынсы осраҡтарҙа герой үҙ алдына, йәнәһе, маҡсат ҡуя, үҙенсә изгелекле булырға ниәтләнә, үҙен тыңлаусан итеп күрһәтә. Ләкин гел генә үҙе ниәтләгәнде, бары бер фактты, билдәне генә күҙ уңында тотоуы һәм кешенән ишеткән кәңәште, уҙған тәжрибәне яңы шарттарға яраҡлаштыра алмауы (сәбәп-һөҙөмтә бәйләнеше менән иҫәпләшмәүе) арҡаһында, йәнә көлкөгә ҡала.

Геройҙы шулай килбәтһеҙ һынландырыуҙың да үҙенә күрә тарихы бар. Боронғо заманда ул көлөү объекты булып тормаған. Миҫал өсөн иҫәрҙең йәнһеҙ әйберҙәрҙе йәнләндереп, кешеләштереп күҙ алдына килтереүен, уны ысынға һанап эш күреүен генә алайыҡ. Асылын уйлаһаң, былдай ҡыланыштар анимистик ҡараштарға барып тоташа. Борон күп кенә халыҡтарҙа, мәҫәлән, ел, буран, ҡойон һ.б. шундай тәбиғәт күренештәре лә йәнле итеп күҙ алдына килтерелер булған. Һаһа-яҡуттар малдың эс ҡарынына төрөлгән ташты ҡыл менән сырмап ҡолғаға беркетеп, шуның менән һелтәнеп, ел саҡырып була, ә ҡолғаға тире элһәң, уны туҡтатып була, тип уйлағандар. Австралияла, елде көсәйтеү өсөн, уға ҡаршы ҡабырсаҡ һелтәйҙәр икән. Ел бик бимазалаһа, эскимостар уны сыбыртҡы менән туҡмар булған. Ел-буранды йоҙроҡ, таяҡ, торомбаш, мылтыҡ, туп атыу менән ҡурҡытыуға ышанған халыҡтар ҙа бар (120, 107-109).

Былдайыраҡ ышаныуҙар башҡорттарҙа ла булған. Һуҙып-һуҙып әкрен генә һыҙғырып, елде саҡырып була, тип уйлағандар; таяҡ, бысаҡ, балта һелтәп, уҡ, мылтыҡ атып, ҡойондо ҡыуып булыуға ышанғандар. Ҡойон боронғо башҡорттарҙа кеше кеүек үк йәнле, ләкин үтә зарарлы зат иҫәпләнгән. Шуға күрә лә әкиәттә, елдең күҙен тондорам тип, елгә ҡаршы иҫәрҙең он һибеүен, анимистик ҡараштың бер ғилләһе, тип әйтеп була.

Тимәк, тәбиғәтте йәнләндереп күҙ алдына килтергән замандарҙа иҫәрлек тип әле беҙ көлгән күренештәрҙең комиклыҡ менән һис кенә лә

уртаҡлығы булмаған. Боронғо анимистик ҡараштарҙан арынғас ҡына, улар комик күренештәр кеүек аңлашыла – эстетик функция атҡара башлаған. Шуға күрә лә К.Маркстың “кешелек үҙенең үткәндәре менән күңелле (йәғни уларҙан көлә-көлә. – Ә.С.) айырылышыуы” хаҡында әйткәне был осраҡҡа ла ярап ҡала.

Шуныһы характерлы, тылсымлы әкиәттәрҙә «иҫәр» тип аталған герой кинйә ул тип күрһәтелһә, һәм ул тик яңғыҙы ғына сығыш яһаһа, юмористик тормош-көнкүреш әкиәттәренең иҫәрҙәре төрлө йәштәге кешеләр. Улар ҡатын-ҡыҙ затынан да булырға мөмкин, яңғыҙ ҙа (“Мулланың быҙаулағаны”, АТ 1781 + 1781 А; “Үгеҙен уҡытырға биргән ҡарт”, АТ 1675; “Ахмаҡ Шомбай”, АТ 1687 + 1696 + өлөшләтә СУС 1687*) күмәгеһе бер булып, иҫәрҙәрҙең үҙенсәлекле коллектив портретын (“Атайҙың башы бар инеме?”, “Бер туған өс иҫәр”, “Өс ахмаҡҡа – дүрт ахмаҡ”, АТ 1450 + 1384 + 1210 + 1245F*; “Аҡыллы ҡарт менән шыр иҫәрҙәр”, АТ 1540 + 1210 + 1540; “Иҫәрҙәр илендә” АТ 1384) кәүҙәләндереүе лә ихтимал.

**5. Серле заттар һәм хәйләкәр хаҡындағы әкиәттәр**

Был төркөмгә ингән тормош-көнкүреш әкиәттәре тик юмористик әкиәттәрҙән ғибәрәт, улар боронғо кешеләрҙең тәбиғәт стихияһы менән алышын, уны үҙләштерергә тырышыуын сағылдырған мифтар менән бәйле. Бында ла айырыуса ике сюжет тибы күҙгә ташлана. Уларҙың *береһенең сюжеты* – Аарне–Томпсон системаһы буйынса нигеҙҙә 1045–1071, 1082, 1190-сы тематик мотивтарҙың, икенсеһе 1640, 1060, 1062, 1084, 1115, 1130, 1149-сы тематик мотивтарҙың ойошоуынан хасил булған. Сюжеттарҙың ике тибында ла кеше, үҙенең хәле етмәҫтәйҙе лә булдыра алыусы тип таныҡкан булып, дейеү (йәки башҡа мифик һәм абстракт төшөнсәләрҙе кәүҙәләндереүсе заттар) менән көс һынаша.

Тәүге типҡа ҡараған «Бер ҡарттың өс улы», «Ғифрит» ише әкиәттәрҙә һыу стихияһы менән бәйләнеш көслө: үҙәк ваҡиға күл эргәһендә бара. Герой (ғәҙәттә, таҙ, кесе ул) менән алышаһы зат (дейеү балаһы, һыу малайы, һыу ҡыҙы) күлдән сыға. Икенсе типҡа ҡараған сюжеттарҙа ваҡиға ҡоро ерҙә (урманда, тауҙа, юл буйында) бара. Герой йә кесе ул, йә бабай, йә әбей һ. б. сифатында күрһәтелә.

Бындай әкиәттәрҙең барыһында ла мифик зат – хайран ҡалырлыҡ көслө. Беренсе төркөмдәгеләрендә алтмыш ҡолас ала бейәне күтәреп, күлде өс урауҙы, ун (хатта алтмыш) ботлоҡ суҡмарҙы сойорғотоуҙы ул бер ни тип тә белмәй. Икенсеһендә, бер үҙе туғыҙ айыу тиреһенән тегелгән турһыҡ менән һыу килтерә, ҡәҙимге кеше һигеҙ көн, һигеҙ төн ташып бөтөрә алмаҫлыҡ утынды бер юлы алып ҡайта («Алтынбай менән дейеү бәрейе», АТ 1640 + 1953 А + СУС 1046*); ташты, осҡондары сәсрәп, ут сыҡҡансы ҡыҫа ала («Үргей менән Ҡарысбай», АТ 1060). Ҡәҙимге әҙәм

балаһы булған геройға быына шундай зат менән алышырға тура килә. Шул алышта уны, юҡ мөмкинлеген бар итеп ғәйрәтләнгән кеше булып ҡыланыуы һәм бойомға ашмаҫтай ниәтен иғлан итеүе ярҙамында еңә. Сикһеҙ ғәйрәттең үҙен кәүҙәләндереүсе серле затты геройҙың шулай хәйлә менән еңеп сығыуы – кеше аҡылына мәдхиә, аҡыл көсөнә ышаныуҙың поэтик һүрәтләнеше ул. Шуға күрә геройҙы физик яҡтан үтә көсһөҙ кеше тип күрһәтеү ("Үргей менән Ҡарысбай" әкиәтенең геройы, мәҫәлән, шул тиклем хәлһеҙ, хатта арҡыры ятҡан таяҡты ла аша баҫа алмай, "Бишҡаҙаҡ бабай" тигәненеке елһеҙ ҙә "елберләп кенә торған") шул идеяны сағыуландырыу сараһы ролен атҡара.

Халыҡ борон-борондан төрлө сир-зәхмәтте алдаштырыу, хәйлә менән дә еңеп булыуына ышанған. Шуның кеүек үк (йәки шунан күрмәксе) социаль сирҙәрҙе лә шул алымдар менән еңеп сығыу хаҡында ла хыял иткән. Шундай хыял Көнтыуар ҡарттың, алдаштырып, Әжәлде ҡарама ҡыуышына бикләүе ("Көнтыуар ҡарт менән Әжәл", АТ 845 + 332 F) йә, балға төшөп мамыҡҡа аунап, "икенсе ҡиәфәт алыуы" ярҙамында бер әбейҙең уны ҡурҡып ҡасырға мәжбүр итеүе («Әжәл менән әбей», АТ СУС 332****), йә Нужаны дегет силәгенә бикләү («Ике ағай менән Нужа», АТ 735 А) тураһындағы әкиәттәр тыуыуға сәбәп булған.

Серле заттарҙы төп башына ултыртыусы физик яҡтан үтә көсһөҙ, әммә хәйлә оҫтаһы булған кеше хаҡындағы әкиәттәрҙең өсөнсө бер төркөмсәһе геройҙарына бер ни тиклем иҫәрлек сифаттары ла, бер ни тиклем хәйләкәрлек сифаттары ла хас. Ике башланғыстың нисбәте төрлө әкиәттәрҙә төрлөсә бирелә.

Тормош-көнкүреш әкиәттәренең бүтәндәренән һүҙ барған төркөм шуныһы менән дә айырыла: уларҙа уйҙырмалылыҡ үтә ныҡ шаштырылып, ғәҙәттән тыш төҫ алғылай. Герой үлем (әжәл), нужа кеүек абстракт төшөнсәләрҙе кәүҙәләндереүсе заттар менән осрашырға, һин дә мин һөйләшергә һәм ахырҙа уларҙы, иҫәр хәленә төшөрөп, оторға ла мөмкин («Көнтыуар ҡарт менән Әжәл», АТ 845 + 332 F; «Әжәл менән әбей», АТ СУС 332****; «Ике ағай менән Нужа», АТ 735 А).

***Һорауҙар һәм эш***

1. Әкиәттәге хәйләкәрлек менән етеҙлек мотивының генезисы? Донъя мифологияһынан һәм милли (йә башҡорт-татар) мифолгияһынан ошо мәсьәләгә асыҡлыҡ индерерлек миҫалдар килтерегеҙ.

2. Әкиәттәрҙә хәйләкәрлек сифаты нисегерәк асыла? Был сифат ни өсөн идеаллаштырыла? Шул сифатҡа эйә булған геройҙы новеллистик әкиәт зирәге образы менән сағыштырығыҙ.

3. Әкиәттәрҙә етеҙ бур һәм ҡараҡ образдарының асылышындағы айырма ниҙә күҙәтелә? Уголовник һәм хәйләкәр бур мәсьәләһе. Әкиәттәрҙә ни өсөн һуңғыһы идеаллаштырыла?

4. Әкиәттәрҙә хәйләкәр геройҙың антиподы ниндәй сифатка эйә: иҫәрме, бер ҡатлымы, әллә ул да хәйләкәрме, мәкерме? “Хәйләгә – хәйлә” проблемаһы.

6. Тылсымлы әкиәттәрҙәге сихри һәм серле заттар менән юмористик әкиәттәрҙәге шундай уҡ заттарҙың образдарының трактовкаланышын сағыштырығыҙ. Әкиәттең ике жанрында герой уларҙы нисек еңә? Юмористик әкиәттәрҙә ундай заттар һәм абстракт төшөнсәләрҙе кәүҙәләндереүсе персонаждар ни өсөн бер ҡатлы итеп күрһәтелә?

# XII БҮЛЕК
# КӨЛДӨРӨКТӘР МЕНӘН ЫМҺЫНДЫРЫҠТАР

Көлдөрөктәр һәм ымһындырыҡтар ҙа әкиәтселәр репертуарын тулыландырыусы ҡарһүҙ жанрҙары иҫәпләнә. Бермә-бер комик эффект тыуҙырыуға иҫәп тотоуҙары менән улар юмористик әкиәттәргә бик яҡын. Әммә ҡәҙимге әкиәттәрҙән, шул иҫәптән комик эффект тыуҙырыуҙы үҙ иткән юмористик һәм сатирик әкиәттәрҙән, үҙҙәренең тәғәйенләнеше һәм формаһы менән улар сағыштырғыһыҙ ныҡ айырыла. Шуға ла был ике жанр шартлы рәүештә генә әкиәттәр рәтендә йөрөтөлә. Шуғамылыр әкиәт белгестәре уларға, ғәҙәттә, һүҙ ыңғайында ғына туҡтала.

## 1. Көлдөрөктәр

Көлдөрөктәр хаҡында һүҙ аса ҡалған хәлдә тикшеренеүселәр уларҙың традицион әкиәттәргә «пародия» булыуын (67, 24), әйберҙәрҙең ысын «координацияһын боҙоп» күрһәтеүҙәрен (3, 114–116), ысынбарлыҡты «баштүбән әйләндереүҙәрен» һәм ниндәйҙер «колаҡка яҡмаҫ, тиҫкәре яғы әйләндерелгән донъя», «кире донъя» (антимир. – *Ә.С.)* тыуҙырыуҙарын (112, 17) билдәләүсән булырҙар. Бындай фекерҙәрҙә хаҡлыҡ бар, әлбиттә. Әммә ысынбарлыҡты, «көлкө бүлмәһендәге» кеүек, үтә боҙоп күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, был төркөмгә ингән әҫәрҙәр ҙә эстетика законсылығына буйһоналар, билдәле бер системаға эйәләр, ниндәйҙер идеяны раҫлайҙар йә инҡар итәләр һәм юмористик тормош-көнкүреш әкиәттәренә бик яҡын торған үҙенсәлекле ҡарһүҙ жанры тип танылыуға лайыҡтар.

Беҙгә мәғлүм көлдөрөктәргә шундай үҙенсәлектәр хас:

1) улар юкты бар итеп «матдилаштыралар»: үҫмәгән ҡыуаҡ төбөнән тыумаған ҡуян балаһы ҡаса («Ҡуян аулаусылар»);

2) берәй эште башҡарырға хәленән килгәне, форсаты булғаны ул эште булдыра алмай, ә мөмкинлеге булмағаны уңышлы атҡара: ҡамсы, ҡороҡ менән киҙәнеп-киҙәнеп тә ала алмаған ҡуянға Ерәнсәнең бер төкөрөүе була – ул тәгәрәп барып ята («Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны»);

3) донъяла юҡ нәмә бар кеүек итеп һөйләнелә: атайҙан тыумаған герой унын менән икәүләп үҫмәгән ҡыуаҡ төбөнән сығып ҡасҡан тыумаған ҡуянға һунар итә ("Тыумаған ҡуянға тыумаған аусының һунар иткәне", 11, № 54);

4) бәләкәй нәмә ҙур нәмәгә сағыштырыла – ҙур икән тиһәң, ул бәләкәй булып сыға: аталы-уллы ике аусы, ҡуян итен ишеккә һыйҙыра алмағас, уны өйгә тәҙрәнең бәләкәй өлгөһө үтә алып инә; икәүһенә ҡуян ите етмәй, шул уҡ ваҡытта иртәгеһенә йылытып тағы ашарлығы артып та ҡала («Ҡуян аулаусылар»);

5) бер үк мәғәнә төрлө һүҙ һәм һүҙбәйләнештәр (синонимдар) ярҙамында бирелә: ҡуян аулаусыларҙың береһе кәкре таяҡ, икенсеһе бөкрө таяҡ тота; ҡуян итен ашағас, атай кеше туймай, улы ас ҡала («Ҡуян аулаусылар»).

Бынан тыш йәнһеҙ әйберҙәр йәнле кеүек итеп күрһәтелергә (майланмаған итек менән майланған итек һуғыша), миҙгелдәр буталырға (герой бесән мәлендә башы менән боҙ яра), эш киреһенсә башҡарылырға мөмкин (Ерәнсә, атҡа менһә, артҡа ҡарап, теҙген урынына ат ҡойроғон тотоп ултыра) һ.б.

Әле һанап сығылған үҙенсәлектәр (дөрөҫөрәге, колдөрөклөлөк принциптары) бығаса күҙҙән кисерелгән ҡайһы бер әкиәттәрҙе, улар раҫлаған идеяны хәтерләргә мәжбүр итә. Тыумаған ҡуянды «тотоп», уның ите менән «һыйланыу», мәҫәлән, «Өс ахмаҡҡа – дүрт ахмаҡ», «Колоҡайҙың билен һындыраһың» ише әкиәттәр пародиялаған «бойомға ашмаған эшкә хыялдан» тағы бер көлә. Ул көлөү бында гротеск кимәленә еткерелә. Бер ҡуянды ике кеше «ашап бөтә алмауы», шул уҡ ваҡытта икеһенең дә «ас ҡалыуы» тормоштоң етешһеҙлеген, «әҙ ашаһаң, күп (тағы) ашарһың, күп ашаһаң, ни ашарһың?» ише мәҡәлдәрҙе кинәйәле иллюстрациялай. Ә «Мүкһаҡал, Ҡылүҙәс, Ҡурайбот...» көлдөрөгө сағыштырыуҙың – метафораға, шул метафораның метонимияға әүерелеүен, метонимияның һүҙмә-һүҙ аңлашылыуына, йәғни ғәмәлләштерелеүенә (реалләштерелеүенә) миҫал. Ғәҙәттә, мүк кеүек, күпереп үҫкән һаҡалды (йәғни шул сағыштырыуҙы) "мүк һаҡал" тиҙәр, тора-бара шул метафора менән һаҡал эйәһен атайҙар. Шул метафора метонимия функцияһын үтәй бащлай ҙа инде. Шуның кеүек Ҡорһағы кәпәйеп торған кешене – Кейәҙ ҡорһаҡ, бото нәҙекте – Ҡурай бот, үҙәсе нәҙекте Ҡылүҙәс тиҙәр. Туң май ҡабам тигәнсе, ҡылүҙәсе һығылып, Ҡылүҙәс үлә. Уны күреп, аптырауҙан бот сапҡансы, Ҡурайботтоң бото һына. Уларҙы күреп, башына йәбешкән Ҡыуыҡбаштың башы ярыла.Шул ҡайғынан эсен тырнап илаған әсәләре Кейеҙкорһаҡтың эсе ярыла. Уларҙың, эс-ҡарын йыуып, һыу буйынан ҡайтыуына ут яғайым тигәнсе, Мүкһаҡалдың һаҡалына ут ҡаба. Метонимия йәки метонимияға әүерелгән метафора бына шулай ғәмәлләштерелә. Был алым бәндәнең сабырһыҙлығын пародиялай.

Көлдөрөктәр бары бер эпизодтан торған сюжет рәүешендә лә, шундай сюжеттарҙың бер-береһенә ялғаныуынан да (контаминацияға инеүенән дә) хасил булырға,. унан да ҡатмарлыраҡ формала ла осрарға мөмкин. Ябайыраҡ сюжетлыларына «Ҡуян аулаусылар», «Тыумаған ҡуян балаһын тотоусылар», «Һунарсы Төхбәтулла», «Һунарсы хикмәттәре» – кеүек көлдөрөктәр, ҡатмарлыраҡтарына «Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны», «Ҡырҡалдар», "Алдар менән Ямар"

көлдөрөктәре миҫал. Әйткәндәй, һуңғыларының ҡатмарлашыуына, уларҙың составында килеп, алда аталғандарының сюжеттары ла булыша.

Һынау маҡсатында үҫмерҙән көлдөрөк һөйләтеүгә ҡоролған сюжетты һәм уның беренсе заттан башҡарылыуын иҫтә тотоп, Е.Д. Торсонов, ғөмүмән, был төр әкиәттәрҙең үҫмерҙәрҙе ирҙәр ҡорона алыу маҡсатында үткәрелгән һынауҙар (инициация йолаһы) менән бәйле булыу ихтималын әйткәйне (81, 106–110). Ләкин көлдөрөктәрҙең, һынауҙы күҙ уңында тотмайынса, өсөнсө заттан һөйләнелгәндәре, геройы ир кеше («Һунарсы Төхбәтулла», «Тыумаған ҡуянды тотоусылар»), ҡыҙ, әбей, бабай булғаны ла бар («Мүкһаҡал, Ҡылүңәс, Ҡурайбот...»). Бәлки, улар, Д.К. Зеленин әйткәнсә, боронғоларҙың рухтар кешеләрҙең телен киреһенсә аңлай имеш тигән ҡарашына нигеҙләнеп барлыҡҡа килгәндәрҙер (108, 228). Ысынлап та, мәҫәлән, боронғо һунарсылар урман, тау эйәләренә (рухтарына) бағышлап, уларҙың иғтибарын яулау маҡсатында һәм шул юл менән уларҙың мәрхәмәтенә ирешеү өсөн, әкиәт һөйләгән замандарҙа, «кире тел» формаһын да файҙаланыуҙары ихтимал. Сөнки, беҙгә мәғлүм күпселек көлдөрөк сюжеттарының һунар темаһы менән бәйле булыуы; икенсенән, борон сихри заттар кеше әйткәндең киреһен аңлауына инаныуҙары (Һинең: “Бар” – тип әйтеүең, мәҫәлән, улар өсөн “юҡ” мәғәнәһе ала, тип белеүҙәре) шуға ишара, буғай. Нисек булғанда ла, хәҙер көлдөрөктәр эстетик вазифа үтәй. Улар, ысын мәғәнәһен тышҡы мәғәнәһеҙлеккә (алогизм формаһына) тәрән йәшереп, тыңлаусының һиҙгерлегенә иҫәп тотҡан үҙенсәлекле әкиәттәр төркөмөн хасил итәләр.

## 2. Ымһындырыҡтар

Ымһындырыҡтарҙы, ҡәҙимге әкиәттәр менән генә түгел, көлдөрөктәр менән дә бутау мөмкин түгел. Бәләкәй күләмле булыуҙары менән улар әҙәбиәттәге уймаҡ хикәйәне, фольклорҙа кесе ҡарһүҙ жанры иҫәпләнгән көләмәстәрҙе хәтерләтә. Әммә, уларҙан айырмалы рәүештә, ымһындырыҡтар хас та ысын әкиәтсә “борон-борон заманда” тигән стереотип стилистик формуланан башланыусы, әммә сюжеттан мәхрүм ҡарһүҙ. Хәйер, тәғәйенләнеше арҡаһында, был жанр сюжетҡа мохтажлыҡ кисереп тә тормай.

Тәғәйенләнешенә килһәк, ул шунан ғибәрәт: яңынан-яңы әкиәт һорап, теңкәгә тейгән тыңлаусыларҙан анһат ҡотолоу йә әкиәт белмәүҙе йәшереү кәрәк булғанда ғына һөйләй әкиәтселәр ымһындырыҡты.

Әкиәтселәрҙең ҡәҙере ҙур булған боронғо замандарҙа әкиәт һөйләгәне өсөн, уға әжер бирер булғандар йә уның эшен эшләшкәндәр. Әкиәтсе үҙе лә үҙ баҙарын күтәрергә тырышҡан: әжергә ишаралау маҡсатында ла әкиәт һөйләргә йыш ҡына инәлтеп-инәлтеп кенә керешкән. Шулай инәлткән саҡтарҙа ла ымһындырыҡ һөйләп алыр булған.

Тыңлаусылар нисегерәк ымһындырыла һуң? Ымһындырғыс әкиәттәр, ғәҙәттә, ысын әкиәтсә «борон-борон замандан» башланып, традицион ҡалып өлгөһөндә бер аҙ дауам иттерелергә лә мөмкин. Шунан һуң ваҡиғала ҡатнашасаҡ персонаждар, ҡыҫҡаса экспозиция бирелә, ләкин персонаждар тәүге тороштарынан ҡуҙғала башлау менән үк, әкиәт өҙөлә лә ҡуя.

Ымһындырыҡтар шундайыраҡ принциптарға ҡорола:

1) Герой башҡарған эштең йәки әйберҙең исеменә рифмалаштырып, тыңлаусыларҙың: "Һөйлә!" – тигәненә иҫәп тотоп, әле генә һөйләгәнен, баштан-аяҡ яңынан һөйләргә рөхсәт һорала («Өй һалғандар, ти, таштан. Һөйләйемме баштан?»). Тыңлаусыларҙың: "Һөйлә!" – тигән рөхсәтен (үтенесен) ишетеү менән, әкиәтсе әле генә һөйләгәнен яңынан һөйләргә тотона. Әкиәт баяғы урынында тағы ла өҙөлә, тағы әлеге һорау менән тыңлаусылар яуабы килә… Бына шулай әкиәт ҡабатлана ла ҡабатлана, ҡабатлана ла ҡабатлана.

2) Объектты белдереүсе һүҙҙе әкиәтсе белмәмешкә һалышып, тыңлаусынан һорай. Яуапҡа (ә уның нисек булыры һәр саҡ әкиәттең һөйләнгән өлөшөнән билдәле була) рифмалаштырып, әкиәтсе «үпкәләй». Мәҫәлән, тыңлаусының «элгес» тигән яуабына, «үҙең һөйлә, булғасың белгес», ти («Элгес – белгес»).

3) Һорау – яуап принцибына ҡоролған ымһындырыҡтар тыңлаусынан һөйләүҙе туҡтатырға «бойороу» яуабын алыуға иҫәп тотоп та башҡарыла: («Һөйлә менән Һөйләмә»).

4) Һорауға бирелгән яуап әкиәт һөйләшеү процесына уйын элементы индереүгә һәм шуның менән тыңлаусыларҙың иғтибарын ситкә ебәреүгә иҫәп тотоп та әйттерелә («Семтеғәле менән Семтемәғәле»).

5) Ымһындырыҡ геройының ҡабатланыусан хәрәкәттән тукталыуы әкиәтте яңынан башлауға (йәки дауам итеүгә) шарт итеп ҡуйыла («Балға төшкән турғай», «Һайыҫҡан»).

6) Әкиәт башламындағы заман төшөнсәһенә геройҙың оҙайлы (ҡабатланыусан) хәрәкәтен белдереүсе һүҙҙең тәүге өлөшө яңғыраш итеп әйтелә: «Борон-борон... боролған да йығылған, боролған да йығылған». Быңдай ымһындырыҡтарҙың аҙағында ла, бишенсе пункттағы һымағыраҡ: «Бабай ҡасан да ҡасан тороп баҫа, шунда әкиәт һөйләрмен», – тип иҫкәртелергә, иҫкәртеү кәрәкле табылмаһа, һүҙ традицион әкиәт бөтөмө менән осланырға мөмкин («Йығылған ҡарт»).

Ошондай принциптарға таянып, әкиәтселәр ғәмәлдә теләгән бер әкиәтте ымһындырыҡ итеп ҡыҫҡарта ала. Йыйынтыҡҡа индерелгән «Кинйә улдың кәләш ала яҙғаны» ымһындырығында, мәҫәлән, тылсымлы әкиәт башланғысы файҙаланылған.

Тыңлаусыларҙың дөрөҫ яуабына иҫәп тоҡан үтенесен үтәү маҡсатында һөйләнгәнде яңынан ҡабатлауҙарҙан торған ымһындырыҡтарҙан тыш, ярым-ярты сәсмә хикәйә, шиғыр йә шуларҙың һорау-яуап менән үҙ-ара аралашып килеүе рәүешендәгеләре лә осрай. Ымһындырыҡтарҙың ундайҙары, асылда, тулғау жанры менән уртаҡ.

* * *

Тормош-көнкүреш әкиәттәренә идея-тематик пландағы ҡыҫҡаса күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, уларҙың барыһы ла кешеләрҙең борон-борондан үҙе йәшәгән мөхиткә, тәбиғәткә, йәмғиәткә әүҙем мөнәсәбәттә булыуын сағылдыра, әүҙемлекте йәшәү принцибы итеүҙе хуплай һәм ҡеүәтләй.

Тылсымлы әкиәттәрҙең геройҙары үҙҙәренең маҡсатына тылсым һәм ғәйрәт ярҙамында өлгәшә. Шуға күрә лә, ҡарамаҡҡа, уларҙың тормошҡа бәйләнеше лә шул саҡлы ғына булып тойолорға, улаҙың тәғәйенләнеше бары күңел асыуға ғына ҡайтып ҡалған һымаҡ булырға мөмкин. Шулай ҙа, урыны ла, заманы ла билдәһеҙ серле донъяла тылсым йә сикһеҙ ғәйрәт, йә шуларҙың икеһе ярҙамында, ысынбарлыктан айырмалы рәүештә, изгелектең яуызлыҡты һәр саҡ еңеүен раҫлауҙың үҙ мәғәнәһе бар. Шуның менән былдай әкиәттәр: “Донъяның сере сикһеҙ, кешенең асылып бөтмәгән мөмкинлектәре биниһая бихисап,” – тип әйткәндәй була ла уларҙы әле асаһы бар икәненә ишара яһай. Шул беҙҙә оптимистик рух тәрбиәләүгә булыша. Хәйер, әкиәттә тылсым булып тойолған күренештәрҙең ҡайһы берҙәренең хәҙер реаль төҫ алыуы иң-иң тылсымлы әкиәттең дә юрағаны юш килеүенә миҫал була ала. Был урында тылсымлы әкиәттә бинахаҡ рәнйетелеп, ҡулдары ҡырҡылған ҡатындың ҡуллы булыуы, үлгән тип иҫәпләнгән персонаждың тере һыу ярҙамында терелтелеүе, осоусы балаҫ, ағас торна, уҡҡа ултырып осоу, тауҙы шылдырыу һ.б. шуның кеүек мөғжизәләр күҙ уңында тотола. Тәүге ике миҫалда әйтелгәндең реаль рәүештә ғәмәлгә ашмышын беҙ бөгөн – медицинаның, өсөнсө, дүртенсе һәм бишенсеһенекен самолет, вертолет, космос карабы йөҙөндә фән һәм техника ҡаҙаныштарында, алтынсыһын гигант тау эшкәртеү техникаһы образында таныйбыҙ (Башҡортостанда Шахтауҙы Стәрлеләге сода заводына соҡоп ташып бөтөрөп, цементҡа әйләндереп, шул цементтан тауҙай-тауҙай ҡоролмалар ҡороу – һуңғы миҫалда әйтелгәндең ғәмәлгә ашыуы түгеме ни).

Тормош-көнкүреш әкиәттәре лә, хайуандар тураһындағылары ла кешелектең мәңге-мәңге хыял иткәнен, изгелектең яуызлыҡты еңәсәге хаҡындағы хыялын, сағылдыра. Тик, тәүгеһе кеше аҡылына мәдхиә рәүешендә, икенселәре йәмғиәттәге ысынбарлыҡты ҡош-ҡорттоң үҙ-ара мөнәсәбәттәре аша сит-ситләтеп һүрәтләү аша өлгәшә быға.

Дөйөм алғанда, әкиәттәрҙең ниндәй жанрын, ниндәй жанр күренешен, ниндәй тематик төркөмөн, нидәй сюжетын йә уның вариантын алма, улар барыһы ла олоһонда, кесеһендә сәләмәт эстетик зауҡ, кешелекле этик нормалар рухында тәрбиәләүгә тәғәйен. Уларҙың танып белеү әһәмиәте лә баһалап бөткөһөҙ.

***Һорауҙар һәм эш***

1. Юмористик әкиәттәр менән көлдөрөк һәм ымһындырыҡтарҙан берәр миҫал алып, был өс жанрҙың уртаҡ, оҡшаш билдәләрен әйтеп бирегеҙ.
2. Көлдөрөк һәм ымһындырыҡтар менән юмористик әкиәттәрҙә комик эффект ниндәй алымдар ярҙамында тыуҙырыла?
3. Көлдөрөк һәм ымһындырыҡтар сюжетының үҙенсәлеге ниҙә күҙәтелә?

## XIII БҮЛЕК
## ӘКИӘТТӘРҘЕҢ ПОЭТИКАҺЫ

Рус халыҡ тормош-көнкүреш әкиәттәренең поэтикаһы хаҡында байтаҡ ҡына яҙылған. Миҫалға Б. һәм Ю.Соколовтар, Н.В. Новиков, Э.В. Померанцева, В.П. Аникин, С.Г. Лазутин, Н.В. Ведерникова, Л.Г. Бараг, Р. Рошияну һ.б. хеҙмәттәрен күрһәтергә була. Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәре генә түгел, әкиәттәребеҙ иһә, ғөмүмән, бындай иғтибарҙан мәхрүм ҡала килде. Дөрөҫ, тикшеренеүселәребеҙ был мәсьәләгә бөтөнләй үк иғтибар итмәне, тип әйтеп булмай. Белгестәребеҙ үҙҙәренең күҙәтеүҙәрендә башлыса тылсымлы әкиәт поэтикаһы хаҡында һүҙ алып барҙы. Унда ла тәрәнгә төшмәйенсә "юлайҡан һуғылып китеү" принцибы буйынса ғына эш иттеләр. Н.К. Дмитриев, Ә.И. Харисов, Ж.Ғ. Кейекбаев, М.Х. Минһажетдинов, Н.Т. Зарипов, М.В. Зәйнуллиндарҙың мәҡәләләре – шуға миҫал. Тикшеренеүселәр күберәген әкиәттең бөтә жанрҙарына хас *өсләтеү, гипербола; башында, хикәйәләү өлөшөндә һәм ахырҙа килеүсе традицион стереотип стилистик формулалар* (фәндә ҡабул ителгәнсә әйткәндә, *инициал, медиаль һәм финал формулалар*), йәғни башлам, хикәйәләү өлөшөндә килеүсе "Китеп ултыра, китеп ултыра, ти. Китеп ултыра торғас, артына әйләнеп ҡараһа энә буйы юл үтте, ти…" тибындағы – ваҡыт менән арауыҡты; батыр булыр ир бала хаҡында һүҙ барыр булғанда, "ай үҫәһен – көн үҫте, ти, йыл үҫәһе – ай үҫте, ти", ҡыҙҙың матурлығын билдәләүсе "бер бите – Ай, бер бите – Көн, ине, ти" ише *әҙер универсаль стилистик формулалар,* билдәләр хаҡында һүҙ алып барыр булған. Бынан тыш сюжет үҫтерелешенең изгелек менән яуызлыҡ бәрелешенә ҡоролоуы, хикәйәләүҙә хәбәр ҡылымдың (һөйкәлешенең) өсөнсө заттан үткән заманда ҡулланылыуы билдәләнә килде. Марат Минһажетдинов әкиәт сюжетының ябайлығын билдәләп, традицион башлам рәүешендәге: "Ваҡыт характеристикаһынан һуң … төйөнләнеү моменты бирелә, артабан ваҡиғалар үҫеше китә, ... сиселеш моментында геройҙың ирешкән уңыштарын һөйләү урын ала," – тип яҙғайны (14, 27). Ул шулай уҡ ҡайһы бер әкиәттәрҙең "айырыуса көсөргәнешле урындары шиғри формала" башҡарылыуына, "өндәү, өгөт-нәсихәт менән" бөтөүенә иғтибар иткән. Әкиәт фантастикаһының үҙенсәлеге хаҡында әйткәне лә күңелгә хуш килмәле. Был турала һүҙ асҡанда, ғалим уны легенда, ҡобайыр, хикәйәт (был урында ул, моғайын, ҡарһүҙҙең әкиәттән башҡа жанрҙарын күҙ уңында тотҡандыр) фантастикаһы менән сағыштыра. Был жанҙарҙарҙа фантастиканың "фактик нигеҙҙе юҡҡа сығара" алмауын, йәғни әҫәрҙә һүҙ барған ваҡиғаны конкретлаштырыусы топоним, этноним кеүек билдәләр булыуын, геройҙы идеаллаштырыуға хеҙмәт итеүен, "әкиәттәрҙә иһә ғәҙәти күренештәр ҙә, ысынбарлыҡта булмағанса үҙгәртелеп,

тылсымлаштырып күрһәтеләләр” тигән фекергә килгән. Тирә-йүндәге күренештәрҙең серенә төшөнгәнсе, уларҙы фантастик уйҙырма ярҙамында аңлата торғас, шул алымдың аҙаҡ эстетик вазифа үтәй башлауына байҡау яһап, “әкиәт жанрының үҙенсәлеген билдәләүсе төп һыҙат булып” китеүен асыҡлаған (14, 27, 8–11).

Быға тиклем әйтелгәндәрҙән тыш, Нур Зариповтың күҙәтеүҙәренән тылсымлы әкиәт жанрының шартлы рәүештә “батырҙар тураһындағы әкәиәттәр” тип йөрөтөлгән жанр төрөнөң (“разновидность” мәғәнәһендәге төркөмөнөң) поэтикаһыһына геройҙы идеаллаштырыу, уның антиподы әшәке зат итеп һүрәтләнеүе, ошо маҡсаттарҙа антитезаға нигеҙләнгән гипербола алымы ҡулланылыуы; ысын художестволы портретҡа дәғүә итмәһәләр ҙә, дөйөм планда ғына булһа ла, персонаждарҙың портрет һыҙаттары бирелеүе, сюжеттың иһә “башлыса хәрәкәтте һүрәтләү формаһында” булыуы хаҡында мәғлүмәт алырға була (108, 28–29). Ә инде үҙенең монографияһында быларҙан тыш батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙең “тотош сюжет каркасы”ның антитезаға ҡоролоуы, “контраст һүрәтләүҙән тыш, әкиәткә бүтән алым хас” булмауы, сюжет үçеше лә контрастарҙың сәбәп – һөҙөмтә бәйләнешән килеүе (сюжет үçешендә эпизод ваҡиғалар рәүешендәге структур элементтарҙың үҙ-ара мөнәсәбәтендә контрастар бәйләнеше күҙәтелеүе); әкиәт композицияһында пролог менән төп конфликттың (батырҙың кәләш алыуы, мифик заттар менән алышы, ер аçтындағы көрәше, ҡыҙ-батыр менән алышы) үҙенсәлеге хаҡында һүҙ алып барған (109, 143–230). Г.Р. Хөсәйенова иһә башҡорт халыҡ тылсымлы әкиәттәренең поэтикаһын махсус тикшереүгә бағышлаған үҙенең монографияһында ҡарһүҙҙең был жанрының традицион сюжетлылығы мәсьәләһенә ентеклерәк туҡталған һәм уны әкиәттең стиленән айырылғыһыҙ рәүештә һәм сағыштырма юçыҡта ҡараған. Сағыштырыуға ул башҡа халыҡтар, мәçәлән, славян әкиәттәрен дә, милли тылсымлы әкиәттәрҙең төрлө осорҙа яҙып алынған варианттарын да йәлеп иткән. Шул юл менән автор поэтика һәм йөкмәтке тотороҡлолоғо проблемаһына килеп юлыға һәм уға асыҡлыҡ индерергә тырыша (121). Хайуандар тураһындағы әкиәттәр хаҡында һүҙ алып барғанда, уларҙың сюжетының “төп герой вазифаһын атҡарыусы ыконстатациялаған (101, 13).

Поэтика һәм стиль йәһәтенән әкиәттең бөтә жаенҙарына ла уртаҡ үҙенсәлектәр хас. Шуның менән бергә тап ошо билдәләре уларҙың һәр береһен үҙ аллы жанр итә. Был хеҙмәттә поэтика һәм стиль тәңгәлендә уларға уртаҡ сифттарҙың ҡайһы берҙәренә ҡағылғылау менән генә сикләнелде. Ә тормош-көнкүреш әкиәттәренә нығыраҡ туҡталыу маҡсатҡа ярашлы тип табылды. Сөнки шул да әкиәттең аллегорияға һәм тылсымлы фантастикаға ҡоролған башҡа жанрҙарын

поэтка һәм стиль йәһәтенән уларҙан ни тиклем ныҡ айырылып тороуын аңлата.

### 1. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең сюжет үҙенсәлектәре

Әкиәт поэтикаһының иң мөһим компоненты – сюжет, әлбиттә. Сюжеттың үҫтерелеше герой хәрәкәтенә бәйләнгән. Ә геройҙың хәрәкәте үҙ сиратында эске һәм тышҡы сәбәптәрҙән этәреш ала, икенсе төрлө әйткәндә, алдан билдәләнә, көнэлгәре аңғартыла (прогнозлана). Тормош-көнкүреш әкиәттәрендә «көн элгәре аңғартыу» күрәҙәлек итеү («Яҙмыш көсө»), геройҙың ҡәһәтләнеүе («Беренсе матур», «Ҡунай менән Ҡупай», «Һалдат тураһында әкиәт», 18, №№ 52, 111, 49), кинәйәле кәңәш («Өс ауыҙ һүҙ», «Ата васыяты», «Әсә һүҙе», «Васыят» (18, №№ 38, 40, 42, 43), мәҡәлгә йә башҡа берәй ҡанатлы һүҙгә аңлатма бирергә ниәтләнеү рәүешендә булырға мөмкин.

Герой алдына шарт ҡуйылыуы ла уның артабанғы хәрәкәтен билдәләй. Төрлө осраҡта шарт төрлөсә бирелә. Ләкин һәр саҡ шундай принцип һаҡлана: уны үтәһә, герой уңышҡа ирешә; үтәй алмаһа, ундай мөмкинлектән мәхрүм ителә, хатта язаға тарттырылыуы ла ихтимал. Шуға күрә был принципты *«икенең бере»* принцибы тип атарға була. «Фәүҡинур», «Аҡыллы ҡарт», «Батша һайлау», «Балҡан Таҙ» (18, №№ 8, 9 ,44, 47), «Ҡасим бур», «Хажи ҡарт балалары» (19, №№ 18, 19) тигән әкиәттәрҙең сюжеты тап ошо принципҡа ҡоролған.

Шарттар геройға ниҙелер эшләргә тыйыу («Шомбай», 18, № 104, «Уҫаҡ – Күҫәк», 19, № 16) уның үҙен эҙәрләүселәр менән бәхәсләшеүе формаһында ла бирелә («Ҡырҡ тартмасы», «Хәйерсе ҡыҙы», «Ҡатындан уңған ир», №№ 62, 64, 68). «Әлмирйән», «Шакир», «Ағаларын аҡылға ултыртҡан Таҙ» ише әкиәттәрҙә (18, №№ 17, 22, 124) ата-әсәнән аҡыл (фатиха) алыу, белемгә, һөнәргә эйә булыу герой алдындағы бурыстарҙың уңышлы хәл ителеүен алдан аңғартыу функцияһын үтәй.

Ҡайһы бер тормош-көнкүреш әкиәттәрендә конфликтлы ситуация һәм шул конфликттың нисегерәк хәл ителеше ҡош-ҡорт донъяһынан күҙәтелгән күренеш рәүешендәге аллегорик формала «алдан иҫкәртеү» (прогноз) («Батша ҡатыны», 18, № 89), геройҙың үҙ яҙмышын төштә күреүе («Буйҙаҡ батшаның төштә ғашиҡ булғаны, өндә кәләш алғаны», «Төштә ғашиҡ булған», «Яуыз батша башына еткән батша малайы», 18, № 56, 57, 88) формаһында бирелә. Шуға күрә прогнозлау маҡсатында фантастик уйҙырманы унда мул файҙаланырға мөмкинлек тыуа.

Әкиәттә киләсәктәге күрәҙәлек итеү, кинәйәле кәңәш, мәҡәл; геройҙың ҡәһәтләнеүе, ата-әсәнән аҡыл (фатиха) алыуы, һөнәргә, белемгә эйә булыуы тураһында әйтеү; мәсьәлә сисеү, бәхәс формаһындағы «көнэлгәре аңғартыуҙар» (прогноз формалары) сюжеттың сиселешендә һәр саҡ тиерлек ғәмәлгә аша.

Тыйылғанды тотмау (боҙоу), башта кире башланғысты кәүҙәләндереүсе персонаждың маҡсатын асыҡлау, конфликтлы ситуацияны аллегория ярҙамында билдәләү кеүек «көн элгәре аңғартыу» формаларына эйә булған әкиәттәр, ғәҙәттә, көтөлгән һөҙөмтәнең киреһе менән тамамлана.

«Васыят», «Юлдыбай һунарсы» ише әкиәттәрҙә «көнэлгәре аңғартыу» булһа ла, һөҙөмтә бирелмәй, йәғни геройҙарҙың хәл иткес ынтылышын, кире көстәрҙең язаға тарттырылыуын күрһәтер эпизод талап ителгән урында, йөкмәткеһе өгөт-нәсихәттән тороусы дөйөм һүҙҙәр генә әйтелә.

Тормош-көнкүреш әкиәттәренең сюжеттары «көнэлгәре аңғартыу» һәм һөҙөмтәнән генә тормай, әлбиттә. Улар художестволы бөтөнлөгө, урынының тотороҡлолоғо, үҙ-ара бәйләнеш формалары һәм проблематика йәһәтенән төрлө-төрлө булған эпизодтарҙан төҙөлә. Ҡайһы бер тормош-көнкүреш әкиәттәренең сюжеты урындары алыштырылғыһыҙ (ваҡыт, сәбәп – һөҙөмтә бәйләнешендәге) эпизодтар теҙеменән тора. Бындай композицион принцип айырыуса новеллистик һәм ғибрәтле әкиәттәргә хас.

Тамамланған ситуациялы бер бөтөн эпизодты эсенә алған тематик мотивтар, әкиәт контексынан айырылған хәлдә лә, “юғалып ҡалмай”: уларҙың һәр береһе үҙ аллы сюжет булып йәшәй ала. Сюжеты шундай һәләткә эйә булған тематик мотивтарҙың бер-береһенә *сынйыр балдаҡсалары кеүек эҙмә-эҙ эленешеп килеүенән* хасил булған тормош-көнкүреш әкиәттәре лә күп осрай. *Теҙмә эпизодлы әкиәттәрҙән* айырмалы рәүештә, уларында тематик мотивтарҙың урындары, һаны тотороҡло булмай. Шулай ҙа герой алдына ҡуйылған бурыстарҙы, тимәк, тотош ваҡиғаның көсөргәнешлелеген үҫтерә барыу (ә был әкиәттәрҙең типик үҙенсәлеге) тематик мотивтарҙың теләһә ҡайһы эҙмә-эҙлелектә килеүенә бик үк юл да ҡуймай. Сатирик һәм юмористик әкиәттәрҙең, көлдөрөктәрҙең күптәренең сюжетына тап бына ошондай үҙенсәлек хас та инде («Алдарҙың батша кейәүе булғаны», «Ҡасим бур», «Баҙарсы Таҙ», 19, №№ 45, 126).

Күп эпизодлы тормош-көнкүреш әкиәттәренең бер төркөмөнөң сюжеты әкиәт эсендә әкиәт (тартмалы сюжет) принцибына ҡорола («Батша ҡыҙының хөкөмө»18, № 15; «Хәтәмтай», 20а, № 35).

Ҡайһы бер тормош-көнкүреш әкиәттәрендә сюжет диалогтар рәүешендә генә бирелә («Ун ике сөаль», 18, № 45; «Бесәй көслө», «Кем көслө?»,19, №№ 134, 135).

## 2. Новеллистик көтөлмәгәнлек поэтикаһы

Бер төркөм әкиәттәрҙең көтөлмәгәнлеккә ҡоролоуы (новеллизм) хаҡында һүҙ булғайны инде. Аныҡлап шуны әйтергә кәрәк: әкиәт новеллизмы шундайыраҡ юлдар менән тыуа.

1) Әйтелгән кәңәштең кинәйәлелеген иҫәпкә алмайынса, геройҙың уны тура мәғәнәһендә аңлауы һәм шул арҡала уны һүҙмә-һүҙ үтәүе («Васыят», 18, № 43) йәки «Ерәнсә сәсән хикмәттәре» (18, № 4) әкиәтендәге зирәк ҡыҙҙың атаһы кеүек мәғәнәһеҙ тип иҫәпләп, ҡолаҡҡа элмәүе йәки юрый һынап ҡарауы («Ата васыяты», «Ата һүҙе», «Әсә һүҙе», 19, № 40–42) сюжетты көтөлмәгәнсә сиселешле итә.

Геройҙың йәки бүтән персонаждарҙың кинәйәле ҡыланышы ла шундай эффектҡа эйә. Күҙгә әләгерлек ҡыҙ осраған һайын, улын туҡмауының сәбәбен Ерәнсә: "Әйткәнде тыңлай", – тип аңлата. Был һүҙҙәрҙең серен аңламайынса, тәүҙә осраған ике ҡыҙ аптырай: тыңлаусан булғас, һәйбәт инде ул, йәнәһе. Тик өсөнсө ҡыҙ ғына үҙе белеп эшләгән егет кенә яҡшы икәнен аңлата («Ерәнсә сәсәндең килен эҙләгәне»). Ошондайыраҡ принципҡа нигеҙләнеүҙәре арҡаһында, «Фәүҡинур», «Иң тәмле нәмә», «Атаһын тоҙ кеүек яратҡан ҡыҙ», «Иң ҡәҙерле аҡса» (18, №№ 5, 8, 11, 12; 19, № 182) ише әкиәттәр ҙә новеллистик көтөлмәгәнлеккә ирешә.

2) Эҙәрләүсене һүҙгә албырғатып, уның төп маҡсатын онотторөу («Ҡаҙҙар ни тиҙәр?», «Батша ҡыҙының хөкөмө», 18, №№ 14, 15), ғәҙел булмаған дәғүә менән бәйләнеүсегә уның үҙе кеүек үк дәғүә менән яуап биреү («Торахан менән Йәнәбәхан һәм Ерәнсә сәсән», «Фәүҡинур», 18, №№ 1, 8;), мәсьәләне (бәхәс, ыҙғышты) яуапкәрлек менән хәл итеү («Батша менән мосафир», «Ҡарбуз», №№ 20, 23), кинәт кенә эҙәрләнеүсенең (ситләтелеүсенең) файҙалылығын асыу («Лоҡман Хәким», «Өс икмәк», «Аҡыллы ҡарт менән иҫәр батша», 18, №№ 24, 29, 33) көтөлмәгәнлек эффекты бирә.

Кем күҙлегенән сығып баһаланыуына ҡарап, новеллистик әкиәттәрҙең тамамланышының көтөлмәгәнлек кимәле төрлөсә була. Көтөлмәгәнлектең төрлө дәрәжәлә булыуы, асылда, геройҙың әүҙемлек, инициативалылыҡ кимәленә бәйләнгән. Әгәр ул, «Фәүҡинур», «Ҡарбуз», «Петр һалдат» (18, №№ 8, 23, 69) әкиәттәренең геройҙары һымаҡ, ваҡиғаларға үҙе сәбәпсе булһа, уларҙың ағышын үҙ ихтыярына буйһондорһа, сиселеш уның үҙе өсөн дә, тыңлаусы өсөн дә берҙәй үк көтөлмәгәнлеккә эйә була.

Геройы ваҡиға ыңғайынараҡ йөрөгән тормош-көнкүреш әкиәттәре лә бар. Бындай әкиәттәрҙә иһә көтөлмәгәнлек, ғәҙәттә, бары герой кимәлендә генә эффектлы («Ғафи улы менән Сафи улы», «Ҡырҡ тартмасы», «Ғәзиз», 18, №№ 61, 62, 66).

Новеллистик әкиәттәр объектив хикәйәләүгә ҡорола. Шуға күрә лә, көтөлмәгәнлеккә эйә булыуҙарына ҡарамаҫтан, уларҙа комик пафослылыҡ ярылып ятмай. Быға новеллистик башланғыс үҙ урынын ғибрәтлелек пафосы менән уртаҡлашыуы ла сәбәпсе.

3. Комиклыҡ поэтикаһы

*Комиклыҡ поэтикаһы* – сатирик, юмористик әкиәттәрҙең һәм көлдөрөк менән ымһындырыҡтарҙың жанр йөҙөн билдәләүсе фактор ул. Комик эффект та бары шундай әкиәттәргә генә хас ысул һәм алымдар ярҙамында тыуҙырыла.

Күп кенә тормош-көнкүреш әкиәттәрендә күренеш, персонаж, хәрәкәт тышҡы билдәләре буйынса ғына (бөтөнләй икенсе төрлө) аңлатылһа (тәҡдим ителһә), бермә-бер комик ситуация тыуа. Ауып барған ағас тип, Алдарҙың икенсе кешене кәкре ағасҡа терәтеүе; усаҡта ҡайнап ултырған ҡаҙанды ҡар өҫтөнә ултырта һалып, уны, утһыҙ бешерә торған ҡаҙан, тип һатыуы – шуға миҫал.

Үҙ иркенән тыш икенсе кеше ролен башҡарырға мәжбүр булған персонаждың таныш булмаған шарттарға юлығыуы ла шундай уҡ көлкө уята (“Байҙың эт булып өргәне”, “Нужа”, 15, 20).

Диалогтарҙа, һүҙҙең айышын аңғармайынса, аймылышыуҙар һөҙөмтәһендә лә персонаждар комик ситуацияларға тарый («Мәргән», 18, № 113, ). Әйтелгәнде юрый һүҙмә-һүҙ башҡарыу («Хәйләкәр Таҙ», 19, № 87), бер нәмә хаҡында әйтелгәнде икенсе төрлө аңлау («Туҙ китаплы таҙ мулла»,19, № 58), бер әйберҙең (күренештең) үҙенсәлеген икенсеһенә күсереү («Бер туған өс иҫәр», «Иҫәр», 19, №№ 67, 89 ), бер осраҡҡа әйтелгәнде икенсе осраҡҡа ҡарата ҡулланыу (сатирик метатеза) алымы («Ахмаҡ Шомбай», «Торараш булып ҡатҡан иҫәр ҡарт», 19, №№ 82, 90), аңын-тоңон белмәйенсә, башҡаларға эйәреү («Таҙ», 19, № 87), хыялды ысынға алып, уға ысынлап реакция яһауҙар («Өс ахмаҡҡа – дүрт ахмаҡ», «Ҡолоҡайҙың билен һындыраһың?!», 19, №№ 68, 90), күҙ алдындағың эҙләү («Аҫтындағың алты ай эҙләгән») һ.б. комик ситуация тыуҙырыу сараһын үтәй.

Көлдөрөктәрҙә юкты барға иҫәпләү һәм үҙе раҫлағанды геройҙың үҙенән үк кире ҡаҡтырыу (ялған шаштырыу) алымына ҡоролған. «Ҡуян аулаусылар», «Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны» көлдөрөктәрендә тыумаған ҡуянды үҫмәгән ҡыуаҡ төбөндә күреп ҡалыу; атып үлтерә алмағас, төкөрөп ҡолатыу – шуға миҫал. Осраҡлы рәүештә бер мажаранан икенсе мажараға юлығыу рәүешендәге ситуациялар ҙа комиклыҡ ҡеүәһенә эйә була.

Сатирик әкиәттәрҙә, көлдөрөктәрҙә комиклыҡ тыуҙырыу өсөн, шаштырыу, уғата бүрттереү алымы ла йыш ҡулланыла. «Хәйерсе ҡыҙы» әкиәтендә «Һалдат тураһында әкиәттең» (18, № 49) «Алтын тәкә» тигән вариантында, мәҫәлән, ҡыҙҙың матурлығы тылсымлы әкиәттәрҙәгесәрәк «бер бите – Ай, бер бите – Көн» тип шаштырып һүрәтләнелә. Ләкин әкиәттә башҡаса фантастика элементтары булмағанлыҡтан, был шаштырыу ҡәҙимге сағыштырыуҙарҙан «кеүек», «шикелле», «һымаҡ» һүҙҙәре төшөп ҡалыуҙан барлыҡҡа килеп,

йырҙарҙа, көндәлек телмәрҙә ҡулланыла торған метафораларҙы ирониялау кеүек кенә ҡабул ителә.

«Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны», «Ҡуян аулаусылар» (19, № 119, 125) көлдөрөктәрендә ҡуян бер ҡарауға хәтәр ҙур зат итеп күҙ алдына баҫтырыла (унан ун күнәк май сыға, ите ишеккә һыймай). Быndай миҫалдар тормош-көнкүреш әкиәттәре өсөн гипербола кеүек шаштырыу алымының да ят түгеллеге тураһында һөйләй. Тик тылсымлы әкиәт гиперболаһынан тормош-көнкүреш әкиәте гиперболаһы комиклыҡ тыуҙырыу маҡсатында ҡулланылыуы менән айырыла. «Үргей менән Ҡарысбай» (19, № 95), «Батыр әбей» ише әкиәттәрҙә геройҙы үтә көсһөҙ, үтә хәлһеҙ итеп күрһәтеүсе литота алымы ла (ул арҡыры ятҡан таяҡты ла аша атлап уҙа алмай, себен үлтереүҙе лә оло батырлыҡҡа иҫәпләй) шундай саф художестволы маҡсат менән аҡлана. «Әбйәлил» тибындағы әкиәттәрҙә мифик зат гротеск алымы менән һүрәтләнгән тәбиғәт стихияһын кәүҙәләндерә.

«Мулла шайтанға әйләнде», «Йорттотмаҫ кейәү» (18, 71; № 19, № 93) ише тормош-көнкүреш әкиәттәре комик эффект тыуҙырыу маҡсатында яланғасландырыу алымына мөрәжәғәт итә. Яланғасландырыу был осраҡта карикатура мәғәнәһенә эйә. Тормош-көнкүреш әкиәттәрендә (айырыуса сатирик, юмористик әкиәттәрҙә, көлдөрөктәрҙә) тағы шундайыраҡ комиклыҡ саралары файҙаланыла:

1) һүҙҙәрҙең, логик яҡтан бер-береһен юҡҡа сығарырлыҡ итеп, ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә (оксюморон) килеүе («Ҡуян аулаусылар»);

2) омонимдар ҡулланыу: «Алһын» әкиәтендә байҙың хеҙмәтсегә: «Алһын!» – тип мөрәжәғәт итеүе улың үҙ улына бойороп әйтеүе (икенсе төрлө әйткәндә, тыйыуы) кеүек аңлашыла;

3) синонимдарҙы файҙаланыу: «Ҡуян аулаусылар» әкиәтендәге «Атайым тотҡан кәкре таяҡ, мин тотҡанмын бөкрө таяҡ» тигән һөйләм – шуға миҫал;

4) каламбур булмышы менән үк комиклыҡ эффекты тыуҙырыуға тәғәйен: «Әғзәм» әкиәтендә өйҙән сығып йөрөмәҫ, кеше нәмәһенә ҡул һуҙмаҫ, юҡ-барға күҙ атмаҫ, юҡ-бар хәбәр һөйләмәҫ ҡыҙ хаҡында аяҡһыҙ, ҡулһыҙ, телһеҙ тип әйтелеүен геройҙың һүҙмә һүҙ аңлауы комик эффект тыуҙыра;

5) кешене ҡылыҡһырлаусы ҡушаматтар ҙа (лаҡап-исемдәр ҙә) шундай уҡ эффект тыуҙырыу ҡеүәһенә эйә (Таҙ, Иҫәр Таҙ, Бертотам Таҙ, Шомбай, Шомтаҙ, Йорттотмаҫ, Сокорҡолаҡ, Алдар, Ямар һ. б.).

Бындай алымдар, саралар комик ситуация, комик характер тыуҙырыуҙа хәл иткес роль уйнамай. Ләкин тормош-көнкүреш әкиәттәренең дөйөм комик пафослылығын арттырыуға улар ҙа өлөш индерә.

Комиклыҡ башланғысы хайуандар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәргә лә ят түгел. Ф.А. Нәҙершина асыҡлағанса, уларҙа иң әүәл юморҙан үтеп китеп, гротеск кимәленә етеүсән уйҙырма үҙе үк комик эффект тыуҙыра, уға өлгәшеүҙә иһә, юмористик әкиәттәрҙәге кеүек үк, "бер нәмәне икенсе нәмә тип ҡабул" итеү, сюжет үҫтерелешендә бер картина икенсеһе менән ҡаплана барған етеҙ үҙгәреүсәнлек, литота, телмәрҙең тос һәм образлы булыуы – барыһы ла мөһим роль уйнай (63, 42–44).

*Тылсымлы әкиәттәрҙә* персонаждарҙың һүрәтләнеше (мәҫәлән, таҙҙың, иҫәргә һалышып, көлдән борсаҡ сүпәп ултырыуы, батша ҡыҙы ойошторған турнирға ағайҙарының, кәзә тәкәһенә атланып, юлға сығыуы; төп геройҙың төп дошманын һаҡалы – мең ҡарыш, үҙе – бер ҡарыш, тип, мәңге һыйышмаҫ ике төшөнсәне – гипербола менән литотаны килештереп һүрәтләү һ.б.), инициаль, медиаль һәм финал формулалар ҡулланыу һ.б. тылсымлы әкиәттәрҙе юморлы итә.

4. Әкиәт стиле

Ҡарһүҙҙәрҙең башҡа төр һәм жанрҙарының поэтикаһынан әкиәт поэтикаһы стиль йәһәтенән дә ныҡ айырыла. Быны әкиәт нисек башланып, ваҡиғалар унда нисек тасуирланыуынан, персонаждарының образы нисек ҡылыҡһырланып, сюжет нисек сиселеп, композицион яҡтан әҫәр нисек осланыуынан уҡ билдәләргә була.

***а) Каймалаусы стилистик саралар***

Башҡа халыҡтарҙа (мәҫәлән, рустарҙа) әкиәттәр борон *әкиәт алды һүҙе* (присказка) менән башланып китер булған. Бер-ике генә миҫалды иҫәпкә алмағанда («Ҡорман менән Маһира», АТ 400; «Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны» АТ 852), башҡорт әкиәттәрендә революцияға тиклем яҙып алынғандарында ла, һуңғы осорҙарҙа теркәлгәндәрендә лә әкиәт алды һүҙе осрамай. Башҡорт әкиәттәре, ғәҙәттә, *традицион башлам* менән башлана. Традицион башламдар, әкиәттең төп өлөшөнән айырмалы рәүештә, йыш ҡына өноҡшашлыҡҡа ҡоролған йә рифмалы теҙемдәрҙән тора һәм үҙҙәренә хас көйгә һамаҡлап башҡарыла. Славян һәм көнбайыш халыҡтарының әкиәттәре, ҡағиҙә буларак: "В некотором царстве (королевстве), в некотором гсударстве", – тип, аныҡ булмаһа ла, ваҡиғаның ҡайҙа барасағын иҫкәртеүсе башламдан башлана. Ә башҡорт, татар һәм ҡайһы бер башҡа төркиҙәрҙең әкиәттәре, ғәҙәттә: «Борон-борон заманда», – тип, һүҙ барасаҡ ваҡиғаның «әллә ҡасан уҡ булыуын» хәбәр итеүҙән башлана. Тимәк, славян һәм көнбайыш халыҡтары арауыҡ төшөнсәһенә, ә башҡорт, татар һәм бүтән төркиҙәр ваҡыт төшөнсәһенә өҫтөнлөк бирә (Ошо юҫыҡта күҙәтеүҙәрҙе тәрәнәйтә һәм киңәйтә биргәндә, бәлки, саҡырылмаған ҡунаҡты рустар – "хуже татарина", шул уҡ татар менән башҡорт иһә "Тәңре ҡунағы", тигән

кеүек, этник фекерләүгә бәйле ҡыҙыҡ ҡына һығымталарға килергә булыр ине).

Башҡорт әкиәттәренәдә «әллә ҡасан уҡ» төшөнсәһе үҙенсә нигеҙләнә лә: йәнәһе, әкиәттә сығыш яһаясаҡ герой йәшәгән дәүерҙәрҙә төрлө ҡош-ҡорт бары кешеләргә генә йөкмәтелер бурыстарҙы атҡарған:

Борон-борон заманда,
Һайыҫҡан һанат саҡта,
Турғай түрә саҡта,
Кәзә командир саҡта,

ауылда бер кеше йәшәгән, ти («Шомбай»);

Борон-борон заманда,
Кәзә – командир,
Өйрәк – үрәтник,
Кркә – дисәтник,
Бүре – бағауыл,
Ҡарғалар ҡарауыл булып торғанда;
Һайыҫҡандар – һанат,
Турғайҙар – һалдат,
Әтәстәр – әфисәр,
Тауыҡтар тылмас булып хеҙмәт иткәндә;
Арыҫландар – ат,
Йыландар – ҡамсы,
Төлкөләр яусы булып йөрөгән саҡта,

булған, ти, бер хан («Ерәнсә сәсәндең ҡырҡ алдағаны»).

Е.М.Мелетинскийҙың асыҡлауынса, быңдайыраҡ башламдар боронғо кешеләрҙең тотемистик ҡараштары менән бәйле рәүештә барлыҡҡа килгән (116, 58). Әйтеп үтелгәнсә, Себерҙә йәшәгән төркиҙәр һунарға сыҡҡанда, урман, тау эйәләренә бағышлап, әкиәт һөйләр булғандар. Шулай итһәң, йәнәһе, һунар уңышлы була (99, 260). Баш һүҙ (бағышлау) функцияһын башҡарғанға, әкиәтте традицион башламдан башлау фарыз булған. Кеше аңы мифологик ҡараштарҙан арынғас, традицион башламдар шул ҡараштарҙы ирониялау мәғәнәһен алғандар. Шул арҡала тормош-көнкүреш әкиәттәрендә традицион башламдарҙы ҡулланыу сикләнгән (бында хайуандар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәрҙе иҫәпкә алмай торабыҙ): ысынбарлыҡты реалистик пландараҡ сағылдырыусы, етдирәк тонда, объектив хикәйәләүгә ҡоролған новеллистик һәм ғибрәтле әкиәттәрҙән төшөп ҡалып, бары сатирик әкиәт менән көлдөрәктәр өсөн тәбиғи күренеш, үҙенсәлекле комиклыҡ сараһы кеүек аңлашыла башлаған.

Һуңғыраҡ дәүерҙәрҙә традицион башламдар әкиәттәрҙә, ғөмүмән, һирәгерәк осрай. Ҡулланылған хәлдә лә, ыҡсымлаштырыла (ваҡыт күрһәтелә, ә урын тураһында төшөнсә бирелмәүсән).

Әкиәттең аҙағында, сюжеттан тыш, бер-бер артлы килгән ике формула күҙәтелә. Уларҙың тәүгеһен *тамамланыш*, икенсеһен *бөтөм* тип атарға була.

*Тамамланыш* үҙе бер нисә төргә бүленә. Уларҙың берәүҙәре, сюжет хәл ителгәндән һуң, геройҙың артабанғы яҙмышы хаҡында мәғлүмәт бирә: «Шунан бирле Тыз-быз иркенләп йәшәп алып киткән. Үҙе кеүек тыз-быздары ла бар, ти» («Белемсе Тыз-быз»). Былдай тамамланыштарҙы, шартлы рәүештә, *эпилог* тип йөрөтөргә була. Эпилогтар ҡалыплашҡан хәлдә лә осрай: «Улар әле булһа ла шулай матур донъя көтөп, йөн тетеп, йәшәп яталар, ти» («Яуыз ҡарт», 18, № 91); «Әле булһа ла донъя көтөп, йөн тетеп, һәйбәт итеп йәшәп яталар, ти» («Батша һайлау»,18, № 44).

*Бөтөм* (йәки финал формула) – әкиәттәрҙең сюжеттан тыш элементтарының иң һуңғыһы. Башламдар кеүек, бөтөмдәр ҙә ыҡсым йә ҡатмарлыраҡ стилистик формулалар төҫөндә була. Ыҡсымлаштырылғаны әкиәттең тамамланыуын ғына хәбәр итә: «Шуның менән әкиәт тә тамам»; «Әкиәтем – ары, үҙем – бире».

«Ары», «бире» һүҙҙәренә рифмалашыусы һүҙҙәр менән тамамланыусы йә оҡшаш һүҙҙәрҙән торған яңы һөйләмдәр, уларына башҡалары тағылыу арҡаһында, башламдар кеүек үк, бөтөмдәр ҙә һамаҡлап әйтелә торған теҙемдәр хасил итә:

Әкиәтем – ары,
Үҙем – бире.
Һике аҫтында
Ҡарт бүре.
Уны туҡмап сығарҙым,
Атты һиңә туғарҙым.
(«Өс ахмаҡҡа – дүрт ахмаҡ», 19, № 44)

Боронғолар, кеше һүҙе рухтарға кире мәғәнәлә аңлашыла, имеш, тип белгән (81, 88–92). Алогик мәғәнәлелеге шул ҡарашҡа нигеҙләнеүҙәренә ҡарағанда, бөтөмдәрҙең рухтарҙы йомартландырырға теләүе менән бәйле булыуы ихтимал. Ысынлап та шулай булған булһа, «ыңғай» мәғәнәле бөтөмдәр, шул боронғо ҡараштарҙан арына бара торғас формалашҡан тип уйларға кәрәк. Һәр хәлдә, шул боронғо ҡараштарҙан ҡотола килә, алогик мәғәнәле бөтөмдәр ҙә, ыңғай мәғәнәлеһе лә әкиәткә комик пафос өҫтәү, тыңлаусыны әкиәт донъяһынан айырыу сараһы кеүек аңлашыла башлаған.

### *б) Хикәйәләүҙең заман формалары*

Мәғлүм булыуынса, әкиәттәр, бәйән итеүгә ҡорола. Шул юл менән улар эпик картиналар тыуҙыра. Инеш менән төп өлөш бер-береһенә, ғәҙәттә, ваҡыт ағышының бер мәлен айырып күрһәтеүсе

«көндәрҙең береһендә», «бер (берҙән-бер) көндө (саҡ, ваҡыт)» йәки шул уҡ мәғәнәләге «йөрөй торғас», «бер ни тиклем ваҡыт үткәс» ише лексик һәм стилистик саралар менән ялғана. Мәҫәлән: «Йөрөй торғас, асығыуға түҙә алмай, был үҙ ауылына ҡайтып китмәк булған» («Хәйләкәр шәкерт»).

Бынан тыш инеш менән төп өлөш ҡылымдарҙың заман формаларының, интонацияның үҙгәреүе ярҙамында ла айырылырға мөмкин.

Хикәйәләү хәбәр һөйкәлеше ҡылымының үткән заманда торған төрлө формаларында, башлыса, өсөнсө заттан алып барыла. Унда бигерәк тә «барған», «килгән» тибындағы шаһитһыҙ үткән заман, «барҙы», «килде» ише шаһитлы үткән заман һәм «бара», «килә», рәүешендәге хәбәр һөйкәлеше ҡылымының шаһитһыҙ үткән заман мәғәнәһендәге хәҙерге заман формаларын ҡулланыу йыш осрай. Хәбәрлек категорияһының ошондай тороштары ҡайһы саҡта бер үк әҫәрҙә үк сиратлашып килә. Уларҙың сиратлашыуында ниндәйҙер ҡәтғи ҡағиҙә күҙәтелмәй. Шулай ҙа әкиәттең бер «тезисты» асыҡлаусы өлөшөндә (яҙма текста ул, ғәҙәттә, бер абзацты тәшкил итә) хәбәрлек үткән замандың бер формаһында, икенсеһендә икенсе формаһында киленкерәй. Хәрәкәттә ҡырҡа үҙгәреш булһа, тексттың бер абзацтай өлөшөндә лә үткән замандың төрлө формалары ҡулланылырға мөмкин: «Әҙһәм ҡәберҙе асып ҡараһа – унда һуш китерлек матур ҡыҙ ята, ти. Егет уны кәфене менән күтәреп алып сыҡҡан» («Әҙһәм менән Зөләйха»).

### *в) Ярҙамсы һүҙҙәрҙең хикәйәләү стиленә үҙгәлек биргәне*

Ваҡыт формалары алышынған арала, ғәҙәттә, «ти», «икән, ти» ярҙамлыҡтары ҡулланыла. Хикәйәләү өсөнсө затта үткән замандың бер генә формаһында алып барылһа, ярҙамлыҡ һүҙҙәр ҡулланылмаҫҡа ла мөмкин ("барған, ти", "барған"). Әгәр инде әкиәт үткән заман мәғәнәһендәге беренсе заттан бәйән ителһә, ярҙамлыҡ һүҙ бөтөнләй ҡулланылмай. Әгәр ҙә "бар ти", "килә, ти" тип әйтелһә, рус телендә ҡулланылған несовершенный вид кеүек, даими, ҡабатланыусан һәм тамамланмаған хәрәкәт күҙ алдына килә.

«Ти» (йәки «икән, ти») ярҙамлығы сюжет үҫешенә, персонаждар характерына бер ниндәй ҙә йоғонто яһамай. Ул бары экспресив сара хеҙмәтен үтәй. «Ти» ҡулланылмаһа йәки бер нисә һөйләм аша ғына ҡабатланһа, ваҡиғаның үҫеү темпы күтәрелеү эффекты тыуа. Әгәр инде «ти» ярҙамлығы ҡулланылһа, бигерәк тә хәбәрлек һайын ҡабатланһа, хикәйәләүҙең эске ритмы көсәйә. Уға талғынлыҡ өҫтәлгәндәй итә. Шуныһын да әйтергә кәрәк, әкиәттә ҡулланылған "ти" ярҙамлығын рус теленә "говорят" тип тәржемә итеүсәндәр. Уға ҡарағанда, "якобы" тип алыу уңышлыраҡ.

***Бәйән ителгән ваҡиғаға әкиәтсе мөнәсәбәтенең әкиәт стиленә йоғонто яһағаны***

Әкиәттәрҙе башҡарғанда, үҙе һөйләгәнгә әкиәтсе үҙенең шәхси мөнәсәбәтен белдерә һалып бармай. Хикәйәләү, күпселектә, стилистик яҡтан нейтраль монолог рәүешендә була. Бындай алым тыңлаусыға әкиәтте үҙенсә баһалап, үҙенсә ҡабул итергә мөмкинлек тыуҙыра.

Әгәр инде әкиәтсе үҙе һөйләгәнгә битараф ҡарамаһа, был мөнәсәбәт өгөт-нәсихәт монологында, һығымталауҙа, ситләтелгән тура телмәр, инеш һөйләмдәр рәүешендә бирелгән риторик һорауҙарҙа, репликаларҙа һ. б. сағыла. «Әгәр ҙә шуны үтәмәһә, башын ҡырҡайым», – ти. Йәне көйгән, ти, бының (хан булғас ни, башын ҡырҡырға ла ихтыяр инде уға). Шулай тип уйлай ҙа хан, Ерәнсәне саҡырта» («Ерәнсә сәсән менән хан», 18, 41). Әкиәтсенең үҙе һөйләгәнгә ошондайыраҡ формала үҙенең шәхси мөнәсәбәтен белдереүе тыңлаусыларға әкиәттең йөкмәткеһен билдәле бер йүнәлештәрәк еткереү, уларҙа ла үҙе кисергән эстетик кисереште уятыу маҡсатын күҙ уңында тота.

Әкиәттәге ваҡиғаға мөнәсәбәтен әкиәтте һөйләүсе ҡайһы саҡта үҙен шул ваҡиғаға шаһит булған бер персонаж итеп ҡыҫтырып ебәреү ярҙамында ла белдерә. «Ғафур менән Сәлимә» әкиәтен һөйләүсе Ғәлимов Нәғим бабай (Ишембай районы Ғүмәр ауылы) Ғафур менән Сәлимәнең танышыуҙары хаҡында һөйләгәндә: «Мин дә ул саҡта муллала хеҙмәт итә инем. Минең малай саҡ ине. Ысынын ғына әйткәндә, улар араһында үҙем һүҙ йөрөттөм инде мин унда» (60, оп. 65/3. – 341-се б.). Бындай «шаһитлау», «дәлилләү» комик эффект тыуҙыра. Ошо маҡсатта көлдөрөктәрҙең күптәре тотошлайы менән беренсе заттан һөйләнелә («Ҡалайтып мин кәсепкә барып ҡайттым?», «Тыумаған ҡуянды тотоусылар», «Һунарсы хикмәттәре», 19, № № 92, 126, 128).

***ғ) Йырлы-кобайырлы әйтештең (диалогтың) һәм ауыҙ-тел ижадының башка жанрҙары өлгөләренең әкиәт стилен төрләндергәне***

Хикәйәләү әкиәттәрҙә диалогтар менән аралаштырып алып барыла. Яҙма әҫәрҙәрҙән айырмалы рәүештә, әкиәт диалогы ремаркаларға үтә һаран.

Диалог менән монологтар йыр, ҡобайыр, йомаҡ, мәҡәл рәүешендә лә бирелергә мөмкин.

Юмористик «Аҡ дөйә» әкиәтендә егеттең батша ҡыҙы менән диалогы ҡараҡаршы йырланған йырҙарҙан тора.

Күлдәр генә буйы туғай-туғай,
Туғайҙарҙа берәү ҡул болғай.
Мылтыҡ ҡына аҫҡан бөркөт егет,
Минең һөйгән йәрем һин буғай.

Батша ҡыҙының йырлауына һыу аръяғында торған егет:

Аҡкоштарҙай ҡағынып, күлгә килгән
Арғы яҡта, һылыу, һин буғай,
Күргеләрең килһә, сыҡ был яҡҡа –
Һөйгән йәрем минең һин буғай, –

тип яуаплай (12, һаҡл. бер. 146. – 390; АТ 950).

«Балҡантаҙ» әкиәтендә батша ҡыҙы менән Балҡан таҙҙың тәүге диалогы йомаҡ өйөү һәм йомаҡ яуабын әйтеү формаһында бирелә. Был әйтеш ҡобайырҙы хәтерләтә.

– Ағас башы алты айыры
Ул ни булыр, Балҡантаҙ?
– Ағас башы алты айыры
Алты ағайың түгелме?
– Екән төбө ете айыры.
Ул ни булыр, Балҡантаҙ?
– Екән төбө ете айыры
Ете еңгәң түгелме?.. (18, 133)

Тормош-көнкүреш әкиәттәре контексында йыр, әле килтерелгән миҫалдарҙағы һымаҡ, ғәҙәттә, персонаждарҙың бер-береһенә мөнәсәбәтен, уларҙың хис-тойғоларын асыу – психологизациялау алымы функцияһын үтәһә, йомаҡ һәм ҡобайырҙар геройҙың аҡылын, зирәклеген, артабанғы ниәт маҡсатын асыуға, хәрәкәтен билдәләүгә булышыусы поэтик сара бурысын атҡара.

Тормош-көнкүреш әкиәттәрендә поэтик саралар сифатында, йыр, әйтештәрҙән тыш фольклорҙың башҡа жанрҙарынан да өлгөләр файҙаланыла. Шулар араһында мәҡәлдәр айырым урын алып тора. Уларҙың әкиәт сюжетының үҫешен алдан аңғартыуы тураһында “Юлдыбай һунарсы” әкиәте миҫалында әйтеп үтелгәйне инде. Бынан тыш мәҡәлдәр сиселештәге һығымта урынында ла килә. «Маҡтансыҡ аусы» тигән ғибрәтле әкиәт, мәҫәлән, байҙың юҡты бар итеп һөйләүен фашлау менән тамамлана. Ләкин һүҙ шуның менән генә осланмай. Әкиәтсе үҙе һөйләгәнгә шулай тип һығымта ла яһап ҡуя: «Ялғанлаған ямандың үҙ башына теле яу», «Ялғансының дөрөҫ һүҙе лә – ялған», – тип шуның кеүектәргә әйткән боронғолар» (19, 327).

Мәҡәл әкиәттең башында ла килергә мөмкин. «Яман ҡатындан дейеү бәрейе ҡасҡан» тигән новеллистик әкиәт: «Элек: «Яман ҡатындан дейеү бәрейе ҡасҡан», – тип әйткәндәр бит. Ана шуның мәғәнәһен һөйләмәксемен. Ни сәбәптән ҡасҡан? Ҡотолоп ҡасҡанмы, нисек?» – тип башлана (18, 248). Артабан әкиәттең сюжеты шул мәҡәлдең мәғәнәһен асыуға ҡорола.

Мәҡәлдең йөкмәткеһе, билдәле булыуынса, уны төҙөүсе компоненттарҙың (һүҙҙәрҙең) мәғәнәһенән киңерәк була. Шуға күрә лә әле килтерелгән миҫалда яман ҡатындан дейеү бәрейенең нисек ҡото алыныуы тураһында һөйләгәнде мәҡәлдә әйтелгәнгә туранан-тура

иллюстрация итеп ҡабул итмәйбеҙ. Киреһенсә, яман ҡатындың дейеү бәрейен дә ҡурҡытырлыҡ яуыз итеп һүрәтләнеүе – ғөмүмән, яуызлыҡтың гротеск алымы менән шаштырып күрһәтелеүе, уға халыҡтың кире мөнәсәбәтенең көслө булыуының кәүҙәләнеше кеүек аңлашыла.

***д) Медиаль формуланың ваҡыт ағышы һәм арауыҡ төшөнсәһе биреүгә тәғәйен булғаны***

Оҙайлы ваҡыт үтеүе, ваҡиғаның ҙур ғына арауыҡта барыуы тураһында төшөнсә әкиәттә ҡалыплашҡан *стереотип стилистик формулалар – "медиаль формулалар"* аша белдерелә: «Ай бара, ти, йыл бара, ти, һис ҡалаға барып етә алмай, ти» («Ике кәләшле хан», 18, 60); «Бара, бара, бер өйгә барып керә» («Шакир», 18, 22); «Китеп бара, китеп бара, китеп бара торғас, бер ауылға барып сыҡҡан, ти» («Өс ахмаҡҡа – дүрт ахмаҡ», 19, 68). Бер үк һүҙҙе ҡат-ҡат ҡабатлаған өлөшөнә ҡарағанда, быndай стереотип стилистик формулалар әкиәттәрҙең башҡа жанрҙарында һәм жанр күренештәрендә лә ҡулланыла торған стилитик формулаларҙы хәтерләтә. Тик ундай формула кимәленә етһен өсөн быларында барыр ергә барып етеү тураһында әйтелгән һүҙҙәр урынында «...артына әйләнеп ҡараһа, энә (сабата, таяҡ, ҡарыш һ. б.) буйы ер киткән, ти» тибындағы тамамланыш булыуы ғына кәрәк. Ә уның ҡулланылмауы тормош-көнкүреш әкиәттәренең реалистик рухынан килә. Тылсымлы әкиәт геройының образын тыуҙырыуҙа файҙаланыла торған «Йыл үҫәһен ай үҫеп, ай үҫәһен көн үҫеп, егет булып етте, ти» тибындағы формулаларҙың тормош-көнкүреш әкиәттәрендә осрамауы ла шуның менән аңлатыла.

Тылсымлы әкиәт геройҙарын тасуирлағанда ла әкиәт жанрының үҙ принцибы күҙәтелә. Саф тылсымлы әкиәт героиняһының һылыулығын билдәләр булғанда, быгаса әйтелгәненсә, ғәҙәттә, "бер бите – Ай, бер бите – Көн" тигән, баһадир булыр ир бала хаҡында һүҙ барһа «Йыл үҫәһен ай үҫеп, ай үҫәһен көн үҫеп, егет булып етте, ти» тигән традицион стереотип стилистик формула ҡулланыла. Тормош-көнкүреш әкиәттәрендә иһә персонаждар «ҡыҙы ысындан да бик сибәр булған» («Кәримдең башынан үткәндәр», 18, 155) тибындағы дөйөм баһалау, «Ах! Бик матур икән!» («Һалдат тураһында әкиәт», 18, 137) ише һоҡланыу һүҙҙәре йәки төрлө сифаттарының башҡа кешеләргә тәьҫире, уға башҡарыусының мөнәсәбәте сағыштырыуҙар ярҙамында тасуирлана: «Күргән берәүҙең уға күҙе төшкән, ти» («Батша һайлау», 18, 128), «Был ҡыҙ уңғанлығы, матурлығы, аҡыллылығы яғынан был батшалыҡта ғына түгел, бөтә тирә-яҡта дан тотҡан, ти» («Батша ҡыҙы», 18, 150).

Эштең тиҙ башҡарылыуы тормош-көнкүреш әкиәттәрендә лексик саралар менән дә, интонация ярҙамында ла, интонацион яҡтан көсәйтелгән стилистик саралар менән дә бирелергә мөмкин: «Шул

арала батша йыйылыш үткәрҙе» («Батша менән һабансы»); «Көн кис булды. Ашаны егет, эсте, йоҡларға ятты» («Батша булған батша ҡыҙы менән батша малайы»). Тәүге миҫалда эштең тиҙ башҡарылышы лексик сара («шул арала») һәм интонация ярҙамында белдерелһә, икенсеһендә иһә шундай уҡ эффект интонациянан тыш стилистик саралар менән дә тыуҙырыла (һөйләмдә эйәнән тыш тик хәбәрҙәр генә бирелә, ул хәбәрҙәр бер-бер артлы башҡарылған эш-хәрәкәтте белдерә, ул хәрәкәт хаҡындағы мәғлүмәт хәбәр һөйкәлеше ҡылымының шаһитлы үткән заманы ярҙамында еткерелә).

Тормош-көнкүреш әкиәттәрендә, тылсымлы әкиәттәрҙәге һымаҡ уҡ, ваҡытты кире сигендереү алымы (мәҫәлән, ҡарт кешенең йәшәреүе) ҡулланылмай. Ләкин бер үк мәлдә төрлө яҡҡа (төрлө урында) хәрәкәт итеүсе геройҙар хаҡында һөйләгәндә, һүҙҙе береһенән икенсеһенә күсереү өсөн, шундай формулалар ҡулланыла: «Ярай, ҡыҙҙың хәле ошонда ғына ҡалып торһон әле, [осоусы ағас] торнаһы янып, урманда ҡалған егет хәленә киләйек» («Юнысҡынан торна», 59, оп. 26/1. – 444–458), «Хәҙер киттек батша тарафтарына» («Батша ҡатыны») һ. б.

* * *

Ғөмүмән, фольклорҙың башҡа жанрҙары кеүек үк, телдән ижад ителеп, телдән башҡарылыуға иҫәп тотолғанлыҡтан, әкиәттәрҙең поэтик үҙенсәлектәренең асылы, эмоциональ байлығы, эстетик тәьҫире оҫта һөйләүсе телендә нығыраҡ асыла. Шул уҡ ваҡытта әкиәттең һәр жанры, һәр жанрының эске төрө (жанровая разновидность) поэтик үҙенсәлектәре менән бүтән әкиәттәрҙән ярайһы ғына айырыла.

Әкиәттәрҙә тасуирланған ваҡиғалар ни тиклем генә тормоштан йыраҡ торған кеүек тойолмаһын, улар барыһы ла үткән быуындарҙың эстетик ҡараштарын, әхлаҡ ҡағиҙәләрен һәм хатта тормош тәжрибәһен үҙ артынан килгән быуындарға еткереүгә хеҙмәт иткән. Тормошҡа яҡыныраҡ булыуы менән был бурысты айырата тормош-көнкүреш әкиәттәре еренә еткереп атҡарған. Уларҙың етди тонда һөйләнелгәндәре генә түгел, тик көлдөрөүҙе генә маҡсат итеп ҡуйған һымаҡ тойолған еңелсә юмор йә үткер сатира менән һуғарылғандары ла шуға яраҡлаштырылған. Әлбиттә, төрлө синыф социаль ҡатлам, төрлө этник төркөм, төрлө осор кешеләре бер үк әкиәтте төрлөсә ҡабул итә. Сөнки эстетик зауҡ, этик ҡараштар һәм юмор тойғоһо – бер яҡтан, индивидуаль, икенсе яҡтан, синфи, өсөнсө яҡтан, милли, дүртенсе яҡтан, тарихи. Шуға күрә лә әкиәтте объектив баһалау өсөн, шәхси эстетик, әхлаҡ, юмор тойғоһо үлсәмдәре менән сикләнеп ҡалмайынса, уларҙы тыуҙырған, файҙаланған мөхитте иҫәпкә алыу, йәғни мәсьәләгә тарихилыҡ принцибынан ҡарау шарт. Әкиәти сюжет типтарының абсолют күпселеге халыҡ-ара “уртаҡ хужалыҡ” булыуына ҡарамаҫтан, улар милли ауыҙ-тел ижады репертуарына ерегеп, милли үҙенсәлектәр

алған. Милли әкиәт репертуары ошо тиклем байлыҡ менән хушһынмайынса, уны урында тыуған сюжеттар иҫәбенә тулыландыра барған. Быға инаныу өсөн, күп томлыҡ "Башҡорт халыҡ ижады" тупламаларының әкиәттәрҙән торған китаптарының "Аңлатмалар" тигән өлөшөнә күҙ һалыу ҙа етә. Шуға ла милли репертуарҙағы әкиәттәрҙе тәрәндән аңлап, милли үҙенсәлектәренә төшөнөү өсөн, уларҙы үҙ иткән халҡындың тарихи үткәне, мәҙәниәте, йолалары, менталтеты, донъяға ҡарашы менән таныш булыу талап ителә.

## ӘҘӘБИӘТ


1. Азадовский М. К. История русской фольклористики. – М., 1963.Т. II.– 364 с.
2. Алиева А. И. Поэтика и стиль волшебных сказок адыгейских народов. – М.: Наука, 1986. –279 с.
3. Алиева А. И. Уйгурская сказка. – Алма-Ата: Наука, 1975. –151 с.
4. Алиева Ф. А. Социально-бытовая сказка народов Дагестана: дис. .... канд. филол. наук. – Махачкала, 1979. – 205 с.
5. Аникин В. П. Русская народная сказка. – М.: Госучпедиздат, 1959. – 256 с.
6. Бараг Л.Г. Белорусская казка. – Мінск: Вышiшая школа, 1959. – 256 с.
7. Бахтина В. А. Время в волшебной сказке // Проблемы фольклора. – М.: Наука, 1975. –С. 157–163.
8. Бахтина В. А. Время в русской волшебной сказке Прозаические жанры фольклора народов СССР: Тезисы докладов. – Минск, 1974. –С. 179–180.
9. Башкирские народные сказки / Зап. и пер. А.Г.Бессонова; под. ред. Н.К.Дмитриева. – Уфа: Башгосиздат, 1941. –367 с.
10. Башкирское народное творчество / Сост. А.М.Сулейманов; вступ. ст., коммент. Л.Г.Барага, А.М.Сулейманова. – Уфа: Башкнигоиздат, 1991. – Т. 5. Бытовые сказки. –496 с.
11. Башкирское народное творчество / Сост. А.М.Сулейманова: вступ. ст., коммент. Л.Г.Барага, А.М.Сулейманова. – Уфа: Башкнигоиздат, 1991. – Т. 6. Шуточные сказки и кулямасы. – 464 с.
12. Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы янындағы фольклор фонды.
13. Башҡорт халыҡ ижады: 3 томда / Төҙ. ред. баш һүҙ һәм иҫкәр. биреүсеһе Ә.И.Харисов. – Өфө, 1959. –2-се т. – 283 б.
14. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр. 1-се кит. / Төҙ. М.Х.Минһажетдинов, Ә.И.Харисов; яуаплы мөхәрр. Н.Т.Зарипов. – Өфө, 1976. –375 б.

15. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр. 2-се кит. / ттҙ. М.Х.Минһажетдинов, Ә.И.Харисов; яуаплы мөхәрр. Н.Т.Зарипов. – Өфө, 1976. –375 б.
16. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр. 3-сө кит. / Төҙ. Н.Т.Зарипов, М.Х.Минһажетдинов; яуаплы мөхәрр. Н.Т.Зарипов, Ғ.Б.Хөсәйенов. – Өфө, 1978. –352 б.
17. Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр һәм легендалар / Төҙ., инеш мәҡ. һәм аңлатмалар авт. Ф.Нәҙершина; яуаплы мөхәрр. Кирәй Мәргән. – Өфө, 1980. – 416 б.
18. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр. 4-се кит. / тТҙ. Ә.Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. С. Ғәлин. – Өфө, 1981. – 393 б.
19. Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр. 5-се кит. / Төҙ. Ә.Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. Н.Т.Зарипов. – Өфө, 1983. – 390 б.
20. Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. 3-сө кит. / Төҙ. Н.Т.Зарипов; яуаплы мөхәрр. Ғ.Б.Хөсәйенов. – Өфө, 1981. – 344 б.
20а. Башҡорт халыҡ ижады / Текстарҙы һайлап алыусыһы, төҙ., инеш мәҡ. һәм һүҙлек авт. Ә.Сөләймәнов; аңлатмалар Л. Бараг менән Ә.Сөләймәновтыҡы; яуаплы мөхәрр. С. Ғәлин. – Өфө: Китап, 2008. 11-се том: Новеллистик `әкиәттәр. – 568 б.
20б. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мәҡ. авт. Г.Хөсәйенова; аңлатмалар Л. Бараг, М. Минһажетдинов һәм Г. Хөсәйенованыҡы; яуаплы мөхәрр. Ф. Нәҙершина. – Өфө: Китап, 2009. 13-се том: Хайуандар тураһындағы `әкиәттәр. – 200 б.
21. Белоруская народная творчасць: Сацыяльна-бытовая казка / Скл. тома уступ. артык. А. С. Фядосгк; скл. камент. Л.Р.Бараг. – Мiнск, 1976. – 520 с.
22. Березин Н. Турецкая хрестоматия. Т. 3. – Казань, 1876. –162 с.
23. Бикчурин М. Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с кратким объяснением существующих в Оренбургском крае наречий башкир, киргизов и с приложением к нему русско-персидско-татарских слов, разговоров и прописей. – Казань, 1859. –128 с.
24. Борщевский Ю. Сказки древней столицы // Сказки Исфахана. – М.:Наука, 1976. –С. 5–12.
25. Бромлей Ю. В., Подольный Р. Г. Создано человечеством. – М.: Политиздат, 1984. – 272 с.
26. Вавилова М. А. Термин «бытовая сказка» и объем понятия, обозначаемого этим термином // Аспирантский сборник: Гуманитарные науки. Вып. 1. –Вологда, 1972. –С. 123–131.
27. Вавилова М. А. Русская бытовая сказка: учебн. пособие. – Вологда, 1984.–80 с.
28. Валеев Д. Ж. Происхождение морали / под ред. Ф.Б.Садыкова. – Саратов, 1981. –168 с.
29. Ведерникова В. М. Русская народная сказка.– М.:Наука, 1975. –135 с.

30. Великорусские сказки Пермской губернии с приложением двенадцати башкирских сказок и одной мещерякской: сб. Д.К.Зеленина. – Пг., 1914. 656 с. (Записки ИРГО. Т. XVI.). – 656 с.
31. Вилданов Ғ. Төрөк милләттәре әҙәбиәттәрен тикшереү һәм уларҙың йәкүне // Башҡорт аймагы. – 1926. – № 2. – 3–26-сы б.
32. Волков Р. М. Сказки: Разыскания по сюжетосложению народной сказки. Т.1. – Харьков, 1924. – 236 с.
32а. Восточнославянский фольклор: Словарьнаучных и народных терминологий. Мн.: Навука і тэхніка, 1993. – 478 с.
33. Глонти А.А. Исторические корни грузинских народных новелл: автореф. дис. ... д-ра филол. наук. – Тбилиси, 1958. – 53 с.
34. Грузинские народные новеллы. Изд. 3-е / сост., обработка, ред. предисл. и примеч. А.А.Глонти. – Тбилиси: Мерани, 1984. – 376 с.
35. Гусев В.Е. Эстетика фольклора. – Л.: Наука, 1967. – 504 с.
36. Далгат У.Б. Вопросы юмора и сатиры в народном творчестве: на материале дагестанского фольклора // Вопросы народно-поэтического творчества. – М., 1960. – С. 73–106.
37. Дорри Дж. Персидская сатирическая проза. – М.: Наука, 1977. – 216 с.
38. Дунаевская Л. Ф. Поэтика украинской народной сказки: дис. … канд. филол. наук. – Киев, 1982. – 198 с.
39. Зайнуллин М. В. Употребление временных и модальных форм глагола в языке башкирских сказок // Фольклор народов РСФСР. Вып. 1. – Уфа, 1974. – С. 92–72.
39а. Золотарев А.М. Родовой строй и первобытная мифология. – М.: Наука, 1964. – 350 с.
40. Ильминский Н. И. Башкирский рассказ // Учен. зап. Казанского ун-та. Кн. 3. –Казань, 1861.
41. Каргаполов Н.А. Художественные особенности русских бытовых сатирических сказок: автореф. дис. ... канд. филол. наук. – М., 1956. –12 с.
42. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы: уҡыу ҡулланмаһы. – Өфө, 1966. –275 б.
43. Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады: юғары уҡыу йорттарының филология факультеты өсөн дәреслек / Яуаплы мөхәрр. Ә.М.Сөләймәнов. – Өфө, 1982. – 232 б.
44. Колесницкая И.М. Загадки в сказке. – Л., 1941. – Учен. зап. ЛГУ. Сер. филол. наук. Вып. 12. –С. 98–142.
45. Каргаполов Н. А. Художсственные особенности русских бытовых сатирических сказок: автореф. дис. ... канд. филол. наук. – М., 1956.
46. Конкка У.С. Карельские сатирические сказки. – Л.: Наука, 1965. –152 с.
47. Костюхин Е.А. Александр Македонский в литературной и фольклорной традиции. – М.: Наука, 1972. – 190 с.

48. Котляр Е.С. О некоторых чертах фольклора Африки южнее Сахары // Фольклор и литература народов Африки. – М.: Наука, 1970. – С.167–191.
49. Курдовинадзе Т.Д. Поэтика грузинской волшебной сказки: автореф. дис. ... д-ра филол. наук. – Тбилиси, 1978. – 57 с.
50. Лазутин С.Г. Поэтика русского фольклора. – М.: Высш. шк., 1989. – 353 с.
51. Лихачев Д.С. Поэтика древнерусской литературы. – Л.: Наука, 1979. – 353 с.
52. Лупанова И. П. Русская бытовая сказка: автореф. дис. … канд. филол. наук. – Л., 1950. – 15 с.
53. Мелетинский Е. М. Происхождение героического эпоса: Ранние формы и архаические памятники. – М.: Изд-во восточ. лит., 1963. – С. 462.
54. Мингажетдинов М.Х. Сказки моей матери Мавзифы Магафуровны Мингажетдиновой // Фольклор народов РСФСР. – Уфа, 1974. –Вып. 1. – С. 161–172.
55. Минһажетдинов М. Х. Тормош-көнкүреш әкиәттәре // Ағиҙел. – 1981. –№ 12. –113–118-се б.
56. Михайлов Г. И. Проблемы фольклора монгольских народов. – Элиста,1971. –234 с.
57. Молдавский Д.М. Русская сатирическая сказка // Русская сатирическая сказка. – М.; Л., 1955. –С. 169–210.
58. Монгольские сказки / сост. Г.Михайлова. –М.: Худ. лит, 1967. –264 с.
59. Народные русские сказки А.Н.Афанасьева: в 3-х т. – Изд. подгот. Л.Г.Бараг, Н.В.Новиков. – М.: Наука, 1986. –Т. 3. –496 с.
60. Научный архив Уфимского научного центра РАН. Фонд 3.
61. Никифоров А.И. Теория сказки Альберта Веселовского Советская этнография. – № 3. – С. 46–63.
62. Новиков Н. В. Образы восточно-славянской сказки. – Л.: Наука, 1974. – 256 с.
63. Нәҙершина Ф.А. Хайуандар тураһындағы башҡорт әкиәттәре // Башҡорт фольклоры: тикшеренеүҙәр, материалдар. – 1-се сығ. – Өфө: Рәсәй фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге, 1993. – С. 26–48.
64. Обидов Д. Таджикские бытовые сатирические сказки: автореф. дис. … канд. филол. наук. – Душанбе, 1971. –20 с.
65. Окладников А.П. Утро искусства. – Л.: Искусство, 1967. – 136 с.
66. Померанцева Э.В. Русская народная сказка. – М.: Изд-во АН СССР, 1963. – 128 с.
67. Пропп В.Я. Исторические корни волшебной сказки. – Л.: Изд-во ЛГУ, 1986. –365 с.
68. Пропп В.Я. Морфология сказки. 2-е изд. –М.: Наука, 1969. –168 с.
69. Пропп В.Я. Русская сказка / Отв. ред. К.В.Чистов и В.И.Еремина. – Л.: Изд-во ЛГУ, 1984. – 336 с.

70. Рошияну Н. Традиционные формулы сказки. –М.: Наука, 1974. –216 с.
71. Савушкина Н. И. Поэтика комического в русской бытовой сказке // Прозаические жанры фольклора народов СССР: Тез. док. – Минск, 1974. –С. 171–174.
72. Сакали М. А. Туркменский сказочный эпос. – Ашхабад: Изд-во АН Туркмен. ССР, 1956. –155 с.
73. Сидорова Е. С. Сюжеты чувашских бытовых сказок // Чувашский язык, литература и фольклор. – Чебоксары, 1974. – С. 171–122.
74. Соболева Н.В. Типология и локальная специфика русских сатирических сказок Сибири / Отв. ред. Т.Г.Леонова. – Новосибирск: Наука, 1984. – 172 с.
75. Соколов Ю. М. Русский фольклор. – М.: Учпедиздат, 1941. –557 с.
76. Сөләймәнов Ә.М. Тормош-көнкүреш әкиәттәре: Жанр үҙенсәлектәре / яуаплы мөхәрр. проф. Ғ. Б. Хөсәйенов. – Өфө, 1990. – 272 б.
76а. Сухомлинский В.А. О воспитании. Изд. 4-е. – М.: Изд-во полит. лит. 1982. – 372 с.
77. Тарасенкова Е. Р. Русская народная сатирическая сказка в записи конца XIX и начала XX века: автореф. дис. ... канд. филол. наук. – М., 1955. –20 с.
78. Тарасенкова Е.Ф. Жанровые своеобразия русских народных сатирических сказок // Русский фольклор. – М., 1957. – Т. 2. – С. 62–84.
79. Татар халык ижаты: Әкиятләр. 3 нче кит. / Тез., кереш мәк. язучы, искәрм. хәзерл. Л.М.Жамалетдинов; фәнни ред. Ф.В.Әхмәтова. – Казан, 1981. – 360 б.
80. Турецкие сказки / Сост., пер. с турецк., вступ. ст. и примеч. И.В.Стебелевой. – М.: Наука, 1986. –400 с.
81. Турсунов Е. Д. Генезис казахской бытовой сказки. – Алма-Ата: Наука, 1973. –216 с.
81а. Узбекские народные сказки. В 2- томах / сост. М. Афзалов, Х. Расулев, З. Хусаинов; предисл. М. Афзалов; отв. ред.. М. Швердимн. – Ташкент,1973. – 463 с.
82. Унгвицкая М. А. Хакасская бытовая сказка. – Абакан, 1966. – 72 с.
83. Усенбаев А. Социальная борьба в киргизской бытовой сказке: автореф. дис. ... канд. филол. наук. – Фрунзе, 1973. – 32 с.
84. Харисов Ә. И. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 1944. – 222 б.
85. Харисов Ә. И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. – Өфө, 1965. –416 б.
86. Хөсәйенов Ғ.Б. Быуаттар тауышы: Башҡорт әҙәбиәте тарихы, теорияһы һәм тарихи поэтика буйынса очерктар. – Өфө, 1984. –304 б.
87. Хасанов М. А. Дунганские народные сказки: автореф. дис. ... канд. филол. наук. – Фрунзе, 1969. –28 с.
88. Чичеров В. И. Русское народное творчество. – М.: Изд-во МГУ, 1959. – 522 с.

89. Шукасаптати: Семьдесят рассказов попугая. – М.: Изд-во восточ. лит., 1960. –129 с.
90. Юдин Ю. И. Русская народная бытовая сказка: автореф. ... д-ра филол. наук. – Л., 1971. –31 с.
91. Яшин Д. А. Удмуртская народная сказка. – Ижевск, 1965. –135 с.

* * *

92. Галин С.Ә. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. – Өфө: Китап, 2004. – 392 б.
93. Зуева Т.В., Кирдан Б.П. Русский фольклор: учебник для высших учебных заведений. 4-е изд.–М.: Флинта-Наука, 2002. –400 с.
94. Рахмонов Р. Сказки и сказочники персоязычных народов. – М.: Древо жизни, 1998. –112 с.
95. Сөләймәнов Ә.М. Тормош-көнкүреш әкиәттәре // Башҡорт халыҡ ижады / Текстарҙы һайлап алыусыһы, төҙ., инеш мәҡ һәм һүҙлек авт. Ә.М.Сөләймәнов; аңлатмалар Л.Г.Бараг менән Ә.М.Сөләймәновтыҡы; яуаплы мөхәрр. С.Ә. Галин. – Өфө: Китап, 2008. –568 б.
96. Сравнительный указатель сюжетов: Восточнославянская сказка / Сост. Л.Г. Бараг, И.П. Березовский, К.П. Кабашников, Н.В. Новиков; отв. ред. К.В. Чистов. – Л.: Наука, 1979. – 438 с.
97. Turk dunyasi edebiat kavramlari ve terimleri ansiklopedik sozlugu. – Ankara: AKDTYK Ataturk Kultur Merkezi, 2004. –527 s.
98. Узбек халк оғзали поэтик ижоди: филология факультетлари студентлари учун кулланма.–Тошкент: Укитувчи, 1980. –360 б.

* * *

99. Алексеев Н. А. Ранние формы религии тюрко-язычных народов Сибири. – Новосибирск: Наука, 1980. –260 с.
100. Башкирские народные сказки / Запись и перевод А.Г.Бессонова; сост., ред., вст. ст. и примеч. Н.К. Дмитриева. – Уфа, 1941. –367 с.
101. Башҡорт халыҡ ижады / төҙ., инеш мәҡ. авт Г.Р.Хөсәйенова; аңлатмалар Л.Г.Бараг, М.Х.Минһажетдинов, Г.Р.Хөсәйенова; яуаплы мөхәрр. Ф.А.Нәҙершина. – Өфө: Зәйнәп Биишева ис. “Китап” нәшр., 2009. – 13-сө том: Хайуандар тураһындағы әкиәттәр. 200 б.
102. Башҡорт халыҡ әкиәтттәре. – Өфө, 1956.
103. Борев Ю. Комическое. – М.: Искусство, 1970. –269 с.
104. Валеев Д. Ж. Происхождение морали / Под ред. Ф.Б.Садыкова. – Саратов, 1981. – 168 с.
105. Волков Г.Н. Этнопедагогика / пПд ред. И.Т.Огородникова. – Чебоксары: Чувашское книжн. изд-во, 1974. –348 с.

106. Вологдина В.Н. Фольклор народов акан // Фольклор и литература народов Африки. – М.: Наука, 1970. – С. 229–240.
107. Зайнуллин М.В. О выражении экспрессивности в башкирских народных сказках // Фольклор народов РСФСР. – Уфа, 1976. – С. 45–49.
108. Зарипов Н.Т. Батырҙар тураһындағы әкиәттәр // БХИ: Әкиәттәр. 3-сө китап. – Өфө, 1978. – 352 б.
109. Зарипов Н.Т. Башкирские богатырские сказки: Эстетика жанра / Отв. ред. Г.Р.Хусаинова, А.М.Сулейманов. – Уфа: Гилем, 2008. –240 с.
110. Зеленин Д. К. Религиозно-маническая функция фольклорных сказок // С. Ф. Ольденбургу: К 50-летию научно-общественной деятельности. – Л., 1934. – С. 215–240.
111. Книга о судах и судьях / сост. М.С.Харитонова. – М.: Наука, 1975. – 371 с.
112. Лихачев Д.С., Панченко А.М. «Смеховой мир» древней Руси. – Л.: Наука, 1976. – 205 с.
113. Маркс К. К критике гегелевской философии права. Соч.: Т. I.
114. Мелетинский Е.М. Герой волшебной сказки. – М.: Изд-во восточной литературы, 1959. –264 с.
115. Мелетинский Е.М. Повествовательный фольклор народов Океании // Сказки и мифы Океании. – М., 1970. – С. 8–33.
116. Мелетинский Е.М. Миф и сказка // Фольклор и этнография. – Л.; Наука, 1970. –139–148 с.
117. Пропп В.Я. Исторические корни волшебной сказки. – Л.: Изд-во ЛГУ, 1986. – 216 с.
118. Сөләймәнов Ә.М. Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәре // Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мәҡ. авт. Ә.М. Сөләймәнов; аңлтмалар Л.Г. Бараг менән Ә.М. Сөләймәновтыҡы; яуаплы мөхәрр. С.Ә. Галин. – Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1981. – Әкиәттәр: 4-се китап. –398 б.
119. Сөләймәнов Ә.М. Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәренең поэтикаһы. – Өфө: Башҡорт дәүләт университеты, 1980. – 80 б.
120. Фрэзер Дж. Золотая ветвь. Вып. 1. –М.: Атеист, 1928. –197 с.
121. Хусаинова Г.Р. Поэтика башкирских народных волшебных сказок: Формулы в сравнительном освещении и сохраняемость сказки во времени / отв. ред. В.М.Гацак. – М.: Наука, 2000. –247 с.

***Һорауҙар һәм эш***

1. Нимә ул комиклыҡ, сатира һәм юмор?
2. Әҫәрҙәр комиклыҡ, көтөлмәгәнлек, ғибрәтлелек эффектына нисек өлгәшә?
3. Әкиәт сюжетының композицион үҙенсәлектәре.
4. Әкиәт фантастикаһы һәм уның эстетик функцияһы.
5. Һәр әкиәт жанрының уйҙырмалылығындағы үҙенсәлектәр.

6. Поэтик сара буларак традицион стереотип стилистик формулаларҙың әкиәттә үтәгән вазифаһы.
7. Ысынбарлыкты сағылдырыуҙа әкиәт жанрҙарының оҡшаш һәм оҡшаш булмаған саралар менән эш иткәне.
8. Фантастика һәм реализм йәһәтенән әкиәттәрҙең ҡарһүҙ жанрҙарының бүтәндәренән айырмалары.
9. Изгелек һәм яуызлыҡ проблемаһының әкиәттә художестволы хәл ителеше.
10. Әкиәттә халыҡтың эстетик, идеалдары нисегерәк сағыла? Шул идеалдар художестволы яҡтан нисек ғәмлләштерелә?
11. Бәхет темаһы әкиәттә художестволы яҡтан нисек ғәмәлләштерелә? Бәхеткә әкиәт геройы нисек өлгәшә?

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**ИНЕШ** .......... 5
**I БҮЛЕК** .......... 9
**БАШҠОРТ АУЫҘ-ТЕЛ ФОЛЬКЛОРЫНЫҢ ЖАНРҘАР СИСТЕМАҺЫ** .......... 9
1. Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел фольклоры төрҙәре һәм жанрҙары .......... 9
2. Фольклорҙың тотош система хасил иткәне .......... 19
ӘҘӘБИӘТ .......... 28
Һорауҙар һәм эш .......... 29
**II БҮЛЕК** .......... 29
**МИФ ҺӘМ МИФОЛОГИЯ ХАҠЫНДА ТӨШӨНСӘ** .......... 29
ӘҘӘБИӘТ .......... 35
Һорауҙар һәм эш .......... 36
**III БҮЛЕК** .......... 37
**ИНАНМЫШТАР** .......... 37
1. Ҡарһүҙҙәр системаһында инанмыштарҙың урыны һәм уларҙың ҡайһы бер жанр үҙенсәлектәре .......... 38
2. Тәңреләр, раббылар һәм эйәләр .......... 41
3. Башҡорт мифологияһына, инанмыштарына хас серле сихри заттарҙың булмышы һәм төркөмләнеше .......... 43
4. Ел культы .......... 53
5. Серле мифик заттар менән мөнәсәбәткә ингәндә, уларҙан һаҡланыу саралары . 54
ӘҘӘБИӘТ .......... 57
Һорауҙар һәм эш .......... 60
**IV БҮЛЕК** .......... 61
**ХӘТИРӘЛӘР** .......... 61
1. Элекке тормош хаҡындағы хәтирәләр .......... 63
2. Граждандар һуғышы тураһындағы хәтирәләр .......... 64
3. XX быуаттың 20–30-сы йылдарында булып үткән тарихи һәм сәйәси ваҡиғалар тураһындағы хәтирәләр .......... 66
4. Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы хәтирәләр .......... 68
5. Афған һәм Чечня һуғышы хәтирәләре .......... 71
6. Мөстәҡиллек өсөн көрәш хаҡындағы хәтирәләр .......... 74
7. Тормош -көнкүреш хәлдәре тураһындағы хәтирәләр .......... 75
8. Хәтирәләрҙең поэтикаһы хаҡында .......... 77
ӘҘӘБИӘТ .......... 82
Һорауҙар һәм эш .......... 82
**V БҮЛЕК** .......... 83
**ӘКИӘТТӘР ТУРАҺЫНДА ДӨЙӨМ ТӨШӨНСӘ** .......... 83
1. Әкиәт – рухи мәҙәниәттең үҙенсәлекле күренеше .......... 83
2. Әкиәттең мифтарға нигеҙләнмеше .......... 84
3. Әкиәттәрҙең сакраль вазифа үтәгәне .......... 89
4. Әкиәттәрҙе төркөмләү .......... 92
ӘҘӘБИӘТ .......... 98
Һорауҙар һәм эш .......... 101
**VI БҮЛЕК** .......... 102
**ХАЙУАНДАР ТУРАҺЫНДАҒЫ ӘКИӘТТӘР** .......... 102
Һорауҙар һәм эш .......... 111

**VII БҮЛЕК** ........ 112
**ТЫЛСЫМЛЫ ӘКИӘТТӘР** ........ 112
1. Асылы менән (саф) тылсымлы әкиәттәр ........ 112
2. Батырҙар тураһындағы әкиәттәр ........ 1137
3. Тылсымлы героик әкиәттәр ........ 120
Һорауҙар һәм эш ........ 121
**VIII БҮЛЕК** ........ 122
**ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ ӘКИӘТТӘРЕ** ........ 122
1. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең тамырҙары ........ 123
2. Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш әкиәттәренең өйрәнелеше ........ 127
3. Тормош-көнкүреш әкиәттәрен төркөмләү ........ 129
**IX БҮЛЕК** ........ 132
**НОВЕЛЛИСТИК ӘКИӘТТӘР** ........ 132
1. Зирәктәр тураһындагы әкиәттәр ........ 133
2. Мөхәббәт һәм ғаилә тоғролоғо тураһындағы әкиәттәр ........ 139
3. Үтә үҙ һүҙле ҡатындар хаҡындағы әкиәттәр ........ 143
4. Ҡыйыу ҡыҙ менән яуыз ҡараҡтар тураһындағы әкиәттәр ........ 145
5. Мәкер заттар тураһындағы новеллистик әкиәттәр ........ 148
Һорауҙар һәм эш ........ 149
**X БҮЛЕК** ........ 150
**ЙОМАҠ ӘКИӘТТӘР МЕНӘН ҒИБРӘТЛЕ ӘКИӘТТӘР** ........ 150
1. Йомаҡ-әкиәттр
2. Ғибрәтле әкиәттәр ........ 151
Һорауҙар һәм эш ........ 153
**XI БҮЛЕК** ........ 155
**САТИРИК ҺӘМ ЮМОРИСТИК ӘКИӘТТӘР** ........ 155
1. Хәйләкәрҙәр тураһындағы әкиәттәр ........ 156
2. Етеҙ бурҙар тураһындағы әкиәтттәр ........ 158
3. Ялған күрәҙәселәр тураһындағы әкиәттәр ........ 160
4. Иҫәрҙәр тураһындағы әкиәттәр ........ 160
5. Серле заттар һәм хәйләкәр хаҡындағы әкиәттәр ........ 162
Һорауҙар һәм эш ........ 163
**XII БҮЛЕК** ........ 165
**КӨЛДӨРӨКТӘР МЕНӘН ЫМҺЫНДЫРЫҠТАР** ........ 165
1. Көлдөрөктәр ........ 165
2. Ымһындырыҡтар ........ 167
Һорауҙар һәм эш ........ 170
**XIII БҮЛЕК** ........ 171
**ӘКИӘТТӘРҘЕҢ ПОЭТИКАҺЫ** ........ 171
1. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең сюжет үҙенсәлектәре ........ 173
2. Новеллистик көтөлмәгәнлек поэтикаһы ........ 174
3. Комиклыҡ поэтикаһы ........ 176
4. Әкиәт стиле ........ 178
ӘҘӘБИӘТ ........ 186
Һорауҙар һәм эш ........ 192

*Учебное издание*

Ахмет Мухаметвалеевич Сулейманов

# ПОВЕСТВОВАТЕЛЬНЫЙ ФОЛЬКЛОР БАШКИРСКОГО НАРОДА

*(На башкирском языке)*

Часть первая

Редактор Н.Р.Ахтямова

Технический редактор И.В.Пономарев

Лиц. на издат. деят. Б848421 от 03.11.2000 г. Подписано в печать 28.12.2010.
Формат 60X84/16. Компьютерный набор. Гарнитура Times New Roman.
Отпечатано на ризографе. Усл. печ. л. – 12,3. Уч.-изд. л. – 12,1.
Тираж 500 экз. Заказ №

ИПК БГПУ «Вагант» 450000, г.Уфа, ул. Октябрьской революции, 3а